МИНИСТЕРСТВО ОБРАЗОВАНИЯ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН
БАШКИРСКИЙ ГОСУДАРСТВЕННЫЙ ПЕДАГОГИЧЕСКИЙ УНИВЕРСИТЕТ им.М.АКМУЛЛЫ
ЦЕНТР РАЗВИТИЯ ОДАРЁННОСТИ ШКОЛЬНИКОВ
ФАКУЛЬТЕТ БАШКИРСКОЙ ФИЛОЛОГИИ
КАФЕДРА БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА И МЕТОДИКИ ЕГО ПРЕПОДАВАНИЯ

# ТЫУҒАН ЯҠ: ТОПОНИМДАР ҺӘМ ҺӨЙЛӘҮ ТЕЛЕ

Диалектология һәм ономастика буйынса һәләтле уҡыусыларҙың
II Республика ғилми-ғәмәли конференция материалдары
8 апрель 2016 йыл.

**2-се** йыйынтыҡ

# РОДНОЙ КРАЙ: ТОПОНИМЫ И РАЗГОВОРНЫЙ ЯЗЫК

Материалы II Республиканской научно-практической
конференции одарённых школьников
по диалектологии и ономастике
8 апреля 2016 г.

Сборник № **2**

**Өфө 2016 Уфа**

**УДК**
**ББК**
**Т**

*Печатается при поддержке Благотворительного фонда «УРАЛ»*

**Редакционная коллегия**

**Усманова Минсылу Губайтовна** — доктор филологических наук, профессор БГПУ им.М.Акмуллы (ответственный редактор);
**Балапанова Лилия Салаватовна** — кандидат филологических наук, преподаватель кафедры башкирского языка и методики его преподавания БГПУ им.М.Акмуллы.

**Родной край: топонимы и разговорный язык:** материалы II Республиканской научно-практической конференции одаренных школьников по диалектологии и ономастике 8 апреля 2016 г. — Уфа: Мир печати, 2016. — с.

В сборнике представлены материалы II Республиканской научно-практической конференции одаренных школьников по диалектологии и ономастике, прошедшей 8 апреля в Башкирском государственном педагогическом университете им.М.Акмуллы на факультете башкирской филологии. Работы посвящены вопросам башкирской диалектологии и ономастики: рассматриваются некоторые особенности лексики говоров башкирского языка, фонетическое варьирование слов; содержатся исследования по ономастике.

Сборник рекомендуется школьникам, студентам, аспирантам, учителям башкирского языка и литературы, истории, культуры Башкортостана, а также всем, кто интересуется краеведением, проблемами диалектологии и ономастики.

ISBN

© Коллектив авторов, 2016
© Издательство ...........

## БАШ ҺҮҘ

**Хөрмәтле уҡыусылар, фәнни етәкселәр!**

Был йыйынтыҡҡа М.Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның “Дистанцион мәктәп академияһы ”Успех” тарафынан диалектология һәм ономастика буйынса үткәрелгән конкурста һәм II Республика ғилми-ғәмәли конференцияһында (8 апрель 2016 йыл) ҡатнашҡан һәләтле уҡыусыларҙың материалдары тупланды. Ебәрелгән хеҙмәттәрҙең төп нөсхәһе һаҡланды, әммә ҡыҫҡартып бирелде.

Ин беренсе, тормоштан артта ҡалырға тырышмаған, яңылыҡтар менән ҡыҙыҡһынып, сайттарға инеп ҡарап, беҙҙең иғлан иткән проектты табып, унда ҡатнашырға йөрьәт иткән уҡыусыларға һәм уларҙы етәкләгән уҡытыусыларға ҙур рәхмәт әйтәбеҙ.

Әйтергә кәрәк, эш һөҙөмтәһе һәйбәт килеп сыҡты. Уҡыусыларҙың Өфө һынлы Өфөгә конференцияға килеп, тыуған яғының ер-һыу атамалары, һөйләше тураһында ҙур ғорурлыҡ менән тулҡынлана-тулҡынлана, тырыша-тырыша һөйләүҙәрен күреү иҫ киткес ғәжәп бер мәлдәрҙең береһе ине.

Ысынлап та, һәр бер уҡыусының телендә яңғырағанса, ер-һыу атамаларын да, ерле һөйләш үҙенсәлектәрен сағылдырған һүҙҙәрҙе лә йыйып ҡалырға кәрәк: беренсенән, уларҙың ҡайһы берҙәре тарихи факттарҙы дәлилләүҙә төплө материал булып тора; икенсенән, уларҙың күбеһе, үкенескә ҡаршы, онотолоп, телдән төшөп ҡала бара. Күп атамалар үҙгәртелә, яңы исем менән йөрөй башлай. Беҙгә ошо атамаларҙың бөтәһен дә (яңыларын һәм иҫкеләрен, мәҫәлән, элек булып та, хәҙер юҡка сыҡҡан ер-һыу атамаларын — *һөрөлгән сабынлыҡ, ҡырҡылған ағаслыҡ, ҡороған йылға, күл, шишмәләр, бөткән ауыл* исемдәрен һ.б.; элек тотонолоп, хәҙер булмаған предмет исемдәрен; айырым төбәктә генә осраған һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, фразеологик берәмектәрҙе) бик ентекләп йыйырға кәрәк. Тик уларҙың барыһын да халыҡ нисек әйтә, шул көйө, үҙгәртмәй, боҙмай, ерле һөйләш телендә яҙыу мотлаҡ. Шунда ғына уларҙың фәнгә әһәмиәте ҙур була, сөнки улар һеҙҙең тыуған яҡ тураһында өнһөҙ һөйләгән фактик материал — дәлил. Шуға күрә уҡыусылар йыйған материал йыйынтыҡта үҙгәртелмәй, ерле һөйләш телендә бирелә.

Ҡәҙерле уҡыусылар, һеҙ конкурста ҡатнашып, үҙегеҙҙең ауылығыҙ тураһында бик күп мәғлүмәт йыйған белгес булып киттегеҙ һәм ошо йыйынтыҡ аша башҡаларҙы ла үҙегеҙҙең яҡ менән таныштыра алдығыҙ.

Тыуған яҡты өйрәнеүҙе артабан да дауам итегеҙ. Был бик кәрәк һәм мауыҡтырғыс эш. Һеҙгә уңыштар теләйбеҙ.

Проект еткәсеһе: ф.ф.д., М. Аҡмулла исемендәге БДПУ
профессоры М.Ғ. Усманова.

**Батталов А.И.**, 8-се класс
Фәнни етәксеһе: **Батталова Т.З.**

# МӘЛӘҮЕЗ РАЙОНЫНЫҢ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

## Таллы тау



**Таллы тау**

Башҡорт ере бар кешене һоҡландырырлыҡ географик объекттарға бай. Шуларҙың береһе — *Таллы тау*. Аллаһы Тәғәләнең мөғжизәләре сикһеҙ. Әйтерһең, *Таллы тауыбыҙҙағы* изге һүҙ әҙәм балаларына Ер йөҙөнә тик изгелек ҡылырға ғына ебәрелеүен иҫкәртеп тора кеүек. Һүҙ *Түбәнгеташ ауылы* эргәһендәге тау хаҡында бара: унда ағастар менән гүйә ғәрәп телендә “**Аллаһ”** һүҙе яҙылған. Эргәлә һыйынып ҡына Нөгөш йылғаһы ағып ята. Был ерҙәрҙә *сәңкем-ҡыпсаҡ* ырыуы йәшәгән. Борон-борондан тауҙың башында төрлө йыйындар, йолалар үткәрелгән. Тирә-яҡтан йыйылған халыҡ ер-һыуға, илгә бәрәкәт, именлек теләгән. Төрлө уйын, ярыштар ойошторолған, һәр төбәктең иң оҫта ҡурайсыһы, йырсыһы, бейеүсеһе билдәләнгән. Был йола онотолмай. Әле лә халҡым тауға күтәрелә. Унан күңелең ҡотайып, сафланып, көсәйеп төшкән кеүек булаһың. Әлбиттә, тауҙарға күтәрелгәндә һәр саҡ изге маҡсат ҡуйылырға тейеш булған.

Ишан-хәҙрәттәре менән дә данлы был төбәк. Исеме инде тау буйында тал ағасы күп үҫкәнгә шулай аталған. *Таллы тау* эргәһендә *Боҫло тауы* бар. Был урын да серле. Элек-электән был тауҙан *боҫ* күтәрелеп торғанға, халыҡ уға ошо атаманы биргән. Унан ҡыш көнө лә быу сыҡҡан, тиҙәр. Ҡая таштары аҫтынан урғылып *Фәйзулла шишмәһе* ағып ята. Был һыу иҫ киткес татлы булыуы менән билдәле. Ошо тауҙар теҙеменән *Ҡоро Бағырҙай* һәм *Һыулы Бағырҙай* исемле йылғалар ағып сыға. Яҙын ағып, йәйен ҡороғанға тәүгеһенә халыҡ шундай атама биргән. Икенсеһе иһә — тау-таш араһынан урғылып ағып ятҡан һалҡын һыулы йылға. Йәйҙең эҫе көндәрендә яланда эшләгән халыҡ бында һыуһынын ҡандырған. Исеме “һыуға бағыу, рәхмәт әйтеү”

һүҙенән барлыҡҡа килгән. Ни өсөн минең был һыуҙарҙың татлы булыу сәбәбен халҡыбыҙға еткергем килә?

1980 йылдар тирәһендә *Боҫло тауы* итәгендә ултырған *Ерек ауылы* шишмәһенең һәм тирә-яҡтағы һыуҙарҙы анализға алып, Свердловск ҡалаһына тикшерергә ебәрәләр. Санэпидемстанция белгестәре әйтеүенсә, анализ һөҙөмтәһендә ошо *Ерек ауылының һыуы* үҙенең сифаты һәм таҙалығы буйынса ла иң яҡшыларҙан иҫәпләнгән. Шуға белгән кешеләр, туристар Нөгөш юлында ултырған был ауылдың һыуын татымай китмәй. Тәбиғәтебеҙ сере, мөғжизәләре сикһеҙ. Тауҙарыбыҙҙа изге һүҙҙең яҙылыуы, һыуҙарыбыҙҙың тирә-яҡта иң таҙаһы булыуы, ошо урында ултырған ауылдарҙағы халыҡтың айыҡ тормош алып барыуы — былар бөтәһе лә мөғжизә түгелме?


**Ҡотоҡсумған мәмерйәһе**

**Ҡотоҡсумған мәмерйәһе**

Мәләүез районының Нөгөш ҡасабаһынан 23 километр көньяҡҡа табан *Ҡотоҡсумған* мәмерйәһе урынлашҡан. *Ҡотоҡсумған* Уралда иң оҙон мәмерйәләрҙән һанала. Оҙонлоғо 12 километрға етһә, тәрәнлеге – 126 метр. Мәмерйә өс ҡаттан һәм бер нисә өлөштән тора. Уны ғалимдар тәбиғи музей-лаборатория тип атай. Бында бик ҡыҙыҡлы тәбиғи залдар бар: “Китапхана”, Фил”, “Кубиктар”, “Метрополитен”, “Тамашалар залы” һәм башҡалар. Шахта стеналары ғәжәйеп сталактит һәм боҙ сусаҡтар менән биҙәлгән. Был коридорҙарҙан һыу аҫты йылғаларының тауышы ишетелеп тора. “Серле күлдәре таң ҡалдыра. *Ҡотоҡсумғандан* алыҫ түгел тағы ла бер нисә мәмерйә бар.

*Беренсе Ҡотоҡ* 2,8 километр төньяҡҡа табан урынлашҡан. Был формаһы буйынса тоҡҡа оҡшаған ике залдан тора. Иҙәндәре тулыһынса боҙ менән ҡапланған, түбәләре бик түбән. Ҡайһы бер ерҙәрендә мүкәйләп үтергә тура килә. Эске залдарға инеүселәрҙе матур боҙло сталактиттар, ҙур сталагмит колонналары ҡаршы ала. Уның дөйөм оҙонлоғо — 520 метр.

*Икенсе Ҡотоҡ мәмерйәһе Сумғандан* 2,5 километр төньяҡҡа ҡарай урынлашҡан. Уның дөйөм оҙонлоғо — 2050 метр.

*Өсөнсө Ҡотоҡ мәмерйәһе* лә үҙенсәлекле. Ул һикәлтәле боҙланған шахтаны хәтерләтә. Оҙонлоғо — 43 метр.

*Дүртенсе Ҡотоҡ мәмерйәһе* — Сумған мәмерйәһенән төньяҡҡа табан 400 метр алыҫлыҡта. 20 метр тәрәнлектән шахта башлана. Ул иң тәрәндәрҙән һанала. *Сумған мәмерйәһе* 1965 йылдан өйрәнелә башлай, ә 1986 йылдан был урындар Башҡортостандың милли паркы тип иғлан ителә. Уға тиклем Мәләүез районының элекке Ленин исемендәге колхоз бесәнлеге еренә инә. Оҙаҡ йылдар бында мал ҡышлатыла. Борон ошо тирәлә *Саука, Кәшәлә, Вазраш, Күккүл* һәм башҡа утар, ауылдар булған. Тәбиғәттең ғәжәйеп матур төбәге был. Был мәмерйәгә *Сумған йылғаһы* ергә сумғанға шундай атама бирелгән. Бик матур *Көмбәҙәкле йылғаһы* иһә *Сумған йылғаһына* барып тоташа. Ер аҫтынан ағып, бер нисә саҡрымдан һуң ул Ағиҙелгә ҡоя. *Көмбәҙәкле йылғаһына* исемде көн (ҡояш) төшөп торған матур ерҙән аҡҡанға шулай ҡушҡандар. Ошонда халыҡтың тағы ла яратып һөйләгән *Күккүл утары ере* бар. Бик матур йәйләү урыны булған ул. Шундай атамалы күле лә бар. Үҙе тәрән, күк төҫтә. Тәбиғәттең серле, бәрәкәтле был төбәгендә йыл һайын торна һәм ҡыр ҡаҙҙары бәпкә сығара. *Ҡанлы күл* тип аталған бик тәрән һыу яҡкылығы ла бар. Бында йыландарҙың күп булыуы билдәле. Революцияға тиклем *Әбет ауылынан* Мөхәмәтша Иҫәнов күлдең тәрәнлеген белер өсөн сумып ҡараған. Күл төбөндә ул бейек ағастарҙың, хатта солоҡтарҙың булыуын шәйләй. Күрәһең, бында ҡасандыр һыу күтәрелгән булғандыр.

## Көнгәк тауы

Борон, тәүарих һөйләгән ҡарттар әйтеүенсә, *юрматы күсе* ҡайҙалыр, Ыбыр-сыбыр илендәге шикелле, айырылып ҡалған да, уны Урал тауҙарына изге инәбеҙ *Аҡ бүре* алып ҡайтҡан. *Көнгәк итәгендә* уларҙы туҡтатып, иң шәп йырсыға иң боронғо йырҙы башҡарырға ҡушҡан. Ни ғәжәп: йырҙы тау үҙе күтәреп алған — унда үҫкән ҡурай көпшәләре шул уҡ көйгә дәррәү һыҙғырып моңланған, ти. Бына йырығыҙ ҡурай менән ҡауышты, сөнки тәүватанығыҙға ҡайттығыҙ тигән, ти, *Аҡ бүре*. Шулай итеп, *юрматылар* ошонда яңынан донъя көтә башлаған, *Әтил ата* хөрмәтенә аталған *Иҙелдә, Һуҡайлыла, Ашҡаҙарҙа* һыулаған. *Көнгәк менән Торатау* Тәңрегә табыныр тауҙары булған. Мал-тыуары ишәйгән, ҡорал һәм ҡороҡ тотор ир-егеттәре арҡкан. Мадъярҙар менән бергә йәшәп алып киткәндәрен тәүарихсы ҡарттар былай бәйән иткән. Бында ҡайтып төпләнеүҙәренә өс быуат үткәс, ниндәйҙер күп һанлы күстең яҡынлашыуы тураһында хәбәр итәләр. Беҙ һеҙҙең аҙашып ҡалған ярпығыҙ, тик хәҙер “мадъяр” тип аталабыҙ, тигән тегеләр. *Юрматылар мадъярҙарҙы* үҙҙәренең янына ҡабул иткән (*Булат Рафиҡовтан*). Ағиҙелдең төньяҡҡа табан боролған урынындағы тауҙы *Көнгәк тауы* тип йөрөтәләр. Көнгә ҡарап

ятҡанға күрә шулай атағандарҙыр инде. *Көнгәк тауы Ҡарауыл, Йәнгүҙәй* исемле тауҙар теҙмәһенән тора. Халыҡ, илгә килгән дошмандарҙан һаҡланыр өсөн, *Ҡарауыл тауына* ҡарауыл ҡуйған. Яу килһә, сигнал итеп төтөн һалғандар. *Көнгәк түбәһе* инде борон-борондан халҡыбыҙҙың Тәңренән фатиха алыр, теләк теләр урыны булған. 1812 йылғы Ватан һуғышы осоронда яуға киткән ир-егеттәрҙе ошо тауҙан оҙатҡандар. Оло йыйын уҙғарылған, уларҙың имен-аман яуҙан еңеп ҡайтыуын теләгәндәр. Наполеонды Рәсәйҙән ҡыуып, Парижды алып, яугирҙәрҙең исәндәре тыуған яҡтарына ҡайтҡан. Ошо ҡыуаныстан халыҡ йәнә *Көнгәккә* сығып, йыйын йыйып, ҙур байрам яһаған. Шунда булған кешеләр йыл һайын бер мәлдә *Көнгәккә* сығырға һүҙ беркеткән. Ана шунан алып йәшәй был байрам, именлек, һиллек байрамы.

**Әүлиә шишмәһе**

Районыбыҙҙың *Һыртлан ауылында Әүлиә шишмәһе* бар. Изге тауҙа өс әүлиә ерләнгәне билдәле. Борондан был шишмәнең һыуы шифалы һаналған. Ауырыған, күңел тыныслығы тапмаған кешеләр ихлас ышанып, доғалар ҡылып һыуын эсһә, еңеллек һәм дауа тапҡан. Бөгөн дә был изге ергә халыҡ төрлө яҡтан килә. Боронғо ҡарттарҙың һөйләүенсә, был тауҙа элек үҙенең ырыуы менән бер хан ултырған. Ул *әүлиә* булған. Ә шишмәнең һул яғындағы ике әүлиәнең кемлеге билдәһеҙ. Шишмә өҫтөндәге *Әүлиә кәберенең* аҡ ташы бик мөғжизәле һәм хикмәтле. Тауға насар уйлы кешеләр килһә йәки хәмер эсһә, таштың төбөнән ҡан һарҡыған. Күрәһең, әүлиә рухы рәнйегәндер. Бөйөк Ватан һуғышынан һуң ниндәйҙер ғалимдар килеп, тикшеренеү үткәргән. Уларҙың әйтеүенсә, был таштың тамыры өс яҡҡа бик тәрәнгә һәм йыраҡҡа айырылып киткән. Шуға уны ҡуҙғатырға ҡушмағандар. Юғиһә, туфан һыуы ҡалҡыуы бар, тигәндәр. Ғөмүмән, Ағиҙел буйындағы тауҙарҙы, *Сорғояҙ ауылы* тирәһен *Әүлиәләр төйәге* тип йөрөтәләр. Хәҙерге көндә был изге урын таш кирбес менән буралып, иркен иттереп кәртәләп ҡуйылған.

**Күперле**



**Күперле**

Меңәр йыл буйы *Сумған, Юрмаш, Көмбәҙәкле, Күперле* һәм башҡа йылғаларҙың бер ер өҫтөнән, бер ер аҫтынан алҡынып ағыуы карст ҡатламдарынан төрлө мөғжизәләр барлыҡҡа килтергән. *Күперле шарлауығы* — тәбиғәттең ҡулы менән һалынған бейек таш күпер —

шул мөғжизәләрҙең береһе. Күпергә юл Нөгөш һыу һаҡлағысынан арыраҡ, *Ҡыҙ күҙ йәше гөрләүегенән* биш километр алыҫлыҡта ята. Был шарлауыҡ тураһында ошондай легенда бар. Имеш, бер һылыу ҡыҙҙы үҙенән бик күпкә оло кешегә кейәүгә бирергә булғандар. Ә уның яратып йөрөгән егете булған. Ҡыҙ риза булмаған, ошо ҡаяларҙы ҡосоп серҙәрен һөйләгән. Уның зарын ер-һыу ҙа уртаҡлашҡан. Шуға ошо ҡаянан шишмә урғылып сыҡҡан. *Күперле* — Нөгөш йылғаһы тармағынан барлыҡҡа килгән бәләкәй йылға. Тәбиғи күперҙән ике-өс километрҙараҡ өҫтә, ер аҫты юлынан ағып, бейек ҡаялар араһынан килеп төшөп, бәләкәй шарлауыҡҡа әйләнә. Тәбиғи күперҙең оҙонлоғо — 35, бейеклеге — 20, киңлеге — 4 метр.

## Гөбөргәйел күле

Райондың перспективаһыҙ ауылдар исемлегенә инеп, юғалып ҡалған *Төбәк ауылы* биләмәһендә, *Көнгәк тауының* көньяҡ битләүендә серле *Гөбөргәйел күле* бар. Ауыл ҡарттары һөйләүенсә, был күлдә борондан ташбаҡалар йәшәгән. Шуға ла был күл *Гөбөргәйел*, йәғни *Ташбаҡа* тип исемләнгән. Хатта был күлде *Аждаһалы күл* тип тә йөрөтәләр. Күлдә ташбаҡалар бөгөн дә бар, ләкин күп түгел. *Аптраҡ ауылында* йәшәгән Фәрзәнә инәй: “60-сы йылдарҙа өй һалдыҡ, күл янына мүк үләне йолҡорға барҙыҡ. Ул яҡҡа барырға ҡурҡа торғайныҡ, сөнки тәрилкә кеүек ташбаҡалар мыжғып торор ине”, — тине. Элегерәк был ташбаҡалар ҡороған ағастар өҫтөндә ҡыҙыҡ ҡына итеп теҙелешеп ултыра торғайны, ти ауыл халҡы. Бер йылды ер һөрөп йөрөгән тракторҙың тырмаһына эләгеп ҡайта бер ташбаҡа. Аҙаҡ ауылдан ике саҡрым алыҫлыҡта ятҡан күленә кире әйләнеп ҡайтҡан был йән эйәһе. Яҙғы ташҡындар ваҡытында күлдең мороно Ағиҙелгә ҡушылып та ала, шуға ҙур-ҙур йәйендәр, төрлө балыҡтар тулып ҡала. Шундай ҡотло күл ул — *Гөбөргәйел*. Бөгөнгө заводтарыбыҙҙың төтөнөнә, экологияның хөртлөгөнә ҡарамайынса, заманыбыҙға яраҡлашып йәшәп ята ташбаҡалар — шул мөғжизә түгелме?

## Ҡыҙыл Таш ҡаяһы

*Ҡыҙыл Таштың* киләсәккә ишараһымы? Нөгөш буйында *Ҡыҙыл Таш ҡаяһына* ҡағылышлы ғәжәйеп тарих бар. Был тауға яҡын ике йылға аға: береһе — *Суханыш (Үс ҡаныш),* икенсеһе — *Нөгөш*. *Суханыш* исеменең барлыҡҡа килеүе ошондай ваҡиғаға бәйле. Бер ҡалмыҡ егете Юрматы ырыуынан ҡыҙ урлаған. Ҡыҙҙың һөйгәне улар артынан ҡыуа төшкән. Юлда өс-дүрт йортло утарға еткән һайын: “Ҡалдыр!” — тип ҡысҡыра икән был (тирә-яҡтағы Ҡалдар исемле ауылдар атамаһы ошо ваҡиғанан таралған, тиҙәр). Ағиҙелде үтеп, Нөгөш буйына килеп еткәндәр. Нөгөш аръяғындағы

бер бәләкәй йылға буйында егет быларҙы ҡыуып еткән. Алыш башланған. Ҡалмыҡ егете дошманын инде сәнстем тигәндә, һуңғыһының өҫтөнә эте һикереп өлгөргән. Үлемесле алышта еңгән егет йылғала йыуынған мәлдә бер ылау килеп туҡтай. Юлаусылар: “Был ниндәй үлтереш?” — тип һөрәнләй башлай. Юрматы егете: “Ә хәҙер үс ҡанды, туғандар!” — тип яуап биргән. Шул ваҡыттан алып әлеге йылғаны “*Усканыш*” тип атай башлағандар. Был ерҙәргә урыҫтар килеп ултыра башлағас, уның исеме *Суханыш* булып киткән. *Әбет, Түбәнге Таш, Эткөсөк* ауылдары Нөгөштөң һул яҡ ярында урынлашҡан. 1760 – 1800 йылдарҙа уң яҡ ярында урыҫ ауылдары барлыҡҡа килгән. *Хлебодаровка* урынында — *Килтәй* исемле башҡорт ауылы, *Александровка* урынында *Сәңкем* ҡарт ырыуы ултырған ауыл булған. Башҡорт ырыуҙары үҙ-ара һуғышҡанда, *сәңкем ырыуы* низағҡа ҡыҫылмайынса, хәҙерге Күгәрсен районының *Тәүәкән ауылы* урынлашҡан ергә күскән. “Ҡар ireһә — Нөгөш таша, ғауға булһа — сәңкем ҡаса” тигән әйтем дә шул замандан ҡалған. *Сәңкем ҡарт* иһә бик аҡыллы булған, ҡурҡаҡлыҡтан күсенмәгән, ырыуҙы һаҡлау уйынан сығып эш иткән. Нөгөш йылғаһының уң яғындағы ерҙәр бөтәһе лә *Килтәй исемле* ҡарттыҡы булған. Борон бында бик ҙур башҡорт ауылдары урынлашҡан. Тау һыртындағы боронғо зыярат, таш менән өйөлгән *Әүлиә кәбере* әле лә бар. Халыҡ был урында һаҡ йөрөй, ғибәҙәт ҡыла. *Килтәй* исемле ауыл был тирәлә икәү. Береһе Ағиҙелдең уң яҡ ярында, Йомағужаға ҡаршы, урынлашҡан булһа, икенсеһе — Нөгөш аръяғындағы хәҙерге *Хлебодаровка*. *Килтәй Үтәшев* (1746 – 1822) Сәңкем-Ҡыпсаҡ волосы старшинаһы була. 1800 йылдарҙа *Килтәй* урыҫтарға ер һатҡан. Тәүҙә улар бер үгеҙ тиреһе тиклем генә ер һораған, аҙаҡ тирене нәҙек кенә итеп ҡырҡып, бер нисәһен ялғаған. Тире ахыр сиктә ете метрға еткән. “Тәүәккәлләнем, әйҙә алығыҙ!” — тигән *Килтәй*. Урыҫтар бер арба баҡыр аҡса менән иҫәпләшкән, тиҙәр. Әлбиттә, урыҫ аҙ ғына ер менән ҡәнәғәтләнеп ҡалмаған, ата-бабаларыбыҙҙы эсереп, алдаштырып, Нөгөш йылғаһының уң яғын тотош үҙенә тартып алған. Халыҡ ҡартты ҡәһәрләгән. *Килтәй* иһә Ағиҙел йылғаһы буйындағы биләмәһенә күсеп киткән. Нөгөш буйы һатылғас, *Ҡыҙыл таш тауы* өс көн, өс төн ниндәйҙер сәйер тауыш сығарып геүләгән, аҙаҡ бейек тау ишелеп төшөп, ҡыҙыл ташлы ҡая хасил булған. Халыҡ фекеренсә, ер-һыу рухы был ҡылыҡҡа ризаһыҙлығын белдергән. Ысынлап та, донъяла бер нәмә лә эҙһеҙ үтмәй. *Килтәй* ҡартты ерләгән ваҡытта ғәжәйеп хәл була. Уны ерләп, йыназа уҡығанда ер уйыла башлай. Халыҡ тиҙ генә ҡаса. Был тирә әле лә уйһыу булып ята. Халыҡ фаразлауынса, ер һатыусыға тәбиғәтебеҙҙең ҡәһәре төштөмө икән? Беҙ бындай ғибрәттән фәһем алырға тейешбеҙ. Ер-һыуҙарыбыҙға бер ниндәй ҙә байлыҡ та, аҡса ла торошло түгел. Бөгөн дә алыҫтан ҡыҙарып ҡарап торған

*Ҡыҙыл Таш тауы* киләсәккә ишара яһай, халҡыбыҙҙы киҫәтә кеүек. Тәбиғәтебеҙҙең мөғжизәләре сикһеҙ, уларҙы ҡәҙерләй генә күрәйек.

**Ҡулланылған әҙәбиәт**


«Башҡортостан" гәзите, 2016 йыл.

«Земля Мелеузовская: былое, будни, будущее. Посвящается 70-летию района. Уфа «Китап», 2000 г.

Булат Рафиҡов. Урал илендә, 2014 й.



**Ғилманов А.И.,** 8-се класс

Фәнни етәксеһе: **Хәҙимуллина Р.Р.**


## ИЛЕШ РАЙОНЫ СҮЛТЕ АУЫЛЫНЫҢ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

### Сүлте ауылы тураһында

*Сүлте ауылына* башлап сая, ҡыйыу *Солтанғәле бабай* туғандары менән килеп ултырған. Милләте менән *башҡорт* булған. Бабайҙар әйтеүенсә, улар Пермь яғынан килеп ултырғандар. *Солтанғәлеләрҙең* төп йәшәгән ерҙәре урманлыҡ: нарат, шыршы урмандары булған. Улар малсылыҡ менән көн иткәндәр. Ләкин мал аҫырар өсөн урман яҡшы булмаған, күгәүен, серәкәй яфалаған. Уңайлы урын эҙләп, был яҡтарға килеп сыҡҡандар.

Солтанғәле башлап *Дүртөйлө районы Солтанбәк ауылының* көнбайыш яғына: ҡалҡыу, таллы һыртҡа урынлаша. Унда бер аҙ йәшәгәс, Базы буйҙарына күңеле төшә. Базы буйында үткәрелгән бер йыйында, ошо тирә аҡһаҡалдары менән һөйләшеп, уларҙы һыйлап, бер кем тарафынан биләнмәгән ерҙәрҙе һөйләшеп киткән. *Солтанғәлегә* был ерҙәр бик оҡшаған. Был яҡ ерҙәре бик һәйбәт урманлы, таулы, яланлы, шишмәләре күп, мал аҫырауға бик йәтеш ерҙәр булған. *Базы йылғаһы* әрәмәлектәре тәбиғәттең иң гүзәл сихри бер төбәге булған.

*Солтанғәле* үҙенең *Игелек* һәм *Ҡорбанғәле* исемле туғандары менән *Бурлы тау* башына килеп төпләнгәндәр.Туғандар бер-береһе менән килешеп, татыу йәшәгәндәр. Араларында *Солтанғәле* ҡыйыуыраҡ та, көслөрәк тә була. Туғандары уның һүҙенән сыҡмай, буйһоноп йәшәйҙәр. Уның исемен ҡыҫҡартып *Сүлтый* тип кенә йөрөтә башлайҙар. Ауылдың исеме лә *Сүлтый* тип аталып китә. Тора-бара *Сүлтый Сүлтегә* әйләнеп китә. *Сүлте ауылының* өс бер туған нәҫелдән килеп сығыуы малға һалынған тамғаларҙан да беленә. *Солтанғәле* нәҫеле аттарына *(о)* дүнгәләк тамғаһы, Ҡорбанғәленекеләр *(II)* ике һыҙыҡ, ә Игелек нәҫеле *(d)* дүнгәләккә һап ҡуйып тамғалағандар.

Легендаларға ҡарағанда, был өс туғандың атаһы *Бағай* Швед һуғышында ҡатнашып, *Алтын крест миҙалы* алған булған. Тимәк, ул һуғыш йылдары самаһы менән иҫәплләгәндә *Сүлте ауылының* барлыҡҡа килеүенә 280-290 йылдар самаһы була, сөнки Швед һуғышы 1700-1721 йылдарға тура килә.

*Сүлте ауылына* башҡа ауылдарҙан һуң нигеҙ һалыныуы тирә-яҡ башҡорттарында ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. "Килгән ерҙәренә китһендәр", — тип ҡыуа, ҡыҫырыҡлай башлайҙар. *Дөмәй, Рсай, Бишҡурай, Әхмәт ауылы* халыҡтары ерҙәренә кереп, аҙайтҡандар.

Һөйләүҙәргә ҡарағанда, *Сүлте ауылы* кешеләренең ҡайһы нәҫелдән икәнен бөгөнгө көндә лә айырып була:

**Солтанғәле** — Мөслим — Ғөмәрулла — Ғәбделвәли — Ғайни — Ғәбделғани — Ғамил — Мөхәмәтша Ғөмәров — Радик Ғөмәров.

**Игелек** — Уразмәт — Ҡаһарман — Ғәбделфәттәх — Зариф — Майшәриф — Миршәриф — Фәрит.

**Ҡорбанғәле** — Хәбибулла — Рәхмәтулла — Ғәбдрәшит — Сәхибгәрәй — Зәки.

Шулай итеп, Сүлтенең *Юғары осо* — Солтанғәле нәҫеленә, *Урта урам* — Ҡорбанғәле нәҫеленә, ә *Түбән остар* — Игелек нәҫеленә керәләр.

## Сүлтей ауылың ер-һыу атамалары

*Султый бабай* бик белеп һайлаған был төбәкте. Ауылдың көнсығыш яғынан **Баттал йылғаһы** аға. Көнгә ҡаршы ағып, *Базыға* ҡоя. Көнбайыш яғынан ауылдан ике йөҙ метр алыҫлыҡта **Ҡарасы йылға** һыуы төшә. Ул *Базыға* барып етә алмай, болонға таралып бөтә. *Базы буйы* буйҙан-буйға әрәмәлек була.

*Маншыр ауылы* менән ике аралағы баҫыуҙар элек гел урман булған. *Бишҡурай* яғынан килгәндә *Сүлте ауылы* соҡорҙа урынлашҡан, килеп еткәндә генә күренә. Ауылдың төньяғында **Таштау** тигән тау бар, ул ауылға терәлеп тора тиерлек. Тауҙың башына менһәң, әйләнә-тирәләге ун өс ауыл күренә. Унан арыраҡ **Маншыр тауы** унан да бейегерәк урын. Унан илле-алтмыш саҡ(ы)рым ерҙәр күренә, һоҡланып туя алмаҫлыҡ! Үргә таба ярты саҡ(ы)рым юғары төньяҡ-көнбайышта урман эсендә түңәрәк күл бар, **Тәрән соҡор,** тиҙәр. Маншыр тауынан бик матур булып күренә. Тағы үргә өс йөҙ таяҡтар менгәс, көнсығыш яғынан һаҙлы, таллы, ҡайынлы ерҙән **Туҡбулат** тигән бер **шишмә** төшә. Хәҙер ул шишмә бик түбән төшөп етә алмай, ергә һеңеп бөтә. Туҡбулатҡа **Дегәнәклегүл, Әптес ҡулы** һәм **Оҙонғул** ҡушыла. Унан **Ҡыҙрас тауы** һуҙыла. Тауҙың башы ғына шәрә, тирә-яғы урман. Тауҙың итәгенән бик һалҡын ҡойо сыға. Ҡойоноң үре **Бәләкәй Сәйфулла**

**ғулы** тип атала, үрҙәге урман **Башай ғулы** тип йөрөтөлә. Был арала ла тағы бер шишмә бар. **Баттал йылғаһы** һаҙлығы ошонда еткәс, **Ялтау** тигән **тау** һаҙлыҡты икегә айыра. Көнбайыштан **Әптес ғулы Баттал һаҙына** ҡушыла. Әптес ҡулынан һуң **Ғөмәр мулла ҡулы** башлана. Бик йәмле урын был: ҙур күл, ваҡ күлдәр — **Ғөмәр мулла күле** тип иҫәпләнәләр. Бер яҡтан Ялтауҙың урманлы һырттары, икенсе яҡтан, йәғни **Маншыр юлы** буйлап, һөҙәк тауҙар араһында һаҙлыҡлы шәрә **Баттал башы** сихри бер матур урын булып күренә. Баттал башынан юғары менгәс, ***Һырт*** һымаҡ ҡалҡыулыҡ төньяҡҡа табан түбәнселәнә барып, *Әтрәчле* башына барып тоташа. Баттал шикелле бер йылға — **Әтрәчле буйы** тип йөрөтәләр.

Шулай итеп, ике һырттан, аралары ярты саҡ(ы)рым, ике йылға ағып ята. Түбәнерәк **Ҡапай ғулы,** тағы ла түбәндә — **Ҡойолотау**, тау өҫтөнән шишмә сығып, йылға һаҙына төшә. *Ҡойоло тауҙың* көнсығыш яғы **Әхмәр күле**. Был күл урыны. Һаҙлы түгел, ҡороған. Унан түбән **Һыйыр ғулы**, арыраҡ баҫыу башлана. **Ҡапай ғулы** араһында бик һалҡын һыулы  шишмә бар. Артабан таш сығара торған күл бар.

**Таш сығара торған күл**. Ауыл кешеләре элек-электән был таштарҙы тормош-көнкүрештә ҡулланғандар. Байҙар ярлы ауыл халҡынан таш сығартып, таш пулаттар һалдырғандар. Бөгөнгө көндә лә ауылда шуларҙың береһе һаҡланған.

Бик текә *Бурлытау* бар. Тауҙың өҫтө тигеҙ. Әйтеп үтеүебеҙсә, Султый ҡарт килеү менән тирмәһен дә ошо тау өҫтөнә ҡорған .

**Бурлытау**. Халыҡ был тау башынан *бур* сығарған. Бурҙы бәләкәй арба менән алып ҡайтып, мейестә яндырып, төйөп, өй мөрйәһен, мунсаның эсен – тышын бурлағандар.

Бурлытау итәге аҫтынан сыҡҡан шишмәне *Зарый ҡойоһо* тип йөрөтәләр. Шишмә һыуы быуаға  йыйыла. Бөгөнгө көндә был шишмә буйына ағастар ултыртылып, ял итеү урынына әйләнгән. Өҫтәрәк урман һәм баҫыу башлана. Баҫыу көнбайышҡа табан ауыш. Баҫыуҙы *Кәгелек баҫыуы* тип йөрөтәләр. Унан Кәгелек һаҙы башлана, төрлө ағастар һаҙҙы ҡаплаған. Рсай яғынан *Биктимер ҡулы* тигән тигеҙлек оҙон ғына тауға барып тоташа. Тау морононан бик яй ғына **Әүлиә шишмәһе** сығып ята.

**Әүлиә шишмәһе.** Был ҡойоноң эсендә һәм эргәһендә бик ваҡ тишекле таштар күп була. Был шишмәгә тирә-яҡ ауылдарҙан килеп, һыуын һәм селтәрле таштарын алып китер булғандар. Һыуға хәйер итеп аҡса ташлау ғәҙәте лә булған. Элек-электән бабайҙар бында ***Әүлиә ҡәбере*** булған, шуға бик шифалы тигәндәр. Уның ҡиблаға ҡаршы сығыуы ла изге тигән төшөнсәне нығытҡан. Бала-сағаға күҙ тейгәндә, күҙле таштарҙы сайҡап өшкөргәндәр.

**Кәгелек** — киң һаҙлыҡ, үҙәк яһап аҡкан йылғаһы юҡ. Бөтә шишмә, ҡойо һыуҙары таралып һаҙ яһаған. Кешеләр һаҙына сыбыҡ түшәп, ағастар һалып ҡына арҡыры сығыр булғандар.

**Базы йылғаһы**. Элекке Өфө губерняһы, хәҙерге Башҡортостанда, Ағиҙелдең киң болондар араһынан борғоланып аҡкан урынында төбө ташлы, көмөш һыулы *Базы йылгаһы* ағып төшә. *Базы йылгаһы* үҙенең башланғысын Шаран районы Михайловка һәм Борисовка ауылдары эргәһенән ала. Йылға көньяктан төньяҡҡа таба *Сагмагош* һәм *Илеш* районларын урталай бүлеп, *Базытамаҡ* ауылы янында Ағиҙелгә ҡоя. Базы йылғаһы үҙенең тәбиғәте менән иҫ киткес матур. Уның яр буйҙарында бер ере хуш еҫле бесәнле болонлоҡ булһа, икенсе төбәге ҡуйы таллыҡ менән ҡапланған. Яҙ көндәрендә Базы йылғаһы буйына йәштәр уйынға сыға. Боҙ киткәндә усаҡтар яға. Уйын – көлкө, йыр-бейеү таңға тиклем дауам итә:

Ағиҙелгә ағып төшә
Матур *Базы* йылғаһы.
Йәшәһен Совет власы,

Уйната ла, йырлата ла,
Беҙҙең *Базы* буйҙары.
Уйнаһам да , йырлаһам да ,
Рәхәт уның донъяһы.
Ағиҙелгә төшәм тиеп,
Аға *Базы* һыуҙары.
Күңелемдә һин генә.
*Агиҙелем*, *Базы* буйым,
Тыуған илем, бергенәм!, —

тип йырлаған минең өләсәйҙәрем.

**Информанттар:**

Ғалимов Фахрази бабай, 89 йәш, хеҙмәт ветераны.
Бакиров Мөнәүир, 86 йәш.

**Заһитов Б.И.,** 7-се класс
Фәнни етәксеһе: **Заһитова Л.Ғ.**

## УЧАЛЫ РАЙОНЫ УРАҘ АУЫЛЫ ҺӨЙЛӘШЕ

Учалы районында ун ике типтәр-башҡорт ауылы урынлашҡан: *Учалы* (Асыуҙы, Митрәй), *Иманғол* (Ташкисеү), *Илсе, Илтабан, Ҡалҡан* (Шамар), *Ҡунаҡбай* (Ҡандыболаҡ), *Мансур* (Ирәндек), *Мулдаш* (Өргөн), *Рысай* (Аҡбулат), *Сәфәр* (Һәйет), *Ураҙ* (Миндебай), *Юлдаш* (Аҡкужа). Революцияға тиклем ул ауылдар Ырымбур губернаһы Үрге Урал (Верхнеурал) өйәҙе Типтәр-Учалы улусы булып торған. Һүҙ *Ураҙ* ауылының һөйләше хаҡында булыр.

Ураҙ ауылының төп халҡы — *типтәр*. *Башҡорт, татар, ноғайбәк, урыҫтар* бар. Берҙәм (дөйөм) телебеҙ *башҡорт* теле булһа ла, халыҡ күпселек диалект телендә аралаша.

Тарихи риүәйәт буйынса, *типтәрҙәр* үҙҙәрен Ҡазан артынан, йәғни боронғо Болғар дәүләтенән сыҡҡан *башҡорттар* тип атай. Был ваҡиға XV быуат урталарына, Болғар дәүләте емерелеп, ул төбәктә Ҡазан ханлығы барлыҡҡа килгән һәм ханлыҡта татарҙар өҫтөнлөк алып киткән дәүергә тура килә. Ошо ваҡытта Ҡазан артындағы башҡорттарҙың бер өлөшө, татарҙарҙың ҡыҫырыҡлауы арҡаһында, үҙҙәренең йәшәгән ерҙәрен ҡалдырып, Уралға килеп һыйынырға мәжбүр була.

## Һөйләш үҙенсәлектәре

Һүҙ һәм ялғау башында **һ** өнө, һүҙ уртаһында һәм аҙағында *ҫ* өнө урынына һөйләү телендә **с** өнө тура килә: *сыйыр* (һыйыр) *арыслан* (арыҫлан), *семәк* (һемәк), *сөйәк* (һөйәк), *мескен* (меҫкен), *кайтсын* (ҡайтһын), *өс* (өҫ), *ас* (аҫ), *хәлсерәү* (хәлһерәү), *сөйҙәшеү* (һөйләшеү), *сиксән* (һикһән), *туҡсан* (туҡһан). Йәғни һөйләштә **һ** һәм **ҫ** өндәре бөтөнләй тип әйтерлек ҡулланылмай. Һөйләштә *бит* раҫлау киҫәксәһе менән параллель рәүештә *ҡуй* киҫәксәһе ҡулланыла: *әйттем ҡуй, барҙым ҡуй*.

Минең йыйыған материалдарымдың күпселеге фольклорға, шәхси ижадҡа ҡайтып ҡала. Беҙҙәге иртәнге тормош "*саумысығыҙ*" тигән һүҙҙән башлана. Тиҙ арала хәл-әхүәл һорашып үткәндә:

— Сыйырың сауҙырамы?
— Сыуалманымы әле?
— Саламың етәме?
— Кисәнге ҡая барҙың?
— Эреләнеп киткәнсең, килмәйең ҡуй.
— Син үҙең дә бушамайың бит.
— Балдарым ҡайтты ҡуй.

| **Типтәрсә** | **Әҙәби телдә** |
|---|---|
| саумысығыҙ | һаумыһығыҙ |
| сыйырың | һыйырың |
| сыуалманымы | һыуалманымы |
| саламың | һаламың |
| кисәнге | кисәге |
| ҡая барҙың | ҡайҙа барҙың |
| киткәнсең | киткәнһең |
| килмәйең ҡуй | килмәйһең дә бит |

| | |
|---|---|
| син | һин |
| балдарым | балаларым |
| ҡайтты ҡуй | ҡайттылар бит |

Мәктәп ишеген асып инеү менән ҡыҙыҡ хәлдәр башлана: коридоҙа үтеп барған уҡытыусыларға төрлөсә һаулыҡ бирәбеҙ. Башҡорт теле уҡытыусыһына башҡорт телендә, ә ҡалғандарға — типтәрсә.

Магазинда ла сит ауылдарҙан килгән кешеләр өсөн ҡыҙыҡ күренеш асыла:

— *Әпәк* килдеме?

— *Савын* бармы ул?

— *Шикәр* күпме тора?

— *Сөт* бирегеҙ әле.

| **Типтәрсә** | **Әҙәби телдә** |
|---|---|
| әпәк | икмәк |
| савын | һабын |
| шикәр | шәкәр |
| сөт | һөт |

Ә бына был әкиәтте мин Шәйәхмәтова Рәсимә Ғарифулла ҡыҙынан (66 йәш, Ураҙ ауылы) яҙып алдым.

## Һөйләү өлгөләре

## Арыслан менән төлкө

Бер көндө төлкө, нәмә эштәргә белмәй йөрөп, урманда шырлыҡҡа барып кергән. Ҡараса, ҡаршысына арыслан килеп ултыра икән. Төлкө ҡурҡышынан ҡаса баштаған. Арыслан аның артынан бастыра. Бына тоттом инде тигәндә, аларҙың юлын тәрән соҡор бүлгән. Шунан төлкө туҡтай ҙа баҡырып илай баштай. Арыслан да баҡырып илай баштай.

— Ништәп илай баштаның суң, төлкө? — тип сораған арыслан.

— Эй, сеҙҙе күрҙем дә, әтейегеҙ искә төштө ҡуй, — тигән төлкө. Әтейегеҙ бик шәп арыслан була торғайны. Ул ҙур-ҙур соҡорҙарҙы сикереп сыға ала ине. Уф, башҡаса бер ваҡытта ла андый шәплеккә соҡлана алмасмын инде…

Арыслан, шул сүҙҙәрҙе ишеткәс, төлкө алдында үҙенең шәплеген күрсәтеп маҡтанғысы килә. Соҡор аша сикерә, ләкин икенсе яҡҡа сыға алмай асҡа йығылып төшә.

— Алай булырын белдем дә. Сеҙҙең әтейегеҙгә етергә хәлегеҙҙән киләме суң! — тигән төлкө.

Был әкиәттән мин ошондай типтәрсә һүҙҙәрҙе таптым.

| Типтәрсә | Әҙәби телдә |
|---|---|
| ништәп | нимә эшләп |
| баштаның | башлай |
| суң | һуң |
| сораған | һораған |
| арыслан | арыҫлан |
| ҡараса | ҡараһа |
| ҡаршысына | ҡаршыһына |
| аның | уның |
| бастыра | баҫтыра |
| сеҙҙе | һеҙҙе |
| әтей | атай |
| искә төштө ҡуй | иҫкә төштө бит |
| сикереп | һикереп |
| соҡлана | һоҡлана |
| алмасмын | алмаҫмын |
| сүҙҙәр | һүҙҙәр |
| күрсәтеп | күрһәтеп |
| маҡтанғысы | маҡтанаһы |
| асҡа | аҫҡа |

Өләсәйем һөйләгән әкиәттә лә диалект өлгөләре тулып ята. Өләсәйемдең исеме *Ғәзәлиева Рәүзилә*, Ураҙ ауылында йәшәй, уға 63 йәш.

## Төлкө

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер маҡтансыҡ, һәйләкәр төлкө. Ул көнөнә урманды биш ҡабат ураған, юлында осраған һәр йәндекте алдап, төп башына утыртып, күңеленә ләззәт тапҡан, ти. Бер көндө был кәрзинәне элеп, йырлай-йырлай китеп барғанда, ҡаршысына айыу осраған. Ул тәмдәп-тәмдәп бал ашап утыра, ти. Төлкө нисек булса ла һәйлә ҡороп, балды үҙ алырға була. Тиҙ генә яйын табып, былай тип өндәшә:

— Айыу ағай , әллә быйылғы балды ашайсың инде?

— Ашасам ней, нәмә булған?

Төлкө тирә-яғыны ҡараған һәм сер сөйҙәргә теләгәндәй, айыуҙың ҡолағына шыбырҙаған:

— Айыу ағай, былтыр син ошо сағыҙаҡтарҙың балын ашағайның, ҡорттарға был оҡшаманы. Улар быйыл синән үс алырға итте. Моғайын, был балдарына берәй ағыу салғандарҙыр.

Айыу быны ишетеп, үкереп ебәргән һәм алпан-толпан китеп барған. Ошоно ғына көткән төлкө кәрәҙле балды тултырып, үҙ өңөнә юл тотҡан.

Ләкин ул ҡайтып та етмәгән, артынан сағыҙаҡтар төлкөгә ябырылған. Сағылыуҙан ныҡ шешенгән төлкө башҡаса балға теймәскә сүҙ биргән. Эйе, хәҙер ул бал ашамай, әммә насар ғәҙәтен ташламаған. Төлкө әле лә урмандарҙа, нindәйерәк һәйлә ҡорорға, кемде алдарға тигән уй менән йөрөй икән.

Әкиәт йөкмәткеһендә типтәр һөйләшендәге түбәндәге һүҙҙәрҙе таптым:

| **Типтәрсә** | **Әҙәби телдә** |
|---|---|
| һәйләкәр | хәйләкәр |
| йәндекте | йәнлекте |
| утырып | ултырып |
| тәмдәп | тәмләп |
| булса ла | булһа ла |
| ашайсың | ашайһың |
| сөйҙәргә | һөйләргә |
| син | һин |
| сағыҙаҡтарҙың | һағыҙаҡтарҙың |
| салғандарҙыр | һалғандарҙыр |
| басып | баҫып |
| тутырып | тултырып |
| теймәскә | теймәҫкә |
| сүҙ | һүҙ |
| ҡаршысына | ҡаршыһына |

Башҡорт әҙәби әҫәрҙәрен яратып уҡыйым, шиғырҙар ҙа ижад итәм. Бына бер шиғырымды мин типтәрсә яҙҙым.

**Еләкте Ураҙ яғы**

Нindәй матур көн бөгөн!
Ергә йәмде йәй килде.
Дустар, киттек, аҡланға
Еләк бешкәндер инде.

Ҡайнатмасын, компотын
Тәмләй-тәмләй үсәбеҙ.
Бәлеше тел йотарлыҡ,
Ҡаҡ менән сәй эсәбеҙ.

Еләк бешкән: ҡып-ҡыҙыл,

Еләктә төрлө витамин,

Тел йоторҙоҡ, хуш есте.
Туғайҙа күрҙем кисә,
Өлгәргән сейә төстө.

Бик күп аҙыҡ төрҙәрен
Әҙерҙәйҙәр еләктән.
Бәләкәй булсам да беләм,
Хәҙер үк санап бирәм.

Ул сирҙәрҙе кисәтә.
Уның менән дус булсаң,
Сауҙыҡҡа юл күрсәтә.

Ниндәй генә еләк юҡ!
Минең тыуған ауылда.
Емеште беҙҙең Ураҙ,
Килегеҙ сеҙ ҡунаҡҡа.

Шиғырымда ҡулланған диалект һүҙҙәр:

| **Типтәрсә** | **Әҙәби телдә** |
|---|---|
| еләкте | еләкле |
| дустар | дуҫтар |
| есте | еҫле |
| төстө | төҫлө |
| әҙерҙәйҙәр | әҙерләйҙәр |
| булсам да | булһам да |
| санап | һанап |
| ҡайнатмасын | ҡайнатмаһын |
| үсәбеҙ | үҫәбеҙ |
| кисәтә | киҫәтә |
| сауҙыҡҡа | һаулыҡҡа |
| емеште | емешле |
| сеҙ | һеҙ |
| йәмде | йәмле |
| йоторҙоҡ | йоторлоҡ |

Типтәр һөйләшендә бик күп үҙенсәлекле йырҙар ижад ителгән. Фольклор үрнәктәрен йыйыр өсөн, мин өләсәйемә мөрәжәғәт иттем. Ололар телендә һөйләш үҙенсәлектәре һаҡлана әле. Ул һәүәҫкәр йырсы. Өләсәйем үҙенең белгән таҡмаҡтарын йырлап ҡыуандарҙы. Ошо таҡмаҡтарҙы яҙып *үтәһем* килә:

Йәш ғүмерҙе үтә тиҙәр,
Үткәнен күрсәң ие.
Үткән саҡта ҡыуып етеп
Кирәген бирсәң ие.

Сыу буйҡайы зәңгәр сискә
Аны кем сәскән икән.
Йәш ғүмерҙе сискә тиҙәр
Сыннан да сискә икән.

Түңәрәк күлдә ваҡ балыҡ,
Беҙ үҙебеҙ ваҡ халыҡ.
Беҙ үҙебеҙ ваҡ булсаҡ та,

Үтте лә китте йәштегем,
Үткәнен дә тойманым.
Йә китмә тип, йә үтмә тип,

Сайлана торған халыҡ. Үҙем бер ҙә тыйманым.

Аға сыуҙар, аға сыуҙар
Аға сыуҙар гел шулай.
Ағын сыуҙар нисек аға
Үткән ғүмер ҙә шулай.

Ҡыҙыл, ҡыҙыл бөрлөгәндәр
Юл буйына теҙелгән.
Минем кеүек булмас инде
Сеҙҙең өсөн өҙөлгән.

Диалект телендә осраған ҡайһы бер һүҙҙәрҙе килтерәм. Улар ауылдаштарымдың телмәрендә бик йыш ҡулланыла.

| **Әҙәби телдә** | **Типтәрсә** |
|---|---|
| әсәй | инәй |
| атай | әтей |
| өләсәй | нәнәй |
| олатай | ҡарттай |
| энәлек | дунала |
| мейес | әшәк |
| иҫке | иске |
| ижау | сүмес |
| һырға | сырға |
| атлайым | аттайым |
| аҡыллы | аҡылды |
| ие | ине |
| үҫә | үсә |
| эҫе | эсе |
| ойоҡбаш | йөннәски |
| һалам | салам |
| һандуғас | сандуғас |
| һайыҫҡан | сайысҡан |
| һандыҡ | сандыҡ |
| киләм | киләм ҡуй |
| таҫтамал | тастамал |
| йыуынам | йыуышам |
| йоҡлай | йоҡтай |
| һуҙынҡы | суҙынҡы |
| картуф | бәрәңге |
| ҡурай еләге | әберсә |
| ташлы | ташты |
| ҡомло | ҡомдо |
| тыңла | тыңда |

йырла йырҙа

Тимәк, Ураҙ ауылында йәшәгән типтәрҙәрҙең теле бик үҙенсәлекле. Бөтә типтәр ауылдарының телен өйрәнеп, уларҙың һүҙлеген төҙөгәндә һәйбәт булыр ине.

### Ҡулланылған әҙәбиәт


Миржанова С.Ф. Башҡорт теленең көньяҡ диалекты. М.,1979.

Әхмәров Ғ.“Типтяри и их происхождение” Казань, 1908.

Юлдашбаев Н.Х. Башҡорт диалектологияһы. Өфө, 1980.

Юлдашев А.А. Типтәрҙәрҙең теле. Автореферат канд. дисс. М., 1950

Юлдашев А.А. Говор тептярей Учалинского района // Академику В. Гордлевскому. К его 75-летию. М., Издательство АН СССР, 1953.



**Зөлкәрнәйева Илзирә Илдус ҡыҙы**, 9-сы класс

Хеҙмәттең авторы: Ғибадуллина Айсылыу Ғөбәйт ҡыҙы

Фәнни етәксеһе: **Мостаева В.А.**


## БАЙМАҠ РАЙОНЫ ИШМЫРҘА АУЫЛЫНЫҢ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ: ’’’ТЫУҒАН ЯҒЫҢДЫ БЕЛӘҺЕҢМЕ?” темаһына дәрес*

*Маҡсат*: Уҡыусыларҙа тыуған ер, һыу, урман, тауҙарға ҡарата һөйөү тәрбиәләү, тирә-яҡ тураһында белемдәрен киңәйтеү.

*Йыһазландырыу:* тирә-яҡтың боронғолоғон сағылдырған карта (унда бөткән ауылдар, ҡороған йылға, ҡоҙоҡтар ҙа билдәләнгән), һүрәттәр

------------------------------

* **Гибадуллина (Бураншина) Айсылыу Ғөбәйт ҡыҙының** йыйған материалы буйынса төҙөгән дәрес өлгөһөн тулы бирергә булдыҡ. Ул әлеге һәм буласаҡ уҡытыусыларға бик тә кәрәк. **Айсылыу Ғөбәйт ҡыҙы,** Сибай педучилищеһын, унан һуң БДУ-ның география факультетын тамамлағас, Баймаҡ районы Ишмырҙа ауылында 30 йылдан ашыу география уҡытыусыһы булып эшләне. Баймаҡ районы ауылдары, шул иҫәптән, Ишмырҙа ауылының географик атамаларын бик ҡыҙыҡһынып, ентекләп йыйған уҡытыусы булды.

**Зөлкәрнәйева Илзирә** — Айсылыу Ғөбәйтовнаның ейәнсәре — ҡыҙы Айгөлдөң ҡыҙы. Илзирә өләсәһенең булған материалдарын “Тыуған яҡ ономастикаһы” проектының конкурс талаптарына яуап бирерҙәй итеп әҙерләне. Уға Әбделкәрим урта мәктәбенең уҡытыусыһы **Мостаева В.А.** ярҙам итте һәм етәксеһе булды. **В.А.Мостаеваға** ҙур рәхмәт.

**Дәрестә килтерелгән шиғырҙарҙың авторы — **Айсылыу Ғибадуллина (Бураншина).**

күргәҙмәһе; *”Беҙҙең ауыл", "Беҙҙең өй*", *"Минең урамым"* темаларына яҙылған иншалар, плакаттар.

Тыуған яҡ тураһында дәрес үткәргәндә, ғәзәттә, ауылдың хөрмәт ҡаҙанған оло кешеһе саҡырыла. Ул дәрестән һуң ауыл тураһында үҙе күргән-белгәндәрҙе, тарихи ваҡиғалар, ауылдың данлыҡлы кешеләре тураһында һөйләй.

*Проблемалы һорау:* Тәбиғәтте һаҡлауға һәр кем ниндәй өлөш индерә ала һәм нисек ҡатнаша?

**План:**

**Инеш һүҙ.**

1. Баймаҡ районы Ишмырҙа ауылы атамалары. Улар тураһында шиғырҙар.
2. Ишмырҙа ауылы атамаларының этимологияһы. Легендаһы.
3. Атамалар тураһында йомаҡтар.
4. Ишмырҙа ауылының ҡыҫҡаса тарихы.
5. Викторина өсөн һорауҙар.

**Йомғаҡлау.**

Музыка: Х.Әхмәтов ’’Тыуған ауылым”.
Стенд ’’Серҙәр иле — топонимика”.
Үткәреү урыны — мәктәп музейы.

*Укытыусы карамағына*: Бирелгән материал бер дәрес өсөн күп булыуы бар. Ниндәйҙер бер өлөшөн алмай, уны икенсе дәрескә, йә синыфтан тыш эш өсөн ҡалдырыу — уҡытыусы ихтыярында.

**Инеш һүҙ:**

Исемдәре бигерәк матур
**Олотау, Таштау, Шәйнәк**.
Ана ул ауыл осонда
Тора барыһын да шәйләп.

Ҡәҙерле уҡыусылар! Бөгөн беҙ "*Атамалар тарих һөйләй*” тигән темаға дәрес үткәрәбеҙ, һеҙҙең менән ауылдың тирә-яғы, уның ер-һыу исемдәре менән танышып китербеҙ.

Һәр кемдең тыуған ере, йорто, урамы, шул ерҙе уратып алған, һинең өсөн бик тә матур күренгән тәбиғәте була. Бала саҡта ул тауҙар бик бейек, йылғалары тәрән һәм балыҡлы, туғайҙары шау сәскәле, урмандары еләк, сейәгә бай булып серле күренә. Ул кешегә бер ҙә үҙгәрмәҫ, ҡабатланмаҫ иҫтәлек булып хәтерендә ҡала. Бары тик үҫеп етеп, тыуған ауылың, өйөңдән айырылғас ҡына уның бигерәк ҡәҙерле, яҡын икәнен тояһың. Һәр кешегә үҙ тыуған ауылы ғына матур, ҡәҙерле, ул уны башҡаларҙан артыҡ күрә.

Уҡыусылар, һеҙ 1 сентябрь көндәрендә *’’Беҙҙең урам”* тигән темаға инша яҙғайнығыҙ. Унан күренеүенсә, һеҙ һәр берегеҙ урамығыҙҙы, ундағы йорттар, мәҙәниәт үҙәктәрен, алдынғы кешеләрҙе беләһегеҙ, яратаһығыҙ икән.

Бөгөнгө был дәрестең мәктәп муҙыйында үтеүе лә осраҡлы түгел. Музейҙарҙа, ысынлап та, тарих һаҡлана. Бында килеп беҙ тыуған төйәктең тарихы, башҡорт халҡының элекке тормошо менән танышабыҙ, элек улар тотонған, әле ҡулланыуҙан сыҡҡан нәмәләрҙе үҙ күҙебеҙ менән күрәбеҙ, тотоп та ҡарай алабыҙ.

Уҡыусылар, беләһегеҙме, башҡорт халҡының үткәнен, уның тормошон, тарихын географик атамалар ҙа һөйләй икән. Уларҙы фәнни телдә *топонимдар* тип атайҙар. Ә бөтә төр яңғыҙлыҡ исемдәрҙе өйрәнә торған фән *ономастика* тип атала. Уның тураһында беҙ айырым һөйләшербеҙ әле.

Географик атамаларһыҙ тормошто күҙ алдына килтереп булмай, һәр кешенең ғүмер юлы ниндәйҙер айырым топонимдар менән бәйле. Мәҫәлән, беҙ *Баймаҡ районының Ишмырҙа* ауылында йәшәйбеҙ. Мәктәпте тамамлағас, уҡыусылар, һеҙҙең күбегеҙ икенсе ерҙәргә уҡырға китер: *Өфө, Сибай, Стәрлетамаҡ* һ.б. Был атамаларҙың һәр береһенең килеп сығыу тарихы, мәғәнәһе бар. Уларҙың ҡайһы берҙәре кеше исеменән барлыҡҡа килгән, ә икенселәре ырыу исеменә һ.б. барып тоташа.

Дәрес аҙағына беҙ һеҙҙең менән беҙҙең *Ишмырҙа* ауылындағы атамаларҙың кем исемдәрен йөрөтөүен, уларҙың ҡайҙа урынлашыуын, ҡоҙоҡ булһа, уның һыуы бармы йәки уны һаҡлар өсөн беҙгә нимә эшләргә кәрәк булғанын асыҡларға тейешбеҙ.

## Ишмырҙа ауылының ер-һыу атамалары. Улар тураһында шиғырҙар**

Хәҙер яҡын-тирәләге атамалар менән танышып китәйек. Ауылыбыҙҙың тәүге комсомолецтарының береһе — беҙҙең дәрескә саҡырылған ҡунағыбыҙ *Әфләтунов Йосоп олатай* беҙгә яҡын тирәләге атамалар, юҡҡа сыҡҡан ауылдар тураһында һөйләй (*таҡтаға плакат эленә, карта ҡуйыла*).

| **Йылға исемдәре** | **Ҡоҙок исемдәре** |
|---|---|
| Таналыҡ | Оло ҡойо |
| Аҫыл | Арсланбай |
| Ыуараш | Мәхийән |
| Ҡарағайлы күл | Суртангүл |
| Теләғол һаҙы (ҡоҙоҡ) | Фәтхулла |
| Ҡыһыҡ таш | Йәҙгәр |
| | Сөләймән |
| **Тау исемдәре** | **Шахта (рудник) исемдәре** |

Шәйнәк (I, И, III)
Баҡыр тау
Оло тау
Таш тау
Теләк әйткән
Төлкөлө
Ҡарағас
Байсура
Балтатау

Семен
Йолалы
Түбә ҡайын
Баҡыр тау
Бәләкәй Шәйнәк
Байҡара
Таулы Байҡара
Балтатау
Сәнкем

**Бөткән ауыл исемдәре**

Йолалы
Бүреле
Түбәнге Мәмбәт
Түбә ҡайын ауылы
Байҡара
Таулы Байҡара
Әбей һаҙ
Ыуараш

**Һаҙ исемдәре**

Оло ҡойо һаҙы
Сурманай
Әбей һаҙ
Түбәнге һаҙ
Мәмбәт осҡан



**Ҡыһыҡ таш**

Ауылдың географик урындары тураһында шиғырҙар ҙа бар. Мин хәҙер уларҙы уҡыйым, ә һеҙ унан таныш исемдәрҙе табып, иҫләп ҡалығыҙ.

Ауылымдың даны булған
*Оло ҡойо* һыуы бар.
Көньяғына ҡарап баҡһаң,
*Шәйнәк* тигән тауы бар.

Сүмесләп һыу алғандарҙыр
*Сөләйман ҡоҙоғонан*
Кемдәр бөрлөгән йыймаған
*Саптар баҫыу* буйынан?!

Аҡ ҡағыҙға күсерелеп,
Быуын-быуынға ҡалыр.

Ҡай берәүҙәр үҙе үлгәс,
Исеме онотола.
*Сөләймән, Йәҙгәр ҡоҙоғо*
Йәшәй ғүмер буйына.

Үткәндәргә күҙ һалайыҡ,

Яғырға утын булмаған,
Тик *Үçтерем* йәшәргән
Ауылға матурлыҡ биреп,
Йәшәгән дә йәшәгән.

Һанап китһәң, һәр төбәктең
Оло тарихы булыр.

Тарихты өйрәнәйек:
Безгә йәшәү көсө биргән,
Исемдәре таштa ҡалған,

Ваҡытында егет булған
Ҡарттарҙы ололайыҡ,
Тарихты онотмайыҡ.
Ауылды онотмайыҡ.

Һорауҙар:

— Ниндәй атамалар телгә алынды?

— Ҡайҙа бесән сабабыҙ, еләк, сейәгә, бөрләгәнгә барабыҙ? (Уҡыусылар *Шәйнәк, Саптар баçыуы, Теләк әйткән* тураһында һөйләй, иншалар уҡыла).

Йыр йырлау: ’’Тыуған яғым — гөлдәр иле”.

## 2. Ишмырҙа ауылы ер-һыу атамаларының этимологияһы, легендаһы

*Һорау*:

— Уҡыусылар, әйтегеҙ әле, беҙҙең ауылдың исеме ҡайҙан килеп сыҡҡан? Кемдең шул турала ишеткәне, һорашҡаны бар? (Тексты уҡытыу, йә һөйләтеү).

Бынан бик күп йылдар элек Һаҡмар йылғаһы буйында йәшәгән башҡорттарҙың бер нисә ғаиләһе хәҙер беҙҙең ауыл урынлашҡан ергә килеп ултырған. Башлап күсеп ултырған олатайҙар *Ишмырҙа, Сапар, Тотман, Арыçланбай, Игиш* һәм *Йәнбәк* ҡарттар булған. Ауылдың исеме араларынан иң олоһо һәм абруйлыһы *Ишмырҙа ҡарт* хөрмәтенә аталған. Йәшәү урынын һайлағанда *Шәйнәк тауын* һәм тирә-йүнде байҡағандар. Мал көтөр өсөн ҙур яландары, һыулар өсөн йылғалары, иртә яҙҙан мал сығарырлыҡ тау биттәре булған ергә нигеҙ ҡорғандар. Ауылға нигеҙ һалған ата-бабаларҙың исемен мәңгеләштергән урындар, атамалар бар: *Арыçланбай ҡоҙого, Йәҙгәр ҡоҙого, Хәсән тауы.*

Халыҡтың төп кәсебе мал аçырау, һунарсылыҡ булған. Ауылдың тирә-яғында кәртә-кура бурарлыҡ урман булған. *Келәт бураған, Саптар баçыуы* тигән ерҙәр ауыл тирәһендәге урындар.

Ваҡыт үтеү менән был урмандар, ауыл тирәһендә үçкән бөтә ағас ҡырҡылып бөткән, бигерәк тә Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында. Һуңынан үçкәнен, ауыл ҡарттары һөйләшеп, ҡырҡмай, һаҡлайыҡ, тигәндәр, ҡәҙерләп үçтергәндәр. Ул ер *Үçтерем* тип атала.

*Ишмырҙа* ауылын икенсе төрлө *Йукәләр* тип атайҙар. Был атама тураһында бер нисә версия йәшәй.

*Беренсе версия.* Ауыл кешеләренең ат егеп юлда йөрөгәндә сбруйҙары ҡайыштан түгел, тик йүкәнән булған, имеш.

*Икенсе версия.* Ауыл халҡы йыуаш, йомшаҡ характерлы, бушағыраҡ булған, ситтән килгән кеше менән ныҡлап һөйләшә лә алмаған. Шуның өсөн ҡырҙан килеүселәрҙең: ”Эх, һеҙ, һалабаш йүкәләр!” — тип көлөп китеүенән ҡалған, тип тә аңлаталар.

*Өсөнсө версия.* Ауыл тирәһендә элек йүкә ағасы күп үҫкән булған, тиҙәр.

Шуны ла әйтеп китергә кәрәк, беҙҙең тирәлә йәшәгән башҡорттар *урман* һүҙен *ҙур урман* — төҙөлөш материалдары һәм утын әҙерләү урындарына әйтәләр. Ә ауыл тирәһендәге ағас үҫкән урындарҙы (*ҡайын, уҫаҡ, ҡарағай* үҫкән ерҙәрҙе) *”һаҙ”* тип йөрөтәләр. Ни өсөн? Моғайын, электән шулай килгәндер. Шуның өсөн беҙҙең йәтеш урмандарҙы атар өсөн *һаҙ* һүҙе ҡулланыла. Шуға күрә лә быңдай атамаларҙың аҙаҡҡы һүҙе гел дә *”һаҙ”* һүҙе менән тамамлана. Мәҫәлән, *Әбей һаҙ.* Был атаманың легендаһы менән танышып китәйек.

*Әбей һаҙ.* Бабай (*Дауыт олатай*) Һаҡмар буйында әбейе менән мал көткән. Бер ваҡыт бабай әбейе тураһында яман төш күрә. Килһә, әбейен үлтереп киткәндәр. Ул әбейен шунда күмә. Шуға күрә был ерҙе *Әбей һаҙ* тип атағандар.

Иң ҙур урман *Саптар баҫыуы. Хәсән, Хөсәйен* тигән ике бер туған йәшәгән. Икеһенең дә аты була. Хәсәндең *Саптар* аты ошо ерҙә үлән ашарға яратҡан була. Хәсән үлгәс тә, *Саптар толпар* ошо урманға үҙенең генә ятатып ашай торған үләнен эҙләп килә. Кешеләр уны күмәкләп ҡамап тоторға уйлай. Ләкин *Саптар,* уларҙың ҡамауын йырып, һикереп сығып ҡаса.

*Шәйнәк тауы.* Йәҙгәр Тотманов олатай һөйләүенсә, ул тауҙа *Шәйнәк* исемле бер батырҙы күмгәндәр. Шуға күрә ул тау *Шәйнәк тауы* тип атала башлаған.

Кешегә иң ҡәҙерлеһе, иң ҡиммәтлеһе — һыу.

*Һорау.* Уҡыусылар, урамда кемдәрҙең ҡоҙоғо бар? Ниндәй исемле ҡоҙоҡтар бар?

*Яуап*: *Оло ҡойо, Арсланбай ҡоҙоғо, Йәҙгәр ҡоҙоғо,Сөләймән ҡоҙоғо.*

*Һорау.* Улар нимә менән айырыла?

*Яуап:* Уларҙа һыу ағып сыға.

Тимәк, беҙҙә шишмәләрҙе *ҡоҙоҡ, ҡойо* тип йөрөтәләр.

*Һорау.* Улар һаҡланамы? Ҡарайҙармы? Нисек һаҡлайҙар?

Уҡыусыларҙың береһе был һорауға яуап бирә.

*Оло ҡойо.* Ишмырҙа ауылы ҙур булмаған әле. Айырым кешеләр утар-утар булып йәшәгән саҡ. Мәҫәлән, *Байназар, Йәнбәк, Арсланбай ҡарттар утары.* Улар һәр береһе бер хужалыҡ булып, мал көтөп йәшәгән. *Оло ҡойо* тип аталған ҡоҙоҡ булған, ә һыу алыр өсөн күберәк *Таш ҡоҙоҡҡа* йөрөгәндәр.

Был, Йәнбәкова Маһинур инәй һөйләүенсә, революциянан алда 1910 йылдар тирәһендә була. Әсәйҙәр, төшкөлөккә яңы һыу алып килегеҙ, тиһәләр, 3-4 ҡыҙ бергәләп кенә *Оло ҡойоға* һыуға барыр булғандар. Ҡыҙҙар *Оло ҡойоға* яңғыҙ бармаған, сөнки уның тирәһендә ағаслыҡ, һаҙлыҡ була. Түңгәк өҫтөнән генә берләм юлдан һыу алып ҡайтыр булғандар. Бер ваҡыт ул ҡоҙоҡтан хатта фонтан булып һыу атылған. Ололар йыйылып, тәкбир әйткәндән һуң ғына һыу атылыуҙан туҡтаған, ти.

Ваҡыт үтеү менән ағастар һирәгәйгән, хәҙер бөтөнләй бөткән, ә ауыл ҙурайған. Халыҡ һыуға тик ошо *Оло ҡойоға* ғына йөрөгән. Бөтә ауыл халҡы, мал һыуҙы шунан ғына эскән. Килендәрҙе шунда һыу башлатҡандар. Ҡоҙоҡ тәрән булған. Унан һыу алыр өсөн айырым эшләнгән көйәнтә, йә бау бәйләнгән биҙрә тотонғандар.

Хәҙер ҡоҙоҡ кәртәләнгән, эргәһе таҙа. Тик колонка үткәрелгәс, һыу кимәле кәмегән. Тарих уҡытыусыһы М.Ғүмәровтың *Оло ҡойоға* арналған шиғыры бар:

**Оло ҡойо**

Бала саҡта бик мул ине
Ҡоҙоғобоҙ һыуҙары.
Ташыр ине татлы һыуын
Ауылыбыҙ ҡыҙҙары.

*Оло ҡойо, Оло ҡойо,*
Ауылымдың шифа һыуы.
Ата-баба исем биргән,
Аға ине быуат буйы.

*Оло ҡойо, Оло ҡойо,*
Ауылымдың татлы һыуы
Апайҙарҙың килен булғас,
Тәүге һыуға барған юлы.

*Оло ҡойо* туғайында
Һайрай таңда ҡоштары.
Данлай һаман тәмле һыуын
Йәштәре лә ҡарттары.

*Оло ҡойо, Оло ҡойо,*
Ауылымдың шифа һыуы...

Бына, уҡыусылар, беҙ бөгөн ер-һыу атамалары, уларҙың килеп сығышы, легендалары менән таныштыҡ. Улар тураһында шиғырҙар ҙа уҡыныҡ. Әйтегеҙ әле, шуларҙан иң күп ишетелгәне, йә шул урындарҙа һеҙҙең күп булырға тура килгәне ҡайһылары?

Яуап: *Шәйнәк, Оло тау, Саптар баҫыуы* һ.б. (уҡыусылар һанай).

Эйе, балалар, беҙ ошо урындарҙа һәр саҡ булабыҙ, һауаһын һулайбыҙ, шул ерҙең икмәген ашайбыҙ, еләк, сейәһен йыябыҙ. Тимәк, был ерҙәр беҙгә кәрәк, шулай булғас, беҙ уларҙы һаҡларға, ҡурсаларға тейешбеҙ.

Ә хәҙер күренекле яҙыусы, тәбиғәттең яҡын дуҫы Пришвин һүҙҙәрен уҡып китәйек (таҡтала яҙып ҡуйылған): "*Балыҡҡа — һыу, ҡошҡа — һауа, йәнлеккә — урман, тауҙар кәрәк. Ә кешегә Тыуған ил кәрәк! Тәбиғәтте һаҡлау — Ватанды, тыуған ерҙе һаҡлау ул!*"

Тәбиғәтте һаҡлау — беҙҙең изге бурыс, һеҙ, уҡыусылар, уны иҫтә тотоу ғына түгел, тәбиғәтте һаҡлар өсөн ҙур өлөш тә индерергә тейешһегеҙ. Бының өсөн нимәләр эшләнә һуң?

— *Оло ҡойо, Арсланбай ҡоҙого* нисек һаклана?

— Улар кәртәләп алынған, округтарға беркетелгән.

— Тәбиғәттә һаҡлар өсөн беҙ нимәләр эшләйбеҙ?

— Йылғаларҙы, ҡоҙоҡтарҙы таҙартабыҙ, экологик һуҡмаҡтан үтәбеҙ, өмәләрҙә ҡатнашабыҙ.

— Киләһе быуынға әйтер һүҙҙәрегеҙ ниндәй?

— Һауа, һыу, урмандарҙы һаҡлау, ҡоштарға оя, тағараҡтар ҡуйыу, ер-һыу хужалары булыуҙарын, тәбиғәтте яратыуға, һаҡлауға, улар менән һоҡланырлыҡ булһын өсөн булышлыҡ итәйек.

## 3. Ишмырҙа ауылының ер-һыу атамалары тураһында йомаҡтар

Артабан уҡыусылар шиғыр тыңлай һәм унда төшөп ҡалған атамаларҙы табырға ярҙам итә. Уҡытыусы әйтмәй ҡалдырған һүҙ йәйәләр эсенә яҙылды. Уларҙы уҡыусылар үҙҙәре алдан белеп әйтергә тейеш.

Борон теләккә сыҡҡандар
Ошо тау итәгенә.
Хәҙер беҙ көтөү ҡыуабыҙ
*(Теләйткән)* битләүенә.

Ҡарт ҡыҙын юғалтып эҙләй
Табыл, ҡыҙым Зәйнә - әп тип.
Ә кешеләр ишеткәндәр
Зәйнәп түгел (*Шәйнәк*) тип.
(Был *Шәйнәк* атамаһының икенсе бер версияһы).

Һаҡсы булып баҫҡан кеүек
Ҡояш байыған яҡҡа.
Саңғы шыуырға барабыҙ
(*Олотау*) тигән яҡҡа.

Һабантуй күңелле байрам
Барһаң, күңел ҡыуана.
Мин дә китеп барам әле ,
(*Үҫтерем)* буйҙарына.

Һә тигәнсе биҙрәм тулды
Сейәлек бына ҡайҙа?!
Ҡайҙа? — тиеп, торма инде,
Барҙыҡ беҙ *(Сурманайға).*

Ҡул күтәрһәк машинаға,
Шофер ағай аптырай.
Через (*Юкәләр*) поеду,
А где твой (*Ишмурза*) — не знай!

*Йыр йырлау*: Аҙаҡ тыуған яҡ тураһында берәй йыр йырлана.



**Үҫтерем**

## 4. Ишмырҙа ауылының ҡыҫҡаса тарихы

Ауылда коллектив хужалыҡ төҙөү тарихына ҡыҫҡаса туҡталып үтәйек.

1928 йылда ауыл халҡы товариществоға берләшә.

1929 йылда ауылда коллективизация башлана. Ярлылар һәм урта хәллеләр колхозға инә. Ойоштороу эшен башҡарыр өсөн ярлылар комитеты һайлана. Уның ағзалары *Йәнбәков Хисмәт, Тотманов Әҙеһәм, Казбеков Ғаззали, Игишев Сөләймән* була.

Ауылда яңы тормош төҙөүҙөң иң актив өлөшө булып йәштәр тора. Тәүге комсомолецтар *Әфләтунов Йосоп, Клысбаев Зөлкәрнәй, Тутманов Мораҙым, Муллабаев Зиннәт, Ҡотлогужин Әширәф, Игишева Мәхтимә, Арыҫланбаева Шәмсикәмәр, Абзгилдина Хәмдиә* булған. Комсомол ойошмаһы колхоз малын шефҡа алған, агитация эшен алып барған, ликбезда халыҡты грамотаға өйрәткән.

Граждандар һуғышы ла ауылыбыҙҙы ситләп үтмәгән. *Йәнбәков Ғибаттың* исемен телгә алыу ҙа етә. Ул ҡыҙыл командир, отряд төҙөп аҡ бандаларға ҡаршы көрәшкән. Ауылдан унының отрядында *Иҫәндәүләтов Ғәлләү* (ҡартатаһы Зәбих), *Әфләтунов Сабир, Байғотлин Ғәбдрәхим, Йәнбәкова Шәмсиә* булған. *Шәмсиә* инәй *Йәнбәков Ғибаттың* ҡатыны. Ул ире менән бергә отрядта булған, хәҙер *Баймаҡта* йәшәй.

1930 йылда колхоз өс ауылды берләштерә: *Ишмырҙа, Үрге Мәмбәт, Түбәнге Мәмбәт* (хәҙер ауыл бөткән. Һуарыш буйында зыяраты ғына бар).

Колхозға *М.В.Фрунзе* исеме бирелә. 1931 йылдан алып 1959 йылға тиклем (пенсияға киткәнсе) колхозды *Игишев Сөләймән Мөхәмәтйән* улы етәкләгән. Ул йылдарҙа колхоз экономик яҡтан районда тәүгеләр иҫәбендә була.

1934 йылда ер буйынса район комиссияһы колхозға мәңге файҙаланыр өсөн ер беркетеп бирә. 1935 йылда Йылайыр игенселек совхозынан тәгәрмәсле ХТЗ маркалы тәүге трактор һатып алына. Ауылдың тәүге трактористары *Әфләтунов Ғиниәт* менән *Сапаров Усман* ағайҙар була. 1935 йылда колхоз молотилка, 1939 йылда ЗИС-5 автомашинаһы һатып ала. Уны ауылдаштарыбыҙ *Ғибадуллин Йәмил* менән *Йәнбәков Әхәт* ағайҙар йөрөтә. Һуғыш башланғас, *Ғибадуллин Йәмил* шул машина менән һуғышҡа китә һәм хәрби задание үтәгәндә һәләк була.

Дәһшәтле Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ауылыбыҙ ҡаһармандары 93 *ир*-егет ил һаҡларға китеп, 56-һы һуғышта ятып ҡала.

Тыныс тормош башланғас, ауылдың да эштәре яйлана бара, йөҙө үҙгәрә, фермала, ырҙын табағында, машина-трактор мастерскойҙарында эшләү еңеләйә. Хәҙерге ваҡытта ауылда *234* йорт бар.

1967 йылдан алып “Фрунзе” колхозының рәйесе булып *Сәйфулла Сафи* улы *Самарбаев* эшләй. Ошо йылдарҙан алып балалар баҡсаһы, 20 йыл инде урта мәктәп, мәҙәниәт йорто, колхоз идараһы йорто, врач-амбулатория пункты, стадион сафҡа баҫа. Ауыл халҡы тормошон еңелләштерер өсөн үрҙә һаналып киткән күпселек объекттарҙы төҙөтөүҙә колхоз рәйесе *Сәйфулла Самарбаевтың* роле ҙур булды.



**Карьер**

### 5. Викторина өсөн һорауҙар

1. Ауыл тирәһендәге йылға, тау, ялан, урман атамаларын әйтеп сығырға, береһенең тарихын һөйләп бирергә.

2. Ауылдың беренсе тракторсыһы һәм шоферы кем булған?

(*Әфләтунов Ғиниәт, Ғибадуллин Йәмил*).

3. Кем ул Игишев Сөләймән?

(*1931-1959 йылдарҙа эшләп, Ленин ордены, хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры*).

4. Һуғыш ваҡытындағы трактористкалар кемдәр?

(*Йәнбәкова Маһинур, Йәнбәкова Зөләйха, Байғотлина Мәрйәм, Йәнбәкова Фатима*).

5. Һуғыш ваҡытында тылда үҙҙәренең фиҙаҡәр хеҙмәте менән еңеүҙе яҡынайтҡан хеҙмәт ветерандарынан кемде беләһегеҙ?

(*Әфләтунов Ҡасим, Йәнбирҙин Билал, Сапаров Ильяс, Әбүбәкиров Әһел, Әфләтунова Фәхерниса, Хәмзина Мәхтимә, Әфләтунова Маһикамал*).

6. Ишмырҙа ауылынан нисә кеше һуғышҡа киткән? (*93 кеше*).

7. Хөкүмәттең юғары наградаларын алған кемдәр бар?

(*Ғибадуллин Садиҡ, Йәнбәков Айса, Йәнбирҙин Морат, Рәхмәтуллина Рәйсә*).

8. Баҡыртау карьеры ҡасан асылды? (*1987 йыл*).

9. Ауылға килгән иң беренсе трактарҙың маркаһы ниндәй булған? (*тәгәрмәсле ХТЗ*).

10. Ауылдың иң өлкән кешеһе кем? (*Әфләтунов Йосопҡа 92 йәш*).

11. Ауылдың иң йәш кешеһе кем?

12. Хәҙерге көндә хеҙмәт ветерандары кемдәр?

13. Ауылыбыҙҙан сыҡҡан ҡыҙылдар отряды командиры кем? (*Йәнбәков Ғ.*).

14. Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары кемдәр?

15. Әүәл беҙҙең тирәлә йәшәгән башҡорттар ниндәй ҡәбиләгә ҡарай? (*бөрйән ырыуына*).

16. Үҙгәртеп ҡороу заманына тиклем беҙҙең колхозда кемдәр колхоз рәйесе булып эшләгәндәр?

17. Ауылыбыҙҙан сыҡҡан ниндәй сәнғәт оҫталарын беләһегеҙ? (*Йәнбәков Әсҡәт, Әфләтунов Сәлих, Тотманов Радис*).

18. Ауылыбыҙҙағы яугир-интернационалистарҙы әйтегеҙ. (*Рәхимов Ринат, Хәмзин Артур, Бөтөнбаев Хәмит, Бөтөнбаев Вәхит*).

19. Тыуған ер, тыуған ил тураһында мәҡәлдәр әйтегеҙ.

20. Тыуған ауыл тураһында йыр башҡарығыҙ.

21. Колхоз рәйестәре булып кемдәр эшләгән?

Шулай итеп, беҙ һеҙҙең менән, уҡыусылар, беҙҙең тыуған еребеҙ *Баймаҡ районы Ишмырҙа ауылының ер-һыу* атамалары, уларҙың килеп сығышы, ауылдың ҡыҫҡаса тарихы менән таныштыҡ. Һәр кем туған яғын белергә, унын менән ғорурланырға тейеш. Ауыл һәйбәт булһын өсөн һәр

уҡыусы үҙ өлөшөн дә индерергә тейеш.

Дәрескә саҡырылған ҡунаҡҡа рәхмәт әйтеп, уның хөрмәтенә йыр йырлана (“*Моңдар ҡайтһын ауылға*”).

**Исмәғилова Ильгинә Рәхимйән ҡыҙы**, 6-сы класс
Фәнни етәксеһе: **Баййегетова Гүзәл Тәлғәт ҡыҙы**

# БАЙМАҠ РАЙОНЫ СЫҢҒЫҘ АУЫЛЫНЫҢ ҺӨЙЛӘШЕ

## Инеш

Һәр кемгә үҙе тыуып-үҫкән яғы, ауылы изге һәм ҡәҙерле. Сөнки бында беҙҙең ата-олатайҙарыбыҙ йәшәгән.Уларҙың һалған һуҡмаҡтары, ялан-туғайҙары, урман-тауҙары, биләгән урындарының атамалары һаҡланып ҡалған, улар телдә йөрөй. Һәр ырыу илен, йәшәгән төбәген һаҡлап көн күргән, ырыу-ара ҡәрҙәшлек бәйләнешен нығытып, татыулыҡҡа, берҙәмлеккә ынтылған. Ырыу-ҡәбилә, йорт-ил, ата-бабалар исемдәре хәтерҙә һаҡланып, аманат итеп тапшырылған, шәжәрәләр барлыҡҡа килгән.

Хәҙерге яҙма шәжәрәләргә ҡарап ырыуыңды, ниндәй тамырҙан, нисәнсе быуындан булыуыңды беләһең. Элегерәк ололар таныш булмаған кеше менән осрашҡанда шундай һорау менән һүҙ башлар булған:

— Ҡайһы ырыуҙан?

— Атың кем?

— Атаң кем?

— Араң ниндәй?

Артабан үҙенең алдында кем торғанын, уның менән нисегерәк мөғәләмә булыуҙы хәл иткән. Ҡанбабалар еребеҙгә, телебеҙгә, динебеҙгә, ғөрөф-ғәҙәтебеҙгә тоғро булыуҙы аманат итеп, быуындан быуынға ныҡлы һаҡлап киленеүенә шәжәрәләр шаһит.

## Ауыл тарихы

*Сыңғыҙ* (икенсе исеме *Монаш*) бөрйәндәрҙең боронғо ауылы. Ғалим-тарихсы *Әнүәр Әсфәндиәровтың* фәнни тикшеренеүҙәре буйынса, ауылға 400 йыл, сама менән 1603-1605 йылдар тирәһендә барлыҡҡа килгән. Ауыл *Күсәбә* һәм *Ярмайылғаның* Һаҡмарға ҡойған тамағында, *Ялпаҡ* һәм *Сәлимйәүһәр тауы* битләүендә урынлашҡан. Ә инде уның ҡаршыһында, әйтерһең дә, ситтәрҙән ауылды һаҡлар өсөн ҡуйылған һаҡсы һымаҡ *Ҙур* һәм *Бәләкәй*

*Һәрешҡужа* тауы баҫып тора. Артабан — *Алсынбай,Туңғайын* тауҙары ауылға йәм өҫтәй.

Ауыл илһамлы һәм ҡөҙрәтле ерҙә урынлашҡан. Ул үҙенең тәбиғәт байлығы, эшһөйәр һәм ижадсыл халҡы менән тирә-яҡта дан тота.

*Сыңғыҙ* ауылы үҙенең бай тарихы һәм матурлығы менән башҡа ҙур ауылдарҙан бер ҙә ҡалышмай.

Ауыл исеме *Сыңғыҙ (Монаш)* ҡайҙан килеп сыҡҡан һуң?

*Сыңғыҙ* — бөрйәндәрҙең боронғо ырыуы. *Монаш* — түбә (аймаҡ) исеме. Ауылды *Монаш* та**,** *Сыңғыҙ* ҙа тиҙәр. *Монаштарҙың* хәҙерге *Татарстан* ерендә *Сүлмән (Кама)* буйында йәшәүҙәре билдәле. *Баймаҡ* районы эсендә *Темәс, Ҡолсора, Иҙрис, Икенсе Этҡол, Таулыҡай, Сыңғыҙ* һ.б *монаштарҙың* төп ауылдары булып һанала.

Тарихи документарҙа *Сыңғыҙ* ырыуының тәүге йәшәгән урыны *Ҡаҙағстан* еренә барып тоташа. Уйлауҙарынса, ауылға беренсе булып нигеҙ һалыусылар *Ҡолмәмбәтов* һәм *Сыңғыҙовтар* булған.

*Сыңғыҙ* ауылы XVIII быуатта нығ ҙурайған. Сөнки эргә-тирәләге ырыуҙар берләшкән. Төрлө барымта-ҡарымта, ихтилалдар быға сәбәпсе булған. Был осорҙа ауыл *монаштарҙың* төбәк-ара аймаҡ үҙәге һаналған. *Ырымбур Верхне-Уральск* почта трактын хеҙмәтләндергән почта ямы ролен үтәгән ауыл булған. Ләкин почта трактын хеҙмәтләндереү еңелдән булмаған. Ауыл халҡы почта аттарын бушлай аҫраған, уны тотор өсөн һалым күп түләгән.

Был халыҡ araһында ризаһыҙлыҡ тыуҙырған, ихтилалға күтәрелгән халыҡ. *Сыңғыҙ* ауылы башҡорт ихтилалдары күтәрелеше осоронда бер нисә мәртәбә яндырылған. Ырыу-аралар берләшеп, бәләкәй утарҙар бөтөрөлөп *Биләндән* Күсәбә йылғаһының Һаҡмарға ҡойған тамағына *Сыңғыҙ* ауылына күсеп ултырғандар.

*Сыңғыҙ* ауылынан айырылып, утар урынына яңы ауылдар төҙөлгән: *Мерәҫ* (1816), *Әбделмөкмин (Иҙелбай), Әбдрахман* (1816), *Аҡбулат* (1816), *Мөхәмәт* (1834).

## Ауыл хаҡында риүәйәт

Халыҡ араһында ауыл исеменең килеп сығыуына бәйле күп кенә легендалар һаҡлана. ... Имеш, ҡаҙаҡтар менән ҡарымта һәм барымта һуғышы осоронда бер егет үҙен батыр һуғышсы итеп күрһәткән. Ул атта оҫта йөрөгән, мәргән уҡсы, еңелеүҙе белмәгән батыр булған. Берҙән-бер көндә, илдә тыныслыҡ урынлашҡас, *”батыр егет”* исеме менән дан алыусының һөйгән егетенә кейәүгә сығыуы бөтә ауыл халҡын ғәжәпләндергән. Ул егет түгел, ә ҡыҙ булып сыҡҡан. Быны ишеткән халыҡ, хайран ҡалып, бына был исмаһам

*ысын ҡыҙ,* тигән. Ошо ваҡыттан һуң ауыл *Сыңғыҙ (Ысынғыҙ)* исеме менән йөрөтөлә башлаған, имеш.

## Ауылдағы ырыу-ара исемдәре

Ара исемдәренең килеп сығышы ла бик ҡыҙыҡлы күренеш. Уларға бирелгән атамалар был төркөмгә ингән кешеләрҙең характерындағы ыңғай йәки кире сифаттарҙы асыҡлай. Йә иһә уларҙың ҡайҙан килеүен билдәләй. Ә ҡайһы берҙәренең кәүҙәһенә йәки көс-ҡеүәтенә ҡарап бирелер булған. Мәҫәлән, сеүәтә араһының килеп сығышы тураһында *Сирбаев Рөстәм* шулай тип яҙып алған:

"Элек *Сыңғыҙ ауылы* халҡы *Ҡуянтау тауы* тирәһендә йәйләгән. *Сеүәтәле араһы* булмаҫ борон, улар ағасҡа *сеүәтә* элеп ҡуйғандар. *Сеүәтәне* элеүҙең сәбәбе шул: бөтә үткән кеше, тирмәләргә инеп, ҡымыҙ эсһен.

Элек *Сирбай* менән *Мансурҙың* аталары бер булған. *Сирбаевтар* тоҡомо *Сирбайҙан*, ә *Мансуровтар* тоҡомо *Мансурҙан* киткән."

Күп кенә ара атамалары үҙҙәре үк теге йәки был араның исеме нилектән шулай булыуын әйтеп тора. Мәҫәлән, *сеүелдәктәрҙең* ғаиләләре ишле булыуын, шуның өсөн сыр-сыу килеп йәшәүен, ә *төрәйҙәр* ҡунаҡ килһә өрөм-дөрөм булыуҙарын, етешһеҙлеккә дөрләп, ҡыҙып китеүен әйтеп тора. *Рәжәпов Әбрәхим* олатайҙың әйтеүе буйынса, *татарҙар араһы Иҙел* буйынан, татарҙар яғынан, ә *ҡаҙаҡ араһының* ҡаҙаҡ яғынан килеүен әйтә. *Таҙҙар араһының* исеме, күрәһең, араларында берәй ялтыр башлы йәки таҙ кешенең булыуына ишара итә.

Ҡайһы бер исемдәр кеше характерындағы кире сифаттарҙы аса. Әлбиттә, хәҙерге дәүер өсөн түгел. Был сифаттар әллә ҡасан уҡ юҡҡа сыҡҡан. Быға ҡарата *Буранбайҙағы һыуыҡ ҡаҙан* йәки *ҡыуыҡ араларын* алырға була. Ә *кәзәкәйҙәр, еҙ ҡуян, таш үпкә кеүек араларҙың* исемдәре лә нилектән шулай аталыуына ишара яһамаймы ни?

## Сыңғыҙ ауылындағы аралар

Татарҙар:
- *Буранғоловтар*
- *Моталлаповтар*
- *Маҡсютовтар*
- *Иманғоловтар*

Таҙҙар:
- *Мортазиндар*
- *Мөхәмәтйәровтар*
- *Әсмәндиәровтар*

Кәзәкәйҙәр:
- *Солтангилдиндар*
- *Билаловтар*

Күсәктәр:
- *Уразбаевтар*
- *Хәлиловтар*
- *Дилмөхәмәтовтар*

Ҡусҡаровтар:
- *Туйсиндар*

Сеүәтәләр:
*Сирбаевтар*
*Мансуровтар*
Төрәйҙәр:
*Салауатовтар*
*Ханафиндар*
Ҡаҙаҡтар*:*
*Ҡеүәтовтар*
*Буранғоловтар*
*Сәмәрхән, Фәйзулла*
*Аллабирҙиндәр*

Сеүелдәктәр*:*
*Балхиндар*
*Әхмәтовтар*
*Әбдрәшитовтар*
Ендәр*:*
*Бикколовтар*

Төҫөнә ҡарап та әйткәндәр*: Һары Ғәйниә, Ҡара Ғәйниә Ыҡшыу Латифа, хитрый Латифа.*

Кәүҙәһенә ҡарағандар**:** *Йыуан Мәрхәбә, көркөм Мәрхәбә***.** *Мәхмүтов Зайнулла, Рәжәповтар, Ҡотлоғужиндар, Килдиндар, Ғөлбәйетовтар һәм Бикколов Дәлхә, Шәһиттәрҙең аралары* билдәһеҙ**.**

**Ауылда булған ырыу, араларҙың исемлеге**

| № | Аралар | Фамилиялар | Мәғәнәһе |
|---|---|---|---|
| 1 | Енәйҙәр (ендәр) | Биҡколовтар, Әбйәлиловтар, Мөстәкимовтар | Һәр эште ен һымаҡ башҡаралар |
| 2 | Төбәктәр | Ҡолмәмбәтовтар, Әхмәтовтар, Балхиндар | |
| 3 | Кәзәкәйҙәр | Солтангилдиндар, Шахморатовтар, Билаловтар, Зариповтар | Бер урында тора алмай, тыпырсына |
| 4 | Сеүәтәләр | Сирбаевтар, Мансуровтар, Алтынғужиндар, Исҡужиндар | |
| 5 | Төрәйҙәр | Салауатовтар, Ҡыуатовтар, Ханафиндар | Ҡунаҡ килһә, төрөлөп, бөтәһе берҙәм генә булып, ойошоп ҡына торалар |
| 6 | Тазымдар | Мөхәмәтйәровтар, Әсфәндиәровтар | |
| 7 | Татарҙар | Мортазиндар, Ҡужаҡаевтар, Ибраһимовтар, Рафиҡовтар, Буранғоловтар, Моталлаповтар | |
| 8 | Ҡазактар | Иманғоловтар | |
| 9 | Күсәктәр | Уразбаевтар, Хәлиловтар, | Үсексән булғанға |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | Үтәғоловтар, Дилмөхәмәтовтар, Ятратовтар | |
| 10 | Ҡусҡарҙар | Туйсиндар | |
| 11 | Терһәктәр | Рәжәповтар | Терһәген йәйеп йөрөгәнгә күрә әйтелгән |
| 12 | Һайыҫҡандар | Килдиндар | Ян-яғына, алан-йолан ҡарана |

## Сыңғыҙ ерене́ң топонимдары
## Гидронимдар

*Күсәбә йылғаһы*. Ул, ауылды икегә бүлеп, ауыл уртаһынан матур булып ағып ята. Йылғаның башы *Таш кисеүҙән* башлана, 20 км самаһы үткәс, Һаҡмарға ҡоя. *Күсәбәнең* һүҙе “*күс*”, бер ояға тупланып йәшәү мәғәнәһендә.

Икенсе вариант буйынса, йылға буйында 1755 йылғы халыҡ ихталалының етәксеһе *Күсәк тархандың* утары булған. Йылға шул *Күсәк батыр* исемен йөрөтә, тигән фараз итеүҙәр йәшәй.

*Ярмайылға* — “*Йырма йылғы*”мәғәнәһендә. Ул ауылдың көнсығыш яғынан, тау-таштарҙы ярып үтеп,Һаҡмарға ҡоя.

*Яланүҙәк* — тип ауылдың эргәһендә ялан ерҙә урынлашҡан уйһыулыҡты әйткәндәр. Бынан шишмә ағып сығып ятҡан. Элек бындағы халыҡтың төп бесәнлек һәм көтөүлек ере булған. Бөгөн был яланлы үҙәктә яңы урам төҙөлөп, 43 хужалыҡ теркәлгән.

*Күрәнле күле* — Ялан үҙәктән ағып төшкән шишмәнән күләүек барлыҡҡа һәм бында ҡуйы булып күрән үләне үҫкән. Был бесәнлек урыны булған. Хәҙер был ерҙә лә йорттар үҫеп сыҡты.

*Әселе йылғаһы* — сама менән 10 км ерҙән көнсығыштан башланып ағып сығып ята. Һаҡмарҙың һул яҡ ярына ҡоя. Һыуы тоҙло һәм татырлы булғанға шулай аталған. Элекке ваҡытта был ерҙәрҙә сыңғыҙҙарҙың төп йәйләү урыны булған.

*Һаҡмар йылғаһының* — аңлатмаһын төрлөсә аңлаталар. “Саҡ” — боронғо ҡәбилә исеме. Һаҡмар йылғаһы оҙаҡ ваҡыттар бөрйәндәрҙең ваҡытлыса көнсығыш сиге булһа, ә инде көнбайышҡа Яйыҡ йылғаһына табан ҡалмыҡ, ҡаҙаҡтар йәйләү ҡороп йәшәгәндәр. Улар йыш ҡына башҡорт ерҙәренә сапҡындар яһап торғандар. Бына шунан сығып, йылға беҙҙе дошмандар “һаҡлар” мәғәнәһендә аңлатыла.

*Таналыҡ йылғаһы* — беренсе вариант буйынса Ирәндек тауының көнсығыш битләүендә йәшәгән ҡаҙаҡтарҙың ”тана” исемле ырыуынан алынған. Ә инде икенсе вариант буйынса, башҡорттар йылғаның дәүмәленә ҡарап, тана(быҙау) эсерлек тә һыу юҡ, тип әйтә торған булғандар.

*Ҡаратал йылғаһы* исемле ҙур йылға ҡаҙаҡ ерендә лә бар. Ул *Балхаш* күленә барып ҡоя. Бәлки, *Ҡаратал* тигән исем беҙгә ҡаҙаҡтарҙан килеп ингәндәр.

*Йылайыр йылғаһы* исемен күптәр "*илаған е*р", йә булмаһа "*йылы ер*"исеме менән бәйләй. Тағын да беҙҙең төбәктә ҡаҙаҡтарҙың "*жалаир*" исемле ырыуҙарының йәшәп китеүе билдәле.

*Ғайса күле* — Ғайса йәйләп ятҡан урын. Һөрөнтө ер, күл ҡороған, тик талы ғына ҡалған.

## Оронимдар

*Һәрешкужа тауы*("*Һәр эшкә хужа*"), халыҡ уны *Фәрештә тауы* тип тә йөрөтә. Ул боронғо кешеләрҙең тәңреһе — табына һәм ғибәҙәт ҡыла торған изге урыны булған. Борнғо ваҡытта, кешеләр алыҫ юлға сәфәр сыҡҡанда, һуғышҡа, һунарға киткәндә был тауға килеп табынғандар, бер-береһенә уңышлы юл теләгәндәр. Тау һаҡсы ролен дә башҡарған, әгәр ауылға берәй төрлө ҡурҡыныс килеп тыуһа, тау башында торған дозорныйҙар сигнал итеп, костер яҡҡандар, ҡыңғырау ҡаҡҡандар.

*Һәрешкужа* ауылдың иң бейек, йәмле һәм матур тауы. Уның башына менһәң, ғәжәйеп хозур йылға-күлдәр, урман-тауҙар, иҫ киткес бай илаһи ер, матур төйәк тасуирлана.

*Алсынбай тауы* Һаҡмарҙың һул яҡ ярында, Буранбай менән Сыңғыҙ ауылдары араһында. Ауыл ҡарттары һөйләүенсә, ауылда иң беренселәр булып *Алсынбай* исемле кеше тирмән тотҡан, кешеләр уға мең рәхмәттәр әйткән. Ә тау башында уның йәйләүе булған, ул был ергә малдарҙы индермәгән, тәбиғәтте һаҡлаған. Тау беренсе тирмәнсе исеменән *Алсынбай* тип аталған.

*Зәлифә тауы Төпөш буйында* урынлашҡан. Ауыл ҡарттарының һөйләүенсә, һуғыш йылдарында унда *Зәлифә* исемле ҡатын йәшәгән. Ул йыш ҡына һуғышҡа киткән ирен көтөп, ошо тауға килеп аят уҡып, теләктәр теләп, ултырып китә торған булған. Ул артабан, тау аша төшөп, Ҡуянтау хужалығының Һаҡмар бүлексәһендә йәшәгән тол ҡалған ҡыҙына барып, уға ярҙам итеп, кире ауылға ҡайтыр булған. Бына шулай итеп, был тау яуға киткән ирҙәрен түҙемлек менән көткән мәрхәмәтле ҡатын-ҡыҙ хөрмәтенә *Зәлифә тауы* тип аталған.

*Ҡылтыраташ* ("*Ҡыҙ ултырған таш*") тауы тип, Буранбай менән Сыңғыҙ ауылының төньяҡ өлөшөндә урынлашҡан тауға әйткәндәр. Легенда буйынса, "Изге инәбеҙ Һауа Урал тауы буйлап сәйәхәткә сыҡҡан һәм ул ете юл араһында туҡтап, ошо ташҡа ултырып, ял итеп киткән. Уның ҡуҙғалып китеүе булған, шул ташта уның ҡул, аяҡ, күкрәгенең эҙҙәре тороп ҡалған". Был урынды халыҡта "*Пәйғәмбәр ташы*"тип тә йөрөткәндәр.

*”Ҡыҙ һәм егет” ташы (“Мөхәббәт” ташы)* Билән тауының битләүендә оло юл буйында урынлашҡан. Легенда буйынса, бер-береһенә ғашиҡ булған ҡыҙ менән егет ошо урында йыш осрашып, серләшә торған булғандар.

Берҙән-бер көндә ата-әсәһе ҡыҙҙарын бер байҙың улына кейәүгә бирергә булған. Быны ишеткән ҡыҙ, йортонан ҡасып китеп, егете менән ошо тау битләүендә осрашып, Хоҙайҙан беҙҙе айырмағыҙ, тип ялбырап һорағандар. Имеш, Хоҙай үҙенең әмере менән уларҙы бергә ҡушып, ташҡа әйләндергән. Был урын йәштәрҙең яратҡан ял урынына әйләнгән. Ә инде һуғыш йылдарында һуғышҡа киткән ир-егеттәрҙе оҙатып, ауыл халҡы ошо ташҡа тиклем килгән. Кешеләр китеүселәргә изге теләктәр теләп, ташҡа таҫмалар бәйләгәндәр, көмөш тәңкәләр һалғандар.

*Сәлимйәүһәр тауы* беренсе булып тау битләүендә урынлашҡан кеше исеме менән аталған.

*Ҡыҙылъяр тауы* ауылдың көньяҡ-көнсығыш битләүендә булған тау исеме. *Ҡыҙылъярҙы* ауыл халҡы *ауылдың көньяк ҡапкаһы* тип йөрөткән. Уның аша бер ат арбаһы һыймалы юл үткән. Ул бер асылып, бер ябылып торған.

*Арҡыса тауы* — Сыңғыҙ ауылының *төньяк ҡапкаһы.*

*Билән ҡалҡыулығы* Һаҡмарҙың уң яғы ярынан башлана. Ул ситтән ҡарағанда кеше биленә оҡшап, бөгөлөп төшөп ята. *Билән* — Сыңғыҙҙарҙың иң тәүге тереклек иткән урыны. Был ерҙә һабантуйҙар һәм башҡа төрлө халыҡ байрамдары үткәрелгән.

*Геолог үҙәге* Күсәбә йылғаһы буйында урынлашҡан. Был ерҙә геологтар палатка ҡороп йәшәп, ер байлыҡтары эҙләү эшен алып барған. Унда хәҙер ҙә алтын эҙләүселәрҙең соҡорҙары һаҡланған.

*Туңҡайын тауы* ауылдың көнбайышында урынлашҡан. Ул ауыл халҡы өсөн барометр ролен үтәгән. Ағастарҙың шаулауына ҡарап, халыҡ көндөң торошон билдәләгән.

*Хөсәйен ташы* Ялпаҡтауҙың көньяҡ битләүендә урынлашҡан. Ошо ташҡа ултырып, ошо ауылдан сыҡҡан башҡорт композиторы Хөсәйен Әхмәтов ҡурай уйнаған һәм моңло йырҙар йырлаған. Был урын уға илһам көсө биргән.

*Күкшәнтау тауы* Баймаҡтың көнбайыш битләүендә урынлашҡан тау. Имеш, Таналыҡ буйында йәшәгән ҡаҙаҡтарҙың *Күкше* исемле батыры булған. Бәлки, тау уның исемен йөрөтәлер, тигән фараз йәшәй.

*Ҡуянтау тауы* битләүендә ҡаҙаҡтарҙың Бәләкәй жүс ханы *Ҡуян* ырыуынан булған Әбүлхәйерҙең ставкаһы торған. Ҡайһы бер весиялар буйынса, хан үҙенең ғәскәре менән Һаҡмар буйына килеп, Таулыҡай ауылының старшинаһы *Таулыҡай Сураҡов* ҡыҙына өйләнә.

## Ҡушаматтар

*Таҙ Рәжәп.* Бәләкәй сағында уның башына таҙ төшкән. Шуға уны *Таҙ Рәжәп* тип йөрөткәндәр.

*Ҡашҡат Әширәф.* Әширәфтең бер аты булған. Был аты янып үлгән. Шунан ул: “Әширәф булыр ҙа ул, *Ҡашҡат* булмаҫ”, — тип һөйләр булған.

*Минәйткән Рамаҙан.* Рамаҙан һәр ваҡыт *мин әйткәнмен* тип һүҙ башлаған.

*Һаңрау Рәжәп* — ҡолаҡҡа ҡаты булған.

*Ҡара Яңыл, Ҡара Әхмәт, Һары Ғәйшә.* Уларҙың төҫтәренә ҡарап, шулай әйтелгән.

*Купец Азамат* — һаранлығы өсөн әйтелгән.

*Дегет селеге* — иренә тағылып йөрөгән ҡатындарға әйтелгән.

*Төрәй Байрамғол* — холҡона ҡарата әйтелгән. Ҡунаҡтың ҡасан килеүенә ҡарамаҫтан, күмәкләп ҡунаҡ итергә тырышҡандар. Бер көндә биш өйҙә ҡунаҡ булғандар. Улар хаҡында былай тигәндәр: “Төрәй төндә ҡаҙан һөрәй”**.**

*Контрабанда Фәйзулла* — малайҙарға *контрабанда* тип әйтергә яратҡан

*Иҫһеҙ Рәжәп.* Уның бер нәмәгә лә иҫе китмәгән

*Нуғай Рауза.* Ауылда ике Рауза булған. Береһе Нуғайҙан килен булып төшкән, шуға *Нуғай Рауза* тигәндәр, ә икенсеһенең ата-әсәһенең береһе ҡаҙаҡ милләтенән булған, шуға *ҡаҙаҡ Рауза* тигәндәр.

*Хулиган Зариф.* Ялҡау булған, күңел асып ҡына йәшәргә яратҡан.

*Тукал Зөләйхә.* Балаһы булмаған.

*Шайтан Рамаҙан.* Үҙе тураһында: “Мин шайтанмын”, — тигән.

*Мәмәй Рамаҙан* — йомшаҡ күңелле, үҙ аллы түгел, бер эште лә үҙе белеп эшләй алмаған.

*Тәпетәй Хазина әбей.* Ул күп һөйләгән.

*Өс ҡаҙаҡ Рауза.* Кәүҙәһе бәләкәй булған

*Ҡаҙаҡ Фәйзерахман.* Атаһы ҡаҙаҡ милләтенән булған

*Ыҡшыу Латифа.* Мыжыҡ, бер һүҙҙе ҡырҡ тапҡыр әйткән өсөн.

## Зоонимдар

**Һыйырға:**

*Марта* — март айында тыуғанға.

*Зойка* — рус исеме.

*Ҡарала* — ҡара һәм аҡ төҫтә булғанға.

**Атҡа:**

*Йондоҙ* — маңлайында йондоҙ кеүек тамғаһы бар.

*Ерәнсәй* — төҫө ерән булғанға.
*Ҡашҡа* — маңлайында аҡ тамғаһы бар.
*Аҡбуҙ* — аҡ(күк) төҫтәге атҡа әйтәләр.
*Бөркөт* — бөркөт һымаҡ көслө, талымһыҙ аттарға әйтәләр.
*Саптар* — шәп сапҡан,юрға аттарға әйтәләр.
*Аҡбәкәл* — тубығына тиклем ағы булған аттарға әйтәләр.
**Эткә:**
*Аҡтырнаҡ* — тәпәйе аҡ төҫтә булғанға.
*Алабай* — төҫө ала булғанға.
*Һоробай* — төҫөнә ҡарап ҡушыла.
*Муйнаҡ* — муйыны аҡ булғанға.
*Ҡарабай* — ҡап-ҡара төҫтә булғанға.
**Бесәйгә:**
*Рамаҙан* — Рамаҙан айында тыуғанға ҡушылған.
*Иркәбикә* — иркә булғанға.
*Һоросай* — һоро төҫтә булғанға.
*Ҡарасай* — ҡара төҫтә булғанға.
*Светофор* — төрлө төҫтәге бесәй.
*Алаҡай* — төҫө ала булғанға.

## Урам исемдәре

| № | Боронғо исеме | Хәҙерге исеме |
|---|---|---|
| 1 | Төбәк | Һаҡмар |
| 2 | Ярмайылға | Ярмайылға |
| 3 | Безводный | Күсәбә |
| 4 | Дүртөйлө | Дүртөйлө |
| 5 | Биләп | |
| 6 | Олотау | Мәктәп урамы |
| 7 | Ҡыҙылъяр | |

## Сыңғыҙ ауылының һөйләше

Ауыл һөйләше башҡорт теленең көньяҡ диалектына (Эйек-Һаҡмар һөйләше) инә. Ауылыбыҙҙың 400 йыллыҡ тарихы бар, сама менән 1603-1605 йылдар тирәһендә барлыҡҡа килгән. Ауыл *Күсәбә* һәм *Ярмайылғаның* Һаҡмарға ҡойған тамағында, *Ялпаҡ* һәм *Сәлимйәүһәр* исемле тау битләүендә урынлашҡан.

*Сыңғыҙ* — бөрйәндәрҙең боронғо ырыуы, *Монаш* — түбә – аймаҡ исеме. Ауылды *Монаш* та, *Сыңғыҙ* ҙа тип атайҙар. Ауыл *Сыңғыҙ (Монаш)*

исеме менән рус ғалимы М. А. Голубцов төҙөгән “Башкирия в 1730-1750 г.” исемле хеҙмәттә рәсми рәүештә тәүге мәртәбә сағылыш тапҡан.

Ауылда бөрйән ырыуына ҡараған башҡорттар йәшәй. *Сыңғыҙҙа* 15-тән ашыу ара бар. Бына улар: *таҙҙар* (тазымдар), *ендәр* (енейҙәр), *күсәктәр, ҡусҡарҙар, төбәктәр, ҡаҙаҡтар, терһәктәр, һайыҫҡандар, кәзәкәйҙәр, сеүәтәләр, төрәйҙәр, сеүелдәктәр, һорландар, татарҙар*. Уларҙың һәр береһенең үҙенсәлеге һәм тарихы бар.

Ауылдың элекке йәйләгән утар исемдәре: *Сыңғыҙ утары, Мөхәмәт утары.*

*Сыңғыҙ* ауылы халҡының һөйләше әҙәби телгә яҡын, әммә унда үҙенсәлекле күренештәрҙе осратырға була.

## Фонетик үҙенсәлектәре

- ***а*** өнө тамаҡ төбө менән әйтелә. Мәҫәлән, *аҡ, ағара, ахыры.*

- ҡайһы бер һүҙҙәрҙә *ж* өнө урынына *з* өнө ҡулланыла: *әзәл* — әжәл, *Мәзит* — Мәжит, *мөнәзәт* — мөнәжәт.

- айырым һүҙҙәрҙә һүҙ башындағы *б* өнө *м* өнөнә күсә: *моҙ* — боҙ.

- ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә һүҙ башындағы *ғ, к* өндәре урынына *г, к* өндәрен ҡулланыу осраҡтары бар: *кәжәп* — ғәжәп, *кәләмәт* — ғәләмәт, *кел* — гел, *конаһ* — гонаһ, *Көлсирә* — Гөлсирә, *Кәүсәриә* — Гәүсәриә.

Бынан тыш, бүтән һөйләштәрҙәге үҙенсәлектәр ҙә күҙәтелә:

*е-ә:* кәҫәртке — кеҫәртке; *и-ә:* мәсекәй —мәскәй

*у-о:* топоҫ — тупаҫ; *ү-ө:* сөрәгәй өйрәк — сүрәгәй өйрәк.

Һөйләштә һүҙҙәрҙең нәҙек варианты өҫтөнлөк итә: кәсә — ҡаса, сәйер — сайыр, аҙ — әҙ, аҡрын — әкрен.

*-а-у: анда* — унда, *мында* — бында.

*-ң* өнө *н* менән әйтелә: *янаҡ* — яңаҡ, *баранмы* — бараңмы, *тундынмы* — туңдыңмы.

Был күренеш яңғыҙлыҡ исемдәргә лә таралған: исемдәр *н* өнө менән әйтелә: *Миннегөл* — Миңлегөл, *Миннебай* — Миңлебай.

Башҡа өндәрҙең күсеше: *каваҡ* — ҡауаҡ, *керфек* — керпек, *сыбыҡтимер* — тимерсыбыҡ, *сайыр* — сәйер.

Бик һирәк *г, м* тартынҡыларынан башланған ялғауҙар ҡушылғанда, ҡылымдың *л* тартынҡыһы төшөп ҡала: *кигән* — килгән, *кимәгән* — килмәгән, *буһасы* — булһасы, *бумай* — булмай, *утырған* — ултырған.

Кире сингармонизм варианты: *карт әсәй* — ҡартәсәй, *карт атай* — ҡарттай, *алып барыу* — апарыу, *алып кил* — апкил, *алып сыҡ* — апсыҡ, *алып кайт* — апҡайт.

## Морфологик үҙенсәлектәре

Эйәлек килеш ялғауында, әҙәби телдәге *–дың, -ҙың, -ның, -тың* формалары менән бергә, һөйләштә ялғау аҙағында *–н* өнө ҡулланыла: *Йете һыуҙын буйына йете ырыу башҡорттары утырған.*

Алмаштар бәйләүестәр менән бергә килгәндә *ң* өнө бөтөнләй төшөп ҡалырға мөмкин: *ошоно шикелле — ошоноң шикелле, һине геүек — һинең кеүек.*

Ҡылымдың *-айыҡ/-әйек* ялғауына бөткән бойороҡ һөйкәлешенең 1-се зат күплек формаһына *–лар* күплек ялғауын ҡушып, эшкә өндәү һәм шул эште башҡарыуҙа өндәгән заттың үҙенең дә ҡатнашыуы белдерелә: *Барайыҡлар, киттекләр — "Пойдемте".*

Ялғауҙар -л, -н менән башлана: *–лар/-ләр, -нар/-нәр, -лы/-ле*: *ҡыҙлар* — ҡыҙҙар, *малайлар* — малайҙар, *әбейләр* — әбейҙәр, *яҡлы* — яҡты.

Иркәләү-кесерәйтеүҙе белдергән һүҙҙәр: *танакай* — тана, *өлтөкәй* — өлтөк, *ҡолонҡай* — ҡолон, *асаҡай* — асалы ҡойроҡ, *сипей* — себеш, *быҙауҡай* — быҙау, *бәпесем, бәпескәйем* — бәпес, *малҡай* — мал, *ҡыҙыҡайым* — ҡыҙым.

Күрһәтеү алмашының төбәү килеше *–ныңа* ялғау менән белдерелә: мыныңа — быныңа.

*-малы* ялғауы: ямғырҙан һуң күлдәк һығып *алмалы* ине.

*-айыҡтар, -әйектәр* ялғауы: 1) әйҙәгеҙ тиҙ генә эшләп ташлайыҡ — әйҙәгеҙ, тиҙ генә эшләп *ташлайыҡтар.* 2) бергәләп барып *етәйекләр ҙә* һуңынан ял итербеҙ.

*Киҫәксәләр***.** *Килдем дәйе* — килдем дә баһа йәки килдем дә инде

*Барҙылайы* — барҙы ла инде**.**

*Барҙы лаһа* — барҙы ла баһа

*Китәле* — кит әле.

*Бәйләүестәр***.** *Шайы* —бер тин *шайы* күрмәйһең, бер *шайға* ла китмәгән.

*Менән* бәйләүесен төшөрөп ҡалдырып һөйләү күҙәтелә, йәки *белән* һүҙе менән алмашына: *Рим икебеҙ* — Рим менән икебеҙ, Айгөл *белән* китте — Айгөл менән китте.

*Рәүештәр*. *Бушалъюк* — буштан-буш, *ҡутарғанса* — күп итеп, *тик томалға* әрләндек — бер сәбәпһеҙ әрләндек.

Аңғармайса — аңғармаҫтан, самай — тамам (как раз).

*Метатеза күренеше* (тартынҡы өндөң урыны алмашыныу): *бөлдөргән* —бөрлөгән, *зыраят*— зыярыт, *боралтыу* — болартыу, *абҙар* — аҙбар.

Борондан килгән рәүештәр ҙә нығынып ҡалған һәм һөйләштә әүҙем ҡулланалар: *хашаҡ* — ерәнес, *ташый* — буйға үҫмәгән кеше, *аңыш* — иҫәр, аңра, ҡыштыҡлау — ҡул-бото ярылған йә ҡулы себешләгән.

**Лексик үҙенсәлектәре**

| Диалект | Әҙәби телдә (йә һүҙҙең аңлатмаһы) |
|---|---|
| Аш өйө | Аласыҡ |
| Олатай | Атай-әсәйҙән оло ир кеше |
| Ҡартәсәй | Атайҙың әсәһе |
| Инәй | Атай-әсәйҙән оло ҡатын кеше |
| Көртөй | Күкрәксә(телогрейка) |
| Тумалаҡ | Йомро |
| Бәтмәкәй | Бәләкәй |
| Ҡыйыр | Икмәктең мөйөшө (сите) |
| Ылаҡ | Кәзә бәрәсе |
| Мөгәрәп | Баҙ |
| Болғауыс | Тәртешкә |
| Таҡта усаҡлыҡ | Аласыҡ |
| Аңыш | Аңра, иҫәр |
| Ҡул ялғап ебәреү | Ярҙам итешеү, эшләшеү |
| Һөт борам | Һөт айыртам |
| Өй икмәге | Әсе икмәк |
| Тамаҡ бешереү | Ашарға бешереү |
| Ишек алды | Урам эсе |
| Һиңмай | Аҡылға бер төрлө, иҫһеҙ |
| Киҫәүһеҙ | Тыңлауһыҙ |
| Мейес башын тыҡ | Мейес башын яп |
| Кейемде тәкләү | Рәтләү |
| Көпө салбар | Ҡалын салбар |
| Өгөрсө | Ҡыяр |
| Күнәк | Биҙрә |
| Битон | Фляга |
| Амар-йомар/әүәш-тәүеш | Тиҙ-тиҙ (эшләү) |
| Тәүгә | Тәү тапҡыр |
| Ҡутарғанса | Күп итеп |
| Баҙар көнө | Ял көнө |
| Бәләкәй баҙар | Шәмбе көнө |
| Бер быуа эшләү | Бер аҙ |

| | |
|---|---|
| Береһе көн | Иртәнә һуң |
| Ҡаҡ салҡан төшөү | Артҡа ҡарай ҡолау |
| Арандай | Ҙур |
| Көнөгә | Көнөнә |

### Нығынған һүҙбәйләнештәр

бер быуа эшләү — бер тына
ауыҙын айыра әйттем — ныҡ итеп әрләнем
уҡыттым — алданым
бот буйы ғына — бәләкәй
кәзә тәкәһе — һуғышҡан, үсеккән кеше
бер талай өндәшмәне — оҙаҡ һөйләшмәне
маңҡаһы кипмәгән — бәләкәй әле
һеләгәйең ағып торма — ымһынып торма
иманын уҡытыу — тәүбәгә килтереү
төртһәң ауырға тора — ҡоларға тороу
күтән һурпаһын эстем — ыҙаланым
ыҡҡа килмәү — яйға килмәү
ауыҙ асып ҡалыу — бер нәмәһеҙ ҡалыу
ыуын сәстерҙем (ағыуын сәсеү) — әрләү
көлөн күккә осороу —юҡ итеү

**Һирәк ҡулланыла торған ауыл һөйләшенә генә хас һүҙҙәр:** хыялый — иҫәр, ыҡшыу —ығыш, шыңшыу, хәстрүш — меҫкен, ыҡшаңлау — юхаланыу.

### Һөйләү теле өлгөһө
### Боронғоларҙың ҡыҙ биреү йолаһы

Кейәүҙең аталары гилә, ҡыҙ әйттерергә һөйләшәләр. Бата уҡыталар. Әйттереп, бата уҡытып, мәһәрен һала, йаҫтығ аҫтына һалыр өсөн йаулыҡтар, алты-йете баш мал һала. Ике ирекәй аҙағ апкилә ул малды. Тирмей тороп ишегалдына, ғинуар айында бейә һыймалы ҡаҙан ғуйып, тыу бейәне бешерҙеләр. Рамаҙан ҡарттың һур ғаҙаны була торғайны. Анан уналты туға ҡоҙа гилде Әптерәхмән араһына, минең атама гилде. Байағы, ултырырға урын да йуҡ. Ун ғыҙҙы йәшереп ташөйгә йаптылар, һәҙер усаҡлыҡ, ҡаҙанныҡ тейләр. Бер генә тәҙрә. Шуға кейеҙ ғороп, бер йаҡлы ҡалдырмай. Анан, шунда эҙләргә гиләләр. Ҡоҙалар ит ашап- ништәп, байағы, йатыбөткәс, йәшләр гилә эҙләп, кейәү үңгәре, кейәү белә бергә гиләләр. Ун икелә бирҙеләр. Атам, йаңғыҙ ғыҙ буғас, киленнеккә йарамай тине атам. Түрт йыл ултырҙым. Мине ун икелә бирмәҫләр ине, әғәйнеләр: уҡып китә лә бара, йәтешләп китә лә бара, тейләр.

Анан, байағы, шунан һуң, байағы йәшләрҙе йеңгәй башлаб апара. Ишекте асмайлар. Сауҙалашалар. Фәлән саҡлы, фәлән саҡлы! Кейәү үңгәре түләй аҡсаны. Баралар ишеккә. Ишекте асыбәрҙениһә, мына ҡыҙлар йәбешә! Йеңгәй айырыб алып тора. Ә-ә-ә-әй! Ул бер тәрих инде. Йеңгәйләр йетәклп, ике ғулдан тотоп әпкитеб ултыралар. Кейәүгә ғысҡыралар:

“Ҡалым түлә, ҡалым түлә!”

Атам бахыр әйткән: “Һөт һорағас, сеүәтәңде йәшермә, тигәннәр. Кейәү бала һуҡыр тейләр. Шулай буһа, бирмәйем.  Кейәү булыр гешене индерегеҙ!”

“Ҡайным, һиңә бер тай, ҡайнаға, һиңә бер гүлмәк!” — тип килеб инеп күрешкән теге бахыр. Күренеш була инде. Атам: “Сыҡма, сыҡмале”, — тиб ултыртҡан. Самауырҙың артына инеп кенә, ышыҡланып, сәйҙе лә йоталмай, тей. Уҡығнм буған, биг уҡытҡаннар. Мөсһөҙ була бит инде уҡыған геше! “Ҡоҙа! Йарар, үпкәләштән бумаһын. Хәрендәш булыштыҡ”, — тип ризалығын биреп, ҡайтып киткән атам. (*Рәжәпова Зәһүрә инәйҙән яҙып алынды*)

### Ҡулланылған әҙәбиәт

Әсфәндиәров Ә. З. “История сел и деревень Башкортостана”: “Китап-1994”

Сыңғыҙ — изге төйәк” Р. Үтәғолов, Барый Туйсин. “Сибай, 2003”

Ханафин Азамат олатайҙың шәхси архив материалдары.

Респонденттар:

Мәғариф ветераны Ханафин Азамат Әптерәхмән улы, 76 йәш.

Рәжәпова Зәүһәрә инәй, 86 йәш.

**Йосопова К.**, 5-се класс
Фәнни етәксеһе: **Исламова И.В.**

## ТУЙМАЗЫ РАЙОНЫ БАЛТАЙ АУЫЛЫНЫҢ ҺӨЙЛӘҮ ТЕЛЕ

Башҡорт теле — донъя телдәренең араһында үҙенең уникаллеге менән айырылып торған телдәрҙең береһе. Быны уның өн системаһы ла күрһәтеп тора: **һ, ҙ, ҫ, ә, ө, ҡ, ә, ү, ғ.**

Туймазы районында туған телдә һөйләшкән ғаиләләрҙә аралашыу ерле һөйләштә, төньяҡ-көнбайыш диалектында бара, әммә беҙ ул диалекттың татар теленә яҡын булыуынан сығып, татар телендә һөйләшәбеҙ, тип уйлайбыҙ.

Әммә улай түгел икән. Быңдай һығымтаға беҙ тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә килдек.

Төньяҡ-көнбайыш диалектының төп һыҙаты булып башҡорт әҙәби теленең **һ, ҫ** урынына татар, сыуаш телдәрҙәге кеүек саф төрки һүҙҙәрендә **с** өнө ҡулланылыуы тора (*сарыҡ, сыйыр, саумы, син*). Башҡорт теленең **ҙ** өнө лә төньяҡ-көнбайыш диалектында ҡулланыла. Башҡорт теленең үҙенсәлекле ҙ өнө был диалектҡа ят түгел, ул үҙ өнө булып һанала, әммә ҙ өнө беҙҙең Балтай ауылы һөйләшендә һүҙҙең аҙағында ғына әйтелә (мәҫәлән, *тикшерегеҙ, карағыҙ* һ.б.).

Төньяҡ-көнбайыш диалектының тартынҡылар өлкәһендәге тағы бер үҙенсәлеге: башҡорт теленең **ҫ** өнө урынына **ч** өнө ҡулланыу. Мәҫәлән, *чәй ичү, чебен оча, әтәч кычкыра* һ.б.

Төньяҡ– көнбайыш диалектын башҡорт әҙәби теле менән яҡынлатҡан уртаҡ һыҙат — лексиканың уртаҡ булыуы.

Башҡорт теленең актив һүҙлегендәге һүҙҙәр һәм терминдар был диалектта лексиканың бөтә тармаҡтарында ла иркен һәм күп ҡулланыла. Мәҫәлән, үҫемлектәр донъяһына ҡараған терминдарҙан: *балтырған, ҡарағай, атҡолаҡ*; көнкүреш атамаларына ҡараған һүҙҙәр: *бишмәт, урын, он иләү*; анатомия терминдарынан: *балтыр, тубыҡ, танау*; туғанлыҡ терминдарынан: *абзый, хатын, артәтәй, эне* һ.б.

Шулай итеп, төньяҡ-көнбайыш диалекты һөйләштәре, тәү ҡарашҡа, башҡорт теленең башҡа диалекттарынан шаҡтай айырылып торған кеүек булһа ла, тарихи, этник, теория берҙәмлеге яғынан ентекле тикшерә, берәмләп теҙә башлаһаң, тел үҙенсәлектәре буйынса башҡа башҡорт һөйләштәре менән тамырҙан бәйле булып, әҙәби телдең байтаҡ сифаттарын йөрөтә.

Ерле һөйләштең лексик үҙенсәлектәрен билдәләүҙе таблица менән бирәм.

**Лексик үҙенсәлектәр**

| Әҙәби тел | Балтай ауылы халҡының һөйләү теле | Урыҫса тәржемә |
|---|---|---|
| **Тормош юлы, йәш, туғандар һәм уларға бәйле һүҙҙәр** | | |
| тыуыу | туу | рождение |
| тыуҙырыу | тудыру | родить |
| бала саҡ | бала чаҡ | детство |
| ҡыҙ | ҡыз | девочка |
| етем | йитем | сирота |

| | | |
|---|---|---|
| үсмер | усмер | подросток |
| ҡатын | хатын | женщина |
| быуын | буын | поколение |
| әбей, ҡарсыҡ | әби, ҡарчыҡ | старуха |
| ата-әсә | әти-әни | родители |
| ҡәйнә, бейем | быянай | свекровь |
| ағай | абый | брат |
| ҡайны | быятай | свекр |
| апай | апа | Сестра(старшая) |
| һеңле | сеңне | Сестра (младшая) |
| **Тән төҙөлөшө менән бәйле һүҙҙәр** | | |
| мейе | ми | мозг |
| сәс | чәч | волосы |
| маңлай | маңғай | лоб |
| керпек | керфек | ресница |
| эйәк | ийәк | подбородок |
| ашҡаҙан | ашҡадан | желудок |
| эсәк | ичәге | кишечник |
| эс | ич | живот |
| сираҡ, енсек | балтыр | голень |
| **Кешенең тышҡы ҡиәфәте, холҡо һәм сифаттарына бәйле һүҙҙәр** | | |
| ҡиәфәт | ҡыйәфәт | внешность |
| тәпәшәк | тәбәшәк | низкий |
| ҡаҡ һөйәк | шыр сөйәк | костлявый |
| һаҡал | саҡал | борода |
| түңәрәк бит | түгәрәк жөз | круглое лицо |
| һипкел | сипкел | веснушки |
| һулаҡай | сулағай | левша |
| ғәҙел | ғәдел | справедливый |
| аңлы | аңны | сознательный |
| аңра | аңғыра | болван |
| йөклө | ауырлы | беременная |
| **Тормош ихтыяждары, халыҡ йәшәгән урындарға бәйле һүҙҙәр** | | |
| тыҡрыҡ | тыҡырыҡ | переулок |
| тәҙрә | тәрәзә | окно |

| | | |
|---|---|---|
| инеү | керү | войти |
| сисенеү урыны | шишенү урыны | раздевалка |
| бәҙрәф | бәдрәф | туалет |
| болдор | тупса төбө | крыльцо |
| баҫҡыс | баскыч | лестница |
| мейес | пич | печь |
| мунса | мунча | баня |
| аҙбар | абзар | сарай |
| сүп-сар | чүп-чар | мусор |
| эскәмйә | скәмбийә | лавочка |
| таған, бәүелсән | атынгыч | качели |
| ҡоҙоҡ | ҡойо | колодец |
| кәртә | киртә | жердь |
| **Көнкүреш әйберҙәре, хеҙмәткә бәйле һүҙҙәр** | | |
| ултырғыс | урындыҡ | стул |
| шаршау | чаршау | занавеска |
| таҫтамал | тастымал | полотенце |
| кәштә | киштә | полка |
| сынаяҡ аҫты | жәйпеч | блюдце |
| балғалаҡ | бәләкәй ҡалаҡ | чайная ложка |
| тәрилкә | ҡоштабаҡ | тарелка |
| бысаҡ | пычаҡ | нож |
| сүмес | баҡырач | половник |
| ижау, сүмес | чүмеч | ковш |
| битон | битун | бидон |
| ҡайсы | ҡачы | ножницы |
| еп | жеп | нитка |
| һепертке | себерке | веник |
| һоҫҡо | сосҡо | совок |
| сумаҙан | чумадан | чемодан |
| һандыҡ | сондоҡ | сундук |
| сүкеш | чүкеч | молоток |
| тәртешкә | кисәүгач | кочерга |
| **Аҙыҡ-түлек, эсемлектәргә бәйле һүҙҙәр** | | |
| һурпа | шулпа | бульон |
| бәрәмәс | пирәмәч | перемяч |

| | | |
|---|---|---|
| айран | әйрән | айран |
| былау | плау | плов |
| билмән | пилмин | пельмени |
| йомортҡа | күкәй | яйцо |
| картуф | бәрәңге | картофель |
| иҙелгән  картуф | төйөлгән бәрәңге | картофельное  пюре |
| борсаҡ | борчаҡ | горошек |
| бутҡа | ботҡа | каша |
| тары бутҡаһы | дары ботҡасы | пшенная каша |
| ярма | жарма | крупа |
| икмәк | ипи | хлеб |
| бәлеш | бәлиш | пирог |
| шәкәр | шикәр | сахар |
| сөсө | төчө | пресный |
| икмәк ҡырҡыу | икмәк кисү | резать хлеб |
| аслыҡ | ачлыҡ | голод |
| ас ҡарынға | ач ҡорсаҡҡа | на голодный желудок |
| **Кейем-һалым  менән  бәйле  һүҙҙәр** | | |
| эшләпә | шләпә | шляпа |
| яулыҡ | жаулыҡ | платок |
| күлдәк | күлмәк | платье |
| яға | яҡа | воротник |
| сепрәк-сапраҡ | чүпрәк-чапраҡ | тряпка (разг.) |
| **Һаулыҡҡа  ҡағылышлы  һүҙҙәр** | | |
| хәстәхана | бальнис | больница |
| тымау | томау | насморк |
| йүтәл | жүтәл | кашель |
| сөскөрөү | төчкөрү | чихать |
| һуштан яҙыу | ушын юғалту | упасть в обморок |
| ҡаталау | ич ҡату | запор |
| шырау | шырпы | заноза |
| ауырыу | чирләү | болеть |
| һауығыу | терелү | выздоровить |
| **Хайуандар,  ҡоштар, бөжәктәргә  бәйле  һүҙҙәр** | | |
| кәзә | кәжә | коза |
| сусҡа | чучҡа | свинья |

| | | |
|---|---|---|
| ҡомаҡ | ҡомоҡ | крыса |
| терпе | керпе | еж |
| һеләүһен | рысь | рысь |
| әрмәнде | баҡа | жаба |
| бәрәс | бәкәй | ягненок |
| өйрәк | үрдәк | утка |
| тумыртҡа | туҡыран | дятел |
| ҡарышлауыҡ | селәүчен | гусеница |
| һыйыр | сыйыр | корова |
| бесәй | песи | кошка |
| үрмәксе | үрмәкеч | паук |
| турғай | чыпчык | воробей |
| һарыҡ | сарыҡ | овца |
| серәкәй | чирки | комар |
| күгәүен | кигәүен | овод |
| **Үҫемлектәр донъяһына бәйле һүҙҙәр** | | |
| шыршы | чыршы | ель |
| сәтләүек | чикләүек | орех |
| кесерткән | ҡычытҡан | крапива |
| ҡарағат | ҡарлыған | смородина |
| муйыл | шоморт | черемуха |
| бойҙай | бодай | пшеница |
| тары | дары | просо |
| көнбағыш | чемечке | подсолнечник |
| сөгөлдөр | чөгөндөр | свекла |
| сәкән | кәчән | початок |
| кәбеҫтә | кәбестә | капуста |
| һуған | суған | лук |
| һарымһаҡ | сарымсаҡ | чеснок |
| ылымыҡ | баҡа 5ифәге | водоросль |
| ҡарағай | нарат | сосна |
| бәшмәк | гөмбә | гриб |

## Фонетик үҙенсәлектәр

| Өндәрҙең күсеүе, сиратлашыуы | Башҡорт әҙәби телендә | Туймазы районы Балтай ауылының һөйләү телендә |
|---|---|---|
| | | |

| | | |
|---|---|---|
| **Һуҙынҡы өндәр** | | |
| Ә-и | кәм | ким |
| | кәрәк | кирәк |
| | тәрән | тирән |
| | кәңәш | киңәш |
| | кәртә | киртә |
| И-э(е) | иреү | эрү |
| | еҫ | ис |
| О-у-ө-ү | томбойоҡ | төмбойоҡ |
| | битон | битун |
| | бутҡа | ботҡа |
| | ғүмер | ғөмөр |
| | йүгереү | жөгерү |
| | һөйрәү | сүрәү |
| | өйрәнеү | үрәнү |
| А-ә | айран | әйрән |
| А-о | ҡомаҡ | ҡомоҡ |
| А-ы | таҫтамал | таҫтымал |
| **Тартынҡы өндәр** | | |
| Б-п | билмән | пилмин |
| | бысраҡ | пычыраҡ |
| | бесән | печән |
| | бәрәмәс | пирәмәч |
| | былау | плау |
| Һ-с-ҫ | һыйыр | сыйыр |
| | уҫаҡ | усаҡ |
| | баҫыу | басу |
| | һарыҡ | сарыҡ |
| Т-д | тулҡын | дулҡын |
| | тары | дары |
| | тиҫтә (десяток) | дистә |
| С-т | сөсө | төчө |
| | сөскөрөү | төчкөрү |
| С-ч | сирек | чирек |
| | борсаҡ | борчаҡ |
| | аслыҡ | ачлыҡ |
| | сепрәк | чүпрәк |

| | | |
|---|---|---|
| Й-5 | йыйыу | жыю |
| | йомро | жоморо |
| | йөн | жөн |
| Л-н | бесәнлек | печәннек |
| | сабынлыҡ | чабынныҡ |
| Ҙ-д | сумаҙан | чумадан |
| Ғ-ҡ | яға | яҡа |

Тәҡдим ителгән проект буйынса эшләп, мин *Балтай ауылы* халҡы теленең бик бай иткәненә инандым. Һөйләш теле — телебеҙҙең байлығы. Уны һаҡлап ҡалыу һәр беребеҙҙең бурысы. Диалекттың йәшәргә хоҡуғы ҙур, сөнки унда беҙҙең тарих, тамыр ята. Әлбиттә, телевидение, радио һәм башҡа даирәләрҙә тик әҙәби тел ҡулланылырға һәм телевидениела, радиола яңғыраған телмәр һәр кешегә матур әҙәби телдә дөрөҫ һөйләү өлгөһө булырға тейеш.

## Ҡулланылған әҙәбиәт


1. Ишбулатов Н.Х. Башҡорт теле һәм уның диалекттары. Өфө, 2000.
2. Миржанова С.Ф. Северо-западный диалект башкирского языка. Уфа, 1991.
3. Максютова Н.Х. Башкирские говоры, находящиеся в иноязычном окружении. Уфа, 1996.
4. Сабирьянова С.Г. Наименование пищевых продуктов в башкирских говорах. Уфа, 2009
5. Башҡорт теленең диалекттары һүҙлеге. Өфө, 2002
6. Рәсәй халыҡтары телдәре диалектологияһының көнүҙәк мәсьәләләре. Өфө, 2010.



**Кайбышева Ынйы Рәсих ҡыҙы,** 9-сы класс

Фәнни етәксеһе**: Кайбышева Альбина Хәсән ҡыҙы**


# ЕЙӘНСУРА РАЙОНЫ ИҘӘШ АУЫЛЫНЫҢ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

Мин — Өфө ҡалаһы ҡыҙымын. Һәр йыл һайын Ейәнсура районының Иҙәш ауылында йәшәгән өләсәйем янына ҡунаҡҡа ҡайтам. Ауылда миңә бик оҡшай. Өләсәйем *Дәүләтбәкова Фәниә Заһит* ҡыҙы бик күп белә. Уның менән еләк, муйыл йыйырға барабыҙ, ул миңә ауыл менән бәйле булған төрлө мажаралы хәлдәрҙе, географик объекттарҙың атамаларын, уларҙың тарихын, легендаһын һөйләй.

*Иҙәш* ауылы тәүҙә *Иҙәш-Бикбирҙе* тип аталған. Сөнки был төбәккә *Бикбирҙе* тигән йөҙ башы беренсе булып нигеҙләнгән. Хәҙер ауыл исеменең беренсе өлөшө генә ҡалған һәм күптәр уны *Иҙәш* тип белә. *Иҙәш* тигән ауылдар тағы ла Әбйәлил районында (*Иҙәш–Ҡусҡар*), Шаран районында (*Иҙәш-Көстәй*) бар. Ҡайҙалыр уҡыуымса, *иҙәш* һүҙе «тәмле, татлы» тигәнде аңлата. Тимәк, был исем шул ауылда аҡҡан йылға, шишмәнең һыуы, уның тәме менән бәйлелер. *Иҙәш* ауылы уртаһынан *Аҡдәүләт* тигән ауылдан башланған һалҡын һыулы *Иҙәш йылғаһы* аға. Унда тик таҙа һыуҙа була торған *бәрҙе, бағры* балыҡтары бар. Билдәле булыуынса, заманында улар хатта Ырымбур губернаторы Перовскийҙы ла ҡыҙыҡһындырған. Уның был төбәктә булыуы тураһында «*Московка*», «*Генерал юлы*» тигән юл исемдәре һөйләй.

*Иҙәш ауылы* тауҙар араһында ултыра. Өләсәйемдең өйөнә артҡы яҡтан мөһабәт *Болантау* һуҙылған. Исеменән үк аңлашылыуынса, элек был тауҙа боландарҙы күрергә мөмкин булған. Улар ошо тауҙан сығып, сылтырап аҡҡан шишмәгә һыу эсергә төшкән. Шуға *күрә Болан шишмәһе* лә шулай атала.

Ауылдан ете-һигеҙ километр алыҫлыҡта *Яҡшылар йылғаһы* аға. Ауырыу кешеләр ошонда килеп аяҡ-ҡулдарын, биттәрен йыуған һәм һауыҡҡандар. Дауалау көсө булған был йылға буйында кешеләр боронғо замандарға ҡараған тәңкәләр ҙә тапҡан. Тимәк, халыҡ үҙен һауыҡтырған был йылғаға рәхмәт әйтеп, аҡса ҡалдырған һәм, исеменән күренеүенсә, унан тик яҡшылыҡ, изгелек күргәнгә, *Яҡшылар йылғаһы* тип атаған.

Өләсәйемдең бесәнлеге ауылдан ете-һигеҙ километр алыҫлыҡта. Унда барғансы бер нисә шишмә күрәһең, күптән булған хәлдәрҙе — ата-бабаларҙың тарихын һаҡлаған ерҙәрҙе осратаһың. Мәҫәлән, *Үрге Үткәрмә* һәм *Түбәнге Үткәрмә* тип аталған ерҙәр барымта-ҡарымта булған осорҙарға барып ялғана.

Бер заман шулай ҡаҙаҡтар барымтаға килгәндә, бер бабай кесе улы менән килененә — бер тауға, икенсе улы менән килененә йылға үрендәге икенсе тауға менеп, ҡаҙаҡтарҙы уҡтан үткәрергә ҡуша. Ә үҙе суҡмар менән уларҙы тар-мар итә башлай. Кире ҡасҡан ҡаҙаҡтар кесе улы менән килененең һөжүменә осрайҙар ҙа ҡотолор өсөн үрге тарлауыҡҡа ҡасалар. Ә унда инде бабайҙың икенсе улы менән килене уҡ менән ҡаршылай уларҙы. Батыр ҡарт үҙе ҡаҙаҡтарҙы баҫтыра, үҙе улдарына «Үргә үткәрмә!», «Түбәнгә үткәрмә!» тип әмер бирә икән. Шунан һуң халыҡ был урынды *Түбәнге Үткәрмә, Үрге Үткәрмә* тип йөрөтә башлаған.

Өләсәйемдең картуф сәскән баҡсаһынан алыҫ булмаған бер урын *Тирмән туғайы* тип йөрөтөлә. Элек бында — *Иҙәш йылғаһы* буйында һыу тирмәне булған. Бер заман *Әбүләис* тигән ауылдан бер кеше он тарттырырға килгән булған. Ҡайтып барғанда уны *Өлкәр тауындағы* йылға буйындағы ҡыуаҡлыҡта һағалап тороп, онон тартып алып, үҙен үлтереп ташлап китәләр.

Аты хужаһыҙ ауылға ҡайтып инә. Ауыл халҡы *Һужәне* шул ҡыуаҡлыҡта табалар, һәм был урынды һәм йылғаны уның исеме менән *Һужә* тип йөрөтә башлай.

*Был эшемдә өләсәйем Дәүләтбәкова Фәниә Зәһит ҡыҙы һөйләгәндәрҙе һәм Марат Сәйфулла улы Түләбаевтың "Йәнтөйәктең хәтер хазинаһы" тигән китабын (191-197 биттәр) ҡулландым.*

**Ҡаһарманова Гөлиә Рауил ҡыҙы**,7-се класс
Фәнни етәксе: **Мөхәмәтов Вәхит Ғибат улы**

## БӨРЙӘН РАЙОНЫ ТОПОНИМДАРЫНЫҢ ЯҺАЛЫУ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Ни өсөн яңғыҙлыҡ исемдәр тел өлкәһендә беренсе урында тора? Яуап ябай: теләһә ниндәй атама, кемгә йәки нимәгә ҡарауына ҡарамаҫтан (кешегә, хайуанға, географик урынға һ.б.), иң тәү сиратта һүҙ, сөнки ул тел системаһына инә, уның закондары буйынса йәшәй. Тел белемендә ономастика бүлеге тап бына ошоларҙы өйрәнә. Был тикшеренеү эше Бөрйән районы топонимдарының ономастикаһын, йәғни яңғыҙлыҡ исемдәрен грамматик яҡтан өйрәнеүгә арналды.

"Һуңғы осорҙа халыҡтың үҙ тарихына, мәҙәниәтенә, шулай уҡ киләсәгенә иғтибары арткандан-арта, йәғни башҡорт халҡының милли үҙаңы уяна, үҫә һәм нығый. Әлбиттә, был процестан тел дә ситтән тороп ҡала алмай, сөнки тел милләтте билдәләүсе мөһим күрһәткес булып һанала. Тел күренешенең мөһим компоненты булып торған төрлө атамалар (кеше исемдәре, ҡушаматтар, географик атамалар һ.б.) халыҡ тормошоноң бөтә дәүерҙәрендә лә уның юлдашы вазифаһын башҡарған һәм бөгөнгө көндә лә башҡара. Шуға күрә лә яңғыҙлыҡ исемдәр донъяһын өйрәнеү — ул туған телдең төрлө билдәләрен асыҡлау һәм тасуирлау, халыҡтың көнкүрешен, тарихын, территориаль тел үҙенсәлектәрен тикшереү кеүек процестар менән бергә, комплекслы рәүештә алып барыла. Топонимдарҙың яһалыу сығанағы — туған телдең дөйөм лексик байлығы", — тип яҙҙы Рәшит Шәкүр үҙенең "Ерҙең хәтер китабы" тигән хеҙмәтендә. Атамаларҙың кешене уратып алған мөхиттә бик күп булыуы, телдә ҡулланылыуы кешеләрҙе элек-электән ҡыҙыҡһындырған, һәм уларҙы өйрәнеү кәрәклеге мөһим мәсьәләләрҙең береһенә әйләнгән. Был эштә, Бөрйән районы ерлегендә барлыҡҡа килгән һәм тупланған ер-һыу атамаларына таянып, төҙөлөшөн (һүҙьяһалышын) өйрәнеү маҡсат итеп ҡуйылды. Был эшкә мөрәжәғәт итеү сәбәптәренең

береһе тағы ла шунда: ваҡыт үтеү менән, ҡайһы бер атамалар юғала. Топонимдарҙың лексик-семантик мәғәнәһен асыҡлап, халыҡтың йәшәү, аң, фекерләү даирәһен, уй-хыял кимәлен, телдәге үҙгәрештәрҙе белеп була.

## Бөрйән районы топонимдарының яһалышы

Эшкә әҙерлек барышында тыуған яҡты өйрәнгән тарих уҡытыусыһы Дамир Зиннәт улы Аллабирҙиндың район китабы өсөн йыйған материалдары төп сығанаҡ булып торҙо. Тикшерер өсөн бөтәһе 502 атама тупланды. Шулай уҡ Рәшит Шәкүрҙең "Ерҙең хәтер китабы" менән таныштыҡ. Һүҙьяһалыш буйынса төркөмләүҙә унығ принцибы файҙаланылды.

Топонимдар халыҡ тарихы, этник процестар менән тығыҙ бәйләнгән. Ырыу, ҡәбилә, хатта ара исемдәре билдәле бер урынды, ауылды, йылғаны, тауҙы, районды белдереп, топонимияла нығынып ҡалалар.

Тикшерелгән материалдарҙа объекттың үҙенсәлегенә, мәҫәлән, тауышҡа оҡшатып, яһалған топонимдар бар. Уларға *Шаңғырауыҡ* ҡаяһы, *Селтербикә йылғаһы // Сылтырбикә, Ҡуҡрауыҡ* йылғаһы һымаҡ атама йөрөткәндәре ҡарай. Шаңғырыуыҡ ҡаяһы эргәһендә саҡ ҡына тауыш та яңғырап тора, кире ҡайта. *Ҡуҡрауыҡ йылғаһының* Оло Нөгөшкә ҡойған ере бик текә, һыу күкрәү тауышы сығара. *Күкрәүектән*, әйтелешкә яраҡлаштырылып, *Ҡуҡрауыҡҡа* үҙгәртелгән.

Һәр бер телдә һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр мотлаҡ бер системаға, морфологик һәм грамматик закондарға буйһонған була. Топонимияла ла шул уҡ хәл. Улар үҙҙәренең һүҙьяһалыш формалары, төҙөлөшө яғынан ғәжәп төҙөк һәм тәбиғи система барлыҡҡа килтергәндәр.

Р.Шәкүр үҙенең хеҙмәте буйынса һүҙьяһалыш йәһәтенән өйрәнелгән атамаларҙы ҙур ике төркөмгә бүлеп йөрөтөргә мөмкин: ябай һәм ҡушма исемдәр. "Ғәҙәттә, төп килештә килгән һәм тамыры бер генә һүҙҙән торған, шулай уҡ тамыр һүҙгә ялғауҙар ҡушылып (йәғни морфологик юл менән) яһалған исемдәр ябай атамалар төркөмөнә ҡарай", – тигән.

Топонимдарҙы һүҙьяһалыш яғынан төркөмләүҙә мәктәп программаһында үтелгән "Һүҙьяһалыш" темаһы буйынса төркөмләү ҡулайыраҡ, сөнки ул киң ҡатлам уҡыусыларына аңлайышлы. Был бүлек буйынса эшләгәндә, мәктәптә алған белемдәрҙән тыш, Усманова М.Ғ., Абдуллина Ф.Ф. әҙерләгән ҡулланма ла ҙур ярҙам итә.

### Ябай атамалар

Улар үҙҙәре ике төркөмгә бүленә:

**Тамыр һүҙҙән торған топонимдар.** Күбеһенсә кеше исемдәренән, этно-нимдарҙан торалар.

Кеше исемдәренән: *Нөгөш, Монасип, Нәби, Рақай*. һ.б.

Этнонимдарҙан: *Ямаш, Мишәр, Ҡалмаҡай, Ҡыпсаҡ, Һарт* һ.б.

Шулай уҡ сифаттан, исемләшкән ҡылым формаларынан исемгә күсеп, атамаға, яңғыҙлыҡ исемгә әйләнгән киткән топонимдар бар:

Һандан: *Беренсе күпер, Бәргәҙә, Берлек, Бертеш, Бәштин* (*биш тин* һүҙенән), *Өсуй, Өстамаҡ, Өс туған ҡаяһы, Өсөйлө*,.

Сифатан: *Ҡыҫыҡ, Тәпәнәк, Һаһыҡ, Бәләкәй* һ.б. (1-се ҡушымта)

Ҡылымдан: *Етмәҫ, Шыуҙырғыс, Ығышма*, Байҡаш, Ҡалыу һ.б. (2-се ҡушымта )

Тамыр һүҙҙәргә төрлө һүҙ яһаусы ялғауҙар ҡушылыу менән барлыҡҡа килгән атамалар: *Таш+<u>лы</u>, Кәртә+ле, Күпер+<u>ҙ(л)е</u>, Ҡайраҡ+<u>лы</u>, Өйрәк+<u>ле</u>, Уҫаҡ+<u>лы</u>, Йүкә+<u>ле</u>, Аһы+<u>лы</u> (асалы* һүҙенән) һ.б. Был төрҙәге атамаларҙы яһалма сифаттарға индереп була. (3-сө ҡушымта)

Тағы ла шуны әйтергә кәрәк: ҡайһы бер атамаларҙың этимологияһын белмәй тороп, уның яһалышын билдәләү мөмкин түгел. Ундайҙарға *Имес, Йәүгәҙе, Һөрөмбәт* һымаҡтар инә.

## Ҡушма атамалар

Ябай (бер һүҙле) топонимдарҙан айырмалы рәүештә, ер-һыу атамаларының был төрө ике йәки өс, һирәкләп унан да күберәк һүҙҙән тора.

**Һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән** яһалғанда топоним составындағы аныҡла-ныусы һүҙ (ғәҙәттә географик термин) аҙаҡта тора. Мәҫәлән, *Аҡтау* атамаһында аҡ төҫтө, тау географик атама. Был хәл ер-һыу исемдәренең эске тәбиғәте, объектҡа айырым бер характеристика биреү кәрәклегенән килеп сыҡҡан. Миҫалдар: *Таҡыясусаҡ, Аратау, Аҡташ, Артышлытау, Аҡбейек, Ташкүпер, Ташкисеү, Күркәтау, Ҡаратау, Оҙонуй* һ.б. (4-се ҡушымта)

Атамаларға тағы бер термин өҫтәлергә мөмкин: *Аратау <u>ауылы</u>*, Оҙонуй *<u>тамағы</u>, Өстамаҡ <u>йылғаһы</u>*, һ.б. Был ваҡытта **бәйләү юлы менән яһалған ҡушма һүҙ** барлыҡҡа килә. Һүҙҙәрҙе бәйләү юлы менән яһалған топонимдар күпселекте тәшкил итә. Мәҫәлән, *Аҡһыйыр яланы, Артыш тауы, Бәйет тауы, Баҙ тауы, Бесәй ояһы* һ.б. (5-се ҡушымта)

Ҡушма атамаларҙы тағы һүҙбәйләнеш тибы буйынса ла төркөмләп була. **Һөйкәлеү юлы менән** атамалар яһалыуҙың үҙенсәлеге шунда: тәүге һүҙ төп килеш формаһында тора, ә аныҡланыусы 3-сө зат формаһында була: *Ғәлиәкбәр(ҙең) ауылы, Риф(тең) күле, Нөгөш(төң) йылғаһы, Күл(дең) тамағы,* һ.б. Был осраҡта эйәреүсе һүҙҙең эйәлек килештәге ялғауы төшөп ҡала, формаль яҡтан төп килештә тора.

Йәнәшәлек юлы менән атамалар осрай: *Яңғыҙ ҡарағай, Сыбарайғыр, Суҡҡарағас, Суҡмуйыл, Оло Салажы.*

**Башҡарылыу юлы менән** яһалған топонимдар -ған, -ҡан ялғауҙарына бөткән ҡылым формалары менән уртаҡлыҡ исемдәрҙән тора. Ҡылым формаһындағы һүҙ аҙаҡта тора: *Айыу(ҘЫ)атҡан, Айыу(ҘЫ)алған, Яулыҡ(ТЫ)киҫкән, Мыш(ы)(НЫ)атҡан, Тәкә(НЕ)һуйған, Ҡыҙҙар(ҘЫ) айыу ашаған ер, Баҙ(ҘЫ)яҡкан соҡор, Май(ҘЫ)ғойған, Борсаҡ(ТЫ)һуккан*. Тәүге компонент билдәһеҙ төшөм килештә тора, билдәле төшөм килештә тороуынан кәрәклеге бөтөнләй юҡ.

**Ярашыу юлы менән** барлыҡка килгән топонимдар морфологик яҡтан 3-сө зат яңғыҙлыҡ йәки уртаҡлыҡ исем һәм -ған, -ҡан ялғаулы ҡылым формаһынан торған һөйләмде хәтерләтә: *Быҙаулгән, Бүрәнәшыуған, Ҡыҙүлгән, Мерәҫкиткән, Ҡыҙҙаргиткән, Йәнһыуалған, Йәнһөйәр, Ҡыҙүлгән, Санатөшкән, Танасыҡкан, Тарбаҡ бөтә, Туйбуға(туй бул-ған), Төлкосҡан, Урыҫ килгән, Шәшкеҡасҡан, Әсебар*.

Йөкмәткеһе һәм һүҙ төҙөлөшө яғынан **фонетик үҙгәреш кисергән** атамалар: *әрл(ҙ)әттенән — Әрҙәкле, аҡһырғаҡтан — Аҫкараҡ,кукрәүҙән – Ҡоҡрауыҡ, суҡ уҫаҡтан — Суһаҡ, ыҫмаланан — Ыхмайыл, Боғасы (Бүгәсәү), Мәтәл, Өмөткән, Сәңгелде яланы, Һәүәнәк, Әлмәс ҡотоғо, Әүҙекте йылғаһы.*

**Ҡыҫҡартылған һүҙҙәр** ҙә осрай: **РТС** – *Курғашлы* ауылының элекке исеме, **Йәнсалай** – *Йәнғәле + Сәләхетдин(ай), Ҡыҫҡуй, Химзавод, Бәләтар тауы.*

**Иркәләү, кесерәйтеү ялғауы** ҡабул иткән атамалар: *Мәрйәкәй, Си-бә(р)кәй.*

Шулай итеп, Бөрйән районы топонимдарының бер өлөшөн тикшереү атамаларҙың төҙөлөшө һәм яһалышы яғынан иң күп ҡулланылған төрҙәрен күҙ алдына баҫтырҙы. Төҙөлөшө буйынса ябай һәм ҡушма атамалар бер күләмдә тиерлек. Ябай атама аҙағынан тәүге өлөштө асыҡлаусы һүҙ килеп ҡушма һүҙ барлыҡка килә. Күберәк ҡушма атама ҡыҫҡартылып, урындың исеме әйтелмәй, ә уның аталышы ғына ҡулланыла. Халыҡ *Нәби, Нәби ауылы* тиһә лә бер үк урын — ауыл күҙ алдына килә. Күренеүенсә, икенсе компоненттың кәрәклеге юҡ. Мәҫәлән, *Тимер ауылына барам — Тимергә барам*.

Морфологик анализ шуны күрһәтте: топонимдар яһалғанда, тамыр һәм яһалма сифаттар күп ҡулланыла. Мәҫәлән, *аҡ + тау = Аҡтау, кесе + Нөгөш = Кесе Нөгөш; кәртә + ле = Кәртәле, таш + лы = Ташлы*. Бындай формаға өҫтөнлөк биреү сифаттарҙың функцияһынан килә. *-лы/-ле, -та/-тә, -ҙы/-ҙе, -ай/-әй, -са/-сә* ялғауҙары атама яһалғанда киң ҡулланыла. Мәҫәлән, *Кәртәле, Кәмә(с)ше, Күперҙе, Ҡурыуҙы, Урыһ(ҫ)ай, Сукраҡты.*

Төп сифаттар топонимдың туранан-тура билдәһен белдерә. *Аҡтауҙа* аҡ төҫтәге таштар күп, *Ҡыҙылъерҙә* мәтеһе күренеп ята. Шартлы сифаттар

топонимдарҙа предметтың булыу-булмауына, ваҡытҡа, урынлашыуына бәйле: *Муйыллы туғай Яҙғы йорт, Көҙгө йорт, Ҡарағасйорт, Уртайорт.*

Исемдәр. Топонимдар яһалғанда, кеше, хайуан, үлән, ағас, ил исемдәре, ҡушаматтар ҡулланылған. Шул уҡ ваҡытта ил исемдәре (*Афғанистан, Пакистан*) һирәкләп осрай. Рус теленән ингән атамалар үҙгәртелеп тә (*Боғасы* — Пугачев тауы), үҙгәртелмәй ҙә (*Завод, Волков* һ.б.) ҡулланыла. Улар исем һүҙ төркөмөнән. Ғәлиәкбәр ауылына ҡараған топонимдар араһында *Нехочу* исемен йөрөткән аҡландың атамаһы рус теленән, ҡылымға ҡарай.

Тикшерелгән топонимдарҙа бүтән һүҙ төркөмдәре — һан, ҡылымдың һөйкәлештәре һәм төркөмсәләре ҡулланыла. Улар яңғыҙ ҙа (***Етмәҫ***, ***Ҡалыу*** һ.б.), ҡушма атама (***Беренсе** күпер*, *Кө**төүсе** яланы* (хәҙерге заман сифат ҡылым), *Ҡартүл**гән*** (хәбәр һөйкәлешенең үткән заманы) һ.б. яһалғанда ла ҡулланылалар.

Ымлыҡтарҙан, оҡшатыу һүҙҙәре лә атамалар яһауҙа ҡатнашалар: ***Сың**(ҡ)ғырауыҡ,* ***Сылтыр**бикә,* ***Шаң**(ҡ)ғырауыҡ.*

Ябай атамалар тамырҙан һәм тамырға яһаусы ялғау ҡушылыу юлы менән яһалған һүҙҙән тора. Ҡушма атамалар һүҙҙәрҙе ҡушыу һәм бәйләү юлы менән барлыҡҡа килгәндәр. Һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу юлы менән 2 атама табылды. *РТС* – ремонтно-техническая станция (был урында тәүҙә ошо объект төҙөлә, һуңынан ауыл барлыҡҡа килеп, *Ҡурғашлы* исемен ала, сөнки ошо уҡ исем йөрөткән йылға буйында урынлашҡан), *Йәнсалай* — *Йәнгәле* һәм *Сәләхетдин* (ҡушаматы *Салай*) һүҙҙәренән алынған.

Йәнәшәлек юлы менән атамаларҙы дөрөҫ яҙыу йәһәтенән ауырлыҡтар осрай. Матбуғатта ике төрлө яҙыу осраҡтары күренә. Мәҫәлән, *Суҡҡарағас яланы* — Суҡ ҡарағас яланы.

Ниндәй юл менән яһалыуына ҡарамаҫтан, урынды белдергән атамалар исемләшә һәм уның бөтә категорияларында (күплек һандан тыш) үҙгәрә. Күплек категорияһында ауыл атамаларын ғына ҡулланып була: *янһарылар, ғәлиәкбәрҙәр*, йәғни ошо ауылда йәшәүселәр. Үҙләштерелгән һүҙҙәргә ҡараған *Финляндия, Япония* һымаҡ ҡушамат йөрөткән урында йәшәүселәрҙе *финдар, япондар (японецтар)* тип йөрөтөү телдә, һәр хәлдә Бөрйән халҡы телендә нығынған.

Шулай итеп, икенсе гипотеза раҫланды: топонимик материал тел закондары буйынса йәшәй. Улар телдең айырылғыһыҙ бер өлөшө.

### Ҡулланылған әҙәбиәт


1. Башҡортостан Республикаһының топонимдар һүҙлеге. Өфө, 2002.
2. Район китабына йыйылған топонимик материалдар.
3. Усманова М.Ғ., Абдуллина Ф.Ф. Башҡорт теле. Өфө ”Китап”, 2000.

4. Шәкүр Р.З. Исемдәрҙә – ил тарихы. Өфө, 1993.

## Ҡушымталар

1-се ҡушымта

**Сифат:** Ағиҙел, Аҡбалсыҡ йылғаһы, Аҡбейек, Аҡҡашҡа, Аҡбулат, Аҡтау, Аҡһыйыр яланы, Аҡсабикә, Аҡташ, Алағуян, Алағуян башы, Арҡыры йылға, Байғаҙы, Байтулла, Байғотоҡ, Баймырҙа, Байназар, Бейеккүпер, Бәләкәй, Бәләкәй Аҡбейек, Бәләкәй, Ҡыҙылташ, Бәләкәй Ҡыпсаҡ, Бәләкәй Салажы,Бәләкәй Соңғор, Бәләкәй Шәйек, Иҫке Монасип, Иҫке Мөсәт,Иҫке Собханғол, Иҫке Тарыуал, Иҫкеҙма, Кесе Нөгөш, Кесе Нөгөш тамағы, Күкбесән, Күктәкә, Күкьятыу, Ҡаҡсыр, Ҡарабешә, Ҡарағошто, Ҡарағол, Ҡаратау, Ҡараңғуй, Ҡараһыйыр, Ҡартөй, Ҡараһөбә, Ҡарасура ҡәбере, Ҡаршытау, Ҡаршы туғай, Ҡумырт кисеү, Ҡушйылға, Ҡыҙылташ, Ҡыҙыл ер, Ҡыҙылъяр, Ҡыуғарағай, Ҡырташ, Ҡырын ер, Ҡыҫҡуй, Ҡыяюл, Оҙонуй, Оҙонсал, Оҙон ялан, Олоғор, Олоҡыҙылташ, Олотау, Ослотау, Оло күл, Оло Нөгөш, Оло Салажы, Оло Соңғор, Өлкән Аҡбейек, Ситҡыр, Суҡмуйыл, Суҡтал, Суһаҡ, Сыбарайғыр, Сыуаҡай, Тарҡын туғайы, Текәморон, Туҡалбаш, Түбәнге ауыл, Тәрәнгисеү, Тәрәнуй, Тәпәнәк, Уртағыр, Уртайорт, Һыуыҡҡолаҡ, Һимеҙтай, Шыйыҡ бутҡа, Әсе, Әсебар, Яңы Мөсәт, Яхъя күле, Яңғыҙ ҡарағай

2-се ҡушымта

**Ҡылым:** балай, Абыҙгилде, Айғыр ҡороҡмаған, Айыусапҡан, Аллабирҙе, Атъяҡкан, Баҙ яҡҡан соҡор, Башмаҡшыуған, Бейгилде, Бәләтар тауы, Бохмаш(боҫоу), Бурама тауы, Бүрәнәшыуған, Быҙау үлгән, Бәләтар, Етмәҫ, Йылҡысыҡҡан, Йүкәле, Йәйпе, Йәйпегир, Йәнһыуалған, Йәнһөйәр, Күтәрмәле яланы, Көтөүсе яланы, Көрәй тауы, Көрәште, Кәмә сығышы, Ҡалыу, Ҡасыу юлы(Ҡасыюл), Ҡатайғошҡан (Ҡатай һуғышҡан), Ҡалғаһау, Ҡоръятмаҫ, Ҡурыуҙы, Ҡушйылға, Ҡыҙҙарҙы айыу ашаған ер, Ҡыҙүлгән, Ҡыҫыҡ, Майғойған, Майсергән, Мерәҫ киткән юл, Өйрөлтмәк, Өмөткән, Өмөткән яланы, Санатөшкән, Сатра, Сыуаҡай**,** Тарбаҡ бөтә, Туйбуға(туй булған), Туҡмаҡ, Төлкосҡан, Тәкәһуйған, Урыҫ килгән, Шыуҙырғыс, Шәшкеҡасҡан, Ығышма, Янған ҡыуыш, Яулыҡ киҫкән.

3-сө ҡушымта

**Яһалма сифаттар.** -лы/-ле, -та/-тә, -ҙы/-ҙе, -ай/-әй, -са/-сә, -лыҡ/-лек ялғауҙары: Айыуҙы, Артышлытау, Аһылы (Асалы), Берлек, Бирелейорт, Бүтәгәле, Йыландуй, Йүкәле туғай, Киндерҙ(е)уй, Күгәүенле яланы, Күтәрмәле яланы, Күперҙе, Кәртәле, Кәртәле ялан, Ҡайраҡлы, Ҡарағошто, Ҡандыбил, Ҡабырсаҡлы, Ҡурғашлы, Ҡурыуҙы, Маҙалы, Муйыллы төбәк (Муйылтүбә, Муйыллы туғай, Муйылтөп, Мәйгәште, Ослотау, Оҫҡонлоғор, Өйрәкле, Өсөйлө, Саталыүҙәк, Сейәлетау, Суҡраҡты, Ташлы, Уҫаҡлыуй, Һабансы, Һарналы, Шәреле (Шүрәле уй), Ырғыҙлы, Әүҙекте йылғаһы, Яҙғыйорт, Ямашлы.

4-се ҡушымта

**Һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән яһалғанда топонимдар:** Абыҙгилде, Ағиҙел, Айыуала, Айыуатҡан, Айыусапҡан, Айһылыу, Аҡбейек, Аҡбулат, Аҡтау, Аҡсабикә, Аҡташ, Алағуян, Аллабирҙе, Аралғыр, Аралбай, Аралғыр, Аратау, Арғыҙма, Арыҡтай, Артышлытау, Атайсал, Атъятҡан, Байтулла, Баланйорт, Байғотоҡ, Баҙъялан, Баймырҙа, Ба(о)тинкаташ, Башмаҡ шыуған, Бейгилде, Бейеккүпер, Бертеш, Бешәлетау, Бикташ, Бирелейорт, Борсаҡһыуҡкан, Бәштин, Бүләкташ, Бүрәнәшыуған, Бәләтар, Ғәҙелгәрәй, Елдәрҡа, Еләклетүбә, Иҙәнташ, Имәнйорт, Инсебикә, Исламбай, Иҫкеҙма, Йыландуй, Йылҡысыҡкан, Йәйпегир, Йәнгәрәй, Йәнһыуалған, Йәнһөйәр, Кейекбай, Килдеғол, Күсоя, Күкбесән, Күркәтау, Күктәкә, Күкьятыу, Көнтеймәҫ, Кәбәнғарағай, Кәбәнташ, Кәзәтау, Кәртәташ, Ҡайынсуҡы, Ҡаҡсыр, Ҡайынтуғай, Ҡарабейә, Ҡарағайсабын, Ҡарабешә, Ҡарағошто, Ҡарағол, Ҡаратау, Ҡараңғуй, Ҡараһыйыр, Ҡараһөбә, Ҡартөй, Ҡаршытау, Ҡатайғошҡан (Ҡатай һуғышҡан), Ҡалғаһау, Ҡарағасйорт, Ҡарайғыр, Ҡандыбил, Ҡаншал, Ҡоҙғонташ, Ҡоръятмаҫ, Ҡурпытуғай, Ҡушйылға, Ҡыҙылташ, Ҡыҙүлгән, Ҡыҙматаш, Ҡыҙылъяр, Ҡыҙылташ, Ҡыуғарағай, Ҡырташ, Ҡыҫҡуй, Ҡыяюл, Майғойған, Майсергән, Муйылтөп, Муллатуғай, Мусағәле, Мәндәғол, Нөгөшйорт, Оҙонуй, Олоғор, Олоҡыҙылташ, Олотау, Ослотау, Оҫҡонлоғор, Өйрәкташ, Өкөташ, Өсуй, Өстамаҡ, Өмөткән, Өсөйлө, Саҡмағош, Санатөшкән, Саталыүҙәк, Сейәлеморон, Суҡкарағас, Суҡмуйыл, Суҡтал, Сусҡаморон, Сыбарайғыр, Таҡыясусаҡ, Танасыҡкан, Таңбикә, Тарыбай, Ташкисеү, Ташкүпер, Ташморон, Ташөй, Текәморон, Туйбуға(туй булған) , Туҡалбаш, Туңмаҫкүл, Түбарҡа, Түбәйорт, Төлкосҡан, Төлкөташ, Тәкәғыр, Тәкәһуйған, Тәрәнгисеү, Тәрәнуй, Уралтау, Уртағыр, Уртайорт, Уҫағуй, Уҫаҡлыуй, Үргеҙма, Үтәйәмбәт, Һыуыҡколаҡ, Һәүәнәкташ, Һимеҙтай, Шүлгәнташ, Шыуматаш, Шәшкеҡасҡан, Этаяҡ, Әбделмәмбәт, Әлешйорт, Әсебар, Юрматау, Яҙҙауар, Яланайыры, Яуымбай, Яҙғыйорт.

**Һөйкәлеү юлы менән атамалар**

Ағиҙел ҡасабаһы, Аҡҡашҡа т., Аҡһыйыр яланы, Алағуян башы, Алағуян тамағы, Алпамыша ҡәберлеге, Андыҙ яланы, Арал тауы, Арыҫлан ҡарт соҡоро, Аҫҡараҡ тамағы, Аштыҡ уяһы, Бабсаҡ ҡәберлеге, Баҙ тауы, Батша ҡотоғо, Башҡорт утары, Бесәй ташы, Бесәй ояһы, Бөрйән йылғаһы, Бөрйән юлы, Бүтәү тауы, Бүре төбө, Бәғиҙә тауы, Бәйет тауы, Волков йәйләүе, Ғаффар утары, Ғүмәр ыҙмаһы, Ғәббәс утары, Ғәбит уяһы, Ғәзиз тауы, Ғәйниә ҡотоғо, Ғәле тауы, Ғәлиәкбәр соҡоро, Ғәлийән үҙәге, Дәүләтбай туғайы, Динислам тауы, Зөбәйлә ҡарандаһы, Зыя баҙы, Зыярат тауы, Зәкир солоғо, Зәмзәбикә шишмәһе, Имес төбө, Имес тауы, Имес туғайы, Ишбулды баҙы, Иҫәнбикә һаҙы, Йәмилә сабыны, Йәнсалай ҡоҙоғо, Капал өйө, Кейәүҙәр үҙәге, Кесе Нөгөш тамағы, Кинйәш тауы, Күкәй тауы, Күл тамағы, Күс юлы, Костер тауы, Көләмбәт юлы, Көтөүсе яланы, Кәмә сығышы, Ҡарас йылғаһы, Ҡарасура ҡәбере, Ҡоҙғон ҡаяһы, Ҡолош үҙәге, Ҡотоҡай баҙы, Ҡотло Булат түше, Ҡужан шишмәһе, Ҡыҙҙар тауы, Ҡыҙбикә мороно, Ҡыярат тауы, Лапшин утары, Маяҡ түбәһе, Мортаҙа яланы, Мулла түше, Мәрхәм күле, Мәсет тауы, Мәсет уяһы, Ноҡот тауы, Өкө ҡаяһы, Өкө ояһы, Өмөкамал төбәге, Өмөткән яланы, Өс туған ҡаяһы, Партизандар ҡыуаҡлығы, Риф күле, Рәмзи юлы, Рәхимйән ташы, Сабирйән түңгәге, Сания соҡоро, Сапа й. , Силос соҡоро, Сусҡа фермаһы, Сусаҡ үҙәге, Сәмиға күпере, Сәғит баҙы, Сәфәр утары, Сәфәр соҡор, Сәңгелдәк йылғаһы Татар үлеге, Тауыҡ фермаһы, Ураҙбикә юлы, Урыҫ юлы, Үлектәр арҡаһы, Үр яланы, Үртән буйы, Һарат уяһы, Шүлгән башы, Шәре башы, Шәрей, Шәрифә тауы, Яхъя күле, Хәҙрәт юлы, Хисам күле.

**Мостаева Н.Д.**, 6-сы класс уҡыусыһы
Фәнни етәксеһе: **Мостаева В.А**.

## БАЙМАҠ РАЙОНЫ ӘБДЕЛКӘРИМ АУЫЛЫ БУЙЫНСА ОНОМАСТИК МАТРЕРИАЛДАР

### Ауыл тарихы

Ауылыбыҙҙың башҡортса исеме — *Әбделкәрим*, русса — Абдулкаримово. Ауылыбыҙ 1786 йылда картала утар итеп күрһәтелгән. Ул Баймаҡ районында урынлашҡан.

Легенда буйынса, *Ерән сәсән карттың* өс улы була — *Кәрәкәй, Әбделкәрим, Мәргән.* Ысынлап та, *Әбделкәрим* ауылы эргәһендә *Кәрәкәй*

*тауы* бар. Беренсе тапҡыр *Әбделкәрим ауылы* 1795 йылда 1-се Түңгәүер волосы Орск өйәҙе Ырымбур губернаһы составында булыуы тураһында телгә алына.



“*Әбделкәрим* ауылын ҡайһы берҙә *Мышы*, тиҙәр. *Мышы* — мәжүсилек ваҡытынан ҡалған исем булырға тейеш. Ислам дине килеп ингәс, әлбиттә, онотолған. Тик бик һирәк кенә *Әбдел-Мышы*, тип әйтеүселәр осрай” (Информант Ғәбитов Ф.С. — тарих уҡытыусыһы).

Беҙҙең ауыл эргәһендә *Алғаҙы, Ҡыуат* ауылдары бар, шулай уҡ бөгөнгө көндә юҡҡа сыҡҡан *Вәли, Лайымбирҙе (Васильевка), Смаҡай (Ысмаҡай), Ислам* ауылдары ла булған.

“*Алғаҙы* ауылын икенсе төрлө *Нуғай* тип йөрөткәндәр. *Нуғайҙар* сорлаһа, йәй көнө — ямғыр, ҡыш көнө — буран булыр, тигәндәр. Йәй көнө һабантуй үткәрһәләр, оҙаҡ ҡына ямғыр яуыр ине. *Нуғайҙар* — өрөн (дәррәү) халыҡ. Бер эште башлаһалар, күмәкләшеп тотоналар һәм тиҙ генә эшләп тә ҡуялар. Бөгөн дә шулай улар.” (Информант — Урманова Ғәлиә Ғәлимйән ҡыҙы, мәғариф ветераны)

Хәҙерге көндә *Әбделкәрим* ауылында 7 урам, халыҡ һаны 465 кеше тирәһе.

## Ауыл урамдары

Әбделкәрим ауылы йәмле Һаҡмар йылғаһы буйында урынлашҡан. Йылғаға яҡын урынлашҡан урамды *Һаҡмар урамы*, тиҙәр.



Унан юғарырыҡ *М.Булатов исемендәге урам*. 2008 йылға тиклем был урам *Колхоз урамы* тип атала ине. *М.Булатов* исеменә ауылдашыбыҙ, кантон начальнигы, старшина *Мөхәмәдйән Ғәлиулла улы Булатов* хөрмәтенә үҙгәрттеләр һәм *Булатовтар* күп йәшәгән урамға бирҙеләр.

Ауылыбыҙҙың йәмле генә бер урынында *Мағаш урамы* һуҙылған. Был урамға исемде Һаҡмар йылғаһына ҡойған *Мағаш йылғаһы* бирә. Халыҡ телендә ул *Оло Юлыҡ* тигән исем менән дә йөрөй, сөнки йылға *Юлыҡ ауылынан* башлана. Был урамда башлыса йәштәр йәшәй.

Әбделкәрим ауылының иң оҙон урамдарының береһе булып *Хәбибулла Ғәбитов урамы* һанала. Урам исеме ауылыбыҙҙың күренекле шәхесе — сәсән, шағир, телсе, фольклорсы, драматург, “Ынйыҡай менән Юлдыҡай” драмаһының авторы, репрессиялар ҡорбаны *Хәбибулла Ғәбделҡаһир улы Ғәбитовҡа* бәйле.

*Хәбибулла Ғәбделҡаһир* улы Ғәбитов 1886 йылдың 1 майында хәҙерге Баймаҡ районының Әбделкәрим ауылында ярлы кустарь ғаиләһендә тыуған. Уға ярты йәш тигәндә ситтә батраклыкта йөрөгән атаһы, ике йәш ярымда әсәһе үлеп китә. *Ғәбитовтар* шәжәрәһенән күренеүенсә, Хәбибулла Түңгәүерҙең ун бишенсе быуыны. Үкенескә ҡаршы, уның яҡындары ҡалмай, үҙенең ике улы сабый саҡта вафат була, ата-әсәһе ҡулға алынғас, берҙән-бер ҡыҙы иленән ситтә, балалар йортонда үҫә. Ул — *Ләлә Хәбибулла* ҡыҙы *Ғәбитова*, Ҡаҙағстандың Ҡарағанда ҡалаһында йәшәй, шунда бухгалтер булып эшләп, хаҡлы ялға сыға. Әҙиптең ҡатыны, башҡорт зыялыһы, Темәс ауылының уҡымышлыһы Әбүбәкер Хөсәйеновтың ҡыҙы була.

*Хәбибулла* етем ҡалғас, уны күрше татар ауылы Юлыҡҡа алып барып ташлап китәләр. Алтын табыусы Рәмиевтарҙың балаларын ҡараша. Ҡышҡы һыуыкта яланаяҡ йөрөй, түбәтәйенә эҫе көл һалып, шуға баҫып, аяҡтарын

йылыта. Таналыҡ станицаһында имам-хатип булып торған башҡорт уҡымышлыһы *Ғәбитов Аҡмалетдин Камалетдин* улы ҡәрҙәш туғанының етемлеген ишетеп, килеп алып ҡайтып китә. Үҙенең мәҙрәсәһендә уҡыта. *Хәбибулла* ун йәшенән егерме йәшенә тиклем Аҡмалетдин хәҙрәт ғаиләһендә тәрбиәләнә, хатта хәҙрәт үҙе хаж сәфәренә сыҡҡанда, уны мәҙрәсәһенә үҙе урынына уҡытырға ҡалдырып китә. *Хәбибулла* атаҡлы “Рәсүлиә” мәҙрәсәһенә уҡырға инә, әммә уны тамамламай. Өфөгә килеп яңы асылған “Ғәлиә” мәҙрәсәһендә уҡыуын дауам итә. Балаларҙың ятаҡан мөғәллиме булғандыр, сөнки һуңғараҡ ул “Тәнәйҙәргә — йырҙарым” тигән бер нисә быуын яратып уҡыған шиғырҙар йыйынтығы баҫтыра. (*Х.Ғәбитов исемендәге музей материалдарынан*).

“Халыҡ телендә был урамдың түбәнге өлөшөн *Буклүҙән* тип йөрөттөләр, ферма булған саҡта. Яҙғыһын ферманың бысраҡ һыуы тап ошо урамға ағып төшкән. Бөгөнгө көндә ферма юҡ һәм ул исем дә онотола бара.” (*Информант Ишйәрова Ә.Ш.*)

Ауылыбыҙҙың үҙәге һаналған *Йәштәр урамында* ауыл хакимиәте, клуб, ике ҡатлы ҙур мәктәп урынлашҡан. Урамда тәү башлап йәш ғаиләләр нигеҙ ҡорған. Иң тәүгеләрҙән булып *Моратов Шамил, Саникин Рафаэль, Мөхәмәдйәнов Х.* өй һалып сығалар. Бөгөнгө көндә уларҙың күбеһе хаҡлы ялда.

*Тыныслыҡ урамы*. Халыҡ телендә ул *Безводный* булып йөрөй, сөнки был урамда оҙаҡ йылдар һыу булмаған. Һаҡмар йылғаһына бик алыҫ булғанға, халыҡ өсөн һыу ташыу бик ауырға тура килә, бигерәк тә яҙлы-көҙлө бысраҡта, ҡышҡы бурандарҙа. Урамға колонкалар ҡуйылғас ҡына, халыҡ һыуһыҙлыҡтан ҡотола. Бөгөнгө көндә һәр береһенең ишеге алдында ҡоҙоҡтары бар. Тик халыҡ телендәге *Безводный* исеме һаман да йөрөй.

Иң бейектә ултырған яңы урамға *Тау аҫты урамы* тип әйтәләр. Ауыл хакимиәтенең проекты буйынса төҙөлөш өсөн ер бирә башлағандар. Күптәргә был урын тау аҫтында булыуы менән оҡшап етмәгән, әммә бөгөн был урамда йәшәүселәр тауҙа шаулап үҫкән ҡайын урманына һоҡланып йәшәйҙәр.

## Ауылдың ырыу аралары

Ауылда *Түңгәүер ырыуы* вәкилдәре йәшәй. *“Ҡыуыҡ”, “Шығай”, “Ҡатҡан”, “Маңка”, “Тырарай”, “Туҙғалта”, “Туҡһары”, “Ыуаҡтар”, “Һалмалы бутҡа”* кеүек ырыу аралары билдәле.

Әбделкәрим ауылы халҡының күпселек өлөшөн *Булатовтар* тәшкил итә. Аралары — *ҡыуыҡтар*. “Улар маҡтанырға, ниндәй ҙә булһа хәбәрҙе, берәй ваҡиғаны ҡупыртып һөйләргә яраталар.” (*Урманова Ғ.Ғ.)*

*Ғәбитовтар* ҙа ауылдың күпселеген тәшкил итә. Уларҙың араһы “*маңка*”лар. “Ғәбитовтар элек-электән аң-белемгә, төрлө эштәргә, кәсептәргә йәбешеп ятҡандар. Мәҫәлән, Сәйфулла Ғәбитов ауылда иң беренсе картуф сәсеүсе булып иҫәпләнә. Әбделкәрим ауылы эргәһендә Лайымбирҙелә (Ылайымбирҙе) йәшәгән мордваларға эш эшләп, тоҡ менән йөкмәп картуф алып ҡайта һәм *Сукташ аҫтында* ерҙе ҡул менән баҫып, уны сәсә. Сәйфулланан урыҫ ашы ашай, тип көлөр булғандар. Аслыҡ йылдарында бик күптәр астан ҡырыла, тик “урыҫ ашын ашаусы” бик күптәрҙе ҡотҡарып ҡала. ”(*Информант — Ғәбитов Ф.С.*)

*Сәйетколовтарҙы* “*шығай*”ҙар, тип йөрөтәләр. “Бөтә нәмәгә лә шиҡылдап көлөр булғандар. Болот ҡалҡҡанға ла көлгәндәр. Шул шыҡылдап көлөүҙәренә әйткәндәр. Был араға *Мөхәмәдйәновтар, Кәримовтар* инә. Раскулачивание ваҡытында фамилияларын үҙгәрткәндәр.” (*Информант — Сәйетколов Сәлимйән, хеҙмәт ветераны*).

“*Моратовтар* Әбделкәрим ауылына бөткән ауыл Әлемсаттан күсеп килгәндәр. Уларҙың аралары — “*тырарай*”. Беҙҙең олатайҙы, баяғы, *кузағай-тырарай* тип әйткәндәр. Еҙ өҙәңгелә йөрөр булған. Ҡурайҙа оҫта уйнаған. Шәп кеше булған. Зимагур һымаҡ булған инде. Хужа булған. Кешеләр “*кузағай*” һүҙен төшөрөп ҡалдырып, *тырарай* тип кенә әйткәндәр” (*Информант — Моратов Төхвәт Динислам улы, хаҡлы ялда*.)

*Йәнсуриндарҙы, Сәйетовтарҙы* “*һалмалы бутка*” тигәндәр. Йәнсурина Фәриға инәй, моғайын, һалманы ҡуйы бешергән өсөн әйткәндәрҙер, тине.

*Алсыновтар* араһы — “*кәшкәй*”. Улар Әбделкәримгә Йылайыр районы Һынташ ауылынан күсеп килгәндәр.

“*Туҙғалта*”ларға *Мозафаровтар, Ишйәровтар, Ишморатовтар* инә. “Минең бер туҙым ҡалҡып китһә, ҡарап тормаҫмын”, — тип әйтер булғандар.

*Саникиндарҙы* “*илак*”тар, тиҙәр. Йомшаҡ күңелле булғанғалыр, моғайын.

*Сәйфуллиндар* сығыштары менән бөткән Вәли ауылынан. Был ауылға күсеп килгәнгә “*ситәй*”ҙәр тип әйткәндәрҙер.

Мин үҙем “*Туkһары*” араһы ҡыҙымын. Сығышым күрше Ҡыуат ауылынан. Атайым ошолай ти торғайны: “Беҙҙең “*Тукһары*”лар ҡаҙаҡ ҡыҙынан килеп сыҡҡан. Ҡасандыр ҡаҙаҡтар беҙҙән барымтаға килеп, ҡыҙ, мал урлап киткәндәр. Шунан беҙҙекеләр, ҡарымтаға барып, ҡаҙаҡ ҡыҙын алып ҡайтҡандар. Ул ҡыҙ һары сәсле, күк күҙле була. Үҙе гөманлы, тулы кәүҙәле булған икән. Уны туҡ, үҙе һары тигәндәр. Шунан беҙҙең тоҡом “*туkһары*” тип аталған”. Ысынлап та шулай булғандыр, сөнки бөгөнгө көндә Гөлзифа исемле һеңлем һары, күк күҙле”. (*Информант — Урманова Ғәлиә Ғәлимйән кыҙы, мәғариф ветераны*)

*Солтанғоловтар* “*ыуаҡтар*”. Кемдер һүҙҙәренә ҡарата әйтелгән, ваҡсылдар, тине, кемдер кәүҙәләренә ҡарап, тип әйтте.

**Ауылда йәшәгән кешеләрҙең исеме**

| Ир-егет исеме | Ҡатын-ҡыҙ исеме |
|---|---|

**Булатовтар (Ҡыуыҡтар)**

| | |
|---|---|
| Мөхәрләм (мәғариф ветераны) | Алмабикә |
| Миңлебай (урман ҡарауылсыһы) | Миңзәлә |
| Мансур | Дилә |
| Фәннүр | Гөлнара |
| Ғирфан | Ҡәҙриә |
| Ислам | Клара |
| Илшат | Таңһылыу |
| Илнур | Айгөл |
| Азат | Зимфира |
| Азамат | Эльза |
| Хәлил | Әлфинур |
| Зәкир | Рәйлә |
| Кәрим | Сәйҙә |
| Айҙар | Гөлнур |
| Заһир | Гөлфиә |
| Айназ | Фәүзиә |
| Фәһим | Сәмсинур |
| Ринат | Зәмзәнә |
| Рәил | Рәшиҙә |
| Илдус | Файза |
| Ильгиз | Миңһылыу |
| Илсур | Гүзәл |
| Илсаф | Мәфрүзә |
| Айбулат | Әминә |
| Шайморат | |
| Ғилметдин | |
| Салауат | |
| Әҙеһәм | |

**Ғәбитовтар**

| | |
|---|---|
| Фирғәт | Сәғирә |
| Хөсәйен (ауылдың имам-хатибы) | Рәйфә |

| | |
|---|---|
| Мансур | Фәрзәнә |
| | Вилүрә |
| Сәйфетдин | Айһылыу |
| Варис | Фаягөл |
| Радик | Гүзәл |
| | Шәүрә |
| | Ғәрифә |
| | Әлфиә |

**Моратовтар**

| | |
|---|---|
| Төхвәт | Кәбирә |
| Миңлеғәле | Зифа |
| Зөфәр | Алсу |
| Шамил | Алһыу (мәғариф ветераны) |
| Юлдаш | Асия |
| Айнур | Альбина |
| Илшат | Әлиә |
| Рауил | Фәниә |
| Азамат | Сәлимә |
| Мортаза | Әнисә |

**Алсыновтар**

| | |
|---|---|
| Фуат | Гөлдәр |
| Ришат | Нәзирә |
| Айбулат | Хәлимә |
| Йәнтимер | Миңзифа |
| Тимур | Розалия |
| Фәнил | Гөлниә |

**Йәнсуриндар**

| | |
|---|---|
| Салауат | Фәриға |
| Рөстәм | Лилиә |
| Радик | Нәсимә |
| Ғәрифулла | Шәүрә |
| Ғәзинур | |

**Саникиндар**

| | |
|---|---|
| Сәйфетдин | Әлфиә |
| Хәлфетдин | Миңлегөл |
| Рауил | Нурия |
| Ғәйсәр | Эльмира |
| Ғүмәр | Ғәйшә |
| Надир | Йәмилә |

**Урмановтар**

| | |
|---|---|
| Мәхмүдйән | Нәҙирә |
| Наиль | Ғәлиә |
| Илгиз | Миңлегөл |
| Фәнзил | |

**Сәйетколовтар (Һәйетколовтар)**

| | |
|---|---|
| Сәлимйән | Рауза |
| Әнүәр | Гүзәл |
| Йәмил | Рима |
| Илшат | |

**Сәйфуллиндар**

| | |
|---|---|
| Нурғәле | Фирҙәүес |
| Юнир | Сара |
| Самат | |

**Тләүсиндар**

| | |
|---|---|
| Вәкил | Ҡунаҡбикә |
| Венер | Сания |

**Әбдрәхимовтар**

| | |
|---|---|
| Әсхәт | Рәйсә |
| Марсель | Гөлназ |
| Рәмзил | Гөлмирә |
| | Рәсимә |
| | Таңһылыу |

**Байсыуаҡовтар**

| | |
|---|---|
| Шәфҡәт | Сәйҙә |
| Ғәзизйән | Әлфиә |
| Айсыуаҡ | Әлимә |
| Радик | |

Шулай итеп, тыуған ауылымдың ырыу араларын өйрәнеп бик күп мәғлүмәттәр белдем. Был эште киләсәктә лә дауам итергә уйлайым.

**Мәрҙиева И.Ф.**, 6-сы класс
Фәнни етәксеһе: **Миназева Р.Й.**

## ИЛЕШ РАЙОНЫ ҺЕҢЕРӘН АУЫЛЫНЫҢ ҺӨЙЛӘШЕ

Диалекттар һәм һөйләштәр һәр халыҡтың үҙенсәлекле һәм ҡабатланмаҫ рухи байлығы булып иҫәпләнә. Халыҡ теле — халыҡтың алтын хазинаһы. Ул — тарихи күренеш.

Беҙҙең төбәктә йәшәгән халыҡ, 1972-1982 йылдарҙа үткәрелгән диалектологик экспедициялар күрһәтеүенсә, төньяҡ-көнбайыш диалектҡа инә.

Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының һөйләү теле үҙенә генә хас тарихи юл үтеү сәбәпле, башҡорт теленең ҡалған ике диалектынан һәм әҙәби теленән айырылып тора. Илеш районының Һеңрән ауылы халҡының һөйләше төньяҡ-көнбайыш диалекттың түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләшенә ҡарай. Мин үҙемдең фәнни-тикшеренеү эше барышында ошо һөйләштең үҙенсәлектәренә иғтибар иттем, өйрәндем.

## Фонетик үҙенсәлектәре

**а** фонемаһын һүҙ башында, йәки һүҙҙең беренсе ижегендә **о** –лаштырып әйтеү: *оағас*— әҙәби телдә *ағас, маол* — әҙәби телдә *мал, аотай*— әҙәби телдә *атай;*

**й** — **и** : *йылау* — әҙәби телдә *илау*;

**о** — **ы**: *ҡорау* — әҙәби телдә *ҡырау, боғау* — *бығау, оңғай* — *ыңғай, монауы* — *бынауы*;

**ө** — **о, о** — **ө** : *дөнья* — әҙәби телдә *донъя, гомум* — *гөмүм;*

**у** — **ы**: *маймул* — әҙәби телдә *маймыл*;

**ы** өнө ҡыҫҡарыу : *сыҡ* — әҙәби телдә *ысыҡ, сын*— *ысын*;

Беҙҙең яҡ һөйләшенә шулай уҡ монофтонгылаштырыу хас.

**өй** — **ү**: *үрә* — әҙәби телдә *өйрә*;

**ы** — **у**: *уғыҙ* — әҙәби телдә *ыуыҙ*;

**ый** — **и**: *пима* — әҙәби телдә *бийма*;

**ой** — **о**: *бодай* — әҙәби телдә *бойҙай*;

**оу** — **у**:*посу* — әҙәби телдә *боҫоу*;

**ау** — **у**:*ҡуаҡ* — әҙәби телдә *ҡауаҡ*;

**эй** — **и**: *песи* — әҙәби телдә *бесәй*;

**а** — **ы** :*ҡыйланыу*— әҙәби телдә *ҡыланыу*;

**ей** — **и**: *нейә* — әҙәби телдә *ниңә*;

Фонетик үҙенсәлектәр тартынҡы өндәрҙең ҡулланылышында да сағыла:

Һүҙ башында **б** өнө урынына **п** өнө килә *пумала* — әҙәби телдә *бумала, пияла* — әҙәби телдә *быяла, печән* — *бесән, песнәк* — *беснәк, пычак* — *бысаҡ, пычраҡ* — *бысыраҡ, пычҡы* — *бысҡы;*

**б—ү:** *кебек* — *кеүек;*

**д—т:** *дары* — әҙәби телдә *тары;*

**т—д:** *тигәнәк* — әҙәби телдә *дегәнәк, дисбе* — әҙәби телдә *тисбе;*

**т—ҙ:** *атна* — әҙәби телдә *аҙна,*

**т—с:** *төчө* —әҙәби телдә *сөсө, тычҡан* –әҙәби *телдә сысҡан;*

**с—ç, с—һ**: *сурәт* — әҙәби телдә *һүрәт, сум* — әҙәби телдә — һум, тупса —әҙәби телдә *тупһа;*

**һ** — һүҙ башында килгәндә төшөп ҡала: *әйбәт* — әҙәби телдә *һәйбәт, һуш — уш,Әдия — Һәҙиә, ауа* — әҙәби телдә *һауа;*

**ҙ—з:** *ҙаман* — әҙәби телдә *заман, ҙаҡун— закон, мәҙин — мәзин, Ҙәкиә — Зәкиә, Ҙилә — Зилә, зыярат* — ҙыйарат һ.б.

**й— җ:** *мөрҗә* — әҙәби телдә *мөрйә*, җәннек — әҙәби телдә *йәнлек, җир/йер — ер*.

Беҙҙең яҡ һөйләшендә һуҙынҡы өндәрҙең төшөп ҡалыуы, ижектәрҙең ҡыçҡарыу күренештәре киң таралған. Мәçәлән, *лыс* — әҙәби телдә *ылыс, тчө — сөсө, тырпша — турпыша, шәр —шәре* һ.б.

## Морфологик үҙенсәлектәр

Килеш ялғауҙарында **ң** урынына **н** ҡулланыу күренеше бар . Мәçәлән, *улымның / улымнын, ҡаланың / ҡаланын.*

Исем яһаған **–лыҡ/-лек** ялғауҙары менән параллель рәүештә – **лауыҡ/ләүек** аффиксы ҡулланыла *Ҡамырлауык / ҡамырлыҡ* — әҙәби телдә *энәлек, йарлауыҡ / яр, ярлау.*

Зат алмаштарында **–ә -а** ялғауҙары ҡулланыла: *миңә — миңа, сиңә — сиңа.*

Һорау алмашының күп варианттары бар: *ней? нәмәкәй? нәмәрсәкәй? нәстә? нәмәстәкәй? нейәмәрсәкәй?*

Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының **–ең/-ың** ялғауҙарына тамамланыуы *барың, китең ,бирең, ҡалың.*

## Лексик үҙенсәлектәр

Түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләше, бер яҡтан, башҡорт теленең ғәйнә, ҡариҙел, дим һөйләштәре менән сиктәш булһа, икенсе яҡтан, көнбайыш татар теленең урта диалекты һөйләштәре менән тығыҙ бәйләнештә формалашҡан. Был төбәктәргә, аçаба башҡорт ерҙәренә, бүтән халыҡ вәкилдәре килеп урынлашҡан. Һөҙөмтәлә, күпселек башҡорт ауылдары татар, мишәр, урыç, мари, сыуаш, удмурт ауылдары менән күрше булып, аралашып йәшәгәндәр. Ҡатнаш ауылдар ҙа барлыҡҡа килгән. Төбәктәге ҡайһы бер башҡорт ауылдарында хәҙер ҙә *Башкорт урамы, Типтәр ягы, Ҡаҙан осо* кеүек атамалар һаҡланып ҡалған. Мәçәлән Илеш районының Иштирәк ауылында ғүмер-ғүмергә *Башкорт урамы* бар. Ул ауылды урталай бүлеп аҡҡан кескәй генә *Көрпә йылгаһы* буйында параллель урынлашҡан. Был урам ауылда иң беренсе барлыҡҡа килгәнен күрһәтеп тора. Шулай уҡ беҙҙең районда Иçке Ҡырғыҙ ауылында *Башкорт осо* бар.

Күренекле диалектолог С.Ф.Миржанова был төр диалект лексикаһын ике төркөмгә бүлеп ҡараған. Беҙҙә ошондай һүҙҙәр бар:

| **Төп башҡорт һүҙҙәре нигеҙендә яһалған диалектизмдар** | | | |
|---|---|---|---|
| **диалектта** | **әҙәби телдә** | **диалектта** | **әҙәби телдә** |
| айаҡ һауыты | аяҡ кейеме | аҡ чәчкә | меңьяпраҡ |
| арыҡ таҡта | баҫма | ат башчысы | кейәү егете |
| җиләпәй | елғыуар | мөшкәр | һуҡыр себен |
| тешекәй | инә һарыҡ | сиртмә ҡойроҡ | сәпсек |
| шатала сөйәге | шайтан ашығы | иҙеү бауы | үңербау |
| әпипапа | бәпембә | | |
| **Семантикаһы хәҙерге тел күҙлегенән аңлайышһыҙ лексик диалектизмдар** | | | |
| ачырғалану | өҙгөләнеү | бисрәктәй | әҙмәүерҙәй |
| биҫтә | киҫкә кеүек | жәмәлкә | йырғанаҡ |
| күшәүер | ялҡау | лыпыртыҡ, лабра | әрпеш |
| әрәшә | ҡара ҡарлуғас | почмаҡ | мөйөш |
| капчык | тоҡ | янчык | тоҡсай |
| апай | ҡустым йәки һеңлем | җырак әбей | өләсәй |
| җырак бабай | олатай | | |

## 4. Һөйләү теле өлгөләре

### Ҡыйыу ҡыҙ

Борон-борон ҙаманда, әйме, бер әбекәй булған. Быу әбейнең бер ҡыҙының ҡыҙы булған. Ҡыҙы читкә чығып киткән дә, мының ҡыҙы нәнәйе белән ҡалған. Шунан хәҙер бу ҡыҙ инәсе белән очырашҡан. Инәсе ҡайтҡан. “Җарар, мин читкә китмәйем, нәнәйеңне дә ҡарарбыҙ,” — дигән. “Җарар, нәмә пешерәбеҙ, әни?” — дигән ҡыҙы. “Пирәмәс пешерәбеҙ, пирожки пешерәбеҙ, нәнәйеңә дә илтерсең”, — дигән.

Хәҙер бу ҡыҙ беләгенә кәрҙин элгән дә, пирәмәсләр, пирожкиларны салып, урманнан китеп бара икән җырлап:

— Трәллә-лә, трәллә-лә . Нәнәйемә барамын, мәмәйләр илтәм.

Ҡайын артында бер бүре качып торган. Хәҙер ҡыҙ ҡырына ипләп кенә килгән дә:”

— Эй!? Син кая барасың? Минем корсағым ачты бит. Нәмәләр ул кәрҙинеңдә? — дигән.

— Мин нәнәемә ашарға илтәм илтәм, — дип.Тиҙ генә бер пирожкины бүрегә ырғыткан да тороп җөгөргән. Үҙе бик ҡурыҡҡан.

Барып ишеген шаҡыған. Ул тиҙ генә ишеген ачып ҡыҙын керткән. Шунан нәнәйенең чәчләрен тарап, ашатып, идәннәрен җыуып, ҡайтырға чыҡҡан.

— Бәй, ҡыҙым, теге бүре тағы очраса, нишләрсең? — дип, бер пирожки биргән.

Ҡыҙ җырлай-җырлай ҡайтып киткән:

— Трәлләлә- трәллә лә, нәнәйемне ҡарадым.

Теге бүре тағы күргән дә ҡырына чыҡҡан. Ҡырына чыҡкач:

— Бәй, син миңа мәмәй алмадыңмый? — дигән.

Ҡыҙ тиҙ генә пирожкийын ырғыткан да тороп җөгөргән. Бүре дә ҡыҙны ҡыуа икән. Әнисе тәрәҙәдән ҡарап торған. Тиҙ генә ҡыҙны керткән дә ишекне бикләп ҡуйған.

— Һәй, мин сине үтерәм, ҡыҙый, — дип тәрәҙәдән тәрәҙәгә җөрөгән бүре. Әммә ул керәлмәгән. Ҡыҙы белән әнисе җатып җоҡлағаннар.

(БР-ҙың *Илеш районы Һеңерән ауылында Гәрәева Нәжүдә Кәрәмулла ҡыҙынан (1949 йылгы) яҙып алынды.15 ғинуар 2016 йыл)*

**Файҙаланылған әҙәбиәт**


1. Ишбулатов Н.Х. Башҡорт теле һәм уның диалекттары. Өфө: Китап, 2000.

2. Миржанова С.Ф. Северо-западный диалект башкирского языка. Уфа: Китап, 2006.

3. Шәкүр Рәшит. Башҡорт диалектологияһы уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: Китап, 2012.



**Нөғәмәнова Ләйлә**

Фәнни етәксеһе: **Нөғәмәнов Р.М.**


## ӘБЙӘЛИЛ РАЙОНЫ ӘХМӘТ АУЫЛЫ ТИРӘҺЕНДӘГЕ ЕР–ҺЫУ АТАМАЛАРЫ ҺӘМ УЛАРҘЫҢ КИЛЕП СЫҒЫУ ТАРИХЫ

### Әхмәт ауылының ҡыҫҡаса тарихы

*Әхмәт ауылы* Һаҡмар йылғаһы буйында, район үҙәге Аҫҡарҙан 33 саҡрым алыҫлыҡта, көнъяҡ–көнбайыш йүнәлешендә урынлашҡан. Ул XIX быуат башынан билдәле. Ауылға *Түңгәүер олоҫо* башҡорттары нигеҙ һалған.

Аныҕыраҡ итеп әйткәндә, старшина *Әхмәт Өмөтбаев* нигеҙләгән. Казачий ғәскәрҙәрҙә хеҙмәт итеп ҡайтҡанда, уға 30 йәш самаһы була (1834 йылғы «Рәиүз яҙмалары»нда 75 йәш). Шунлыҡтан *Әхмәт ауылы* кешеләренең күпселеге *Өмөтбай* олатай затынан.

Ауылдың тәүге атамаһы – *Һаҡмарбаш*. Был уның Һаҡмар йылғаһы башына яҡын урынлашыуынан килеп сыға. Е.Пугачев, Салауат Юлаев яуы осоронда ауыл язалаусы И. Тимашев әтрәттәре тарафынан яндырылғандан һуң хәҙерге урынына күсереп һалына.

Ауыл уҙаманы *Бәрҙеғол Ейәнсуриндың* 1806–1807 й.й. урыҫ–прусс–француз һуғышында ҡатнашҡаны билдәле. Ә *Ҡәҙербәков Байғол,* 1812 йыл Ватан һуғышында батырлыҡ күрһәтеп, 2 тапҡыр көмөш миҙалға лайыҡ була.

*Әхмәт ауылы* халҡы, нигеҙҙә, малсылыҡ, һунарсылыҡ, солоҡсолоҡ, ағас эше менән кәсеп иткән. Игенселек менән шөғөлләнергә шарттар булмаған. Йәй көндәрен 54 йорттоң барыһы ла тиерлек йәйләүҙәргә сығыр булған.

1834–1850 йылдарҙа *Әхмәт ауылынан* 12 ғаилә *Ҡыҙыл йылғаһы* буйындағы *Тәпән ауылына* нигеҙ һала. 1858 йылда тағы 12 ғаилә күсеп килә. Улар араһында *Әхмәт Өмөтбаевтың* өлкән улдары *Ғәли* менән *Ғайса* ла була. Кеселәре *Хөсәйен* менән *Этҡол* күсенмәй.

1864 йылдан *Әхмәт ауылы* Түңгәүер олоҫонoң үҙәге.

1911–1912 йылдарҙа ауылда урыҫса мәктәп асыла.

1918 йылда Асҡар ауылынан *Мөғәлләм Мирхәйҙәров* йәдитсә уҡыта башлай. Хәҙерге стиль менән уҡытыу мәктәбе 1930 йылда асыла. Беренсе уҡытыусы Ҡаҙмаш ауылынан *Ғәлиәхмәт Тимербаев*. 1931–1933 йылдарҙа Ташбулаттан *Зиннәт Камалов* уҡыта.

1928 йылда районда тәүгеләрҙән булып «*Кушкыуак*» артеле төҙөлә. 1930 йылда *Әхмәт ауылы* халҡы «*Һаҡмарбаш*» колхозына берләшә. 1931 йылда сиҙәм күтәреү башлана.

1932 йылда *Буҙыкай, Ҡырҙас ауылдары* менән берлектә «*Үрнәк*» колхозына ҡушыла. 1946–1951 йылдарҙа айырым «*Партизан*» колхозы булып йәшәй. Һуңғараҡ йәнә «*Үрнәк*»кә ҡушалар. Алтмышынсы йылдар башында «*Һәүәнәк*», 1958 йылдан «*Йәнгел*» совхоздарының бүлексәһе.

1972 йылда *Ҡырҙас мал һимертеү*, 1980 йылда ҡабат «*Йәнгел*», 1987 йылдан «*Амангилде*» совхоздарына ҡарай. Әлеге ваҡытта «*Агро*» ООО-ның бүлексәһе.

Тирә-яҡлап матур урман-тауҙар, баҫыуҙар менән уратып алынған *Әхмәт* ауылында бөгөнгө көндә 3 урам, 45 шәхси хужалыҡ, башланғыс мәктәп, клуб, фельдшер-акушер пункты, магазин бар. Ауыл яңыра, ҙурая, төҙөкләнә. Халыҡтың төп шөғөлө — малсылыҡ.

*Билдәле шәхестәре:* Г.Р.Абдрахманова; Х.С.Юнысов; А.Ш.Йәғәфәрова; Р.М.Нөғәмәнов (Иҙрис Мөҙәрис–Ноғманов); Ү.Р.Лоҡманов.

## Колхозға берләшеү тарихы

1928 йылда *Әхмәт, Әбделгәзе, Ҡаҙмаш, Рысҡужа ауылдарын* берләштергән «*3–сө Интернационал*» (һуңғараҡ «*Ҡушкыуаҡ*») артеле ойошторола. Унда *Әхмәт ауылынан* беренселәрҙән булып 15 кеше инә. Бына уларҙың тулы булмаған исемлеге:

1. Әхмәтйәнов Нөғәмән (ул башта «Интер» тракторының тракторсы ярҙамсыһы, һуңынан механик булып эшләй).
2. Латипов Сибәғәт.
3. Ғәббәсов Мөхәмәт.
4. Кинйәғолов Фазулла.
5. Юлдыбаев Хөбитдин.
6. Хәйруллин Мөхәмәтдин.
7. Йыһаннуров Ғәлимйән.
8. Ҡолтаев Фәйзрахман.
9. Нөғәмәнов Хәйривара (һуғышҡа тиклем Яңауылда партком секретары).
10. Хәйруллин Ҡотлоғәлләм.
11. Рысйәнов Зәйнәғәбдин.
12. Ғарифуллин Басир.

Улар хәҙерге «*Урал*» совхозының 7-се («*Северный*») бүлексәһендә иген игәләр.

Уңышлы эшкә булышлыҡ итеп, хөкүмәт тағы тәгәрмәсле трактор, сәскес, аҙағыраҡ тағылмалы МК молотилкаһы бирә.

1929 йылда *Яңауыл* ерҙәренә 4 ғаилә күсенә:

1. Юлдыбаев Хөбитдин (ойоштороусы).
2. Ғарифуллин Басир.
3. Ҡолтаев Фәйзрахман.
4. Хәйруллин Мөхәмәтдин.

Ошоларҙан башҡалары Әхмәттә ҡалып, «*Ҡушкыуаҡ*» артеленең эшен дауам итәләр. Ауылдың беренсе коммунисы — *Латипов Сибәғәт*.

*Әхмәтйәнов Нурмөхәмәт* — Башҡорт АССР–ы Верховный судының судъяһы булып эшләй.

*Йәһүҙин (Абдуллин) Мостафа* 1935 йылдан колхоздың партком секретары.

## Ер–һыу атамалары һәм уларҙың килеп сығышы


**Һаҡмар йылғаһы**

**Һаҡмар йылғаһы.** Әхмәт ауылынан 200 метр арауыҡта ағып үтә. Ғәжәп матур аҡ ҡырсынташы менән айырылып тора. Атамаһының килеп сығышына ҡағылышлы өс фараз бар:
1. *Һаҡма* — бейек үлән араһынан йырып үткән эҙ, һуҡмаҡ.
2. *Һаҡ бар, һаҡ бар* — абай бар, һаҡсылар тора мәғәнәһендә.
3. *Һай ыҡ* — һай йылға.

**Әүлиә зыяраты**. Әхмәт ауылынан өс саҡрым төньяҡта, *Ҡуһайел* һыртында урынлашҡан.
**Бағырусман әүлиәнең** зыяраты бар. Изге зат Төркийә яҡтарынан беҙҙең илгә ислам динен таратыр өсөн XVIII быуат аҙаҡтарында килгән. Уның бер туғаны **Бағусман әүлиә** Өмөтбай ауылы янында шулай уҡ *Ҡуһайел* һыртында ерләнгән.

**Әүлиә ҡотоғо (ҡоҙоғо, шишмәһе).** Әүлиә зыяратынан ярты саҡрым тирәһе алыҫлыҡта ҡайын төбөнән сығып ятҡан бер ваҡытта ла туңмаҫ шишмә. Ул 50 метр самаһы ағып бара ла ер аҫтына китеп юҡ була. Һыуы шифалы: күс бирә, төшөнкө күңелде күтәрә, юшҡынды таҙарта. Өмөтбай ауылында ла шул уҡ сифаттары булған **Әүлиә шишмәһе** бар.

**Ҡуһайел (Ҡуһайыл) һырты.** Ирәндек менән Уралтау һырттары араһынан Һаҡмар буйлап Билал ауылына тиклем һуҙыла. Иң бейек нөктәһе (770 метр тирәһе) *Оло Сусаҡ* (*Оло Сука*) Әхмәт менән Ҡырҙас ауылдары араһында. Унда олатайҙарыбыҙ, *каланса* (каланча) ҡороп, ер-һыуҙарын барымтасыларҙан һаҡлар булған. *Каланса* икенсе төрлө *там* тип аталған. Атаманың килеп сығышы ике төрлө аңлатыла:

1. Тигеҙ урында *кауһайып ятҡан* ҡалҡыулыҡ.
2. *Ҡыуһа ел (ел ҡыуһа)* — Әхмәт яҡ битендә туҡтамай ел иҫә лә тора.

**Төпһөҙ күл (Төпһөҙгүл).** Әхмәт ауылынан ярты саҡрым көнсығышта, Ҡаран йылғаһына баш биргән күл. Ул бер ғәрәсәт мәлендә, имеш, аждаһаны ҡойон күтәреп алып киткәндә барлыҡҡа килгән соҡор. Тәрәнлеге ике дилбегә буйламай торғайны, тиҙәр. Ҡасандыр эре-эре суртандар төйәк иткән мөғжизә һыу ятҡылығы ярына еткереп һөрөүҙән ләм тулып юҡҡа сыҡты.

**Ҡаран йылғаһы.** Төпһөҙ күлдән ағып сыға ла Әхмәт ауылын ҡырлап үтеп Һаҡмарға ҡоя. Һыуы саф, һалҡын. Сатлама һыуыҡтарҙа ла туңмай – ҡарайып ята. Атамаһы ла шунан килеп сыҡҡан — *Ҡаран***.**

**Зөләйха түбәһе.** Әхмәт ауылынан көнсығыш йүнәлештә, 3 саҡрым арауыҡта ятҡан матур түбә. *Зөләйха* исемле ҡыҙҙың яратҡан төбәге булған.

**Гәүһәр ҡотоғо.** Зөләйха түбәһенә яҡын шишмә башы. Һыуы айыртылған һөт өшө аҡ төҫтә, һалҡын, йомшаҡ.

**Күкшан.** Бер ҡоңғорт сырайлы урыҫ баярының сабынлығы булған, хәҙер баҫыу. Атама шул баярға бәйле — *Күкшан — Күк шаһ* йәки *Күк шах*.

**Ҡушҡыуаҡ.** Шул уҡ атамалы баҫыу уртаһында йәнәш торған ике ҙур ҡыуаҡлыҡ. Унда элек *«Ҡушҡыуаҡ» артеленең* станы булған.

**Көҙрәткол төбәге.** Тәбиғәттең ғәжәп матур бер төбәге. Әммә ул матурлығы менән генә билдәле түгел... 1918 йылдың яҙында бында **Әхмәтзәки Вәлиди** туған йәшерен типография ҡороп, төрлө листовкалар баҫып ятҡан. Ҡыҙылдарҙың шымсылары уны күпме генә эҙләһәләр ҙә таба алмаған, ә Әхмәт ауылы халҡы үҙенең данлыҡлы улын һатмаған. Ошоға ваҡиғаға ҡағылышлы Әхмәт башланғыс мәктәбенә иҫтәлекле таҡтаташ ҡуйылған.

**Һаңғала (Ханкала) тауы.** Әбйәлил менән Баймаҡ районлары сигендә торған тау. Саф йәшмәнән хасил. Атамаһына килгәндә:

1. Монгол-татар яуы осоронда үтеп барышлай, яугирҙарына ял биреп, бында *Батый хан* туҡтаған.

2. 1740 йылғы башҡорт ихтилалы осоронда ғәскәр туплап данлыҡлы батырыбыҙ *Ҡараһаҡал хан* торған. Тау битендә хандарына ышыҡ булһын өсөн соҡоп эшләнгән йәтеш кенә мәмерйәһе бар. Уға башҡорт халҡы бүләк иткән еңеү алтын таяғы ошонда ғәйеп булған тиҙәр.

**Тимәшәү тауы.** 1773–1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы ялҡыны Уралтауҙың төпкөл ҡуйынында ятҡан *Һаҡмарбаш* ауылын да урап үтмәй. Үҙенең 650 кешелек язалау отряды (Карательдәр, караттар) менән был яҡтарға батша подполковнигы И.Тимашев килеп сыға. Ул Һаҡмарға яҡын тау битләүендә ялға туҡтай. Ошо урында башҡорт яугирҙары менән баҫҡынсылар араһында ҡаты бәрелеш була. Шуның ҡыҙыулығы менән, ҡон ҡайтарыу маҡсатында, Тимашев ауылды үртәргә бойора. Ҙур ауылдан *Иҫке ыҙма* тигән урын ғына тороп ҡала. Яңы урынға күсереп нигеҙләнгән *Әхмәт ауылына* терәлеп ятҡан тәпәш, яҫы түбәне Һаҡмарбаш халҡы ҡәһәрле йәллат «хөрмәтенә» (бәлки, киләсәк быуындар онотмаһын типтер) *Тимәшәү* тип атаған.

**Иҫке ыҙма.** Әхмәт ауылынан Һаҡмар йылғаһы буйлап өс саҡрым тирәһе өҫтәрәк *Иҫке ыҙма* тигән асыҡлыҡ бар (*ыҙма* беҙҙең яҡтарҙа *ауыл* тигән төшөнсәне бирә). Был атай-олатайҙарыбыҙҙың элекке төйәге. Һаҡмар

йылғаһының башына яҡын ултырғанлыҡтан ул тәүҙә *Һаҡмарбаш* тип аталған. Ауылдың яҙмышы аяныслы...

1774 йыл Бүгәс батша болаһы шаулап торған мәлдә, батша подполковнигы Тимашев (Тимәшәү) тарафынан ауыл яндырып юҡ ителгәс, *Иҫке ыҙма* тигән атамаһы ғына тороп ҡала.

**Әхмәт ауылы.** *Һаҡмарбаш* яндырылғас, ауылды яңы урынға күсереп һалырға ҡарар ителә. Хәҙерге ауыл урынын *Әхмәт Өмөтбаев* олатай билдәләй һәм беренсе булып нигеҙ һала. Был 1790 йылдарға тура килә. Ул ваҡытты казачий ғәскәрҙәрҙә хеҙмәт итеп, сотник дәрәжәһе алып ҡайтҡан *Әхмәт* (*Әхмәтйән*) алдынғы ҡарашлы уҡымышлы уҙаман һанала, ауылға уның исеме бирелә һәм ул ырыу старшинаһы итеп һайлана.

**Биксәнтәй тауы.** Әхмәт ауылы халҡы *биксәнтәй, ҡолтай, күкъял, ҡаҙаҡ, аһылай, мышы* һәм башҡа араларға бүленеп йәшәгән. Ошо араларҙың һәр береһенең тәбиғәттә үҙ иткән мөйөшө булған. Әхмәт ауылынан көнъяҡ-көнсығыш ҡарап биш саҡрым тирәһе китһәң, Ирәндек һыртына етәрәк, бик матур, тыныс ҡалҡыу урынға барып сығаһың.  Әлеге тау элек-электән (бәлки, Әхмәт старшина заманынандыр?.. Ул да бит *биксәнтәй* араһы кешеһе булған) *Биксәнтәй тауы* тип атала.

**Таҙғаҡ.** Элек ауыл тирәһендә айыу күп йөрөгән, малды тәләфләп йонсотҡан. Ана шуларға ҡаршы һунарсылар таҙғаҡ ярҙамында уңышлы көрәшкән.

*Әхмәт* менән *Ҡырҙас* ауылдары араһында бер ҡараңғы, шомло урын бар. Шул ергә айыуҙар айырыуса күп эйәләшер булған. Таҙғаҡтар ҙа күберәген ошонда ҡоролған. Әлеге урын да, унан ике яҡҡа ағып киткән шишмәләре лә, хатта терәлеп ятҡан баҫыуы ла бөгөнгө көнгәсә *Таҙғаҡ* атамаһын һаҡлай.

**Ҡарағайморон тауы.** Элекке замандарҙа был, Һаҡмар йылғаһына терәлеп ятҡан тау, шыр ҡарағай урманы менән ҡапланған булған. Шунлыҡтан *Ҡарағайморон* тип аталған. Бер килеп көслө янғын сыҡҡан да урманды юҡ иткән. Һуңғы бер-нисә ҡарағайын граждандар һуғышы осоронда йыҡҡандар.

**Ҡанифа юлы, Ҡанифа урманы.** Әхмәт ауылы тирәһендәге иң боронғо атамаларҙың береһе. *Ҡанифа юлы Ҡарағайморон тауы* һыртынан үтә, *Ҡанифа урманы* ла шунда. Риүәйәт буйынса, *Ҡанифа* исемле 12 йәшлек етем ҡыҙҙы һатып ебәрәләр. Тыуған яҡтарын һағынған ҡыҙыҡай Хәйбулла яҡтарынан ҡасып ҡайта һәм *Ҡарағайморон* тауы башында илап ултыра. *Ҡанифа юлының* бер өлөшө *Ҡуңыр буға юлына* тап килә.

**Зәйнәп йылғаһы (шишмәһе).** Ҡасандыр Һаҡмар буйында йәшәгән башҡорттар йәйләүҙән-йәйләүгә күсенеп йөрөр булған. Улар Уралтауҙа ла, Ирәндектә лә йәйләп торғандар. Шул ваҡыттарҙа *Зәйнәп* исемле байбисә (Биксәнтәй старшинаның өлкән ҡатыны Гөлзәйнәп булыуы бар. — Л.Н.)

ауылдан алыҫ түгел йомшаҡ, тәмле һыулы шишмәне үҙ иткән. Уның хөрмәтенә халыҡ шишмәне *Зәйнәп* тип атаған.

**Гөлбикә йылғаһы (шишмәһе).** *Гөлбикә шишмәһе* – Әбйәлил менән Баймаҡ райондары сигенә яҡын. Ҡасандыр ул ҙур ғына булған. Хәҙер башындараҡ селтерәп аға ла, килә биргәс, ер аҫтына китеп юҡ була. Шуның өсөн түбәнге яғында йәй көндәре һыуы юҡ.

Тәүге фараз буйынса бер ҡомағай байҙың *Гөлбикә* исемле килене була. Ауыр яҙмышына түҙеп тора алмаған килен, ошо шишмә буйына килеп, үҙенә ҡул һала. Фараздың икенсеһе буйынса *Гөлбикә һылыу Биксәнтәй бей* менән *Гөлзәйнәптең* берҙән-бер ҡыҙы була. Буйһонмаҫ Биксәнтәйҙе еңә алмаған карателдәр ҡыҙҙы әлеге шишмә янында атып китәләр.

**Фатима килен ҡыуағы.** Әхмәт — Ҡырҙас юлы буйында. Тарихы былай: Ҡолғона ауылынан Ҡырҙасҡа *Фатима* исемле ҡыҙ килен булып төшә. Ҡыштың бер көнөндә ул ат ектереп тыуған яҡтарына хәл-әхүәл белешергә китә. Ҡунаҡ булып кире ҡайтыуында, күҙ асҡыһыҙ ҡаршы буран сыға. Аты арыған *Фатима* юлдан яҙлыға, бер ҡыуаҡлыҡ ышығына ялға туҡтай һәм шунда туңып йән бирә. Ауылға етергә ярты саҡрым ғына ара ҡалған була...

Шул мәлдән бирле ул урын *Фатима килен ҡыуағы* атамаһын йөрөтә.

**Көмөш ташы.** Бынан ике быуаттан ашыу самаһы элек, яҡынса 1760 йыл тирәһендә, башҡорттар менән барымтаға килгән ҡаҙаҡтар араһында ҡанҡойошло бәрелеш була. Шул мәлде еләккә тип сыҡҡан *Көмөш исемле ҡыҙыҡай* ҡурҡышынан ҙур таш артында йәшеренеп ултыра. Шуға бәйле оло ялан уртаһында ятҡан ташты *Көмөш ташы* тип атайҙар. Ул Зәйнәп йылғаһы башындараҡ ята.

**Ҡаҙаҡкар тауы.** Тау Әхмәт ауылынан көнбайыш йүнәлештә урынлашҡан ошо тирәләге иң бейек, мөһабәт тау. Борон уның һыртында атай-олатайҙарыбыҙ ҡаланса (каланча) ҡороп, ҡарауылда торған. Айырата үҙәктәренә үткән ҡаҙаҡ баҫҡынсыларын ҡарауыллаған улар. Атамаһы ла шунан ҡалған — *Ҡаҙаккар (ҡаҙаҡ ҡарауылы).*

| | |
|---|---|
| <br>**Сәүкә ташы** | **Йылҡы түбәһе, Бүтәгәле ҡыр**. Әхмәттән көнъяҡ-көнсығыш ҡарап китһәң, *Йылҡы түбәһе, Бүтәгәле ҡыр* тигән урындарға тап булаһың. Был урындарҙа олатайҙарыбыҙ йәйрәп ятып йылҡы көткән. Атамалары ла шуға бәйле.<br>Үрҙә һаналғандарҙан тыш, Әхмәт ауылы тирәһендә **Бәләкәй йылға, Кәзәһуйған, Сәүкә ташы,** |

**Кәҙә ташы, Күс юлы, Бағры йылғаһы, Ерекле** һ.б. тигән ауыл халҡына ғына билдәле атамалар һәм **ҡорғандар** бар.

### Файҙаланылған сығанаҡтар


1. Әсфәндиәров Ә.З. «Башҡортостан ауылдары тарихы». Өфө, «Китап».
2. Усманова М.Г. «Имя отчей земли». Уфа, «Китап», 1994.
3. «Абзелиловская энциклопедия». 2015.
4. Әхмәт ауылының тел ижады.
5. Нөғәмәнов Мөҙәрис Хәйривара улы (1930–1976) һөйләгәндәренән.
6. Нөғәмәнова Фәүзиә Шәһишәриф ҡыҙы (1907–1985) һөйләгәндәренән.
7. Махийәнов Әхтәм Махийән улы (1898–1964 һөйләгәндәренән.
8. Йыһаннуров Муллайән Йыһаннур улы (1914–1965) һөйләгәндәренән.
9. Махийәнова Бибикамал Әхтәм ҡыҙы (1928) һөйләгәндәренән.



**Нәбиев В. Д.**, 9-сы класс

Ғилми етәксеһе: **Мөфтиева М.С.**


## ДҮРТӨЙЛӨ РАЙОНЫ ИҪКЕ УРТАЙ АУЫЛЫ ҺӨЙЛӘШЕ ҺӘМ БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ХАЛЫҠ СӘСӘНЕ ФӘРРӘХ ДӘҮЛӘТШИН ИЖАДЫНДА ДИАЛЕКТ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Дүртөйлө районы *Иҫке Уртай* ауылы һөйләше башҡорт теленең төнъяҡ-көнбайыш диалектына инә. Диалект үҙенсәлектәре беҙҙең яҡ яҙыусылары, шағирҙары ижадында киң сағыла. Тәҡдим иткән хеҙмәтемдә мин Дүртөйлө районы Иҫке Уртай ауылы һөйләшен һәм яҡташыбыҙ, танылған сәсән Фәррәх Дәүләтшин ижадында диалект һүҙҙәрҙең ҡулланышын күрһәтмәксемен.

### Иҫке Уртай ауылы тураһында мәғлүмәт

*Иҫке Уртай ауылына* 1780 йылдарҙа Бөрө өйәҙенән *Урсай* исемле башҡорт үҙенең улдары менән килеп нигеҙ һала. Ауыл *Йәүбәҙе* һәм *Өлкәш йылғалары* уртаһында урынлашҡан. Башта ул *Уртай* тип кенә йөрөтөлә, ә 1913 йылда ауылдан 7 ғаилә айырылып сығып, *Яңы Уртай* ауылына нигеҙ һалғас, ауылыбыҙ *Иҫке Уртай* тип атала башлай.

Бөгөнгө көндә ауылда 368 кеше йәшәй. Шуларҙың 320 башҡорт, ҡалғандары татар һәм башҡа милләт кешеләре. Башҡорттар *ҡаңлы* ырыуына ҡарай. Ауылда биш урам бар. Халыҡ телендә улар түбәндәгесә атап йөрөтөлә:

*Әкәй төбәге* (был урам аша күрше мари ауылдарынан Иçке Байыш ауылына баҙарға йөрөгәндәр. *Әкәй* — мари ҡатын-ҡыҙҙарының баш кейеме);

*Башмаҡ урамы* (өйҙәренең урынлашыуы *башмаҡты* — аяҡ кейемен хәтерләтә);

*Бибай төбәге* (бик бай булған Билал исемле кеше беренсе йортҡа нигеҙ һалған һәм үҙенең туғандарын да күсереп килтергән);

*Типтәрҙәр урамы* (типтәрҙәр йәшәгән);

*Таубаш урам* (тау башында урынлашҡан).

## Иçке Уртай ауылы һөйләше

### Фонетик үҙенсәлектәр

**А** өнө, иренләшеп, **о-**ға якын әйтелә.

**һ, ç** өндәре урынына **с** тартынҡыһы ҡулланыла: *сыйыр, басма, тастымал, саташыу* һ.б.;

**С** тартынҡыһы урынына **ч** өнө ҡулланыла: *чәчкә, сыйырчык, ачкыч* һ.б.

Ҡайһы бер һүҙҙәр әҙәби телдәге **с** өнө урынына **т** тартынҡыһы менән башлана *төчө* (сөсө), *тычкан* ( сысҡан) һ.б.

**У, ү, ә** һуҙынҡылары урынына **о, ы, ө, и** өндәре ҡулланыла: *алабота* (алабута), *ботка* (бутҡа), *оҡлау* (уҡлау), *йөткөрөү* (йүткереү), *ғөмөр* (ғүмер), *киңәш* ( кәңәш), *кибән* (кәбән) һ.б.

### Морфологик үҙенсәлектәр

Килеш ялғауҙары: эйәлек, төшөм килеш ялғауҙары **н** тартынҡыһы менән башлана: *балның, утны, атның* һ.б.

Күплек ялғауҙары **л, н** тартынҡыларынан башлана: *атлар, китаплар, көннәр, таңнар* һ.б.

### Лексик үҙенсәлектәр

Һөйләштең үҙе өсөн характерлы диалектизмдар араһында тәбиғәт күренештәре, ландшафт, үҫемлектәр донъяһы, йәнлек атамалары, хужалыҡ-көнкүреш, һауыт-һаба, ашамлыҡ-эсемлек терминдары, йорт-кәрәк яраҡтары, кейем-һалым, туғанлыҡ мөнәсәбәттәре менән бәйле һүҙҙәр ҡатламы ҙур урын алып тора.

### Ауылыбыҙҙың бөгөнгө көндәге лексикаһы

Фәррәх сәсән ижадын тикшереү менән бер рәттән мин бөгөнгө ауыл һөйләшенә ҡараған бик күп кенә һүҙҙәр ҙә таптым. Уларҙы башҡорт әҙәби теле һәм рус телдәре менән сағыштырып бирмәксемен .

| | Ауыл һөйләшендәге һүҙҙәр | Әҙәби телдә (йә уның аңлатмаһы) | Русса |
|---|---|---|---|
| | **Туғанлыҡ, ҡәрҙәшлек терминдары** | | |
| 1. | инәй, инәкей, әңкәй, әней | әсәй | мама |
| 2. | әтей | атай | папа |
| 3. | апа | апай | сестра |
| 4. | апай | эне, һеңле | братишка, сестренка |
| 5. | ҡартәтәй | Әсәйҙең, атайҙың атаһы-олатай | дедушка |
| 6. | нәнәй | әсәйҙең әсәһе | бабушка |
| 7. | ҡартинәй | атайҙың әсәһе | бабушка |
| 8. | абзинәй, зуринәй | әсәйҙең, атайҙың апайы | тетя |
| 9. | абзәтәй, зурәтәй | әсәйҙең, атайҙың ағаһы | дядя |
| 10. | биатай | ирҙең атаһы-ҡайны | свекр |
| 11. | бианай | ирҙең әсәһе – ҡәйнәм | свекровь |
| 12. | әбей | ҡатындың әсәһе – ҡәйнәм | теща |
| 13 | бабай | ҡатындың атаһы-ҡайны | тесть |
| 14. | ҡайынапа | иренең апайы | золовка |
| 15. | йанағай | иренең энеһе | |
| 16. | түтәй | апай | тетя |
| 17. | жиңгәчәй | ағайҙың ҡатыны | |
| 18. | ҡайнаға | ҡатынының ағаһы | шурин |
| 19. | Бәпес, бәбәй | бәләкәс бала | ребенок |
| 20. | Баланан ҡотолған, бала тапҡан | ҡатын кеше бәпес тапһа | родила |
| | **Ботаникаға ҡараған терминдар** | | |
| 1 | сәрби ағачы | сәрүәр ағасы | акация |
| 2 | мәшкә | бәшмәк | гриб |
| 3 | чәчкә | сәскә | цветок |
| 4 | гөлжимеш | әлморон | боярышник |
| 5 | терке | ҡарағай | сосна |
| | **Йәнлек, ҡош-ҡорт атамалары** | | |
| 1 | пошой | мышы | лось |
| 2 | песей | бесәй | кошка |
| 3 | кәккүк | кәкүк | кукушка |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 4 | көлкәй | ҡолон | жеребенок |
| 5 | умарта | бал ҡорто | пчела |
| | **Йорт-ҡура, ҡаралды терминдары** | | |
| 1 | лапас, абзар, мал өйө | аҙбар | сарай |
| 2 | ҡаралты | утынлыҡ | дровальник |
| 3 | утар | аран | стойло |
| 4 | ихата | ҡура | двор |
| 5 | ҡар базы | мөгәрәп | погреб |
| 6 | ҡойо | ҡоҙоҡ | колодец |
| 7 | синлек | бесәнлек | сеновал |
| 8 | кәбәркә | аш бүлмәһендә мейес арты | кухня |
| | **Йылға, күл, ландшафт (географик терминдар)** | | |
| 1 | Идел | Ағиҙел | Белая |
| 2 | болын | йылға буйы | побережье |
| | **Транспорт терминдары** | | |
| 1 | сәпит | велосипед | велосипед |
| 2 | матай | мотоцикл | мотоцикл |
| 3 | вахта | эшкә йөрөтөүсе автобус | вахтовый автобус |
| 4 | маршрут | маршрут автобусы | маршрутный автобус |
| | **Йөн, дебет эшкәртеү** | | |
| 1 | йон эрләү | йөн иләү | прядение |
| 2 | йон языу | йөн тетеү | |
| | **Кейем-һалым терминдары** | | |
| 1 | аяҡ сауыты | аяҡ кейеме | обувь |
| 2 | пима | быйма | валенки |
| 3 | ойыҡбаш | йөн ойоҡ | шерстяные носки |
| 4 | күфәйке | һырма | фуфайка |
| | **Ашамлыҡ-эсемлек терминдары** | | |
| 1 | ботка | бутҡа | каша |
| 2 | сөт өстө | ҡаймаҡ | сметана |
| 3 | тош | сәк-сәк | чак-чак |
| 4 | бәрәңге төрмәсе | бөйөрөк | пирожок с картошкой |
| 5 | эпей | икмәк | хлеб |
| 6 | писүк | шәкәр ҡомо | сахарный |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | песок |
| 7 | бәрәңге | картуф | картошка |
| 8 | күкәй | йомортҡа | яйцо |
| **Ҡашығаяҡ, һауыт-һаба** | | | |
| 1 | чәшке | сынаяҡ | чашка |
| 2 | бидрә | силәк | ведро |
| 3 | оҡлау | уҡлау | скалка |
| 4 | бәллүдә | сынаяҡ аҫты | блюдце |
| 5 | ижау | аш сүмесе | половник |
| 6 | ит тәрилкәсе | ҡоштабаҡ | большая тарелка |
| 7 | көрөшкә | | кружка |
| | **Йорт кәрәк-яраҡтары** | | |
| 1 | тастымал | һөлгө | полотенце |
| 2 | кисәү таяғы | тәртешкә | кочерга |
| 3 | табағач | суйын тотҡос | ухват |
| 4 | бәллеү | бишек | колыбель |

## Фәррәх сәсән ижадында диалект һүҙҙәр

Диалект һүҙҙәр автор һүрәтләгән хәл-ваҡиғаларға үҙенсәлекле төҫ бирә, уларға "урын" образын өҫтәй.

Фәррәх Дәүләтшин үҙенең үткер фекерле шиғырҙарында, бәйеттәрендә беҙҙең яҡ һөйләшенә ҡараған һүҙҙәрҙе тапҡыр һәм урынлы ҡуллана. Мәҫәлән, **"Үткән ғүмерем"** шиғырында *алама* — насар, иҫке (старый); ауып — йығылып (упасть) мәғәнәһендәге һүҙҙәр ҡуллана:

Санаһы бик *алама,*
*Только* өс кенә ҡарама.
Ат саба, сана тарала,
Фәррәх шунда *ауып* ҡала...

Шулай уҡ **"Урал"** шиғырында ла *алама* — иҫке (старый) һүҙе ҡулланыла:

Өҫкә кейҙем *алама*
Аяғымда сабата...

**"Үрсетәйек малды, бирмәйек алды"** шиғырында *шаҡшы* — бысраҡ (грязный) һүҙе бар:

Ҡараусылар бик яҡшы,
Мал аҫты булмай *шаҡшы*...

**"Мунсаһын һаттылар, үҙен төрмәгә яптылар"**ҙа:

Нисек ҡайтайым урап?
Бөтөрҙө атын *ҡыйнап (ҡыйнап* — туҡмап — избивать).

Күп кенә шиғырҙарҙа беҙҙең яҡ һөйләшенә хас булған туғанлыҡ, ҡәрҙәш-ырыуҙы белдергән һүҙҙәр урын алған. **“Нурия бәйетендә”:**

Сыҡтыҡ баҡса утарға
Туған, *еңгәсәй* менән *(еңгәсәй* — еңгә, ағайҙың ҡатыны)
Сығып киткән саҡтарымда
Күрә алманым *әңкәмде*
Хәйер итеп юлға ташлайым
Сәсемдәге тәңкәмде *(әңкәмде* — әсәйемде, маму)
Тороп булмай тынып,
Тағы ебәрә *ҡортҡа* ҡыуып *(ҡортҡа* — ҡарсыҡ, старуха).

**“Үрсетәйек малды,бирмәйек алды”** шиғырында:

Малсылыҡтың *планын*
Яҡшы итеп үтәйҙәр.
Һәр йыл һайын бүләкләнә
Мал ҡараусы *түтәйҙәр (түтәйҙәр— апайҙар — тети).*

Шиғырҙарҙа мал-тыуар, йорт-каралты терминдарына ҡараған диалект һүҙҙәр ҙә йыш осрай.”**Үткән ғүмерем”** шиғырында:

Әгәр ҙә бер *бәрән* ҡайтмай ҡалһа,
Халыҡтар ҙа тиргәп сыға*(бәрән*-бәрәс-ягненок)
Өйгә кайтып йоҡлап булмай,
Шул тирәлә генә ятам,*синлектә(синлек*-сеновал-бесәнлек).

Фәррәх сәсәндең тормош юлының бер өлөшө Урал һәм Себер завод-фабрикаларында хеҙмәт менән үтә. Бәлки шуның өсөндәр ҙә уның шиғырҙарында беҙҙең диалектҡа рус теленән килеп ингән күп кенә һүҙҙәр урын алған. Мәҫәлән, **“Үткән ғүмерем”** бәйетендә:

Ун тин бирә көнлөккә
Үҙе ҡуша *конюхлеккә (конюх* — ат ҡараусы).
Көндөң хаҡы *сорок пять*
Эшләргә көсөң етмәһә,
*Расчет* ал да сығып *кәйт!(сорок пять* — ҡырыҡ биш тин, *расчет* — иҫәп, көндәлек эш хаҡы).
Санаһы бик *алама,*
*Только* өс кенә ҡарама (*только* — бары, бары тик)
Эшләгән ерем *ремонта* (*ремонта* — төҙәтеү мәғәнәһендә)
Бер йыл *срок* менән ҡалдым (*срок* — ваҡыт).

**“Беҙҙең ҡояш”** шиғырында:

Беҙҙең тормош яҡтыра,
Партияның әйткән һүҙе
Барыһы ла *фактыла (факт* — ысынбарлыҡ).

**“Яҙ етте”**лә:

Яҙғы сәсеү *планы,*
Эшләмәйсә, туламы?
Тултыра алмаһаң *норманы,*
Уңыш алып буламы?...

**“Үрсетәйек малды, бирмәйек алды”:**

Һөт *нормаһын* хөкүмәткә
Гел арттырып һалалар.
*Закупкаға* ла бирәләр,
*Трудка* ла бүләләр.
Малсылыҡтың *планын*
Яҡшы итеп үтәйҙәр...
Мин түгел бит *счетовод,*

Үҙең кереп бел, һана (*план* — йөкләмә, *норма* — үтәргә, башҡарылырға тейешле эш күләме, *закупка* — һатып алыу, *труд* — башҡарылған эшкә түләү мәғәнәһендә)

**“Минең Мәскәүгә барыуым”** шиғырында:

Осһоҙ хаҡҡа эшләп йөрөп,
Эштәр китмәне *ходка (ходка* — йөрөш, алға табан барыу)

**“Мунсаһын һаттылар, үҙен төрмәгә яптылар”**ҙа:

*Мужик* китте урманға
Аҙыраҡ утын урларға...
Бер туғара, бер егә,
Барып етте *удилгә (мужик* — ир кеше, *удилгә* — уделить — бүленеп бирелгән ер).

Шулай уҡ 1-се, 3-сө зат ҡылымдарының –**мен/-мын, -тен/-тын** аффиксы менән яһалыу күренеше, киләсәк заман хәбәр ҡылымының диалектҡа хас ҡушма формаһы яһау ҙа сағыла:

**”Нурия бәйетендә”:**

Өҫтөмдәге күлмәгемде
Кәштәләргә *эләмен* (элəм)
Йөҙөккәйем юғалғас*тын* (юғалғас)
Аҫылынам муйылға...

**“Ҡоштар һайрай”**

Яҙ *булдиһә* килеп етә (булһа)
Үҙе тыуған иленә... *һәм башкалар.*

Шулай итеп, фәнни хеҙмәт яҙыр өсөн материалдар йыйыу, һүҙлектәр менән эшләү хәҙерге башҡорт әҙәби теленә дөйөм халыҡ телендә ҡулланылған күп кенә һүҙҙәрҙең инмәгәне күренә. Мәҫәлән, башҡорт теленең һүҙлектәренә үҫемлектәр донъяһына, бөжәк, тау тоҡомо һәм минералдарҙың,

бәшмәк һәм башҡа күп кенә өлкәгә ҡараған нәмәләрҙең атамалары инмәгән. Ә ул объекттарҙың исемдәре халыҡ телендә йөрөй. Уларҙы йыйып өйрәнеү, мәҡәләләр яҙыу, конкурстарҙа ҡатнашыу һәр уҡыусының хәленән килә һәм уларҙың бурысылыр. Ошо йүнәлештә эшләү диалект һүҙҙәренең фәнгә хеҙмәт итеүенә һәм һүҙлектәргә инеп китеүенә тура юлдыр.

Башҡортостандың халыҡ сәсәне Фәррәх Дәүләтшин бәйеттәрендә һәм шиғырҙарында автор тарафынан дөрөҫ һайлап алынып, урынлы ҡулланылған диалект һүҙҙәр ҙур роль уйнай. Улар бер яҡтан художестволы әҫәрҙең образлылығын арттырыуға булышлыҡ итһә, икенсе яҡтан, авторҙың үҙенсәлекле хикәйәләү стилен дә билдәләй.

**Информанттар исемлеге**

Тәхәүетдинова Резида Рәшит ҡыҙы, 50 йәш, китапханасы.
Нәбиев Рауил Исмәғил улы, 77 йәш, хаҡлы ялда.
Вәлиева Роза Кәшфи ҡыҙы, 80 йәш, хаҡлы ялда.

**Файҙаланылған әҙәбиәт**

1. Башҡорт һөйләштәренең һүҙлеге: 3 томда. Өфө, 1967.
2. Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр, риүәйәттәр, хәтирәләр, сәсәндәр ижады. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1982.

**Нәҙерғолова Л.,** 11-се класс
Фәнни етәксеһе: **Ҡашҡарова Ф.А.**

## ЙЫЛАЙЫР РАЙОНЫ ЮЛДЫБАЙ АУЫЛЫНЫҢ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

*Һаҡмаркайҙың йылы ҡосағында*
*Иркәләнеп ихлас сабыйҙай,*
*Юлдыбайым ята — аҡ юлдары*
*Һәр ҡитғаны юллап табырҙай.*

**Юлдыбай ауылының тарихы, килеп сығышы**

Мин күңелемдә булған тәьҫораттарым менән уртаҡлашҡым, тыуып үҫкән яғым менән уның тарихы, географик атамалары аша таныштырғым килә.

*Юлдыбай ауылының* тарихы боронғо быуаттарҙан башлана.

*Юлдыбай* — түңгәүер ырыуы башҡорттарының ауылы. Ул Йылайыр районының көньяҡ-көнсығышында Һаҡмар йылғаһының һул яҡ ярында урынлашҡан. Ауыл урынлашҡан ер борон-борондан кешеләрҙе йәлеп иткән,

быны археологик сығанаҡтар раҫлай. Археолог М.Х.Садыҡова ауыл территорияһында табылған, урта быуатҡа ҡараған ҡурған ҡәберлектәрен өйрәнә: «2-се Юлдыбай ҡурғандары. XIII-XIV быуаттар Юлдыбай ауылы, Йылайыр районы». Тыуған яҡты өйрәнеүселәр һәм район йәмәғәтселеге был ҡомартҡыларҙы тикшереү һөҙөмтәләрен ауылдың 800 йыллығын билдәләр өсөн нигеҙ итеп алды.

Был ауылдың тарихына ҡағылышлы башҡа мәсьәләләр ҙә бар. Ҡайһы бер авторҙар, Юлдыбай ауылының тарихын ҡарап, нигеҙһеҙ рәүештә уны көньяҡ түңгәүерҙәренең *Ғүмәр* ауылы менән тиңләй, ә башҡалары *Юлдыбай* ауылы *Букәт (Ғүмәр)* һәм *Юлдыбай* ауылдарын ҡушыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән, тип һанай. Был фекер дөрөҫ түгел. *Ғүмәр* һәм *Юлдыбай* ауылдары бөтә билдәле документтарҙа ла, советҡа тиклемге һәм совет осорондағы карталарҙа ла үҙ аллы биләмәләр булып билдәләнгән. Бынан тыш, был ауылдар төрлө түбәләргә — көньяҡ түңгәүерҙәрҙең ырыу бүлексәләренә, Юлдыбай ауылы *Мишәр-Татлыбай* түбәһенә, ә Ғүмәр — *Һабай* түбәһенә ҡараған. Был ауылдар XX быуаттың 50 йылдарында ғына ҡушылған, быны А.Камалов та раҫлай.

Фирҙәүес Хисамитдинованың материалдары буйынса, *Юлдыбай ауылы* 1795 йылдан алып билдәле. Башҡортостан Республикаһының Үҙәк дәүләт тарих архивында был ауылдың тарихы 1816 йылдан башлап һаҡланған.

Билдәле булыуынса, Юлдыбай ауылы Түңгәүер улысы сотнигы *Юлдыбай Бәкировтың* исемен йөрөтә. Беҙгә билдәле документтар буйынса, Юлдыбай ауылы XVIII быуат уртаһында *Бәкир* исемен йөрөткән.

## Ер-һыу атамалары

Хозур тәбиғәтле *Юлдыбай ауылында* бай тарихлы урындар — шишмәләр, тауҙар, йылғалар бихисап. Ауыл йәмле Һаҡмар буйында урынлашҡан. *Һакмар йылғаһының* исеменә ҡарата ошондай легенда йәшәй.

Элек-электән ҡаҙаҡтар башҡорт ерҙәренә ҡарымта, барымта менән йыш ҡына килер булғандар. Башҡорт халҡы ҡурайҙан уҡ эшләп шул йылғанын эсенә ҡарауыл ҡуйғандар. Улар ҡаҙаҡтырҙы көтөп торған, шунан ҡаҙаҡтарҙың килгәнен күреп, улар иң беренсе килгәндәрен шул уҡ менән үлтергәндәр һәм башҡаларға иҫкәртеп: “Һаҡ бар”, “Һаҡ бар”, — тип оран һалғандар. Шулай итеп, йырҙарҙа йырланған данлыҡлы йылғаны *Һакмар* тип йөрөтә башлағандар.



**Һаҡмар йылғаһы**

Бына ошо Һаҡмар йылғыһы буйында *Бәләкәй Яманташ* һәм *Ҙур Яманташ*, *Һонтоғас* ҡаялары бар. Яманташҡа үҙебеҙҙең ауыл халҡы ғына түгел, ә күрше өлкәләрҙән дә килеп ял итәләр.



**Ҙур Яманташ**



**Әлимәй инеше**

*Әлимәй инеше* Һаҡмар йылғаһы аръяғында урынлашҡан. Был инештең тарихы бик борондан быуындан быуынға күсеп, беҙгә килеп еткән.

Матур яҙ еткән, ағастар япраҡҡа бөрөләнгән, ҡоштар тыуған яҡҡа ҡайтҡандар. Ала ҡар ваҡыты, Һаҡмарҙа боҙ китә торған осор. Ошондай саҡта бала-саға, йәш-елкенсәк тәбиғәт ҡосағына юл ала. Улар яҙға ҡыуана, әтмәкәй, йыуа әҙләй, ҡуян кәбеҫтәһенә шатлана. Төшкә ҡарай ҡояш нығыраҡ ҡыҙҙыра, ә йәштәр уйын-көлкө менән эңер төшкәнен һиҙмәй ҙә ҡала. Ә бәләкәй инеш, Уза йылғаһылай, ярһып аға. Бына егеттәр бәләкәстәрҙе ауыл ярына күтәреп ташый башлай.

Сеү! Әсе тауыш… Ай, был сая ҡыҙ Әлимә бит. Һыу Әлимәне тумарлатып Һаҡмарға ҡарай ағыҙа…

Был "*Әлимәй" инеше* миңә теге ғорур, сая ҡыҙҙың холҡон һүрәтләгән кеүек тойола. (*Сәрбиямал инәй Солтанова һөйләне*)

**Әминкә утары.** *Әминкә утарын Бәләкәй* һәм *Ҙур түш* тип тә йөрөткәндәр, сөнки ул түш һымаҡ ҡалҡып тора. Элек унда бер бабай йәшәгән. Шул урындарға ул тик ҡайын ағастарын ғына ултыртҡан һәм ҡарап үҫтергән. Ул тирәләргә берәү ҙә килә алмаған, ағас ултыртҡан ергә лә хатта инеп йөрөй алмағандар. Шунан бирле инде ул ерҙе *Әминкә утары* тип йөрөтәләр. Хәҙерге ваҡытта ла был ерҙә һаҡланып килгән ҡайын ағастары ла ултыра, хатта шул ҡарттың өйө нигеҙенең ҡайһы бер ерҙәре һаҡланып ҡалған. Хәҙер әргә-тирәһенә өйҙәр төҙөлгән, әммә *Әминкә* урынына берәү ҙә теймәй һәм һаҡланып килә.

XII-XIII быуаттарҙа Башҡортостан территорияһында башында хандар торған эре ырыу биләмәләре барлыҡҡа килгән. Шуларҙың береһе — көньяҡ-көнсығыш Башҡортостандағы *ете ырыу союзы*. Ул Түңгәүер, Бөрйән, Үҫәргән, Тамъян, Ҡыпсаҡтың өс ырыуы йыйындарын *Ялан түңгәүере ырыуы* ерендә юҡҡа сыҡҡан *Әлемсат* ауылынан биш саҡрым алыҫлыҡта *Айҙаболон яланында* үткәрер булғандар. Ете ырыу вәкилдәре шул иркен яланда йыйылып кәңәшләшкәндәр, бәйгеләр ойошторғандар. Ырыуҙарҙың башлыҡтары *Айҙаболон* яланында ошо берләшеүҙең символы итеп ҙур имән бағана ултыртып, уға үҙҙәренең тамғаларын һуғып сыға. Тамғалы бағананы быуаттар буйы серегән һайын алмаштырып торғандар. Ете ырыуҙың йыйылыр урыны Түңгәүер ырыуы ерендә булыуы юҡҡа түгел. Сөнки электән Түңгәүер аҡһаҡалдары һәр ваҡыт үҙҙәренең аҡылы, ғәҙел кәңәш биреүе менән дан тотҡан. 1775 йылда ете ырыу берләшмәһен Ҡаҙандағы илселеккә ебәрәләр, унда Рәсәй дәүләтенә көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының ҡушылыу шарттары билдәләнергә тейеш була. Рәсәй батшаһы Иван Грозныйҙан грамота алыр өсөн, Тамъян ырыуы башлығы *Шәғәле Шаҡманды* ебәрә. Юлдыбай ауылынан 35 саҡрым алыҫлыҡтағы Айҙаболон яланында ҡорға йыйылып оҙатып ҡалғандар.

Был тарихи урын ауылдарҙан алыҫ урынлашҡанға Түңгәүер ерендә ҡабул ителгән ҡарар хөрмәтенә 2006 йылда Юлдыбай ауылы эргәһендәге

*Акташ тауында* башҡорттоң ете ырыу татыулығын, берҙәмлеген сағылдырған стела асылды. Был стела Юлдыбай ауылының бер биҙәге булып, әллә ҡайҙан үҙенә саҡырып тора.



**Ҡулланылған әҙәбиәт**


1. «Ауыл уттары» гәзите. 2013 йылдың 106, 107- се һаны.
2. «Ватандаш» журналы. 2006 йыл, №7.
3. Тыуған яҡты өйрәнеү музейынан мәғлүмәттәр.



**Сәғитова Р.Р**., 2-се класс
Фәнни етәксеһе: **Нурғәлина Р.Ғ.**


## БӨРЙӘН РАЙОНЫ ҠУРҒАШЛЫ АУЫЛЫНЫҢ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

### Ҡурғашлы ауылының тарихы

Ҡурғашлы ауылы ололарҙың иҫендә районның иң матур ауылдарының береһе булып ҡалған. Йәшел сиҙәм менән ҡапланған урмандар, ағастар араһында ултырған йыйнаҡ өйҙәр,Ҡурғашлы йылғаһы буйында ултырған ап-аҡ сәскәгә төрөнгән муйылдар, аллы-гөллө сәскәгә күмелгән урман ситтәре, тау биттәре ауылды йәмләндергән. Ҡурғашлы ауылы, иң беренсе ололарҙың хәтерләүҙәренсә, *Һаҡау туғайында* төҙөлә башлай. "Бер ваҡыт ауылға геологтар килә. Геолог Моталовтан лекция һөйләтәләр, йылғаның ошолай аталыуының сәбәбен һорайҙар. Ул ҡулындағы сүкеше менән ике таштың береһен онтай һуға. Унан бармаҡ башы хәтле ҡурғаш килеп сыға", — тип һөйләгән Мөфтәхетдинов Шәрәфетдин бабай. Был геологтар килмәҫ элек

ауыл кешеләре был ауылға "*Заря*" исемен бирергә булалар. Ауыл төҙөлә башлағас, боронғо йолаларға тоғро булып, һыулаған йылғаның исемен ауылға ҡушалар. Ауылға исем һайлау ҙа ыңғай ғына бармай. Юлсурин Азат Солтангәрәй улы етәксе булып эшләгән, ауылды "*Заря*" тип атайҙар. Унан һуң Баймаҡ районынан килгән Ишбирҙин Сәғит ауылдың исемен БАССР Юғары Советында "*Октябрьский*" тип раҫлаттырып ҡайта. Ауыл халҡы был ике исемгә лә риза булмай. Борондан башҡорттар ауылға үҙҙәре һыулаған йылғаның исемен биргәндәр тип,"*Ҡурғашлы* " исемен һайлағандар.

## Елдарка тауы

Унан Бөрйәнгә киткән юл үтә. Битләүендә Ҡурғашлының төп урамы урынлашҡан. Был тауҙың исемен ике төрлө аңлаталар:

1. Байназаров Мөхәмәҙиә һәм Мөфтәхетдинов Шәрәфетдин бабайҙар тау башында ныҡ ел булһа, йәйге эҫе көндәрҙә аттар себен-серәкәйҙән ҡасып, ошо тау башына менәләр, шуға "*Елде арҡа*" ("*ел*" һүҙенән килеп сыҡҡан, тиҙәр) исемен алған.
2. Шәмиғолов Муса бабай һөйләүенсә, тау оҙон, артылаһың да артылаһың, шуға "*Елдарҡа*" (оҙон, ҙур, елле) тип атала.

## Имес туғайы

Был туғайҙың исеме *Иместәр араһы* кешеләре менән бәйле. Ҡурғашлының ҡарттары аңлатыуынса, был ер аратауҙарҙыҡы булмаған (*Аратау* — күрше ауыл). Уларҙы аҡтар ҡыҫырыҡлағас, икенсе ергә күсергә мәжбүр була. Был туғайҙа күл яғында *Имес араһы* кешеләре йәшәгән, уларҙы көслөрәк ара кешеләре ҡыҫырыҡлағас, бер нисә ғаилә Байназарҙа ҡалған, күбеһе *Аратау* ауылына киткән, тип һөйләй.

Проектта ҡатнашып, географик атамалар тураһында мәҡәлә яҙыу барышында беҙ түбәндәге һығымтаға килдек:

Халыҡ хәтерендә ер-һыу атамалары һәм улар тураһында легендалар һаҡлана. Бөрйән районының ер-һыу атамаларын өйрәнеүҙә Д.З.Аллабирҙин, Ғ.С.Ишбулатов һәм башҡа яҡташтарҙың хеҙмәте ҙур. Шулай ҙа ололар әле иҫән сағында тыуған яҡтың тарихын асыр атамаларҙы, уларҙың легендаларын, фольклорҙы йыйып ҡалырға тырышырға кәрәк. Сөнки ваҡыт үтеү, заманалар үҙгәреү менән халыҡ хәтеренән ҡайһы бер нәмәләр яйлап юйыла бара. Шуға күрә ер-һыу атамаларын, уларға ҡағылған тарихтарҙы, легендаларҙы ваҡытында теркәп алып ҡалыу,уларҙы киләсәк быуындарға еткереү — изге бурысыбыҙ. Быны тик белгестәр генә эшләп бөтөрә алмай.

Беҙҙең тәҡдим:

- ер-һыу атамаларын өйрәнеү буйынса поход-экскурсиялар

ойошторорға;

- был эшкә мәктәп уҡыусыларын, йәмәғәтселекте, оло быуын кешеләрен йәлеп итергә. Йыйылған материалдар менән төрлө конкурстарҙа ҡатнашырға, мәҡәләләр яҙырға, йыйынтыҡтар, китаптар баҫтырырға.

**Информаторҙар:** Земфира өләсәй Сәйәхова, Ғәлимйән олатай Ишбулатов, Мәғәфиә инәй Маликова һәм башҡалар

**Сәйетова Илгенә**, 8-се класс
Фәнни етәксеһе: **Әйүпова Г.Ә.**

## БАЙМАҠ РАЙОНЫ БАСАЙ АУЫЛЫНЫҢ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

### Төйәләҫ (Дөйәләҫ) йылғаһы

Төйәләҫкәй буйы бигерәк йәмле,
Аҡ тирмәләр ҡороп та йәйләргә..

(*Башҡорт халыҡ йырынан*)

Беҙҙең *Басай* ауылынан 4 км алыҫлыҡта ятҡан *Иҫәнбәт ауылын Төйәләҫ йылғаһынан* айырым күҙ алдына килтереп булмай. Сөнки уның барлыҡҡа килеүе лә ошо йылғаға бәйле. Бынан өс быуаттан ашыуыраҡ был урынды төйәк итеп ауылға нигеҙ һалыусыларҙы иң тәүҙә мул һыулы *Төйәләҫ йылғаһы* һәм үҫемлектәргә, кейек-хайуандарға бай *Ирәндек тауы* үҙенә йәлеп итеүе бәхәсһеҙ.

Ирәндектең көнсығыш битләүенән сығып аҡҡан ике йылғаны *Төйәләҫ* тип атағандар. Беренсеһе *Яманташ* исемле *ҡая* аҫтынан урғылып сығып, таш кәртәләр аша үтә барып, ҡаты тау тоҡомдары — порфирит, диабаздарҙан торған өс һикәлтә аша осоп, *Ғәҙелша шарлауығын* хасил итә. Артабан көньяк-көнсығышҡа ҡарап юл ала. Уң яҡтан уға *Шалтран, Яҡшыдәүләт, Япраҡлы* исемле тау *шишмәләре* ҡушыла.

Икенсеһе — *Бәләкәй Төйәләҫ*, Ғәҙелша шарлауығынан 15 саҡрым самаһы төньяҡтараҡ, шул уҡ Ирәндек битләүендә баш ала һәм тәүҙә бәләкәй генә тау шишмәһе булып аға. Уға һул яҡтан *Өйташ, Кәрәсинташ шишмәһе*, тауҙың итәгенә төшөүгә тағы ла *Азамат, Батмаҡай*, һуңыраҡ *Ҡаран шишмәләре* ҡушылып, Иҫәнбәткә ҡәҙимге тулы һыулы, көслө генә ағымлы йылға булып формалашҡан килеш килеп етә.




Төйәләҫтәрҙең тәүгеһе 17, икенсеһе 11 саҡрым юл үтеп, *Туғажман* исемле *тау* итәгендә осрашалар һәм бергә ҡушылып ағалар. *Төйәләҫ йылғаһы* артабанғы ағышында *Кәркәбәр, Асамай, Ҡарағайлы* һәм *Ҡамыш-Үҙәк* исемле ҡушылдыҡтарын ҡабул итә. Был йылға *Ирәндек тауы* итәгенән баш алып, көньяҡ-көнсығышҡа, бер туғаны *Яйыҡҡа* (*Урал*) ашыға һәм 81 саҡрым юл үтеп, оло йылға *Яйыҡҡа Ҡыҙыл* (Силәбе өлкәһе) ҡасбаһынан 10 саҡрым түбәндәрәк барып ҡушыла һәм бергәләшеп Каспий диңгеҙенә юл алалар. *Төйәләҫтең* дөйөм һыу майҙаны 1060 квадрат километр тәшкил итә.

*Төйәләҫ йылғаһында* ташҡын ике мәртәбә булыуы характерлы. Тәүгеһе — апрель аҙағында, тирә яҡта ирегән ҡар һыуы менән бәйле ҡәҙимге яҙғы ташҡын булһа, июнь урталарында, ҡояш зенитҡа күтәрелгәс, йәйге ташҡын күҙәтелә. Быныһы Ирәндектең тәрән үҙәктәрендә ҡышҡы бурандар һалған ҡалын ҡатлам ҡарҙарҙың интенсив иреүе менән бәйле.

Ҡар ҡалын йылдарҙа күперҙәрҙе йыуып ағыҙған осраҡтар ҙа булғылай.

Октябрь революцияһынан алда *Төйәләҫ йылғаһын* быуып, тирмәндәр ҡорғандар. Ундай тирмәндәр *Басай, Төркмән, Казанка, Әхмәр Калинин ауылдары* эргәһендә булған. Уларҙан тыш, *Бәләкәй Төйәләҫтең* түбәнге ағымында *Беренсе Төркмән* ауылынан өҫтәрәк *Николай быуаһы* бар. Ул быуаны Орск сауҙагәренең береһе, алтын сәнәғәтсеһе Николай 1872-1873 йылдарҙа төҙөткән. Быуаның һыу яҭҡылығы майҙаны 12 га, күләме 300 мең куб.м. Ирәндек совхозы уны даими йүнәтеп торҙо һәм әлегә тиклем матур һыу һаҡлағыс булып хеҙмәт итә.

Артабан *Төйәләҫ йылғаһында* шул исемле быуа 1962 йылда төҙөлә. Уны төҙөүҙең башы КПСС-тың Башҡоростан өлкә комитеты беренсе секретары

З.Н. Нуриев менән бәйле була. Партияның Америка Ҡушма Штаттарын ҡыуып етеү һәм уҙып китеү лозунгыһы аҫтында йылына 50 мең баш өйрәк үрсетеүгә иҫәпләнеп, Төйәләҫ ҡасабаһы эргәһендәге комплекс составында төҙөлгән быуа була ул. Һыу яҭкылығы майҙаны 38 га, һыу күләме 650 мең куб. м. *Төйәләҫ йылғаһында* тағы ла бер быуа Сибай ҡалаһына яҡын урында төҙөлгән. Йылғаның ағымын көйләү, ҡала халҡының шәхси баҡсаларын һыу менән тәьмин итер өсөн һәм ял зонаһы булып хеҙмәт итә. Майҙаны 5 га, һыу күләме 125 мең куб.м.

Төйәләҫ йылғаһы һәм быуаларында балыҡтарҙан *аҡ сабаҡ, ажау ҡыҙылғанат,ҡорман балыҡ, ташбаш, шамбы, йәйен, алабуға, суртан, шырт балыҡ* һ.б. балыҡтар үрсей.

Иҫәнбәт ауылы биләмәләрендә һыу ҡоштарынан *һуна өйрәк, сумғыс өйрәк, кереләк сөрәгәй, һоро өйрәк, аҡҡош, берғабан, аҡсарлаҡ, ала ҡаҙ* йәшәй.

Ер-һыу хайуандарынан *ҡондоҙ ҡама, көшөл, һыу сысҡаны, телмәрйен, баҡа, әрмәнде* кеүек вак тереклек төйәк иткән.

Төйәләҫ был географик атамаға (топоним) ниндәй мәғәнә һалыныуы тураһында бер нисә фекер йөрөй. Берәүҙәр төйөнләнеү тигәндән барлыҡҡа килгән тип фаразлай. Быныһы ике *Төйәләҫтең Туғажман* тауы итәгендә бергә ҡушылыуы, ошонда уҡ *Япраҡлы йылғаһын* үҙҙәренә ҡабул итеүе, йәғни төйөнләнеүе менән аңлаталар. Был фекер мәнән килешмәгәндәр ҙә юҡ түгел.

Мәҫәлән яҙыусы Мәүлит Ямалетдиновты тыңлап ҡарағанда: «Башҡорттарҙа, ғөмүмән, төркиҙәрҙә, йылғаларға яныуар исемдәрен ҡушыу ғәҙәте булған. *Тәкәлек, Быҙаулыҡ, Таналыҡ*. Һәм был ваҡыта *Төйәләҫ* исеме лә аңлашыла кеүек. Шул уҡ ваҡытта ошо исемдең килеп сығышын *дөйә* менән *ләҫ* һүҙҙәрен ҡушыуҙан барлыҡҡа килгән тип тә аңлаталар. *Ләҫ— дым, һыу* тигәнде аңлата. *Дөйәләҫ — дөйә* һыуы, дөйә кисеп сығырлыҡ, тимәк. (М.Ямалетдинов, Ағиҙел журналы. № 6, 2004 йыл).

*Иҫәнбәт, Басай, Төркмән* ауылдарында өлкән быуын кешеләренең был йылғаны *Төйәләҫ* түгел, ә *Дөйәләҫ* тип атауын иҫәпкә алғанда, был фаразға ышанырға ҡала.

Ҡайһы бер ямғырһыҙ йылдарҙа *Төйәләҫтең* һыуы бик әҙәйә. Урындағы халыҡ йылғаны быуып, таҙартып, тәрбиәләп торорға тырыша. Яҙлы-көҙлө беҙ — мәктәп уҡыусылары «Төйәләҫ операцияһы»на сығабыҙ. Был сара күптән күркәм йолаға әүерелгән инде. Йылғаны сүп-сарҙан, яр буйын йыйылған ағас-таштарҙан таҙартабыҙ. Ә *Төйәләҫ* беҙгә рәхмәт әйтә-әйтә мәңге тынмаҫ йырҙарын көйләп ,артабан сылтырап ағыуын дауам итә. Аҡһын әйҙә, мул һыулы, моңло тауышлы күпте күргән олпат, йомарт йылғабыҙ. Ул беҙгә атай-олатайҙарыбыҙҙың үткәнен һөйләй төҫлө, ә беҙҙең тарихты киләсәк быуынға еткерер моғайын. Амин, шулай булһын, шулай булыр ҙа...

**Сәйетова Я.М.,** 5-се класс
Фәнни етәксеһе: **Баййегетова Г.Т.**

# БАЙМАҠ РАЙОНЫ ТАУЛЫҠАЙ АУЫЛЫНЫҢ ОНОМАСТИК МАТЕРИАЛДАРЫ

Һәр төбәктең үҙенә хас йәме, үҙенең сере, тарихы бар. Улар исемдәрҙә, атамаларҙа тупланған. Исемдәрҙә — ил тарихы, тиҙәр. Төптән уйлап, тикшереп ҡараһаң, тарих ҡына түгел, тел ынйылары, быуындар яҙмышы, фольклор улар. Ошо тылсымлы исемдәр эсендә күпме легенда, риүәйәт, йырҙар, халыҡ ижады ынйылары йәшеренгән.

Әҙәбиәт дәрестәрендә беҙ ауылыбыҙҙың тарихы, ер-һыу атамалары тураһында материалдар ҙа йыйҙыҡ. Уҡытыусыбыҙ: “Тәүҙә ауылыбыҙҙың тарихын өйрәнергә кәрәк, ә унан район, республика, ил тарихы тураһында белем алыуға күсербеҙ,” — тип беҙҙе ҡыҙыҡһындырып, дәртләндереп ебәрҙе.

Мин үҙем йыйған, эҙләнгән материалдарымды һеҙгә лә тәҡдим итергә булдым.

## Ономастика һәм уның әһәмиәте

Ономастика-тел белеменең бүлеге, яңғыҙлыҡ исемдәрҙе өйрәнә. Ул бер нисә тармаҡтан тора: топонимика, антропонимика, этнонимика, зоонимика, астронимика, теонимика, прагматонимика һ.б.

Ономастика буйынса материалдарҙы йыйып өйрәнеүҙең әһәмиәте бик ҙур.

Унда халыҡтың бик боронғо замандан алып бөгөнгө көнгә тиклем булған тормошо, көнкүреше, ғөрөф-ғәҙәте, сәйәси хәле, теле, мәҙәниәте, ер-һыу үҙенсәлектәре һ.б. сағыла. Тимәк, ономастика — тарих, төрлө факттарҙы туплаған, һаҡлаған тылсымлы бер донъя.

Ер-һыу атамаларын йыйыу бөгөн бик мөһим. Улар фәнни-тикшеренеү эштәрен алып барырға нигеҙ. Сөнки ҡайһы бер тарихи факттарҙы дәлилләүҙә төплө материал, тип уйлайым.

## Ономастика — ул тарих

Ватаныбыҙҙың тарихын яҙып барыусылар булһа ла, тыуған төйәктең тарихын яҙыусылар, материалдар бик аҙ. Улар легенда, риүәйәт, ер-һыу атамаларында, тирә-яғыбыҙҙағы кеше исеме, фамилиялары аша, ауыл исемдәрендә беҙҙең көндәргә килеп еткән.

“Шәжәрә”, “Һаумыһығыҙ, ауылдаштар” байрамдары үткәреп, ырыу тарихын, быуындарын өйрәнә башланылар.

Беҙҙең Таулыҡай ауылы иң тәүгеләрҙән булып, был байрамдарҙы үткәрҙе. Һәр ара үҙ шәжәрәһен төҙөп, арҙаҡлы шәхестәрҙе асыҡланы.

Ырыу, аралар тормошон белеп, беҙ тыуған төйәк тарихын өйрәнәбеҙ.

Мин эшемде ауылыма исем биргән кеше исемдәренән, ауылым тарихынан башлап китмәксемен.

## Таулыҡай ауылының тарихы

Ололарҙың һөйләүенсә, беҙҙең Таулыҡай ауылы ултырған урын заманында бер яҡтан ҡалын урмандар, икенсе яҡтан иркен туғайҙар менән уратып алынған булған. Мул һыулы *Һаҡмар йылғаһы* буйында муйыл, тал, ерек үҫкән, болондарҙағы үләндең бейеклеге ат бауырына еткән, көҙгөләй ялтырап ятҡан күлдәрҙә аҡҡоштар, өйрәктәр йөҙөп йөрөгән, йәш-елкенсәк балыҡ ҡармаҡлаған. Урмандарҙы болан, мышы, айыу, бүре, төлкө, ҡуян кеүек кейектәр ҡыҙырған, һауаларҙа ғорур бөркөттәр, ыласындар осҡан...

Ә хәҙер иһә был төбәкте танымаҫһың. Тирә-яҡта — ҡола ялан. Шул замандарҙың тере иҫтәлеге булып, Ҡарғалы йылғаһы тамағында бер яңғыҙ ҡарағай ғына етемһерәп ултыра. Үҙ ғүмерендә бик күпте күргән, әсеһен дә, сөсөһөн дә “татыған” ул. Әммә бирешмәгән, ел-дауылдар алдында башын эймәгән...

Ваҡытында ошо гүзәл тәбиғәт ҡосағында Ҡаҙыр атлы бер кеше йәшәгән. Уның биләмәләре Ҡана урмандарынан Ҡыҙыл далаларына тиклем йәйрәп ятҡан. Ҡаҙырҙың ейәне Ҡаратуҡай йыш ҡына үҙенең ҡәрҙәш, ҡорҙаштарын дошман яуҙарына ҡаршы күтәргән (хәҙер ауылдың бер урамы уның исемен йөрөтә). Ҡаратуҡайҙың үҙ балалары булмаған. Бер яуҙа йөрөгән саҡта, ул тауҙар араһында ике-өс йәшлек малай табып ала. Малайға *Таулыҡай* тигән исем ҡушалар. Ул үҫеп етә, ауылда донъя ҡора, һалдатҡа барып ҡайта, һәйбәт белем ала, урыҫса, ғәрәпсә иркен һөйләшергә өйрәнә.

Кем һуң ул *Таулыҡай*? Ундай кеше ысынлап та булғанмы? Ғалим-тарихсы Әнүәр Әсфәндиәровтың хеҙмәттәренә мөрәжәғәт итәйек. Ул бына нимәләр яҙа: “ Таулыҡай ауылының тарихы 400 йылдан ашыуыраҡ. Элек ул *Ҡолторсаҡ* тип аталған. Ҡолторсаҡтың атаһы — *Бейеш тархан*, ә улы — *Ҡотлоюл*. Ҡотлоюлдың *Сураҡ* тигән улы булған булырға тейеш. Ә Таулыҡай бына шуның улы. Таулыҡайҙың улы иһә — *Йәнйегет*. Хәҙерге Йәнйегет ауылы элек *Ҡотлоюл* тип йөрөтөлгән. Ҡотлоюл Ҡолторсаҡов тархан була. 1755 йылғы ихтилалда ҡатнашҡан өсөн һөргөнгә ебәрелә. Уның улдары *Ҡусҡар, Асҡар* һәм *Түләк* тә әсиргә алына, ғүмергә һалдатлыҡҡа ебәрелә”.

Тимәк, Әнүәр Әсфәндиәровтың фараз итеүенсә, *Сураҡ* Ҡотлоюлдың улы булырға тейеш. Атаһы һәм бөтә ағалары ла ҡулға алынғас, Ҡаратуҡай Сураҡтың улы *Таулыҡайҙы* тәрбиәләп үҫтергән, күрәһең.

*Таулыҡай Сураков* Бөрйән волосының старшинаһы була, 1773-1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнаша. 240 йортто ла күтәрә. Баш күтәреүселәр, Ҡана заводына бер нисә тапҡыр һөжүм итеп, 1774 йылда уны баҫып алалар, 48 кешене әсир итәләр. Шул уҡ йылдың 2 июнендә *Таулыҡай* Кананикольскиға тағы бер һөжүм ойоштора, ләкин һөжүм уңышһыҙ тамамлана. Таулыҡайҙың үҙен язаға тарттыралар. Уның урынына улы *Кинйәбулат Әлекәсев* старшина итеп тәғәйенләнә.

Таулыҡайҙың ике улы булған: *Аҡҡусҡар* (1730-1822 йылдарҙа йәшәгән) һәм *Йәнийегет* (1752-1801). Аҡҡусҡарҙың балалары булғанмы, юҡмы — билдәһеҙ. Ә Йәнийегеттең өс ҡатынынан ете улы тыуа: *Баййегет, Үҙәнбай, Күсәрбай, Юнысбай, Ғәбделхаҡ, Иҫәнбай* һәм *Ғәбделғәфи*. *Юнысбай* менән *Иҫәнбай* йәшләй яҡты донъянан китә, ә *Йәнийегет* батша армияһында хеҙмәт итә. 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнаша, заурядсотник була. 1816 йылда Ҡотлоюл ауылында төпләнә. Һуңынан был ауылды *Йәнийегет* тип йөрөтә башлайҙар. Таулыҡай ауылында 1795 йылда — 428, 1834 йылда — 684, 1885 йылда — 526, 1920 йылда 760 кеше йәшәгән. Күренеүенсә, *Таулыҡай* элек ҙур ғына ауыл булған.

Таулыҡайҙың күп кенә ир-егеттәре 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан. Таулыҡайҙың улы *Йәнийегет* — зауряд-сотник, *Әмин Истәков* есаул булған. *Ҡолгилде Саппаров* ике көмөш миҙал менән бүләкләнгән.

*Аҡмырҙа Ҡәҙерғәлин, Баймөхәмәт Юланов, Мөхәмәткәрим Хәлитовтар* 1828-1829 йылғы һуғыштың алғы һыҙығында була.

*Әмин Истәков* хәҙерге *Әмин* ауылына нигеҙ һалғандарҙың береһе. Элегерәк *Түбәнге Таулыҡай* ауылы ла шул исемде йөрөткән. Таулыҡайҙар *Татлыбай* ауылына ла нигеҙ һалған. Яңы урынға күсеп ултырған *Татлыбай Мораҙымовҡа* 1816 йылда 50 йәш була.

1816 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса, Таулыҡайҙа *Күсеү Туктағолов* атлы кеше йәшәгән. Бәлки ул хәҙер “Ирәндек” совхозына ҡараған Күсей һәм Туҡтағол ауылдарына нигеҙ һалыусы булғандыр...

Быуат башында таулыҡайҙарҙың бер өлөшө 46 йорттан торған *Туғыҙбай* ауылында донъя көткән. *Нурый бай* Таулыҡайҙа иң хәлле кешеләр иҫәбендә йөрөгән. Уның 100 баш йылҡы малы, 250-ләп баш һыйыр малы, бер нисә көтөү һарығы булған. *Ғәли Изгин, Хөбби Мусин, Мәһәҙей Тажетдинов, Ғатау Мусин, Хәмзә Ғәлиндар* ҙа Нурый байҙан күпкә ҡалышмаған.

Таулыҡайҙар араһында уҡымышлы кешеләр ҙә күп булған. *Хәлил Хәҙрәт Рәхимов*, мәҫәлән Троицкиҙа Зәйнулла ишан мәҙрәсәһендә уҡып сыҡҡан. Ул Түбәнге Таулыҡайҙа ике манаралы мәсет асҡан, беренсе булып яңы уҡыу индергән. Ауылға күрше-тирәнән дә килеп уҡығандар. *Үрге Таулыҡайҙа* икенсе мәҙрәсәне *Вәлиулла Шоңҡаров* асҡан.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ла ауыл халҡы ситтә ятып ҡалмаған. Ауылдан 130-ҙан ашыу кеше фронтҡа китә. Шуларҙың 81-е яу яланынан әйләнеп ҡайтмай. Таулыҡайҙан 5 кеше 112-се Башҡорт атлы дивизияһында һуғыша. (Байиегетов Хөрмәт олатайҙан яҙып алынды)

## Таулыҡай ауылы хаҡында риүәйәттәр

*Таулыҡай ауылы* тарихын өйрәнгәндә, респонденттар менән осраштым һәм ауылға исем биргән шәхестәр тураһында риүәйәттәргә тап булдым.

*1-се вариант.* XVII быуат аҙаҡтарында ике күсмә башҡорт һәм ҡаҙаҡ ҡәбиләләре араһында һуғыштар булып торған. Шулай бер саҡ сираттағы һуғыштан һуң кешеләр тауҙар араһынан бер ир бала табып ала. Уны балаһыҙ бер ҡарт үҙ тәрбиәһенә ала. Тау араһынан табып алғанға күрә был ҡарт малайға "*Таулыҡай*" тигән исем ҡуша.

Таулыҡай үҫеп, егет ҡорона ингәс, ғаилә ҡора. Ул ғаиләһе менән хәҙерге *Түбәнге Таулыҡай* ауылы ултырған урынды үҙ төйәгенә нигеҙ итеп һайлай. Ауылға уның хөрмәтенә *Таулыҡай* тип исем ҡушалар. (Таулыҡай ауылында йәшәгән Байиегетов Хөрмәт Халис улынан (1930 йылғы) яҙып алынды).

*2-се вариант.* Борон заманда һуғыштан һуң бер үҙәктә бер бала ятып ҡалған, ти. Был баланы бер батыр табып алған, ти. Табылған бала ҡаҙаҡ балаһы булған, ти. Шуға күрә был үҙәкте *Ҡаҙаҡ үҙәге* тип атағандар. Батыр, был баланы Һаҡмар йылғаһының көньяғына алып сығып, тауҙа исем ҡушҡан. Шунан был урындағы йәшәгән халыҡ ауылға *Таулыҡай* тип исем биргән.

*Таулыҡай ауылы* Һаҡмар йылғаһының көньяғында һәм төньяғында урынлашҡан. Ауыл ҙур, матур. Ул бер нисә урамдан тора. Элек урам һуҙылған яҡта кем алда йорт һалған, шуның исеме ҡушылған булған. (Таулыҡай ауылында йәшәгән *Салихов Әгзәм Ғәлләм* улынан (1940 йыл тыуған) яҙып алынды).

## Боронғо урам исемдәре

Ауыл ҙур, матур. Ул бер нисә урамдан тора. Элек урам һуҙылған яҡта кем алда йорт һалған, шуның исемен ҡушҡандар. Таулыҡай ауылы үҙе бер нисә өлөштән тора һәм уларҙың исемдәре бар.

Сәғиҙә инәй торған өлөшө *Сомтоҡай* тип атала. Элек бында бер *Сынтимер* тигән тимерсе булған. Шуның исеме үҙгәреп килеп, ошо көндә *Сомтоҡай* тип үҙгәртелгән.

*Алаҡай тигән өлөшө* бар. Ауылдың был өлөшөндә йәшәгән кешеләр "*алабай*" булғандар, йәғни юҡ-барҙы һөйләүселәр. Халыҡ уны үҙгәртеп, *Алаҡай* тип исем ҡушҡан.

*Баштире өлөшө*. Бында Күгәрсен районы *Баштире* тигән ауылдан күсеп килеп йәшәйҙәр. Шуға ла был өлөш шулай *Баштире* тип атала.

*Ҡаратуҡай урамы*. Был урамда йәшәгәндәр кеше менән ныҡ аралашҡан. Элек *Ҡаратөбәк* тигәндәр. Халыҡ уны үҙгәртә килеп, *Ҡаратуҡай* тигәндәр.

*Ҡаҙағстан урамы*. *Базарбай* исемле ҡаҙаҡ тәү башлап шул яҡка өй һалған, шуға ла ул урам уның ҡушаматы менән йөрөтөлә. Хәҙер ул урамда 10-лап өй бар.

Заман башҡа — заң башҡа тип, күп атамалар үҙгәртелә, яңы исем менән йөрөй башлай. Был урамдар хәҙерге көндә икенсе исемр менән йөрөтөлә.

## Ер-һыу атамалары һәм уларға бәйле легендалар, килеп сығышы

## Йылға-күл атамалары

*Ҡарғалы йылға* — Һаҡмарҙың һул ҡушылдығы. Был атаманың мәғәнәһе тураһында ике төрлө фекер йөрөй: 1. Элек йылға буйында тирәктәр үҫкән, уларҙа ҡарғалар күпләп оя ҡорған һәм бала сығарған. 2. Борон был ерҙә *Ғәле* исемле кеше йәйләгән. Уны, икенсе бер Ғәле исемле кеше менән бутамаҫ өсөн, *Ҡара Ғәле* тип йөрөткәндәр. *Ҡара Ғәленән,* телгә еңелләштерелеп, *Ҡарғали*, *Ҡарғалы* булып киткән.

*Һаҡмар йылғаһы*. Урал батырҙың кинйә улының исеме *Һаҡмар* була.



Һаҡмар йылғаһы

Бер ваҡыт халыҡҡа һыу етмәй башлағас, Урал батыр уландарын саҡырып ала һәм:

— Аяғығыҙ тартҡан яҡка сығып китегеҙ, иллә-мәгәр бер ағым һыуға барып етмәйенсә, артығыҙға әйләнеп ҡарамағыҙ, һаҡ барығыҙ! — тип әйтә, ә үҙенең күҙҙәренә йәш эркелә, улар ергә тәгәрәп төшә, сөнки ул улдарының кире әйләнеп ҡайтмаҫын белә. (*Һаҡ бар* тигән һүҙҙән килеп сыҡҡан, күрәһең).

Бара торғас, Һаҡмар бер ҙур йылғаға барып етә. Артына әйләнеп ҡараһа, үҙенең эҙе һайын күләүектәр барлыҡка килеп, үҙ-ара тоташып, ҙур бер йылғаға әүерелгән, ти.

*Ыштанакҡан* — эстән аҡҡан йылға булғанға халыҡ һөйләшеүендә *ыштанакҡан* һүҙенә әйләнгән. Үрге Таулыҡайҙың зыяратына китеп барғандағы тәүге йырын.

## Шишмә, кисеү атамалары

*Татыр шишмәһе* — Һаҡмар йылғаһының һул ҡушылдығы. Һыуы татырлы (тоҙ тәме) булғанға шулай аталған.

*Арҡыса шишмә* — Һаҡмар йылғаһының уң ҡушылдығы. Ул Һаҡмарға уң яҡтан арҡыры килеп ҡоя. Исеме *арҡыры* мәғәнәһен аңлата.

*Ҡолмәт кисеүе* Үрге Таулыҡай ауылы *Ҡолмөхәмәт* исемле кешенең йорто тапҡырында Һаҡмар йылғаһы аша сыҡҡан кисеү.

*Уртатал кисеүе* — хәҙерге Таулыҡай малсылыҡ фермаһы тапҡыры. Һаҡмар буйында элек өс өйкөм тал ҡыуағы үҫкән. Шуларҙың урталағыһы тәңгәлендә йылғаны ат менән аша сығып йөрөгән кисеүҙе *Уртатал кисеүе* тип йөрөткәндәр һәм хәҙер ҙә шулай атала.

*Хәҙрәт кисеүе* — Түбәнге Таулыҡай ауылында 1863-1927 йылдарҙа йәшәгән күренекле мәғрифәтсе, Таулыҡай мәҙрәсәһенең мөдәрисе *Хәлиулла бин Мөхәммәтрәхин ибн Әл-Бөрйән хәҙрәттәре* ихатаһы тапҡырындағы Һаҡмар кисеүе *Хәҙрәт кисеүе* тип атала.

*Урски (Орск) кисеүе* — хәҙерге райондар төҙөлгәнгә тиклем Баймаҡ районы биләмәләре Бөрйән волосы *Урски* өйәҙенә ҡараған. Волостан өйәҙ үҙәгенә йөрөгән юлдан Һаҡмар аша Таулыҡай ауылы эргәһендәге кисеүҙән сыҡҡандар. Кисеүгә *Урски кисеүе* исеме йәбешеп ҡалған.

*Оҙонгүл кисеүе* — Үрге Таулыҡайҙан Түбәнге Таулыҡайға сыҡҡан кисеү.

*Йөлөк шишмәһе* — Граждандар һуғышы Баймаҡ районы биләмәләрендә бигерәк тә ҡатмарлы, оҙайлы һәм күп һанлы ҡанлы бәрелештәр менән үткән. Урындағы халыҡты ҡыҙылдары ла, аҡтары ла, ике яҡты танымағандары ла килеп, кеше үлтереп, талап йөрөгән. Уларҙың һуңғылары ауылдан алыҫ булмаған ауҡалыҡта, шишмә буйында йәшенеп йәшәп ятҡан. Уларҙы ауыл халҡы *йөлөк* (жулик) тип атаған. Шул урман һәм шишмә хәҙер ҙә *Йөлөк урманы* һәм *Йөлөк шишмәһе* тип атала.

## Оронимдар

*Яңғыҙ ҡарағай ҡаяһы* элек ҡарағай урманы булған. Түбәнге Таулыҡай ауылынан алыҫ түгел текә яр башында бер яңғыҙ ҡарағай үҫеп ултыра. Ә түбәндә Һаҡмар йылғаһы аға. Был балаларҙың да яратҡан төйәге. Унда килеп улар һыу инәләр, ҡомда ҡыҙыналар. Хатта көтөүселәр малын да ошонда һыуларға төшөрә.

Ошо ҡарағайға ҡараптыр инде кеше был төбәккә *Яңғыҙ ҡарағай* тигән исем биргән.

*Арҡыса тауы* —Таулыҡай ауылынан урманға киткән юл эсендә тауҙар буйлап бер бәләкәс кенә йылға аға. Йылға ярында муйыл, ерек, ҡайын ағастары, гөлйемеш, ҡарағат ҡыуаҡтары үҫә. Уның түбәнге ағымында колхоздың һөтсөлөк фермаһы урынлашҡан.

Бәләкәй генә булһа ла тауҙарҙы арҡыры ярып аҡҡаны өсөн халыҡ был йылғаға *Арҡыса йылғаһы* тип, ә тау теҙмәләренә *Арҡыса буйы* тауҙары тигән исем биргән.

*Иркәш, Күстәнә тауҙары.* Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер ир менән ҡатын. Ирҙең исеме — *Күстәнә*, ә ҡатынының *Иркәбикә* булған. Улар бик татыу йәшәгәндәр. Көтмәгәндә һуғыш башланып киткән. *Күстәнә* менән *Иркәбикәнең* ашарға аҙыҡтары бөтә башлаған. Улар, аҙыҡ эҙләп, исемһеҙ ике тауға йүнәлгән. *Күстәнә* бер тауға, ә *Иркәбикә* икенсе тауға менгән. Улар икеһе лә шул тауҙан төшә алмай, үлеп ҡалған. Халыҡ уларҙың исемен мәңгеләштергән: бер тауға — *Күстәнә*, ә икенсеһенә *Иркәш* тип исем ҡушҡан.

*Көнтөшмәҫ* — тау исеме. Тау битләүе төньяҡҡа ҡарай һәм унда йәй көндәре лә ҡояш йылыһы төшмәй. “Көн төшмәй ул ергә” тигән һүҙҙән алынған.

*Ҡарағай һырты* — текә яр башында яңғыҙ ҡарағай үҫеп ултыра. Тау һырты *Ҡарағай һырты* тип атала.

*Бурһыҡ ояһы* — Арҡыса йылғаһы буйындағы текә ҡая. Унда элек бурһыҡ аулағандар, ауыл халҡы бурһыҡ майын һәр төрлө ауырыуҙарҙан ҡулланған. Хәҙер ере тапалып бөткән, көтөү көтөлә. Бурһыҡ та, башҡа йәнлек тә юҡ.

*Заһрый баҙы* — Күсәбә йылғаһы буйында. *Мусин Заһретдин* тигән кеше 1950 йылдарҙа ағас ҡырҡып, баҙға тултырып яғып, колхоз тимерлеге өсөн күмер етештерә. Әле лә ошо урын *Заһретдин баҙы* тип атала.

*Һандуғас һырты* — ауылға яҡын ғына, ҡалҡыу урында. Тирә-яғында ағастар шаулап үҫкән, һандуғастар һайлап торған. Хәҙер ағаслыҡ та юҡ, һандуғас та һайрамай.

*Сурак ҡаяһы* — Күсәбә йылғаһына һул яҡтан *Ҡыҙылташ* йылғаһы, уң яҡтан *Аҡташ* йылғалары килеп ҡойған урындағы ҡая таш. *Сурак батыр* төйәге булған.

## Микротопонимдар

*Ҡаҙыр биләмәһе* — Ҡананикольск яғына ҡарай урман эсендәге бер аҡлан. *Ҡаҙыр — Ҡаратуҡайҙың атаһы,* 1690 йылдар тирәһендә ошонда йәшәгән, тип фараз ителә.

*Яңғаҙы баҫыуы* — Арҡыса һыртында. Түбәнге Таулыҡай кешеһе *Яңғаҙы Сәғәҙәтов* та тирә яҡта даны таралған бай кеше булған. Үҙенең иркен ерендә баҫыу тотоп, иген сәсеп, хәлле көн күреп йәшәгән.

*Абдулла ояһы* — ауылдан 15 км алыҫлыҡта урман эсендәге аҡлан. *Абдулла Саппаров* һәм уның “эйәрсәндәре” (ҡараҡтар) ҡасып йәшәгән урын. *Абдулла бандит* тип тә йөрөтәләр уны. 1935 йылда колхоз активисы, комсомол башлығы, уҡытыусы *Исмәғил Яхинды* атып үлтерә. Аҙаҡ тотола һәм үлем язаһына хөкөм ителә.

*Уҫаҡ түше* — Бикеш менән Таулыҡай араһындағы иген баҫыуы. Элекке ваҡытта ул ерҙә уҫаҡ ағастары шаулап үҫеп ултырған. Һуғыш башланғас, иген баҫыуына әйләндерелгән.

*Тирмән туғайы* — ауылдан 2 км алыҫлыҡта Һаҡмар йылғаһы буйында элек ел тирмәне булған, хәҙер исеме генә ҡалды.

*Бүреле* — ауылдан 25 км алыҫлыҡта, ауыл кешеләре шунда бесән эшләй. Алыҫ булһа ла ятып эшләгән кеше юҡ, унда бүре күп, тиҙәр.

## Кеше исеме һәм фамилиялары

Ономастиканың бер өлөшөн кеше исемдәре, фамилиялары, ҡушаматтары алып тора. IV класта һүҙ төркөмдәренән исемде өйрәнгәндә, беҙ ауылдағы кеше исемдәре, уларҙың яһалышын өйрәндек. Боронғо исемдәрҙең күпселеге ҡушма формала булыуын күрҙек. Ауылыбыҙҙа иң күп фамилиялар *Баййегетовтар, Үҙәнбаевтар, Күсәрбаевтар, Имамбаевтар, Имелбаевтар, Кейекбаевтар, Бүкәнбаевтар, Ҡоланбаевтар.* Борон ата-әсә, балаһына исем ҡушҡанда, төрлө ырымдарға таянған, сөнки баланың исеме уның киләсәгенә йоғонто яһай, тип уйлағандар. Шул арҡала, күрәһең, ҡушма исемдәр барлыҡҡа килгән.

Тәүгеһендә “бай” һүҙе, байлыҡта, муллыҡта йәшәһен мәғәнәһен биргән.

*Һатыбалды* — бер ғаиләнең балалары тыуып торған, тыуғаны үлеп торған, шунан бер балаһы тыуғас та, ата-әсәһе тәҙрә аша һатып алыу йолаһын башҡарған һәм уға *Һатыбалды* тип исем ҡушҡандар һәм был бала йәшәп киткән.

*Юлдыбикә, Юлдаш, Юлдыбай* исемдәре — юлда, сәфәрҙә тыуған балаларға *юл* һүҙе менән исем ҡушғандар.

*Кинйәғол, Кинйәбикә* — ғаиләлә һуңғы тыуған баланың исемены *кинйә* компонентын ҡушыр булғандар.

*Дәүләтбикә* — балам мул йәшәһен, тигән теләк мәғәнәһен һалып, балаға исем биргәндәр.

*Ишбулды, Ишһылыу* — ата-әсәһенә иш булһын, тип юрағандар.

*Ташбулат* — таш кеүек ныҡ булыуын теләгәндәр.

*Арыҫлан, Батыр*- көслө, батыр бала булып үҫеүенә юрағандар.

Ауылыбыҙҙа гөл, нур, йәғни сәскәләргә бәйле исемдәр ҙә күп. Мәҫәлән, *Гөлнур, Гөлдәр, Гөлкәй, Гөлнәзирә, Гөлбаныу, Гөлшат* һ.б.

Ил һүҙе менән башланған исемдәр, ил башлығы тигән ырымға бәйле: *Илшат, Илгиз, Илнур, Илхан, Илсур, Илназ, Илдар, Илгизәр* һ.б.

“Бикә” һүҙе ҡушылып яһалған исемдәр ҙә бар ауылыбыҙҙа. Бикә — ғәрәп һүҙе, башҡортсаһы “сибәр”, “бик матур”, “һылыу” тигәнде аңлата: *Алмабикә***,** *Гөлбикә, Нурбикә, Яңылбикә* һ.б.

“Миң” ҡушымсаһы менән дә исем атағандар. Миңе булған кешеләрҙең тәнендә миңе ҙурайып китмәһен өсөн *Миңлебай, Миңлебикә, Миңһылыу, Миңнур* һ.б. исем ҡушҡандар.

Оҙон ғүмерле булһын тип: *Йәнбикә, Йәнгил, Йәноҙаҡ* һ.б. исемдәр биргәндәр.

## Таулыҡай ауылындағы ир-ат исемдәре

Эҙләнеү эше барышында шулар асыҡланды: оло быуын кешеләренең исемдәре оҙон, мәғәнәле һәм боронғо. Мәҫәлән:

| | | |
|---|---|---|
| Ташбулат | Ҡорбанғәли | Мөхәмәткужа |
| Ишбулат | Нурғәли | Зәйнәғәбдин |
| Айбулат | Муллахмәт | Шәрәфетдин |
| Айтуған | Муллағәли | Тажетдин |
| Шәрифулла | Мөхәмәтғәли | Мөхөтдин |
| Зәйнулла | Нүрбәк | Әхмәткәли |
| Йыһаннур | Хөрмәт | Әхләметдин |
| Шәһәрғәзи | Ишмулла | Ғәйзулла |
| Булат | Әхмәтша | Фәйзулла |
| Әхмәдиә | Ишбулды | Һатыбалды |

**Йәш егеттәр араһындағы исемдәр:** *Урал, Наил, Айнур, Рамил, Әхтәм, Әгләм, Әгзәм, Ильяс, Илнур, Ғәзинур,Илшат, Илназ, Динислам, Айгиз, Илгиз, Илдар* һ. б.

**Сит телдән ингән егеттәр исемдәре лә юҡ түгел:** *Альберт, Радион, Эдуард, Эдик, Роберт* һ. б.

## Ҡатын-ҡыҙ исеме

*Зөлхизә, Сәлимә, Шәүрә, Гәүһәр, Гөлзәминә, Шәрифьямал, Шәмсиниса, Мәҙинә, Таңсулпан, Һәҙиә, Ғәйнисафа, Йәмилә, Гөлйәүһәр, Кәүсәриә, Бүләкбикә, Маһинур, Сәрхәпьямал, Хәнифә, Хөмәйрә, Ғилминиса, Ғәйниямал, Маһикамал, Йомабикә* һ.б.

**Йәш ҡатын-ҡыҙ исемдәре:** *Рауза, Рәйсә, Сәүиә, Дилә, Яҙгөл, Наҙгөл, Гөлдәр, Гүзәл, Зөлхизә, Нәркәс, Нәзилә, Гөлкәй, Зөлфиә, Гөлиә, Гөлсөм, Әлфиә, Гөлшат, Әлфинә, Гөлбикә* һ.б.

**Сит телдән ингән ҡатын-ҡыҙ исемдәре**: *Рената, Зарина, Светлана, Регина, Алина, Румия, Раушания, Руфина.*

## Ҡушаматтар

Ғәҙәттә, ҡушаматтарҙы, аҙаш исемле кешеләрҙең береһенә бирәләр. Уларҙы айырыр өсөн. Беҙҙең ауылда, мәҫәлән, ике *Ғәлиә* бар. Уларҙың береһенә, олоһона үҙ исеме менән *Ғәлиә* тип өндәшәләр, икенсеһенә *Һары Ғәлиә* (аҡ йөҙлө булғанға) тиҙәр.

Ауылда ике *Әхәт* бар: береһенә *Сөгөн Әхәт*, икенсеһенә *Ҡарүпкә Әхәт* тиҙәр.

*Чапай* ҡушаматы *Сәйетов Мулләхмәткә* ҡарата әйтелгән. Бәләкәй сағында ул: “*Мин Чапай булам*!” тип, ҡысҡырып йөрөгәне өсөн.

*Лапша Әхмәҙи*. *Әхмәҙи* ағайҙың ҡатыны *Хәтифә*: “Әхмәди, ҡайт, лапша беште!” — тип, урам яңғыратып ҡысҡырған. Шунан алып уны *Лапша Әхмәҙи* тип йөрөткәндәр. Сөнки ауылда бер нисә *Әхмәҙи* булған.

*Таш Әхмәҙи* — һаран, ҡаты күңелле, һыҡһаң да ҡаны сыҡмаҫ кеше булғаны өсөн уға шундай ҡушамат таҡҡандар.

*Сөгөн Әхәт*. Малайҙар оҙаҡланышып уйын уйнаған ваҡытта *Әхәткә* исем ҡалмаған. Йыһанур олатай уға: “Әйҙә һин сөгөн бул,” — тип әйткән. Төҫө лә ҡара булғанға, уны шулай тип йөрөткәндәр.

*Ҡалаҡ Хәтифә* — сумарт, мул ҡуллы булғаны өсөн әйткәндәр.

*Һары Ғәлиә* — аҡ төҫлө булғаны өсөн уға шундай ҡушамат таҡҡандар.

*Таһир бәпәй* — ата-әсәһе уны ҙур булһа ла, *бәпәйем* тип йөрөткән. Шуға ла уны *Таһир бәпәй* тип әйткәндәр.

*Һандуғас бабай* — Хәйбулла олатай ат, йә үгеҙ егеп ала ла, тамаҡ, тел, ирендәре ярҙамында һыҙғырып, әллә ниндәй матур тауыштар сығарып, еккән малҡайын ҡыуғаны өсөн.

*Эт бабай* — Мөхәммәт олатай балаларҙы күрһә, эт һымаҡ өрөп, уларҙы ҡурҡытҡаны өсөн әйтелгән.

*Йырыҡ Фатима* — ауыҙы йырыҡ, ҡуян ауыҙ булғаны өсөн.

*Татар Сания* — ауылда Сания исемле бер нисә ҡатын-ҡыҙ булған. Милләте татар булғаны өсөн уны *татар Сания* тип әйткәндәр.

*Ҡаҙаҡ Базарбай* — милләте ҡаҙаҡ булғаны өсөн.

*Сүмесбаш Ғәлиә* — башы бәләкәй генә булғаны өсөн.

*Айғыр Ғөзәп* — Исхаковтар араһында ир-егеттәр генә түгел, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа һыбай йөрөгән. Ғәбит олатайҙың ҡартәсәһе *Гөлзәғифә* инәй

Ҡарғалыла *Исхаҡ утарында* һыбай һарыҡ көткән. Бер ваҡыт Кананикольский урыҫтары һарыҡ урларға килгән. Ауылда *Гөлзәғифә* инәйҙе *Ғөзәп* тип йөрөткәндәр. Ул урыҫтарҙы һыбай, мылтыҡ менән баҫтырып ебәргән. Шунан алып уны *Айғыр Ғөзәп* тип йөрөткәндәр.

*Ат бете — Исхаков Айбулат* олатай икенсе кластан алып, унынсы класҡа тиклем һабантуйҙарҙа ат сабышында ҡатнашҡан. Бик күп Маҡтау ҡағыҙҙары, гармун, ҡиммәтле бүләктәр менән бүләкләнгән. Салауат олатайым атты ярышҡа әҙерләгәндә уны бер нисә тапҡыр ултыртып йөрөткән. Ярыш көнө килеп еткәс, һин бәләкәйһең әле, икенсе йыл ултырырһың, ти. Ләкин Айбулат олатай үҙһүҙләнеп, ныҡышып илағас, үҙенең бейәһенә ултыртҡан. Ярышып китеп барған саҡта, аты һөрлөгөп киткән, ҡурҡышынан олатай аттың муйынынан ҡосаҡлап ятҡан булған. Колхоз рәйесе, ветеринар инәйем машина менән килеп еткәндәр һәм, был бала үлгәндер, тиһәләр, биттәре ҡап-ҡара, бысраҡ, ҡулдарын аттың ялына ураған да ат менән бергә тороп килә, ти. Шунан Көмөшбаев (колхоз рәйесе) ух-х “*ат бете*” тип көлгән.

## Этнонимдар

### Таулыкай ауылындағы аралар

**Балталар** — Баййегетовтар араһы. *Каратукай* билендә гел балта ҡыҫтырып йөрөткән.

*Бүреләр* — Баййегетовтар араһының *Усман Ғүмәр* улынан таралған тармағы. *Усман* бүре һуғып алған. Ауылда ике *Усман* булғанға, халыҡ береһен *үгеҙ Усман*, икенсеһен *бүре Усман* тип йөрөткәндәр.

*Ҡарупкәләр — Исхаковтар, Оморҙаковтар, Якуповтар* араһы. Уларҙың бер аты булған, ул да булһа, үпкә ауырыуынан үлгән. Был атҡа ултырып йөрөгән кешегә *Карупкә* тип исем таҡҡандар. Шулай уҡ, йөҙҙәре ҡуңыр төҫтә булған өсөн.

*Көкөрттәр* — Сафиндар араһы. Улар ҡыҙыу, тиҙ генә тоҡанып барыуҙары өсөн уларҙы шулай тип атағандар.

*Күректәр* — Сәйетовтар араһы. Улар әллә ҡайҙан ҡысҡырып, ҡауылдап, хәбәр һөйләп килгәндәре өсөн ҡушылған.

*Үгеҙҙәр — Мусиндар, Исмәғилевтар, Ахметшиндар, Фәхретдиновтар* араһы. Йәй, ығыш булғандары өсөн әйтелгән.

*Бәләбәй татарҙары — Ишалиндар* араһы. Ҡартаталары Бәләбәйҙән күсеп килгән.

*Бәкеләр — Галиндар* араһы. Әсе телле булғандары өсөн шулай тип әйтелгән.

*Көбөләр* — Яхиндар араһы. Оҙон буйлы булғандары өсөн шулай тип ҡушамат таҡҡандар.

*Кәзәләр — Ишкининдар, Дәүләкәновтар* араһы. Үсексән булғандары өсөн ҡушылған.

*Ҡорҙар — Салиховтар* араһы. Бер-береһенә һүҙ ҙә бирмәй, ҡысҡырып һөйләшкәндәр, соролдаҡ булғандары өсөн.

*Ялғаштар — Сәғәҙәтовтар* араһы.

*Йүнселдәр — Сәғәҙәтов Ғисанан* таралған тармаҡ. Ул һәр саҡ йүнләп йөрөйөм әле тип һөйләргә ратканы өсөн.

*Ҡурмастар — Сәғитовтар* араһы. Эре, ҡыҙыу, яндырай булғандары өсөн, ҡурмас кеүек шыртылдап тороуҙары өсөн әйтелгән.

*Тырыздар — Имамбаевтар* араһы. Үсексән, үҙ һүҙле булғандары өсөн шулай ҡушамат тағылған.

*Көршәктәр — Атанғоловтар* араһы. Саҡ ҡына тейһәң дә үсегеп барғандары өсөн әйткәндәр

*Ҡар йоҡмаҫтар — Нөғөмәновтар* араһы. Һаран булғандары өсөн.

*Ҡурпысыҡтар — Киекбаевтар, Ғайсиндар, Мөхәмәтшиндар* араһы.

*Таштар — Солтановтар* араһы. Ҡаты күңелле булғандары өсөн әйтелгән.

*Айыуҙар — Тулыбаевтар* араһы. Ҙур кәүҙәле булғандары өсөн.

*Туһайҙар — Сәлимовтар* араһы. Өндәшмәҫ булғандары өсөн.

*Дыңайҙар — Имелбаевтар* араһы.

*Кәршеләр — Ғимазовтар, Шоңҡаровтар* араһы.

*Бүкәштәр — Бүкәнбаевтар* араһы.

## Ете быуыныңды бел

1993 йылда ауылдаштарыбыҙ республикала тәүгеләрҙән булып шәжәрә байрамын үткәрҙе. Һәр ара үҙенең шәжәрәһен төҙөп, мәҙәниәт йортонда “Шәжәрә” музейын төҙөүгә өлгәште. Шәжәрәләр ебенә ҡарағанда, шәжәрә төҙөгән таблицалар төрлө күләмле килеп сыҡҡан. Сөнки ауылда туған-тыумасаһын белгән, улар менән ҡыҙыҡһынған өлкән быуын кешеләре һирәгерәк ҡалған. Күптәр республика архивы аша үҙенең шәжәрәһен төҙөгән. Мәҫәлән, бер араның шәжәрәһе 22 быуынға тиклем барып етһә, икенселәренеке — 5-7-нән артмай. Байййегетовтарҙың шәжәрәһе — 23, Үҙәнбаевтарҙыҡы — 10, Исхаковтарҙыҡы — 9, Фәхретдиновтарҙыҡы — 11, Нөғәмәновтарҙыҡы — 7, Мөхәмәтовтарҙыҡы — 5, Имамбаевтарҙыҡы — 7 һ.б. быуынға тиклем билдәле.

Шәжәрә таблицаһына күҙ һалһаҡ, ҡайһы бер быуында ябай, ә ҡайһыһында ҡушма исемдәр күп булғанын күрәбеҙ. Ҡайһы бер шәжәрәләрҙә интернациональ исемдәр бар, әммә улар тик һуңғы быуында ғына күҙгә ташлана. Күпселек шәжәрәләрҙә тик саф башҡорт исемдәре булғаны күренә.

Шулай итеп, шәжәрәләрҙе өйрәнеүҙең әһәмиәте бик ҙур. Сөнки быуындар тарихын өйрәнеп, ата-бабаларыбыҙ тарихын өйрәнәбеҙ, быуындарыбыҙ менән ғорурланабыҙ. Һәр кем үҙенең 7 быуынын белергә тейеш, тигән боронғолар.

## Зоонимика

Зоонимика — ономастиканың бер төрө, ул хайуандарҙың ҡушаматын өйрәнә. Кешелек тормошо ер-һыу менән генә түгел, ә хайуандар донъяһы менән дә бәйле. Сөнки борон-борондан башҡорттар һунарсылыҡ, солосолоҡ, балыҡсылыҡ һәм малсылыҡ менән шөғөлләнгән. Һунарына ҡошон, кейеген, атын үҙенә эйәләштергән. Уларҙың һәр береһенә исем-ҡушамат таҡҡан. Эҙләнеү эшемдә мине был тармаҡ та ҡыҙыҡһындырҙы. Мин аттарҙың, эттәрҙең, бесәйҙәрҙең ҡушаматтарын яҙып алдым, өйрәндем. Беҙҙең ауылда түбәндәге ҡушаматтар бар:

**Һыйырға:**

*Алашка* — төҫө ала булған өсөн;

*Гөлнәзирә* — *Гөлнәзирә* исемле ҡатындан һатып алған булғандар, шуға уның исемен ҡушҡандар;

*Мартик* — март айында тыуған быҙауға ҡушҡандар;

*Валентин* һәм *Валентина* — 14 февраль тыуған игеҙәк быҙауҙарға;

үгеҙ быҙауға — *Валентин*, орғасы быҙауға — *Валентина* тип ҡушҡандар.

**Атҡа:**

*Кирсәй* — кир ат булғаны өсөн;

*Ҡашка* — маңлайында аҡ ҡашҡаһы булғаны өсөн;

*Ынйы* — төҫө тимергүк, ынйы кеүек сәсрәп торғаны өсөн;

*Бөркөт* — көслө, таһыллы ат булыр, тип ҡушылған.

**Эттәргә:**

*Алғыр* — һунар эттәренә күберәк ҡушылған, йәнлекте алһын өсөн;

*Аҡтырнаҡ* —тәпейе аҡ булғаны өсөн әйтелгән;

*Аҡтүш* —түше аҡ булғаны өсөн;

*Аҡбай* —төҫө аҡ булған өсөн;

*Һорлан* —һоро төҫтә булғаны өсөн;

*Шоңҡар* — һунар эттәренә ҡушҡандар, ҡош һымаҡ йылғыр булһын, тип ырымлап.

**Бесәйҙәргә:**

*Мыяубикә* (*мыяубай*) — күп мыйылдағаны өсөн;

*Наҙлыбикә* — наҙлы, иркә булғаны өсөн;
*Хәсби* — Хәсбиямал инәйҙән алған өсөн;
*Мурка* — рус исеменән алынған.

## Ауылым мәҙәктәре

Мин эҙләнеү эшем барышында, ауылымда йәшәгән ҡайһы бер шәхестәр, уларҙың һәләттәре, ҡыҙыҡлы хәл-ваҡиғалары тураһында ла ишеттем һәм яҙып алдым. Шуларҙың бер нисәүһен һеҙгә тәҡдим итәм. Һәр ауылда халыҡ ихтирам иткән, нимәләре менәндер башҡаларҙан айырылып торған кешеләр була. Халыҡ ихтирамына лайыҡ булған кеше тураһында хәтер уның үҙе фани донъяны ҡалдырғас та оҙаҡ-оҙаҡ йылдар һаҡлана. Шундай кешеләр иҫәбенә Баймаҡ районы Таулыҡай ауылында йәшәгән *Мортаҙа* олатайҙы ла индерергә була. Заманында ул тирә-яҡта данланған *Зәйнулла ишан* һәм *Хәлил хәҙрәттә* дини һәм донъяуи белем алған, 12 йәштән 92 йәшкә йәки ғүмеренең һуңғы көнөнә тиклем ислам дине ҡанундарын теүәл үтәгән, бынан 30 йылға яҡын элек яҡты донъя ҡуйған. Ул шул тиклем урынлы һәм тапҡыр әйтә торған булған, уны тыңлаған кеше йә эсе ҡатҡансы шарҡылдап көлөр, йә аптырап, ауыҙын асып, шаҡ ҡатып торор булған. Уның мәҙәктәре шул тиклем күп, хатта китап итеп сығарырға ла булыр ине. Мәҫәлән:

**Һуң барһам да иртә ҡайтам.** Бер нисә тиҫтә йылдар элек колхоздарға яҙғы, көҙгө баҫыу эштәре менән етәкселек итер өсөн райком вәкилдәре ебәрелгән булған. Улар *уполномоченный* тип аталған, ә халыҡ урынлы-урынһыҙ бөтә эшкә лә тығылған район вәкилен *апалач* тип исемләгән. Уларҙан ябай халыҡтан алып етәкселәргә тиклем ҡурҡыр булғандар. Шуларҙың береһе Мортаҙа ҡартҡа: “Бабай, нимә эшләп эшкә һуң бараһың?” — тигән. Мортаҙа ҡарт: “Мин бит һуң барһам да иртә ҡайтам!”, — тип яуап биргән.

**Әбей, тоҡтарыңды әҙерлә, һиңә иген тапшыралар.** Атайым әсәйем *Дәүләтбикә* менән колхоз идараһына ҡаршы һайғау ҡапҡалы йортта ғүмер кисерәләр. Әсәйем ауылда оҫта ҡымыҙ бешеүсе булып танылған. Яңы төҙөлгән идара йорто эргәһендә беҙҙең йорт матурлыҡты боҙоп торған кеүек була. Күрәһең, райондан килгән кешеләр был турала колхоз етәкселәренең хәтеренә төшөрөп торғандарҙыр. Бер көн, атайым эштән ҡайтыуына йорт кәртәһен ҙур һүрәт һәм “Дәүләткә ике мең тонна иген тапшырайыҡ!” тигән яҙыуҙы күреп уҡығас, ҡапҡанан инер-инмәҫтән үк ишек алдында йөрөгән әсәйемә: “Әбей, тоҡтарыңды әҙерлә, һиңә хәҙер 2 мең тонна иген алып киләләр!” — тип ҡысҡырҙы. Мин дә, әсәйем дә аптырап ҡалдыҡ. Кәнсә алдында (идара йортон халыҡ шулай тип йөрөтә ине) шарҡылдап көлгән

тауышҡа урамға сыҡһаҡ, теге ҡойманы ҡаплаған һүрәт менән яҙыуҙы күреп, атайымдың мәрәкәһен аңланыҡ, көлөп ебәрҙек. (*Мортаҙа карттың ҡыҙы Сәкинә Иҫәнбаеванан яҙып алынды*)

**Һыйпап ҡараманым.** Колхоз малы өсөн бесәнде күбеһенсә ҡул менән эшләгән осорҙа, бесән әҙерләү айҙарында ҡыуыш ҡороп, шунда йәшәп, бесән әҙерләй торған инеләр. Өлкәндәр менән бер рәттән балалар ҙа бергә йәшәй, уларға ҡулынан килгән тиклем ярҙамлаша инек. Шул осорҙа беҙҙең ҡыуышта йәшәгән күрше малайының бик тә таң атҡанын күргеһе килә ине. Бер көн иртән торҙо ла атайымдан: “Олатай, таң атманымы әле?” — тип һораны. Атайым: “Әллә, шартлағанын ишетмәнем,” — тине. Малай, күрәһең, аптырап ҡалды, бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Ә икенсе көндө иртүк тороп атайымдан: “Олатай, таң белендеме?” — тип һораны. Атайым: “Әллә, һыйпап ҡараманым,” — тип яуапланы.

**Әсәһе вафат булған.** Күрше Мөхлисә апайҙың әсәһе вафат булғас, йүгереп беҙгә ингән. Ул: “Мортаҙа ағай, әсәйем үлде лә ҡуйҙы,” — тип илап ебәргән. Атайым: “Яңы үлгән әсәйеңә илап ни, минең әсәйем 30 йыл элек үлһә лә иламайым,” — тигәс, Мөхлисә апай көлөп сығып киткән.

**Кешеме тиһәм?** Бер апай эҫкерт төбөндә башаҡ йыйып ултырған. Шул ваҡытта аңғармаҫтан Мортаҙа олатай килеп сыҡҡан. Шунан теге апай нимә әйтергә белмәй, ҡурҡышынан: “Ә-ә, кешеме тиһәм, һин икән дә?” — ти. Мортаҙа олатай әйтә: “Мине кешегә лә һынамай башланылар”.

**Һыу тәрәнме икән?** Мортаҙа олатай һыу буйында йөрөгән. Бер кеше килеп сыҡҡан да: “Олатай, һыу тәрәнме икән?” — тип һорай. Мортаҙа олатай әйткән: “Әллә белмәйем, ҡаҙҙар бот төбөнән йүгереп кисеп сығып баралар ине”.

**Нисек үсекмәйһең**? Мортаҙа олатай менән Фуат ағай урманға бесәнгә мотоцикл менән китеп барғанда, мотоциклдары боҙолған. Фуат ағай уны заводить итәм тиһә ты-тырр-ты-тырр тей ҙә һүнә икән. Фуат ағайҙарҙың ҡушаматы *татар* булған. Мортаҙа олатай: “Нисек үсекмәйһең, Фуат, мотоциклың һиңе татарр-татарр тей ҙә үсекләй бит,” — тип көлгән.

**Ялы ла, ҡойроғо ла һеҙгә булыр.** Мортаҙа олатай мәктәптә завхоз булып эшләгәндә минең ҡартатайым мәктәптә уҡыған булған. Йәй көнө мәктәп атына бесән эшләйҙәр. Малайҙар: “Олатай арыныҡ, ял итеп алайыҡ,” — ти икән. Мортаҙа олатай: “Әйҙә ошо яланды күбәләп бөтәйек тә, ялы ла, ҡойроғо ла һеҙгә булыр,” — тигән.

**Һороға буяғыҙ һуң**. Шул уҡ бесән ваҡыты. Мортаҙа олатайҙың һоро аты бик шәп ат, ти. Малайҙар: “Олатай, һинең һоро атың бик шәп, күбә тартыуға,” — тиҙәр ти. Олатай: “Һеҙ ҙә атығыҙ ҙы һороға буяп алығыҙ, шәбәйер,” — тип мәрәкәләй, ти.

**Урман тулы Абдулла**. Бесән ваҡыты еткән. Мортаҙа олатайҙар бесәнгә ат менән сыҡҡан, ә уларҙың күршеһе *Абдулла* мәтәрәлүр мотоциклы менән сыҡҡан. Юлда *Абдулла* олатайҙың мотоциклы күп боҙолған, ураған һайын туҡтап йүнәткән. Мортаҙа олатай уларҙы ат менән әллә нисә тапҡыр үтеп киткән. Ҡайтҡас, мәҙәк итеп: "Урман тулы Абдулла," — тип мәрәкәләгән.

**Батырҙы уятаһың бит**. Элек арьяҡҡа сыҡҡанда өләсәйҙәр, балаларын Мортаҙа олатайҙарҙа ҡалдырып, йомоштарын йомошлаған. *Зарифа ейәнсәре* ул ваҡытта бәләкәй булған. Бер көндә уларҙа *Батыр* ағайымды ҡалдырып, йоҡлатып киткәндәр. Олатай тауышланып хәбәр һөйләгән. Зарифа апай: "Ҡартатай, тауышланма, *Батырҙы* уятаһың бит," — тигән. Олатай: "Ул батыр тип, беҙ ҡурҡып ултырырға тейешме ни?" — тип мәрәкәләгән.

**Нишләп һуктың?** Бесән ваҡытында *Әхмәтшин Ишбулды* олатай тырмала йөрөгән. Мортаҙа олатайҙар күбә һалғандар. Ишбулды олатай мәрәкәләп: "Олатай, ана бүре килә," — тигән. Ә олатай уны ағас һәнәк менән күбә башынан һуғып төшөргән. Ишбулды олатай: "Нишләп һуктың?" — тип илап ултыра, ти. Олатай: "Мин бүре килә икән тип һуктым," — тип яуаплаған

**Әбей, ҡапҡаңды асып ҡуй**. Колхозлашҡан ваҡытта бер ҡапҡа башына: "Дәүләткә шуныңса центнер иген тапшырабыҙ!" — тип яҙып ҡуйғандар. Олатай ҡайтҡан да әбейенә әйтә ти: "Әбей, бар ҡапҡаңды асып ҡуй, хәҙер беҙгә иген алып киләләр," — тигән ти. Сөнки әбейенең исеме *Дәүләтбикә* булған. Инәй аптыраған: "Ниндәй иген алып килһендәр?" — тип һораған. Ә олатай: "Һин дә дәүләтһең дә инде," — тип яуаплаған. (Мортаҙа ҡарттың ҡыҙы *Сәкинә Иҫәнбаеванан* яҙып алынды)



## Ҡулланылған әҙәбиәт


1. Әсфәндиәров Ә. З. "История сел и деревень Башкортостана". Өфө: "Китап", 1994.
2. Монасипов К. "Түбәнге Таулыҡай". Баймаҡ, 2002.

3. Әсфәндиәров Ә. З. “Олатайҙарҙың бар тарихы…” Өфө: Китап, 2005.
4. Матбуғат материалдары: “Һаҡмар”, “Йәшлек” гәзиттәре.
5. Респонденттар:
а) Мәғариф ветераны Байиегетов Хөрмәт Халис улы, 1930 йылғы.
б) Хеҙмәт ветераны Сәлихов Әғзәм Ғәлләм улы, 1940 йылғы.
в) География уҡытыусыһы Байиегетов Ғәзиз Йыһаннур улы, 1962 йылғы.
г) Мәғариф ветераны Иҫәнбаева Сәкинә Мортаҙа ҡыҙы

**Сәхибгәрәева Э.,** 9-сы класс
Фәнни етәксеһе: **Сәхибгәрәева Л.Р.**

## ИЛЕШ РАЙОНЫ ИСӘМӘТ АУЫЛЫНЫҢ ҺӨЙЛӘШЕ

Һәр кемдең тыуған ере, туған теле берәү генә була. Йылдар үтеп, ғүмер уҙып, илдәр гиҙеп күпме генә йөрөмәһен, кеше йәнтөйәге хаҡында хәтирәне күңеленең иң түрендә һаҡлай, тыуған телендә һөйләшә. Әммә ваҡыт үтеү, заманалар үҙгәреү менән халыҡ хәтеренән ҡайһы бер нәмәләр аҡрынлап юйыла бара, һөйләш теле үҙгәрештәргә дуҫар була. Шуға күрә телебеҙҙе һаҡлау — изге бурысыбыҙ.

Исәмәт ауылы республикабыҙҙың төньяҡ-көнбайыш өлөшөндә урнашҡан. Унда татар, башҡорт, мари, изит халҡы вәкилдәре бар. Ауыл аша М-7 федераль трассаһы үтә.

Ғалимә С.Ф. Миржанова беҙҙең ауыл ҡараған төньяҡ-көнбайыш диалектын тәрән өйрәнгән. Әммә бер кешегә һәр ауылдың һөйләш үҙенсәлектәрен өйрәнеп бөтөү мөмкин түгел. Шуға ла Исәмәт ауылы халҡынының һөйләше киләсәктә тулы өйрәнелер, ә беҙҙең ауыл — Исәмәт ауылы буйынса йыйылған материал ғилми эштәр өсөн кәрәк булыр, тип уйлайбыҙ.

Был яҡтың характерлы үҙенсәлектәре бик күп кенә. Йыйылған, өйрәнелгән материалды тәҡдим итәм:

**Лексик үҙенсәлектәр**

| Ауыл һөйләшендәге һүҙҙәр | әҙәби телдә (йә уның аңлатмаһы) | русса |
|---|---|---|
| 1. **Туғанлыҡ, ҡәрҙәшлек терминдары** | | |
| Әни | әсәй | мама |

| | | |
|---|---|---|
| Дәүәти<br>Йыраҡ бабай | әсәйҙең атаһы | дедушка |
| Ҡартәтәй | атайҙың атаһы | дедушка |
| Дәүәни<br>Нәнәй<br>Йырағәби<br>Йыраҡай | әсәйҙең әсәһе | Бабушка по линии матери |
| Ҡартый<br>Ҡартинәй | атайҙың әсәһе | Бабушка по линии отца |
| Дүрнәй<br>Абзинәй | әсәйҙең, атайҙың апайы | тетя |
| Дүрәтәй,зурәтәй | әсәйҙең, атайҙың ағаһы | дядя |
| Оноҡ | әсәй, атайҙың ҡыҙы (2-се быуын) | внучка |
| Оноҡ | әсәй, атайҙың улы (2-се быуын) | внук |
| Килен | улының ҡатыны – килен | невестка |
| Кийәү | ҡыҙының ире – кейәү | жених |
| Бианай | ирҙең әсәһе – ҡәйнәм | свекровь |
| Биатай | Ирҙең атаһы | свекрь |
| Әби | ҡатындың әсәһе – ҡәйнәм | теща |
| Бабай | Ҡатындың атаһы | тесть |
| Ир,ирем,тормош иптәшем | һеҙҙең яҡта ҡатын кеше иренә өндәшә | Муж, супруг |
| Тормош иптәшем | Һеҙҙең яҡта ҡатын кеше ире тураһында һөйләгәндә уны ....тип әйтә | супруг |
| Апа | иренең апайы уға... | тетя |
| Абый | иренең ағаһы уға кем була? | дядя |
| Ҡайнаға | ҡатының ағаһы уға кем була? | деверь |
| Килендәш | бер туған ағалы-ҡустының ҡатындары бер-береһенә ҡарата | |
| Бәбәйем<br>Үскәнем | Бәләкәс балаға кем тип әйтәләр? | |
| Бәбәйләгән | Ҡатын кеше бәпес тапһа, ул ... (нимә тиҙәр?) | родила |
| Ҡыз сорау<br>Ҡыз сөйләшеү | Кейәүгә сығыу, өйләнеүгә ҡараған һүҙҙәр (ҡылымдар) | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 2 | **Ботаникаға ҡараған терминдар** | | |
| | Тупыл | | тополь |
| | Әпипапа | бәпембә | одуванчик |
| | Сәрби ағасы | | акация |
| | Ҡамырлыҡ | энәлек | боярышник |
| | Тигәнәк | дегәнәк | репей |
| 3 | **Йорт-ҡура, ҡаралды** | | |
| | Чиннек | | склад |
| | Келәт | | |
| | Мал өйө | | |
| | Муча | Мунса | баня |
| | Мөржә, мич | мейес | печка |
| | Бәләкәй өй | | летник |
| | Кисәүғач | | кочерыжка |
| | Тупса | Тупһа | порог |
| | Диңгез | нигез | Фундамент дома |
| 4 | **Йылға, күл, ландшафт** (географик терминдар) | | |
| | Әүеште | | Аушта |
| | Чағылтауы | | |
| | Чоҡор | соҡор | яма |
| 5 | **Транспорт** | | |
| | Бәләкәй арба | | тачка |
| | Матай | | мотоцикль |
| | Бәләкәй чана | | Детские сани |
| | Виләй | | велосипед |
| | Сәпит | | |
| 6 | **Кейем-һалым** | | |
| | Арҡа жылысы | | жилетка |
| | Сочинка | | Валенки с голошами |
| | Айаҡ сауыты | Аяҡ кейеме | обувь |
| | Чолғау | солғау | портянка |
| | Ыштан | | рейтузы |
| | Сырма | | пальто |
| | Куфәйке | | фуфайка |
| | Пима | быйма | валенуки |
| 7 | **Ашамлыҡ-эсемлек** | | |
| | Эпи | икмәк | хлеб |

| | | |
|---|---|---|
| Төш | Сәк-сәк | Чак чак |
| Күкәй | йомортҡа | яйцо |
| Тәкә | | пирог |
| Ишмә | | |
| Пирүк | | |
| Төплөкәй | | Картофельный пирог |
| Көлчә | көлсә | |
| Сөт өстө | Һөт өҫтө | сметана |
| Үрә | өйрә | похлебка |
| Сөт өстө | Һөт өҫтө | сметана |
| Писүк | шәкәр | сахар |

8

**Ҡашығаяҡ, һауыт-һаба**

| | | |
|---|---|---|
| Бал ҡашығы, бал ҡалағы | балғалаҡ | Чайная ложка |
| Көрөшкә | | кружка |
| Жомайаҡ | | |
| Ужау | | половник |
| Йулпыч | | Деревянная посуда в форме подноса |
| Бәлүдә | | блюдце |
| Чәшке | сынаяҡ | кружка |
| Табағач | таба тотҡаһы | ухват |

**Эш-хәрәкәтте белдереү**

| | | |
|---|---|---|
| Сүләшә | һөйләшә | разговаривает |
| Йөгөрөү | йүгереү | бежать |
| Жоҡлай | йоҡлай | спит |
| Дөбөртәү | дөбөрләү | Греметь |
| Ботау | бутау | путать |
| Төйәү | тейәү | грузить |
| Йемелтәү | емелдәү | Мерцать |
| Жылау | илау | плакать |

**Инструменттар, кәрәк-яраҡ**

| | | |
|---|---|---|
| Пычҡы | бысҡы | пила |
| Ҡапчыҡ | тоҡсай | мешок |
| Пумала | бумала | помело |
| Бәллү | бишек, сәңгелдәк | колыбелька |

## Төрлө темаға ҡараған һүҙҙәр

| | | |
|---|---|---|
| Йолдоз | йондоҙ | звезда |
| Азғын | аҙман | беспутный |
| Кәнтүш | | самка |
| Жәмәнжә йауы | | Много людей |
| Адаш | аҙаш | тезка |
| Чибәр | сибәр | красивый |
| Дүртенче | дүртенсе | четвертый |
| Сыйыҡ | шыйыҡ | жидкий |
| Борын | Борон | давно |
| Кебек | кеүек | похожий |
| Атынғыч | таған | качели |
| Жилҡуар | елғыуар | ветреный |
| Биби | бәбкә | гусенок |
| Песи | бесәй | кошка |
| Маймул | маймыл | обезьяна |
| Тез | тубыҡ | колено |

## Урам исемдәре (годонимдар)

Исәмәт ауылында *Совет, Шоссе, Чапай, Киров, Йәштәр, Мәктәп* урамдары бар. Октябрь революцияһынан һуң үҙәк урамға *Совет*, унан тағы икеһенә *Киров, Чапаев* исемдәре бирелгән. Халыҡ теледә ошо урамдар шулай уҡ икенсе төрлө әйтелә: *Аръяк* (Киров урамы), *Түбән, Юғары остар* (Совет урамы), *Асҡы урам, Ҡашлаҡ* (Чапаев урамы).



## Ауылда йәшәгән кешеләрҙең ҡушаматтары (антропонимдар)

Ауылда йәшәгәндәрҙең күбеһенең ҡушаматы бар. Улар кешенең төрлө сифатына (холҡона, төҫөнә һ.б.) ҡарап бирелгән. Ҡушаматтар бик күп һәм төрлө. Шуларҙың бер нисәһен һанап китәбеҙ. Мәҫәлән:

*Чапай, Жәпәй, Тауыҡ, Ҡуян* — ҡурҡаҡ кеше, *Күркә* — маҡтанып йөргән кеше, *Сипай, Төлкө* — хәйләкәрҙе аңлата; *Баҡамышкин, Тәкә; Айыу* — ауыр йөрөгән кеше, *Сарыҡ* — аңғыра кеше, *Чикерткә* — бер урында ғына тора алмаған, түҙемһеҙ кеше; *Ата ҡаҙ, Ҡупырый* — маҡтансыҡ, *Өфө, Ябалаҡ, Өрҡодой, Шайтан, Ҡором торбасы, Томба, Камбала, Көсти, Ҡарға, Кутуз, Түмәр, Шүрәле, Невялашка, Бүре, Чипук, Әлпечтә, Поляк*; *Сәпәнем* — туп-тураһын әйткән кеше.

## Исәмәт ауылының һөйләше тураһында ҡыҫҡаса

### Фонетик үҙенсәлектәр

Һүҙ һәм ижек башында *й-ж* өндәренең килеүе: *жәй* — йәй, *жил* — ел, *жылы* — йылы

*А* өнө ныҡ иренләшкән. *о*-ға яҡынайтып әйтелгән осраҡтар ҙа бар. Мәҫәлән: *киласы йылға* — киләһе йылға (на следующий год)

### Морфологик үҙенсәлектәр

Килеш ялғауҙары: *минем, синең, аның, безнең, сезнең һ.б.*

Күплек төшөнсәһе: *-нар,-нәр,-лар,-ләр* ялғауҙары менән белдерелә: *урманнар, китаплар, дәфтәрләр, ҡызлар, ҡарғалар, үләннәр.*

Алмаштар: *син, без, алар, былар, тегеләр.*

Хайуан, ҡоштарҙы саҡырыу: *чеп-чеп, теп-теп* — себеш, тауыҡтарҙы саҡырыу.

*Би-би-би, лиль-лиль, гәҙ-гәҙ* — ҡаҙ бибиләрен саҡырыу

Бәрә-бәрә, тәч-төч,тәч-төч — һарыҡ саҡырыу

Иркәләү төшөнсәһе һөйләштә *-әччәйем,-әйем,-аччайым* ялғауҙыры ярҙамында яһала: *бәбекәччәйем, апҡаччайым, үскәнкәйем.*

## Һөйләү теле өлгөһө

Мөржәләрне ағартып, идәнне, ойалдын, күтәрмәләрне юып, чип-чиста итеп ҡуйа торғаниек.

Мичкә яҡкач, ҡуз төшөү белән утлы күмерне кисәүғачы белән сосҡыға салып алып, самауырға салып, самауыр ҡайнатадырыеҡ. Ҡайнап чыҡкач, ҡапҡачын ачып, күкәй тезеп, кире ҡапҡачын ҡаплап ҡуйадырыйыҡ та, шунда күкәй пешә торғаныйы.

Ашны ҡазанда пешердек. Мич янып беткәч, күмерне казан астына кисауғач белән тартадырыйыҡ та жаңадан утын өстәйсең инде. Ашны жан башына ҡарап саласың. Кеше әзерәк булса, 2-3 чүмеч су саласың. Умач уып пешерәдерийек, и туҡмач кискән чаҡ та буладырыйы. Туҡмачҡа дигән онны нечкә иләктән жулпычҡа иләйдериек. Тәмне буладырие. Ҡайчағында икешәр ужау өстәтеп ашаған чаҡлар барыйы. “Ашамайым, чәй эчмәйем”, — дип утырмайдырыйыҡ, суҡтырып ҡына ҡуйадырыйыҡ. Чәйне Саймәттәй (апа) ҡаты итеп жандырып эчә торғание. Жыраҡ әби сыйыҡ итеп ясатадырие. Өчәр-дүртәр чәшке чәй эчәләрие, бәлүдәгә бүлеп, ашыҡмай ғына, сүләшә-сүләшә. *(Насртдинова Фаягөл Шәмсетдин ҡыҙынан яҙып алдым).*

**Был текстың әҙәби телдәге варианты түбәндәгесә:**

Мейестәрҙе ағартып, иҙәнде, ишек алдын, күтәрмәләрҙе йыуып, тап-таҙа итеп ҡуя торғайныҡ.

Мейескә яҡҡас, ҡуҙ төшөү менән утлы күмерҙе тәртешкә менән тартып китереп һоҫҡоға һалып алып, самауырға һалып, самауыр ҡайната инек. Ҡайнап сыҡҡас, ҡапҡасын асып, йомортҡа теҙеп, кире ҡапҡасын ҡаплап ҡуя инек тә, шунда йомортҡа бешә торғайны.

Ашты ҡаҙанда бешерҙек. Мейес янып бөткәс, утлы күмерҙе ҡаҙан аҫтына тәртешкә менән тарта инек тә, яңынан утын өҫтәйһең инде. Ашты йән башына ҡарап һалаһың. Кеше әҙерәк булһа, 2-3 сүмес һыу һалаһың. Ыумас ыуып бешерә инек, туҡмас киҫкән саҡ та була ине. Туҡмасҡа тигән ондо ваҡ иләк менән иләй инек. Тәмле була ине. Ҡайсағында икешәр ижау өҫтәтеп ашаған саҡтар бар ине. “Ашамайым, сәй эсмәйем”, — тип ултырмай инек, һуҡтырып ҡына ҡуя торғайныҡ. (ашап бөтөрө торғайныҡ). Сәйҙе Сәймә инәй ҡаты итеп яһата ине. Өсәр-дүртәр сынаяҡ сәй эсәләр ине, бүлеп, ашыҡмай ғына, һөйләшә-һөйләшә.

**Информанттар исемлеге**

Насртдинова Фаягөл Шәмсетдин ҡыҙы,60йәш, хеҙмәт ветераны.

Назирова Фаягөл әбей, 75 йәш, пенсионер.

Фаррахова Кифая әбей, 84 йәш.

**Ҡулланылған әҙәбиәт**

1. Асфандияров А.З. История сел и деревень Башкортостана.

2. Кейекбаев Ж.Ғ. Башҡорт диалекттары һәм уларҙың тарихына ҡыҫҡаса инеш // Ғилми яҙмалар.

3. Миржанова С.Ф. Северо-западный диалект башкирского языка.Уфа, 1991г.

4. Рәшит Шәкүр. Башҡорт диалектологияһы. Өфө, 2012.

**Тазетдинова Л. В.**, 11-се класс
Фәнни етәксеһе: **Әбсәхова Э.З.**

## КРАСНОКАМА РАЙОНЫ ИҪКЕ ЙӘНЙЕГЕТ АУЫЛЫНЫҢ ОНОМАСТИК МАТЕРИАЛДАРЫ

Башҡорт теле дәресендә уҡытыусыбыҙ: “Олатай-өләсәйҙәрегеҙ, ата-әсәләрегеҙ һәм дә үҙегеҙ тыуған ауыл, ҡала тураһында нимәләр беләһегеҙ?”, — тип һорағас, был турала бик аҙ белеүебеҙ асыҡланды. Шуға ла географик атамаларҙы йыйып өйрәнергә булдым, сөнки улар ҙа ерҙең тарихы, үҙенсәлеге, теле тураһында һөйләй.

Краснокама районы ауылдары *Урман-Гәрәй, Ялан-Гәрәй, Ҡырғыҙ, Йәнәй* волостарына ҡараған ерҙәрҙә урынлашҡан. Минең туғандарым — *Гәрәй башҡорттары*. *Йәнйегет* — Краснокама районында иң боронғо ауыл.

*Иҫке Йәнйегет* бик боронғо ауыл булған. Бында ерле башҡорттар йәшәгән.

### Ер-һыу атамалары

**Күлдәр**: *Ғәбит күле* (ауылдың буйынан-буйына). *Акҡошло* тигән урыны бар. *Кәрәм чоҡоро, Ғилфан чоҡоро* ошо күлгә килеп тоташа.

Тирә-яҡтағы күлдәр: *Череккүл, Түгәрәккүл, Арыҫлан күле, Тоба, Нечкәкүл, Элбәккүл, Көн йылғаһы, Канал* (1980 йылдарҙа дамба төҙөгәндә барлыҡҡа килә).

**Баҫыу, аҡлан, ялан, сабынлыҡ, бесәнлек, урман исемдәре:** *Иҙел буйы, Таный, Оло чүмгәләк, Бәләкәй чүмгәләк, Атау, Айырыҡ, Урыҫ юлы* (жулы), *Киҫәк, Өч кайын буйы* (бәләкәй генә күл бар), *Бачкый юлы* (жулы), *Череккүл буйы, Канал буйы, Түгәрәккүл буйы, Аръяк, Төбәк, Әрәмә, Көн буйы, Чытырман ауылы, Зыярат арты, Нcorrectратлыҡ, Умарталыҡ, Ҡарама аҫты, Элбәк буйы, Ҡом бороно, Паром жире, Совет яланы* (ауыл эсендә хәҙер мәктәптең спорт майҙаны), *Зыярат чоҡоро*.

**Күрше ауылдар:** *Яңы Йәнйегет, Миняевка, Яңы Мошто, Иҫке Мошто, Шушнур, Яңы Аҡтанышбаш, Уртауыл, Яңы Татыш, Иҫке Татыш, Чөгәнәк, Әжәкүл, Уразай, Таҡталачыҡ, Ҡуҙгау, Әшет, Яңы Ҡабан.*

*Иҫке Йәнйегеттән* йыраҡ түгел *Баҫкытау* ауылы урынлашҡан. *Баҫкытау* ауылына 20 быуат башында Бөрө өйәҙендә нигеҙ һалына. 70– се йылдарҙа Түбәнге Кама ГЭС–ын төҙөгән ваҡытта *Иҫке Нуғай, Торатау* ауылы бөтөрөлгәс барлыҡҡа килгән. *Баҫкытау* янында *Торатау* ҡаласығы бар.

**Бөткән ауылдар:** *Иҫке Нуғай, Торатау, Чытырман.*

**Урам исемдәре:**

| № | Документта теркәлгән атама | Халык телендә |
|---|---|---|
| | Победа | Оло урам ,Ҡом урамы, Тау башы, Идел очо) |
| | Новая | Бачҡый урамы |
| | Садовая | Нарат урамы |
| | Набережная | Бәләкәй урам |
| | Пушкина | Кәжә урамы |
| | Чапаева | Арт урам |

**Ауылда йәшәгән кешеләрҙең исемдәре**

**Ир–ат исеме:** *Нурғәли, Ниғмәтжан, Мулламөхәммәт, Ҡасим, Мөдәрис, Нәсих, Зәкәрия, Зөфәр, Мулланур, Барый, Нәсим, Шөғәйеп, Рәшит, Альберт, Зинфир, Фларит, Ғәпбәс, Финнәс, Айҙар, Ҡотдус, Айнур, Илсур, Илгиз, Марсель, Хәбибулла, Хәмит, Рәһит, Фәйҙелғаян, Индүс, Ғәли, Фәвит, Лотфулла, Рим, Фәрит, Вәғиҙ, Льорг, Фикус, Дәнил, Рөстәм, Фаҙыл, Камил, Руфин, Риф.*

**Ҡатын-ҡыҙ исемдәре:** *Флүрә, Фәйрүзә, Мөршиҙә, Финира, Марсила, Тәнзилә, Ғәмбәрия, Нәзирә, Гөләмдәм, Дания, Нәсихә, Асия, Миләүзә, Лена, Людмила, Гөлшат, Эльмира, Разыя, Мәрфуға, Рүлиә, Альбина, Зөһрә, Рәсимә, Мөғәллимә, Лүзиә,    Мосаппиха, Лилиә, Сәкинә***.**

**Фамилиялар:** *Гәрәев, Ғүмәров, Ғилфанов, Хәертдинов, Вәлиев, Әбсәхов (Әфсәхетдинов), Тажетдинов, Хәбибуллин, Йәүһәров, Фәттәхов, Мортазин, Солтанов, Сәғәҙиев, Нәбиев, Әнүәров, Ғибәҙуллин, Ҡашапов, Авзалов, Ғәзетдинов, Ильясов.*

**Ҡушаматтар:**

үзбәк ҡортҡасы (Үзбәкстандан күсеп ҡайтҡан),
*Тарзан* (бәләкәйҙән килгән ҡушамат),
Чытыр (Чытырман ауылыннан,
Пушкин (ҡара бөҙрә сәсле),
*Поляк* (милләтенә ҡарап әйтелгән,
Сәппи (исеме — Мосаппиха),
Апач (элекке колхоз председателе Апачев)
*Урыҫ* (милләтенә ҡарапәйтелгән, дядя Саша),
Кинг-Конг (ҙур кәүҙәле),
Сәғҙи Барыйы (фамилияһыннан),

*Кузьма, Песи, Лотый* (Лотфулла), *Шоғай* (Шөғәйеп), *Йосиф*), *Дәкәр* (Зәкәрия), *Әбеч* (Хәбибулла), Алпамша, Күркә, Ҡуян.

### Һораулыҡҡа мәғлүмәт биргән кешеләр

Әхмәҙуллина Фатима Ғәбиҙулла ҡыҙы, 69 йәш, хаҡлы ялда
Әбсәхов Индүс Мулламөхәммәт улы, 74 йәш, хаҡлы ялда

### Ҡулланылған әҙәбиәт


- Асфандияров А.З. История сел и деревень Башкортостана. Кн. 4.
- Асфандияров А.З. История сел и деревень Башкортостана. Кн. 6.
- Исекеев А.С. Образование и развитие Краснокамского района 1930-2000г.г
  https://ba.wikipedia.org/wiki/Башҡортостан_ауылдары



**Фазылова А.А.**, 8-се класс
Ғилми етәксеһе: **Мөфтиева М.С.**


## ДҮРТӨЙЛӨ РАЙОНЫ ГӨЛӨК АУЫЛЫ ҺӨЙЛӘШЕ

Беҙҙең ауыл һөйләше башҡорт теленең төнъяҡ-көнбайыш диалектына инә. Диалектта аралашҡан оло быуын вәкилдәренең һөйләүҙәренә, шулай уҡ тарихи сығанаҡтарға ҡарағанда, төньяҡ-көнбайыш Башҡортостанда борон-борондан *ҡаңлы, юрмый, гәйнә, танып, йылан, ирәкте, гәрәй* ырыуҙарына ингән башҡорттар төйәк тапҡан.

### Ауылыбыҙ тураһында мәғлүмәт

Беҙҙең ауылға 1783-1795 йылдар араһында Башҡортостандың Бөрө өйәҙе Шәмшәде олоҫонан башҡорттар күсеп килеп нигеҙ һалған. Ауыл Өлкәш йылғаһы буйында, тигеҙ һәм уңдырышлы ерҙә урынлашҡан. 1784 йылдан типтәрҙәр, 1820 йылдан мишәрҙәр күсеп килеп йәшәй башлаған. Ауыл ике урамдан торған. Тау башындағы урам халҡын үткенселәр талап китә торған булған. Шишмә лә уларға йыраҡ булған. Шуның өсөн ул урам халҡы ваҡыт үтеү менән төп урамға күсеп ултырған.

Бөгөнгө көнгә халыҡ һаны 181 кеше, шуның 72 % — башҡорт, 27 % — татар, ҡалғаны — башҡа милләттән булған кеше йәшәй. Ырыуыбыҙ — *иҙел ҡаңлы*.

Ауыл бер генә урамдан тора. Халыҡ телендә ул икегә бүленеп, *түбән* һәм *юғары ос* тип йөрөтөлә.

## Ауылыбыҙҙың һөйләше

### Фонетик үҙенсәлектәр

**А** өнө иренләшеп **о** ға якын әйтелә.

| | **Диалект** | **Әҙәби тел** | **Рус теле** |
|---|---|---|---|
| 1. | ма$^{о}$й | май | масло |
| 2. | а$^{о}$ҡса | аҡса | деньги |
| 3. | ба$^{о}$ҡса | баҡса | огород |

**һ, ҫ** өндәре урынына **с** тартынҡыһы ҡулланыла:

| | **Диалект** | **Әҙәби тел** | **Рус теле** |
|---|---|---|---|
| 1. | сүз | һүҙ | слово |
| 2. | басма | баҫма | мостик |
| 3. | Сары | һары | желтый |
| 4. | сандуғач | һандуғас | соловей |

**Ҙ** тартынҡыһы урынына **з** ҡулланыла:

| | **Диалект** | **Әҙәби тел** | **Рус теле** |
|---|---|---|---|
| 1. | ҡыз | ҡыҙ | девушка |
| 2. | мөгөз | мөгөҙ | рог |
| 3. | изән | иҙән | пол |
| 4. | утыз | утыҙ | тридцать |

**Ҙ** тартынҡыһы урынына **д** өнө ҡулланыла:

| | **Диалект** | **Әҙәби тел** | **Рус теле** |
|---|---|---|---|
| 1. | ҡода | ҡоҙа | сват |
| 2. | ҡодағый | ҡоҙағый | сватья |
| 3. | бодай | бойҙай | пшеница |

**С** тартынҡыһы урынына **ч** өнө ҡулланыла:

| | **Диалект** | **Әҙәби тел** | **Рус теле** |
|---|---|---|---|
| 1. | чәч | сәс | волосы |
| 2. | чәчкә | сәскә | цветок |
| 3. | ачҡыч | асҡыс | ключ |
| 4. | мәчет | мәсет | мечеть |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 5. | сыйырчыҡ | сыйырсыҡ | скворец |

Һүҙ башында **т**-ның **д**-ға күсеше осрай:

| | **Диалект** | **Әҙәби тел** | **Рус теле** |
|---|---|---|---|
| 1. | дары | тары | просо |
| 2. | дулҡын | тулҡын | волна |
| 3. | тигәнәк | дегәнәк | репейник |

Ҡайһы бер һүҙҙәр әҙәби телдәге **с** өнө урынына **т** тартынҡыһы менән башлана:

| | **Диалект** | **Әҙәби тел** | **Рус теле** |
|---|---|---|---|
| 1. | төчө | сөсө | приторный |
| 2. | тычҡан | сысҡан | мышка |
| 3. | төчкөлтөм | сөскөлтөм | пресный |

**У, ү** һуҙынҡылары урынына **о, ө** өндәре ҡулланыла:

| | **Диалект** | **Әҙәби тел** | **Рус теле** |
|---|---|---|---|
| 1. | алабота | алабута | лебеда |
| 2. | ботҡа | бутҡа | каша |
| 3. | йөткөрөү | йүткереү | чихать |
| 4. | йөгөрөү | йүгереү | бегать |

**Б, п** тартынҡылары урынына **ф** өнө ҡулланыла:

| № | **Диалект** | **Әҙәби тел** | **Рус теле** |
|---|---|---|---|
| 1. | керфек | керпек | ресница |
| 2. | туфраҡ | тупраҡ | почва |
| 3. | ҡалфаҡ | ҡалпаҡ | колпак |
| 4. | ефәк | ебәк | шелк |

**Й, е** өндәре урынына йомшаҡ **ж** өнө ҡулланала:

| | **Диалект** | **Әҙәби тел** | **Рус теле** |
|---|---|---|---|
| 1. | ж’әй | йәй | лето |
| 2. | ж’иде | ете | семь |
| 3. | ж’ыр | йыр | песня |
| 4. | ж’ир | ер | земля |
| 5. | ж’ан | йән | душа |

**Б** тартынҡыһы **п** өнөнә тап килә:

| | **Диалект** | **Әҙәби тел** | **Рус теле** |
|---|---|---|---|
| 1. | песей | бесәй | кошка |
| 2. | печән | бесән | сено |
| 3. | пычаҡ | бысаҡ | нож |
| 4. | патша | батша | повелитель |
| 5. | пычраҡ | бысраҡ | грязный |

Һөйләштә **и** һуҙынҡыһы айырым осраҡтарҙа әҙәби телдәге **ә** өнө урынында килә:

| | **Диалект** | **Әҙәби тел** | **Рус теле** |
|---|---|---|---|
| 1. | шикәр | шәкәр | сахар |
| 2. | тирән | тәрән | глубоко |
| 3. | киңәш | кәңәш | совет |
| 4. | кибән | кәбән | стог |

**Э (е)** **и, ө** тап килеүе:

| | **Диалект** | **Әҙәби тел** | **Рус теле** |
|---|---|---|---|
| 1. | эрләү | иләү | прясть |
| 2. | эреү | иреү | таять |
| 3. | эндәшеү | өндәшеү | окликать |
| 4. | беткән | бөткән | закончившийся |

**Ө, о** һуҙынҡыһы **ү, у** өнө урынында килергә мөмкин:

| | **Диалект** | **Әҙәби тел** | **Рус теле** |
|---|---|---|---|
| 1. | хөкөмәт | хөкүмәт | правительство |
| 2. | соҡоу | суҡыу | клевать |

**М** тартынҡыһының **б** өнөнә тап килеүенә миҫалдар:

| | **Диалект** | **Әҙәби тел** | **Рус теле** |
|---|---|---|---|
| 1. | мынау | бынау | этот |
| 2. | мында | бында | здесь |

өй > ү: *урә* — өйрә “похлебка”;
ый > и: *пима* — быйма “валенки”;

ой > о: *бодай* — бойҙай “пшеница”;
оу > у: *посу* — боҫоу “таиться”;
а > ый: *кыйлану* — ҡыланыу “кокетничать”;
и > ей: *нейә* — ниңә “почему”.

## Морфологик үҙенсәлектәр

Бойороҡ һөйкәлешенең күплектәге 2-се затының **–ң (-ың/-ең)** формаһындағы ҡыҫҡа варианты ҡулланыла: *барың* – әҙәби телдә *барығыҙ, ҡайтың* - *ҡайтығыҙ, тороң – торoғоҙ, йөгөрөң* - *йөгөрөгөҙ* һ.б.

Һүҙ аҙағында *–ай/-әй, -май/-мәй* дифтонгылары регуляр рәүештә, әҙәби телдәге кеүек, киң әйтелешле **а, ә** өндәре менән ҡулланыла: *алмай, бармай, килмәйбеҙ, атай, түтәй* һ.б.

Күплек ялғауҙары ике төрлө: *-лар/-ләр* һәм **м, н, ң** өндәренән һуң *-нар/-нәр* формаһында килә: *атлар, сыйырлар, таулар, урманнар, көннәр, төннәр* һ.б.

Исем һәм сифат яһаусы ялғауҙар шулай уҡ ике төрлө: *-лыҡ/-лек, -ныҡ/-нек, -лы/-ле, -ны/-не* формаһында ҡулланыла: *ташлыҡ, шырлыҡ, утынныҡ, ташлы, ҡомны, йәмле.*

Һөйләштә *–кай/-кәй* аффиксы һүҙ яһаусы һәм форма яһаусы аффикс булып тора: *әнкәй* – өләсәй, форма яһаусы аффикс булараҡ, бер нисә мәғәнә белдерә: 1) иркәләү мәғәнәһе (*балаҡай* “детка”, *киленкәй* “сношенька”); 2) иркәләү-кесәйтеү мәғәнәһе (*әпекәй* “хлебушек”); 3) билдәһеҙлек мәғәнәһе (*бер кешекәй* “какой-то человек”).

*- аҡ/-әк, -ыҡ/-ек (ләпек* “грязь”*), -ма/-мә (төрмә* “разновидность пирога”*), -ҡаҡ/-кәк (батҡаҡ* “топь”*), -ҡыч/-кеч, -ғыч/-геч (сөртөнгеч* “полотенце”*), -аш/-әш, -ыш/-еш (узыш* “соревнование”*), -ҡач+ай/-кәч+әй (апаҡачкайым* “сестра моя”*), -чаҡ/-чәк/-чек (алачаҡ* “возьмет”*), -ман/-мән(әрекмән* “репей”*)* аффикстары ҡулланыла.

Сифат яһаусы ялғауҙар: *-лы/-ле, -ны/-не, -сыз/-сез, -мыш/-меш (чуҡынмыш), -ыу/-еү, -ым/-ем, -ма/-мә, -малы/-мәле (шаҡ ҡатмалы), -лыҡай/-лекәй (шәплекәй), -ҡаҡ/-кәк, -ғаҡ/-гәк (йәбешкәк), -ҡан/-кән, -ған/-гән (пешмәгән).*

Зат алмаштарының төбәү, урын-ваҡыт, сығанаҡ килеш ялғауҙары әҙәби телдәге менән айырыла. Мәҫәлән, төбәү килештә: *мейә – миңә, сийә – һиңә, аңа – уга*; урын-ваҡыт килештә: *миндә, синдә, анда*; сығанаҡ килештә: *минән, синән, анан*. Бынан тыш, тағы ла ошондай формалар ҡулланыла: төбәү килештә – *мейәргә, миңәргә* “мне”*, сейәргә, сиңәргә* “тебе”*, аңарға* “ему”*;* сығанаҡ килештә – *мейәрдән, миңәрдән* “от меня”*, сейәрдән, сиңәрдән* “от тебя”*, аңардан* “от него”*;* урын-ваҡыт килештә: *мейәрдә, миңәрдә* “у меня”, *сейәрдә, сиңәрдә* “у тебя”*, аңарда* “у него”.

Һорау алмашының ошондай бик күп варианттары бар: *нәмә? нәмәкәй? нәрсә? нәрсәкәй? нәмәстәкәй? ней? нәстәкәй?* (әҙәби телдә *нимә? нәмә?).*

Икенсе зат күплек ялғауының ҡыҫҡа варианты: -*сыз/-сез* аффиксы менән яһала: *барасыз, китәсез* (әҙәб телдә: *бараһығыҙ, китәһегеҙ).*

## Лексик үҙенсәлектәр

Һөйләштең үҙе өсөн характерлы диалектизмдар араһында тәбиғәт күренештәре, ландшафт, үҫемлектәр донъяһы, йәнлек атамалары, хужалыҡ-көнкүреш, һауыт-һаба, ашамлыҡ-эсемлек терминдары, йорт кәрәк-ярағтары, кейем-һалым, туғанлыҡ мөнәсәбәттәре менән бәйле һүҙҙәр ҡатламы ҙур ғына урын алып тора.

| | | | |
|---|---|---|---|
| **• Тәбиғәт күренештәре, ландшафт** | | | |
| 1 | болон | йылға буйы | побережье |
| 2 | ләпек | батҡаҡ | грязь |
| **• Үҫемлектәр донъяһы** | | | |
| 1 | ҡура жиләге | ҡурай еләге | малина |
| 2 | мәшкә | бәшмәк | гриб |
| 3 | нарат | ҡарағай | сосна |
| 4 | чәчкә | сәскә | цветок |
| **• Йәнлек, ҡош-ҡорт, бөжәк атамалары** | | | |
| 1 | пошой | мышы | лось |
| 2 | көлкәй | ҡолон | жеребенок |
| 3 | умарта | бал ҡорто | пчела |
| 4 | үрдәк | өйрәк | утка |
| 5 | ҡоңғоз | ҡуңыҙ | жук |
| 6 | үрмәкеч | үрмәксе | паук |
| 7 | чыпчыҡ | турғай | воробей |
| 8 | умарта уғы | ҡорт ҡаяуы | жало (у пчел) |
| 9 | черки | серәкәй | комар |
| 10 | туҡран | тумыртҡа | дятел |
| 11 | песей | бесәй | кошка |
| **• Хужалыҡ-көнкүреш терминдары** | | | |
| 1 | абзар, мал өйө | аҙбар | сарай |
| 2 | утар | аран | стойло |
| 3 | ихата | ҡура | двор |
| 4 | ҡар базы | мөгәрәп | погреб |
| 5 | ҡойо | ҡоҙоҡ | колодец |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 6 | бүкән | төп | пень |
| • **Ҡашығаяҡ, һауыт-һаба** | | | |
| 1 | чәшке | сынаяҡ | чашка |
| 2 | бидрә | күнәк | ведро |
| 3 | бәллүдә | сынаяҡ аҫты | блюдце |
| 4 | ижау | аш сүмесе | половник |
| 5 | ҡашыҡ | ҡалаҡ | ложка |
| 6 | ит тәрилкәсе | ҡоштабаҡ | большая тарелка |
| 7 | оҡлау | уҡлау | скалка |
| • **Ашамлыҡ-эсемлек терминдары** | | | |
| 1 | сөт өстө | ҡаймаҡ | сметана |
| 2 | эпей, әпекәй | икмәк | хлеб |
| 3 | тош | бауырһаҡ | баурсак |
| 4 | тәйикмәк | ҡоймаҡ | блины |
| 5 | төрмә | бөйөрөк | пирожок с картошкой |
| • **Йорт кәрәк-яраҡтары** | | | |
| 1 | тастымал | һөлгө | полотенце |
| 2 | чөй | ҡаҙаҡ | гвоздь |
| 3 | пәрдә | ҡорған | штора |
| 4 | кисәү таяғы | тәртешкә | кочерга |
| 5 | табагач | суйын тотҡос | ухват |
| **8. Кейем-һалым терминдары** | | | |
| 1 | аяҡ сауыты | аяҡ кейеме | обувь |
| 2 | пима | быйма | валенки |
| 3 | бәбәй итәк | балаитәк | оборка |
| 4 | ойоҡбаш | ойоҡ | шерстяные носки |
| **9. Туғанлыҡ-кәрҙәшлек терминдары** | | | |
| 1 | инәй, инәкей | әсәй | мама |
| 2 | әтей | атай | папа |
| 3 | апа | апай | сестра |
| 4 | апай | эне, һеңле | братишка, сестренка |
| 5 | ҡартәтәй | олатай | дедушка |
| 6 | нәнәй | өләсәй | бабушка |
| 7 | абзинәй, зуринәй | әсәйҙең, атайҙың апайы | тетя |
| 8 | абзәтәй, зурәтәй | әсәйҙең, атайҙың ағаһы | дядя |
| 9 | бианай | ҡәйнә | свекровь |
| 10 | биатай | ҡайны | свекр |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 11 | әбей | ҡәйнә | теща |
| 12 | бабай | ҡайны | тесть |
| 13 | бәбәй | бәпес | ребенок |
| 14 | абзый | ағай | дядя |
| **10. Кешене характерлаған һүҙҙәр** | | | |
| 1 | майырыҡ | кәүҙәһен тота алмай торған, ҡулынан әйбере төшә торған, ипһеҙ | слабый |
| 2 | микәнәбаш | аңра, аңһыҙ | непонятливый |
| 3 | ҡатыбаш | тиҙ аңламай торған | непонятливый |
| 4 | соҡор елкә | ялҡау | лентяй |
| 5 | кәкүкбаш | онотоп әйберен ҡалдырып йөрөүсе | забывчивый |
| 6 | аяҡлы убырнай | өҫтө- башы бысраҡ | неопрятный, неряха |

**Һөйләү теле өлгөһө**

**Ҡаз өмәсе**

Көзгө-ҡышҡы күмәк йолалар арасында өмә айырым бер урын ала. Хужалыҡта өмәләр ашлыҡ урыу, утын әзерләү, бура күтәреү кебек айырыуча ауыр һәм зур эшләрне ҡысҡа ваҡыт эчендә башҡарыу өчөн үткәрелгән. Йәшләр өмәгә теләге килеп барған, ауыр эшләрне дә бәйрәм кебек итеп башҡарып чыға белгән. Эшне бетергәч, төрлө уйыннар ойыштырылған.

Ҡаз өмәсен йәшләр айырыуча көтөп алғаннар. Безнең әбей-бабайларыбыз ҡазны бик яратҡаннар. Аның мамығынан мендәр, түшәк ясағаннар. Ҡаз итен аш-сыу пешерер өчөн файдаланғаннар. Ҡаз өмәсен бигрәк тә ҡызлар көтөп алған. Ҡаз өмәсе – ул матур итеп аралашыу, күңел ачыу, үзеңне күрсәтеү чарасы былып торған.

Йолҡоған ҡазларны көйәнтәгә асып ҡызлар чишмәгә, сыу буйына алып төшкәннәр, шул сыуда ҡазларны йыуғаннар. Ғәдәттә, гармуннар тағып, ҡызлар белән бергә егетләр дә чишмәгә төшкән.

Ҡазларны йыуып ҡайтыуға, хужабикә ҡаз майында ҡоймаҡ, тәйкмәк пешереп, чәй әзерләп көтөп торған. Кичке чара тамамланғач, өйдә йәшләр уйыны ойыштырылған.

## Ауыл кешеләренең исемдәре, ҡушаматтары

**Ир-ат исемдәре.** Ир-ат исемдәренең күбеһенең икенсе өлөшөндә *йән* һүҙе бар: *Фазылйән, Таһирйән, Ғәҙелйән, Сәлимйән, Хәкимйән, Әхмәтйән* һәм башҡалар. Күп осраҡта исемдәр ҡыҫҡартылып *йән* һүҙе төшөп ҡала: Фазылйән — *Фазыл*, Ғәҙелйән — *Ғәҙлән*, Шәйхелзада — *Зада* һ.б.

**Ҡатын-ҡыҙ исемдәрендә** лә ҡыҫҡартылыуҙар күҙәтелә: Сәрбинур — *Сәрби*, Бибидинә — *Биби*, Маһира — *Майра* һ.б.

**Ҡушаматтар.** Фамилиялар буйынса ҡушаматтар: Солтановтар — *султыйҙар*, Лоҡмановтар — *лоҡмандар*, Сәлимйәновтар — *сәлимкәйҙәр* һ.б.

Айырым кешеләргә бирелгән ҡушаматтар (айырыр өсөн):

*лоҡман Даһыйы* (фамилияһы буйынса),

*сәпәрәй Даһыйы* (сәпәрәй — бөтә эшкә лә тиҙ ҡатнашып китеүсе),

*кәкре Даһый* (бөкөрө кәүҙәле),

*һантый Даһый* ( теленә нимә килә, шуны һөйләп йөрөй),

*Фина Ришаты* (әсәһенең исеме менән),

*Зада Ришаты* (атаһының исеме менән),

*Мәжит Рузаһы* (иренең исеме менән),

*Майра Рузаһы* (әсәһенең исеме менән),

*Ак Фәймә, Ҡара Фәймә* ( төҫ-ҡиәфәттәре буйынса).

Ниндәйҙер бер ваҡиғаға бәйле бирелгән ҡушаматтар:

*әтәс Рим* (бәләкәй саҡта әтәстәренең ҡойроғона ут төрткән),

*хуш аулым Флорит* (армияға киткәндә бөтә кеше алдында ”Хуш, ауылым”, тигән),

*шурик Радис* (“Кавказская пленница”кинофильмындағы төп геройға оҡшатып),

”*эттәнең чибәр малайы*” *Ранис,*

*матбуғат Зада* (почтальон).

Зат, нәҫел буйынса килгән ҡушаматтар:

Әхмәтйәновтар — *куяндар,*

Гилемхановтар — *убырлылар* (күп ашарға яратыусылар),

Әхмәдуллиндар — *алпауыттар* (ҙур — алып кәүҙәле),

*йәбрәй Таһир* (еврейҙарға хас), Н

әбиевтар — *урыҫтар* (аталары рус һүҙҙәрен ҡыҫтырып һөйләшкән),

*әтәс Гикрама* (тиҙ ҡыҙыусан) һ.б.

Килеш-килбәттәренә ҡарап бирелгән ҡушаматтар:

*ҡыярбаш Илдар, сәйпән Фәзит* (башын сайҡап йөрөй), *өгөржө Фәнүз, бағанай Дилавир* (оҙон буйлы), *Зиһанша борон* (оҙон, ҙур танаулы) һәм башҡалар.

Проект буйынса эш ауыл халҡы теленең бай икәнен, уларҙың бик күп кенә өлөшөнөң — халыҡ телендә ҡулланылып, диалект үҙенсәлектәрен сағылдырғандарының "Башҡорт теленең диалекттар һүҙлеге"нә алынмағанын, уларҙың телдә генә йөрөгәнен күрһәтте. Тимәк, диалект һүҙҙәр бөгөн дә башҡорт әҙәби телен байыҡтырыу өсөн әһәмиәте ҙур.

### Информанттар

1. Гарипова Фәнүзә Кәшәфетдин ҡыҙы, 89 йәш, хаҡлы ялда.
2. Әхкәмова Асия Әхкәм ҡыҙы, 90 йәш, хаҡлы ялда.
3. Ханнанова Әлфирә Ғаяз ҡыҙы, 54 йәш, тарих уҡытыусыһы.

### Файҙаланылған әҙәбиәт

Башҡорт һөйләштәренең һүҙлеге: 3 томда/ Н.Х. Ишбулатов һәм Н.Х. Мәксүтова редакторлығында. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1967.

Миржанова С.Ф. Северо-западный диалект башкирского языка: Формирование и современное состояние. Уфа: Китап, 2006.

Шәкүр Р.З. Башҡорт диалектологияһы: уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: БДПУ нәшриәте, 2011.

**Ямгурсина А.И.**
Фәнни етәксеһе: **Баязитова Р.Р.**

## БӨРЙӘН РАЙОНЫ ЯУЫМБАЙ АУЫЛЫНЫҢ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

### Яуымбай ауылы тарихы

Бөрйән райондарындағы ауылдарҙың күпселеге XVII–XVIII быуыттарҙа нигеҙләнә. Бөрйән, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ, Түңгәүер волостарына ҡараған. Был волостарҙың исеме ошонда йәшәгән ырыуҙың атамаһынан алынған. Ҡағиҙә булараҡ, йыш ҡына ауыл исемдәре ошо ауылды барлыҡҡа килтереүҙә ҡатнашҡан кешеләрҙең исеме йәки урындағы берәй атама менән бәйләнгән була. Йәки, киреһенсә, урындағы халыҡтың кемлеген йыш ҡына тирә-яҡтағы атамаларға ҡарап та билдәләп була. Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы ауылдарының иң боронғоһо *Байназар* ауылы иҫәпләнгән. *Байназар* ауылы нигеҙендә *Мораҙым, Яуымбай, Әбделмәмбәт, Һарағы* ауылдары барлыҡҡа килә. 1795-1811 йылдар араһында Үҙән йылғаһы буйында *Әбделмәмбәт*

(икенсе исеме *Ҡыпсаҡ*) ауылы барлыҡҡа килә. *Әбделмәмбәт* ауылы кешеләре ике ауылға — *Килдеғол* (икенсе исеме *Һарағы*) менән *Яуымбайға* нигеҙ һала.

Беренсе ауылға (йәғни *Һарағы*) 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан *Килдеғол Иглик улы Ибраһимов* нигеҙ ҡора. *Килдеғолдоң Сәйфулла, Әбделвәхит, Йәһүҙә, Ғәйнулла* исемле улдары булғанлығы билдәле.

Икенсе ауыл (йәғни *Яуымбай*) *Яуымбай Ҡошйетәров* исеме менән атала. Уның улы *Шаһивәли*, ағалы-ҡустылы *Үҙәнбай, Мөхәмәтәмин* Ватан һуғышында ҡатнашҡандар. 1859 йылда бында 27 өйҙә 160 кеше йәшәй. 1920 йылға 72 өйҙә 345 кеше йәшәй, 2010 йылға ҡарата даими йәшәгән урыны булып иҫәпләнгән, халыҡ һаны 436 кеше тәшкил итә. (Яуымбай ҡарт был ауылға нигеҙҙе яҡынса 1800-1815 йылдар араһында һалған булырға кәрәк, тип фаразлана).

Был ерҙәрҙә йылҡы көтөүлектәре өсөн уңайлы була. Билдәле булыуынса, *Яуымбай ҡарт* бик бай булған. Өйөр-өйөр йылҡыларын ул яланға йыйып иҫәпләр булған. Ялан тулһа, мал теүәл, ә тулмаһа — малына бер-бер хәл булған була. Ҡыш көнө улар тибен дә йөрөгән. Яҙ еткәс, *Яуымбай ҡарт* йәйләүгә — Үҙән буйҙарына киткән. Үҙе һәр ваҡыт алдан барыр булған. Көтөүе артынан эйәргән. Атһөйәр ҡарт ауылдан өс саҡырым алыҫлашыуға, көтөүҙең артҡы осо саҡ ауылдан сыҡҡан.

Яуымбай ҡартты бөтәһелә ихтирам иткән. Ул оҫта ҡурайсы, йырсы булған. Яуымбай ҡарт уйнаған көйҙәр ауылда быуындан–быуынға тапшырылып килгән.

## Ҡайнөй йылғаһы

Яуымбай ҡарт үҙенә өй һалырға булған. Өй нигеҙен ҡайындан башлаған. Нигеҙ урынын ҡаҙа башлағас, был урындан һыу сыға башлай. Һәм үҙенә юл алып, йылға булып ағып киткән. Яуымбай ҡарт тап был һыу урғылған ергә өйөн һалмай, арыраҡ нигеҙ ҡороп ултыра. Ә йылға *Ҡайнөй* тип атала башлаған.

## Ҡолош үҙәге

Ауылдан арҡа яланы яғына сыға торған үҙәкте *Ҡолош үҙәге* тип йөрөтәләр. Был үҙәктә кәкре ҡайын ағасы үҫә. Ололарҙың һөйләүе буйынса, ошо ҡайын төбөндә *Ҡолош* исемле ҡарт ерләнгән, шуға күрә был үҙәкте *Ҡолош үҙәге* тип йөрөтәләр.

## Ташөй мәмерйәһе һәм Сыңғырауыҡ

*Ташөй мәмерйәһе* ауылдан *Ҡайнөй йылғаһы* буйлап түбәнгә ҡарай ике-өс саҡырым алыҫлыҡта ята, ә *Сыңғырауыҡ Олотау* буйынан алты-ете

саҡырым алыҫлыҡта ята. Ололар һүҙе буйынса, *Ташөй* менән *Сыңғырауыҡ* ер аҫты юлдарынан тоташ булырға тейеш. Әүәле *Сыңғырауыҡ соҡорона* ике эт төшөрөп ебәргәндәр. Бер аҙна тигәндә генә, икеһе лә, хәле бөтөп, *Ташөй мәмерйәһе* ауыҙынан килеп сығалар, әммә шунда уҡ һуҡыраялар, имеш. Сөнки эттәр бер аҙна тирәһе ер аҫты юлында була. *Сыңғырауыҡ соҡорона* таш ырғытһаң, оҙаҡ тауыш сығарып сыңғырлап төшөп китер булған, шунлыҡтан был урынды *Сыңғырауыҡ соҡоро* тип йөрөтәләр. *Ташөй мәмерйәһе* инде *Яуымбай* һәм башҡа ауыл халҡын үҙенең матурлығы менән арбап, үҙенә саҡырып тора. Әммә бөгөнгө көндә был мәмерйә асылмаҫ сер булып һаҡлана.

## Аҡбейек

Яуымбай ауылын бик күп тауҙар уратып алған: *Олотау, Шәрифә , Сусаҡтау, Ҡыҙылташ, Өкө ҡаяһы, Бурама тауы, Аҡбейек* һ.б. Шул тауҙар араһында иң бейек тау — *Аҡбейек*. Был тау исеменең килеп сығышы тураһында ике төрлө фекер йөрөй. Берәүҙәр һөйләүенсә, ул тау алыҫтан бик бейек булып ағарып күренеп торғас, уны *Аҡбейек* тип исемләгәндәр. Икенселәр әйтеүенсә, бер ҡарт ике улын алып, урманға сығып киткән. Алдарында ҙур тау торған. Был тауға улдары йүгереп кенә менеп киткән. Ҡарт тауға менә торғас, артта тороп ҡалған. Ул бик арыған һәм кәпәсен сисеп, бер ташҡа ултырған да: «Ах, бейек», тип әйткән, имеш. Шунан был тауҙы *Аҡ бейек* тип атағандар.

## Ҡыҙылташ

Элек, граждандар һуғышы ваҡытында, ҡыҙылдарҙан бер яралы кеше ҡасып, бер тауға барып йәшенә. Яраһынан аҡҡан ҡан ташҡа һеңә һәм ул ҡыҙыл төҫкә инә. Шунан бирле был тауҙы *Ҡыҙылташ* тип йөрөтәләр.

Икенсе вариант буйынса, шул осорҙа ҡыҙылдарҙың ҡулында аҡтарҙың ике һалдаты торған. Бер мәл аҡтар ҡыҙылдарҙан ҡасҡан. Аҡтар был мәлдә ошо тауҙа бер таш артында йәшенеп тәмәке тартып ятҡандар. Аҙаҡ уларҙы ҡыҙылдар күреп ҡалған һәм баҫтыра башлағандар. Был ике һалдатты күреп атып ебәргәндәр. Шул ташҡа ҡып-ҡыҙыл булып уларҙың ҡандары аҡҡан. Аҙаҡ был тауҙы *Ҡыҙылташ* тип йөрөтә башлағандар.

## Өкө ҡаяһы

Элек бер өкө таш-ҡая араһында йәшәгән, ти. Ул таш-ҡая араһынан төрлө ҡорттарҙы ашар булған. Бер ваҡыт һунарсы һунарға сыҡҡан. Ул, оҙаҡ ҡына йөрөй торғас, бер мышы атып алған һәм ҡайтыр юлға сыҡҡан. Тағы берәй нәмә осрамаҫмы тип килә торғас, өкөгә тап була. Өкө таш-ҡая араһына

инеп китә. Ҡарт был хәлде ауылдаштарына һөйләп бирә. Ауыл кешеләре был урынды *Өкө ҡаяһы* тип йөрөтә башлайҙар.

## Сәфәр соҡоро

1980-1990 йылдарҙа ат менән ер һөрөп йөрөгәндәр. Унда *Назаров Ҡотлоғәлләм* олатай менән *Сәфәр* исемле олатай ҙа була. Улар яланда төнгөлөккә йоҡларға ҡала. Төндә өшөмәҫ өсөн ҡайын төбөнә ут яғалар. Оҙаҡ эшләп арығанға күрә икеһе лә ҡаты иттереп йоҡлап китәләр. Бер ваҡыт ут ҡайынға күсә. Ҡайын янып Сәфәр олатайҙың өҫтөнә йығыла. Ҡотлоғәлләм олатай Сәфәр олатайҙы көскә ҡайын аҫтынан һөйрәп сығара. Шул ваҡиға иҫтәлегенән ул урынды *Сәфәр соҡоро* тип йөрөтәләр.

## «Ҡарасура» ҡәбере йәки «Бабай үлеге»

Борон *Яуымбай* ауылында бик уҡымышлы, дин тотҡан *Ҡарасура* исемле ҡарт йәшәй. Ул бик изге күңелле, йомарт булған. Үлер алдынан ул: «Мине Яуымбай ауылы менән Байназар ауылы уртаһындағы иң ҡалҡыу ергә ерләгеҙ», тип әйтеп ҡалдырған. Ике ауыл мәсетенән аҙан тауышын тыңлап ятырмын, тигән ул. Уның теләгенә ҡаршы килмәй, ике ауыл уртаһындағы бер ҡалҡыу ергә ерләгәндәр. Әлеге ваҡытта был ҡәберлек бар һәм тәрбиәләп тотолар. Быуындар алмашҡанға күрә исемдәр ҙә үҙгәрә килеп, хәҙер “*Ҡарасура” ҡәбере* “*Бабай үлеге*”нә әйләнеп киткән. “*Бабай үлеге*” оло юл буйынса урынлашҡан, шунлыҡтан оло юлға сығыр һәр юлсы тиерлек ошо изге урында туҡтап, юл хәйере биреп, теләктәр теләп китә.

## Баҙялан

Элекке ваҡытта ауылға терәлеп ятҡан яланда, тәрән баҙҙар ҡаҙып, ҡайын туҙынан дегет ҡайнатҡандар. Дегет хужалыҡ эштәре өсөн кәрәкле әйбер булып торған. Мал ауырыуҙарына ла дегет яҡшы дауа булған. Шунан бирле был яланды *Баҙялан* тип йөрөтә башлағандар. Бөгөнгө көндә лә бында барлыҡҡа килгән урамды *Баҙялан урамы* тип йөрөтәләр.

## Шәрифә тауы

Беренсе вариант. Ауылда элек бик матур *Шәрифә* исемле ҡыҙ йәшәгән. Уны ата-әсәһе көсләп үҙе яратмаған кешегә кейәүгә бирер булғас, өйөнән ҡасып китә. Тауҙа йәшенеп йәшәй. Шунан бирле был тау ҡыҙҙың исемен йөрөтә.

Икенсе вариант. Элек ауылда *Шәрифә* исемле ҡатын йәшәгән. Төндә уны ендәр осороп алып китә. Ләкин унын балаһы бар икәнен белгәс, уны кире осороп бер тауға ташлап китәләр. Ауыл халҡы ҡатындың юғалғанын белгәс, эҙләргә сыға. Оҙаҡ эҙләй торғас, *Шәрифәне* ошо тауҙа табалар. Шунан бирле тау *Шәрифә* исемен йөрөтә.

### Өмөткән яланы

Борон *Яуымбай ҡарт* малдарына бесәнде өмә менән саптырған. Гел генә өмә менән саптырғанға ул бесән эшләгән яланды, *Өмә иткән* тип атағандар. Һуңғараҡ ябайлаштырып телдән-телгә күсә килеп *Өмөткән* тип үҙгәреп киткән.

Был легендаларҙы мин 2014 йылда *Ғабдулхаева Зифа Ғаяз* ҡыҙынан яҙып алдым. Ул 2010 йылдар тирәһендә Бөрйән районы Яуымбай ауылындағы олатай һәм өләсәйҙәрҙән яҙып алған.

## ҠУШЫМТА

## I. ОНОМАСТИКА БУЙЫНСА

### Хөрмәтле уҡыусылар, краеведтар!

Тыуған яҡ **ономастикаһын** йыйып өйрәнеүҙең әһәмиәте бик ҙур. Унда халыҡтың бик боронғо замандан алып бөгөнгө көнгә тиклем булған тормошо, көнкүреше, ғөрөф-ғәҙәте, ижтимағи-сәйәси хәле, теле, мәҙәниәте, ер-һыу үҙенсәлектәре, тәбиғи байлыҡтары һ.б. сағыла. Тимәк, ономастика — халыҡ тарихының бик күп үҙенсәлектәрен, төрлө факттарҙы туплаған һәм һаҡлаған тылсымлы бер донъя.

**Ономастика** — тел белеменең яңғыҙлыҡ исемдәрҙе өйрәнә торған бүлеге. Ул бер нисә тармаҡтан тора: *топонимика,* антропонимика, *этнонимика, зоонимика, астронимика, теонимика, прагматонимика* һ.б.

**Топонимика** — ер-һыу атамаларын (*йылға, шишмә, ҡоҙоҡ, тау, ҡая-таштар, үҙәк, ауыл, йәйләү, бесәнлек, сабынлыҡ, урам, тыҡрыҡ, юл* һ.б.),

**антропонимика** — кеше исемен, фамилияһын, ҡушамат һәм псевдонимын),

**этнонимика** — ырыу-ҡәбилә, ара (*нәҫел, зат, аймаҡ, сук* һ.б.) исемдәрен,

**зоонимика** — хайуандар ҡушаматын,

**астронимика** — күк есемдәре исемен (*йондоҙ, планета, комета* һ.б.),

**прагматонимика** — төрлө төр тауар исемдәрен, маркаларын һ.б. өйрәнә.

Ер-һыу атамаларын йыйыу фән өсөн бигерәк мөһим. Улар фәнни тикшеренеү эштәрен алып барырға нигеҙ, ә ҡайһы бер тарихи факттарҙы дәлилләүҙә төплө материал булып тора ала.

Ер-һыу атамаларын йыйыуҙы тиҙләтергә кәрәк, сөнки уларҙың күбеһе, үкенескә ҡаршы, онотолоп, телдән төшөп ҡала бара. Күп атамалар үҙгәртелә, яңы исем менән йөрөй башлай. Һиңә ошо атамаларҙың бөтәһен дә (яңыларын һәм иҫкеләрен, мәҫәлән, элек булып та, хәҙер юҡҡа сыҡҡан ер-һыу атамаларын – һөрөлгән сабынлыҡтар, ҡырҡылған ағаслыҡтар, ҡороған йылға, күл, шишмәләр, бөткән ауыл исемдәрен һ.б.) бик ентекләп йыйырға кәрәк.

Ауыл (район) атамаларының рәсми яҙылышы менән бергә, уларҙың халыҡ телендә йөрөгән исемдәрен дә яҙ. Халыҡ нисек әйтһә, шул көйө, үҙгәртмәй, боҙмай яҙғанда ғына уларҙың фәнгә әһәмиәте ҙур. Халыҡтыҡын үҙгәртеү, йәки ул, йәнәһе, дөрөҫ әйтмәй тип, үҙеңсә төҙәтмә индереү булмаҫҡа тейеш.

Һораулыҡты ауыл тирәһендәге ер-һыу атамаларын, уларҙың легендаларын яҡшы белгән, хәтерле, олораҡ кешеләрҙән, шулай уҡ һунарсыларҙан, урмансыларҙан һорап тултырырға кәрәк. Уларҙың ярҙамы менән ауылығыҙҙың топографик картаһын эшләгәндә һәйбәт булыр.

Бынан тыш ономастиканың башҡа тармаҡтарына ҡараған бүлектәренә иғтибар итеп, материал йыйырға кәрәк. Мәҫәлән, һеҙҙең ауылда йәшәгән кеше **исемдәре** һәм **фамилиялары, ҡушаматтары** һәм улар ни өсөн шулай бирелгән; урам исемдәре ниңә шулай атала? Уларҙы халыҡ икенсе төрлө нисек атай? һ.б.

Ошо мөһим эштә тыуған яҡ тарихы менән ҡыҙыҡһынған барлыҡ кеше ҡатнашһа яҡшы булыр ине, сөнки атамалар — ер теле, ерҙең хәтер китабы.

Һораулыҡты ерле һөйләш телендә тултырырға кәрәк, шул ваҡытта ғына атамалар, улар тураһындағы легендалар һеҙҙең ауыл (район) тураһында тулы итеп һөйләй ала.

Миңсылыу Ғөбәйт ҡыҙы Усманова.
usmanova.minsylu@mail.ru **89273024996**

## Дорогие учащиеся, краеведы!

В языкознании есть отрасль науки, называемая **ономастикой**. **Ономастика** — наука о собственных именах, т. е. **топонимов** (названий географических объектов), **этнонимов** (племен, народов), **антропонимов** (личных имен, фамилий, прозвищ, псевдонимов), **космонимов** (небесных тел), **зоонимов** (кличек животных), **теонимов** (собственное имя божества), **годонимов** (названий улиц, проспектов и др.) и т. д.

В последнее время большое внимание уделяется изучению географических названий — **топонимов** — названий населенных пунктов, рек, гор, озер, урочищ и проч. Топонимика в нашей стране, в том числе и в Башкортостане, получила широкое развитие и всеобщее признание. И это не случайно. По этим названиям можно определить, кто обитал на данной территории в древнейшие времена, когда населялись эти места, откуда пришли первые поселенцы, можно выявить немало ценного по истории народов и их языков. Но для этого необходимо собирать географические названия и соответствующим образом изучать их.

Географические названия оказывают большую услугу при изучении края, его истории. Топонимические данные все больше и больше привлекаются для решения многих историко-лингвистических, этногенетических проблем, а также применяются в разработке практических задач.

Нужно ускорить сбор географических названий, потому что многие из них, особенно микротопонимы, к сожалении, постепенно забываются. Поэтому наряду с названиями, бытующими в настоящее время, нужно собирать и названия исчезнувших объектов и сохранить их для науки и истории.

Очень желательно, чтобы в этом важном деле приняли участие все, кто интересуется историей родного края. Южный Урал — богатейший и интереснейший в природном отношении регион. В него входят: Республика, Челябинская, Курганская, Оренбургская области. Сотни тысяч наименований насчитывается на этой огромной территории.

Названия географических объектов ценны только в том случае, если, наряду с указанием официальной формы, даны и местные варианты произношения. Ни в коем случае нельзя исправлять народную форму названия, полагая, что она неправильна или нелитературна. Следует заполнять вопросник со слов тех людей, которые хорошо знают окрестные места и их историю, например, охотников, лесников, старожилов и др. Вопросник будет тем ценнее, чем полнее отражает имеющиеся названия, к тому же если в нем отражены названия даже самых маленьких объектов.

Чтобы не было ошибок или неточностей, в вопросник нужно вносить только названия, находящиеся на территории вашей деревни /отделения, бригады или фермы/, которые вам хорошо известны.

Кроме этого вам следует дать **список имен и фамилий** ( и кличек — если они есть) жителей вашей деревни (села). Если расскажут вам и историю, почему дали именно данное имя, а не другое, запишите.

Приведите также **список названий улиц** и их происхождение (почему так названо: в честь кого или другие объяснения);

дайте **список кличек животных** с историей (объяснением) их называния.

Вопросник необходимо заполнять на разговорном языке (не на литературном башкирском языке).

**Миңсылыу Губайтовна Усманова** — д.ф.н., профессор
БГПУ им. М.Акмуллы
usmanova.minsylu@mail.ru 89273024996

## ҺОРАУЛЫҠ — **ВОПРОСНИК**

## I. ТОПОНИМДАР — **ТОПОНИМЫ**

1. **Ауылығыҙҙың рәсми исемен башҡортса һәм русса яҙығыҙ.** — Официальное название вашей деревни (села).
2. **Ауылығыҙ ни өсөн шулай аталған?** — Почему ваша деревня так называется?
3. **Нисәнсе йыл барлыҡҡа килгән?** — В каком году основана?
4. **Уға кем нигеҙ һалған? Ҡайҙан килгән (күскән)?** — Кто основал деревню? Откуда родом первые поселенцы?
5. **Ауылығыҙҙың халыҡ телендә башҡа исемдәре бармы? (2-3 исеме булһа, барыһын да яҙығыҙ. Ни өсөн шулай атағандарын аңлатып яҙырға тырыш).** — Другие названия деревни у местного населения.
6. **Ауылығыҙ ҡайҙа урынлашҡан (ниндәй йылға, тау, күл буйында)?** — Где расположена ваша деревня (на берегу какой реки, озера или около какой горы)?

7. **Һеҙҙең ауыл ҡараған бригаданың (бүлексә, совхоз) исеме ниндәй?** — Как называется бригада (отделение, совхоз), к которому относится ваша деревня?

8. **Ауылығыҙҙың элек йәйләгән (ҡышлаған, көҙләгөн, яҙлаған) урындары ҡайһылай аталған?** — Названия летовок, кочевых вашей деревни.

9. **Ауылығыҙҙа ниндәй милләт кешеләре йәшәй? Сама менән һанын яҙығыҙ.** — Представители каких национальностей живут в вашей деревне? Укажите, которая преобладает.

10. **Ауылығыҙҙағы башҡорттар ниндәй ырыуға ҡарай?** — Представителями какого племени являются башкиры вашей деревни (села)?

11. **Унда ниндәй аралар (аймак, түбә, зат, нәҫел) бар (булған)?** — Названия родов, родовых подразделений вашей деревни:

12. **Ауылығыҙҙың тирә-яғында ниндәй йылға, шишмә, күлдәр бар? Уларҙың ҡайҙан башланып, ниндәй һыуға (йылға, күлгә) ҡайһы ерҙә ҡойғанын яҙығыҙ.** — Назовите реки, речки, ключи, которые у вас есть. Напишите также, откуда они берут начало, куда и где впадают.
13. **Ауылығыҙҙың тирә-яғындағы күл, ҡылы, ҡороған йылғаларҙың исемен яҙығыҙ.** — Назовите озера, старицы, названия высохших рек, расположенные вблизи вашей деревни (села):

14. **Түбәндә бирелгән географик урындарҙың ҡайһылары һеҙҙә бар, уларҙың исемдәрен һәм һеҙҙең ауылдан нисә саҡрым ятҡанын яҙығыҙ.** — Назовите, какие у вас есть нижеперечисленные объекты. Укажите, на каком расстоянии от вашей деревни (села) они находятся.

**а) Тауҙар. Ни өсөн шулай аталған?** — Названия гор, почему так названы:

**б) Тау һырттары нисек атала?** — Как называются хребты этих гор?

**в) Ҡалҡыулыҡ, уба, курган исемдәрен яҙығыҙ.** — Какие имеются возвышенности?

**г) Ҡаялар, ҙур таштар бармы? Нисек атала? Ни өсөн?** — Есть ли скалы и как они называются?

**ғ) Урман исемдәрен яҙығыҙ.** — Названия лесов:

**д) Ни исемле үҙәктәр (ҡулдар) бар?** — Названия ложбин:

ҙ) **Юл исемдәре.** — Названия дорог:

е) **Сабынлык, бесәнлек исемдәрен яҙығыҙ**. — Напииите названия сенокосных угодий:

ж) **Күпер исемдәре. —** Названия мостов, мостиков:

з) **Ҡойо, ҡоҙоҡ (котоҡ) исемдәрен яҙыгыҙ. —** Колодцы, ручейки:

и) **Кисеүҙәр бармы, исемдәре нindәй? —** Броды:

й) **Игенлек исемдәре. —** Названия пашен:

к) **Зыярат исемдәре.** — Названия кладбищ:

ҡ) **Баҫыу, аҡлан, ялан исемдәре**. — Названия полей, полян:

л) **Ҡыуаҡлыҡ исемдәре.** — Названия кустарников:

м) **Һаҙ, һаҙлыҡ исемдәре.** — Названия болот, заболоченных мест:

н) **Соҡор исемдәре.** — Овраги, ямы:

ң) **Ташөй, мәмерйә, мәғәрә исемдәре.** — Названия пещер:

о) **Үҙән, ҡыҫыҡ, туғай, төбәк исемдәрен яҙығыҙ. —** Назовите долины, теснины, луга, углы, урочища:

ө) **Ҡабаҡ, яр исемдәре**. **—** Названия обрывов, приречных террас, берегов:

15. **Һораулыҡҡа инмәгән ер-һыу объекттарының исемдәре булһа, уларҙы ла яҙығыҙ. —** Если остались названия, не представленные в Вопроснике, то и их напишите:

16. **Һеҙгә ниндәй күрше ауылдар бар? (2-3 исемдәре булһа, бөтәһен дә яҙығыҙ). —** Как называются соседние с вами и близлежащие населенные пункты?

17. **Күрше-тирәлә (районығыҙҙа) бөткән ауылдар бармы? Булһа, уларҙың да исемдәрен теркәгеҙ. —** Есть ли в районе исчезнувшие селения? Если есть, то напишите и их названия.

18. **Ауыл, йылға, тау, үҙән, үҙәк, ханҡала, ҡалатау, уба, юл һ.б. ер-һыу атамаларына бәйле тарихтар, легендалар, шәжәрә (таира) һ.б. билдәле булһа, барыһын да һеҙҙең һөйләш телендә яҙығыҙ. —** Если известны какие-нибудь истории, легенды, связанные с названиями населенных

пунктов, гор, лесов, оврагов, долин, так называемых "святых мест" и городищ, то напишите и их.

19. **Урам исемдәре. Улар кем хөрмәтенә (ни өсөн шулай) аталған?** — Названия улиц. Почему они так названы?

## II. **АНТРОПОНИМДАР** — АНТРОПОНИМЫ

1) **Ауылда йәшәгән кешеләрҙең исемдәре.** — Список имен людей нашей деревни (села):

а) **Ир-ат исеме**. — Мужские имена:

б) **Ҡатын-ҡыҙ исеме**. — Женские имена:

2) **Фамилиялары.** — Список фамилий:

3) **Ҡушаматтары. Ни өсөн шундай ҡушамат таҡҡандар? Белергә тырышып, уларын да яҙыығыҙ.** — Клички людей. Почему им дали такие клички? Постарайся выяснить и запиши их.

## III. **ЗООНИМДАР** — ЗООНИМЫ

1. Йорт хайуандарына (малға) бирелгән ҡушаматтар:
   а) атҡа:
   б) һыйырға:
   в) ваҡ малға:

2. эт, бесәйгә бирелгән ҡушаматтар:

**Информанттар** — информанты

**Һораулыҡҡа мәғлүмәт (яуап) биргән кешенең фамилияһы, исеме, атаһының исеме, йәше, һөнәре.** — Фамилия, имя и отчество информанта (опрашиваемого), его возраст, профессия.

**Ҡулланылған әҙәбиәт** — Использованная литература

# II. ДИАЛЕКТОЛОГИЯ БУЙЫНСА ҺОРАУЛЫҠ- КҮРҺӘТМӘ

**I**. Һеҙҙең ауыл һөйләшендә булған һүҙҙәр лексик-семантик классификация нигеҙендә йыйыла. Шуларҙың эсенән бер нисә тема тәкдим итәбеҙ. Темаға ҡараған һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр бағана менән яҙыла.

**1-се бағана** – һөйләштәге һүҙҙәр,

**2-се бағана** – уның әҙәби телдәге варианты (йә аңлатмаһы). Ҡайһы бер һүҙҙәр әҙәби телдә юҡ, булһа ла икенсе мәғәнәлә йөрөүе бар. Шуға күрә был бағанала уларҙың нимәнең исеме булғанын аңлатып яҙығыҙ.

**3-сө бағана** – тәржемәһе. Ҡайһы бер һүҙҙәрҙең тәржемәһен биреп булмай (йә ул һөйләштә булған һүҙҙең мәғәнәһенә тура килмәй). Был ваҡытта (тәржемәһен яҙмайынса) 2-се бағанала һөйләш һүҙенең нимә аңлатҡанын яҙыу етә. Мәҫәлән:

| | Һөйләштәге һүҙҙәр | әҙәби тел (уның аңлатмаһы) | русса |
|---|---|---|---|
| 1 | **Туғанлыҡ, кәрҙәшлек терминдары** | | |
| | инәй | әсәй | мама |
| | бейем | ҡатындың әсәһе – **ҡәйнәм** | теща |
| | ҡәйнәм | ҡатындың әсәһе – **ҡәйнәм** | теща |
| | ҡәйнәм | ирҙең әсәһе – **ҡәйнәм** | свекровь |
| | ҡартатай | әсәйҙең атаһы | дедушка |
| | олатай | атайҙың атаһы | дедушка |
| | олатай | атайҙан өлкән булған бөтә ир-ат | |
| | апа | атайҙан өлкән ир кеше | дядя |
| | бабай | атайҙан өлкән ир кеше | дядя |
| | буай | атайҙан өлкән ир кеше | дядя |
| | | | |

Күреүегеҙсә, бер төшөнсәне (мәҫәлән, "дядя") бирер өсөн башҡорт теленең диалекттарында бер нисә һүҙ йөрөй – **олатай, бабай, буай, апа** һ.б. Ә бына атайҙан өлкән ир кешене белдергән **апа** (көнсығыш диалекттың ҡыҙыл һөйләше) һүҙе был һөйләште венгр теле менән бәйләй. Унда ла *дядя* **апа** була.

1-се бағана: **ҡәйнәм;** 2-се бағана: атайҙың әсәһе – **ҡәйнәм.** Тимәк, һөйләш теле менән әҙәби телгә алынған һүҙҙең тура килеүе бар. Миҫал өсөн "Туғанлыҡ терминдары"ның аңлатмаһын яҙып күрһәттек. Уны артабан дауам

итеп, тулы яҙығыҙ (ҡоҙа һ.б.).

Шуның кеүек башҡа темаларҙы ла яҙырға кәрәк.

**II**. Һөйләш телендә 2 текст (ниндәйҙер хәл-ваҡиға тураһында һөйләгәнде һөйләш телендә һүҙмә-һүҙ яҙырға кәрәк), 1 аудио-, 1 видеояҙма.

Шулай итеп, һеҙ ҙур эшкә — тыуған яҡтың телен, тел аша тарихын өйрәнергә тотондоғоҙ.

Һеҙгә уңыштар теләйем.

Һорауығыҙ булһа, шылтыратығыҙ, электрон адресҡа яҙығыҙ.

## Һ О Р А У Л Ы Ҡ

I. **Ауылығыҙ тураһында мәғлүмәт**.

| | | |
|---|---|---|
| 1 | **Ауылығыҙҙың рәсми исемен башҡортса һәм русса яҙығыҙ.** — Официальное название вашей деревни (села). | |
| 2 | **Ауылығыҙ ни өсөн шулай аталған?** – Почему ваша деревня так называется? | |
| 3 | **Нисәнсе йыл барлыҡҡа килгән?** – В каком году основана? | |
| 4 | **Уға кем нигеҙ һалған? Ҡайҙан килгән (күскән)?** – Кто основал деревню? Откуда родом первые поселенцы? | |
| 5 | **Ауылығыҙҙың халыҡ телендә башҡа исемдәре бармы? (2-3 исеме булһа, барыһын да яҙығыҙ. Ни өсөн шулай атағандарын аңлатып яҙырға тырыш)**. - Другие названия деревни у местного населения. | |
| 6 | **Ауылығыҙ ҡайҙа урынлашҡан (ниндәй йылға, тау, күл буйында)?** – Где | |

| | | |
|---|---|---|
| | расположена ваша деревня (на берегу какой реки, озера или около какой горы)? | |
| 7 | **Ауылығыҙҙың элек йәйләгән (ҡышлаған, көҙләгөн, яҙлаған) урындары ҡайһылай аталған?** – Названия летовок, кочевох вашей деревни. | |
| 8 | **Ауылығыҙҙа ниндәй милләт кешеләре йәшәй? Сама менән һанын яҙығыҙ.** – Представители каких национальностей живут в вашей деревне? Укажите, которая преобладает. | |
| 9 | **Ауылығыҙҙағы башҡорттар ниндәй ырыуға ҡарай?** – Представителями какого племени являются башкиры вашей деревни (села)? | |
| 10 | **Унда ниндәй аралар (аймак, түбә, зат, нәҫел) бар (булған)?** – Названия родов, родовых подразделений вашей деревни: | |

## II. Ауылдың һүҙлек составын йыйыр өсөн һораулыҡ.

| | Ауыл һөйләшендәге һүҙҙәр | әҙәби телдә (йә уның аңлатмаһы) | русса |
|---|---|---|---|
| 1. | **Туғанлыҡ, ҡәрҙәшлек терминдары** | | |
| | | әсәй | мама |
| | | әсәйҙең атаһы | |
| | | атайҙың атаһы | |
| | | әсәйҙең әсәһе | |
| | | атайҙың әсәһе | |
| | | әсәйҙең, атайҙың апайы | |
| | | әсәйҙең, атайҙың ағаһы | |
| | | әсәй, атайҙың ҡыҙы (2-се быуын) | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | әсәй, атайҙың улы (2-се быуын) | |
| | | әсәй, атайҙың балаһының ҡыҙы (3-сө быуын) | |
| | | әсәй, атайҙың балаһының улы (3-сө быуын) | |
| | | әсәй, атайҙың балаһының, балаһының ҡыҙы (4-се быуын) | |
| | | әсәй, атайҙың балаһының, балаһының улы (4-се быуын) | |
| | | әсәй, атайҙың балалары (ҡыҙы) 5-се быуында ҡайһылай атала? | |
| | | әсәй, атайҙың балалары (улы) 5-се быуында ҡайһылай атала? | |
| | | әсәй, атайҙың балалары (ҡыҙы) 6-сы быуында ҡайһылай атала? | |
| | | әсәй, атайҙың балалары (улы) 6-сы быуында ҡайһылай атала? | |
| | | әсәй, атайҙың балалары (ҡыҙы) 7-се быуында ҡайһылай атала? | |
| | | әсәй, атайҙың балалары (улы) 7-се быуында ҡайһылай атала? | |
| | | улының ҡатыны – **килен** | |
| | | ҡыҙының ире – **кейәү** | |
| | | ирҙең әсәһе – **ҡәйнәм** | |
| | | ҡатындың әсәһе – **ҡәйнәм** | |
| | | Һеҙҙең яҡта ҡатын кеше иренә ҡайһылай тип өндәшә? | |
| | | Һеҙҙең яҡта ҡатын кеше ире тураһында һөйләгәндә | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | уны кем тип әйтә? (Миҫал: минең ирем, хәләл ефетем, кейәүегеҙ ...һ.б.) | |
| | | иренең апайы уға кем була? | |
| | | ҡатының апайы уға кем була? | |
| | | иренең ағаһы уға кем була? | |
| | | ҡатының ағаһы уға кем була? | |
| | | бер туған ағалы-ҡустының ҡатындары бер-береһенә ҡарата кем була? | |
| | | һ.б. (артабан үҙегеҙ тултырығыҙ) | |
| | | | |
| | | | |
| | | Бәләкәс балаға кем тип әйтәләр? (бәпес, сабый, тәнәй ...?) Әллә уларҙың һәр береһенең айырым мәғәнәһе бармы? | |
| | | Ҡатын кеше бәпес тапһа, ул ... (нимә тиҙәр?) | родила |
| | | | |
| | | | |
| | | Кейәүгә сығыу, өйләнеүгә ҡараған һүҙҙәрҙе лә (ҡылымдар) яҙығыҙ (ҡыҙ күҙләй, әйттерә һ.б.). | |
| 2 | **Ботаникаға ҡараған терминдар** | | |
| | | | |
| | | | |
| 3 | **Йорт-ҡура, ҡаралды терминдары** | | |
| | | | |
| | | | |
| 4 | **Йылға, күл, ландшафт (географик терминдар)** | | |
| | | | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | |
| 5 | **Транспорт терминдары** | | |
| | | | |
| | | | |
| 6 | **Йөн, дебет эшкәртеү** | | |
| | | | |
| | | | |
| 7 | **Кейем-һалым терминдары** | | |
| | | | |
| | | | |
| | | | |
| 8 | | **Ашамлыҡ-эсемлек терминдары** | |
| | | | |
| | | | |
| 9 | | **Ҡашығаяҡ, һауыт-һаба** | |
| | | | |
| | | | |
| | | **Кейем-һалым терминдары** | |
| | | | |
| | | | |

**III. АУЫЛДА ЙӘШӘГӘН КЕШЕЛӘРҘЕҢ ИСЕМЕ, ҠУШАМАТТАРЫ.**

а) **Ир-ат исемдәре** (исемдәрҙең ниндәй сәбәп, ниндәй уй менән бирелгәнен һорашып яҙығыҙ):

б) **Ҡатын-ҡыҙ исемдәре** (исемдәрҙең ниндәй сәбәп, ниндәй уй менән бирелгәнен һорашып яҙығыҙ):

3) **Ҡушаматтар**. Ни өсөн шундай ҡушамат таҡҡандар икән? Белергә тырышып, уларын да яҙ.

4) Үҙегеҙҙең **шәжәрәгеҙҙе** беләһеңме? Булһа, уны төшөрөп ҡуй (яҙ).

**IV**. ФАМИЛИЯЛАРЫ.

**III**, **IV** пункттарҙы тултырғанда кешеләргә ни өсөн шул исемде (йә ҡушаматты) ҡушҡандары тураһындағы һөйләшеү аудио-, видеояҙмала булһа, бигерәк шәп булыр.

## V. АУЫЛЫҒЫҘҘЫҢҺӨЙЛӘШЕ ТУРАҺЫНДА ҠЫҪҠАСА БЕЛЕШМӘ.

1. **Фонетик үҙенсәлектәр.**
   **А** өнө ҡайһылай әйтелә? Тамаҡ төбө өнөмө? Әллә о-ға яҡынайтып әйтеләме?
   Һөйләште әҙәби тел менән сағыштырығыҙ.
   Һуҙынҡыларҙа ниндәй сиратлашыу бар? (мәҫәлән, **у – о**: һөйләштә **у**рсыҡ - әҙ. тел. **о**рсок;
   Тартынҡыларҙа ниндәй сиратлашыу бар? (мәҫәлән, **п – б:** тү**п**ә - тү**б**ә) һ.б. үҙенсәлектәр.

2. **Морфологик үҙенсәлектәр** (һүҙ төркөмдәре һәм һүҙьяһалыш).
   Һүҙ төркөмдәре (исем, сифат, рәүеш) ниндәй ялғауҙар менән яһала?
   Килеш ялғауҙары.
   Күп төшөнсәһе ҡайһылай бирелә?
   Алмаштарҙы һанап сығығыҙ.
   Хайуан, ҡоштарҙы ҡайһылай итеп саҡыралар, ҡыуалар?
   Иркәләү төшөнсәһе һөйләштә ниндәй ялғауҙар менән белдерелә?
   һәм башҡалар.

3. **Лексик үҙенсәлектәр.** Бында һөйләш өлгөһө бирелә: 2 текст (ниндәйҙер хәл-ваҡиға тураһында һөйләгәнде һөйләш телендә һүҙмә-һүҙ яҙырға кәрәк), 1 аудио-, 1 видеояҙма. (Был эш тураһында “Күрһәтмә”лә әйтелә. **II** пунктты ҡарағыҙ.).

ИНФОРМАНТТАР ИСЕМЛЕГЕ (Һораулыҡҡа мәғлүмәт (яуап) биргән кешеләрҙең фамилияһы, исеме, атаһының исеме, йәше, һөнәре тулы яҙылһын).

ҠУЛЛАНЫЛҒАН ӘҘӘБИӘТ

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

**Баш һүҙ** ........................................................................................................ 3
**Батталов А.И.** Мәләүез районының ер-һыу атамалары ............................ 4

**Ғилманов А.И.** Илеш районы Сүлте ауылының ер-һыу атамалары ........... 10

**Заһитов Б.И.** Учалы районы Ураҙ ауылы һөйләше .................................... 13

**Зөлкәрнәйева И. И.** Баймаҡ районы Ишмырҙа ауылының ер-һыу атамалары: "Тыуған яғыңды беләһеңме?" темаһына дәрес ......... 20

**Исмәғилова И.Р.** Баймаҡ районы Сыңғыҙ ауылының һөйләше ................ 29

**Йосопова К**. Туймазы районы Балтай ауылының һөйләү теле …………… 44

**Кайбышева Ы.Р.** Ейәнсура районы Иҙәш ауылының ер-һыу атамалары 51

**Ҡаһарманова Г.Р.** Бөрйән районы топонимдарының яһалыу үҙенсәлектәре .......................................................................................... 53

**Мостаева Н.** Баймаҡ районы Әбделкәрим ауылы буйынса ономастик матрериалдар .................................................................................... 60

**Мәрҙиева И.Ф**. Илеш районы Һеңерән ауылының һөйләше ...................... 67

**Нөғәмәнова Л.** Әбйәлил районы Әхмәт ауылы тирәһендәге ер–һыу атамалары һәм уларҙың килеп сығыу тарихы……………………... 71

**Нәбиев В. Д.** Дүртөйлө районы Иҫке Уртай ауылы һөйләше һәм Башҡортостандың халыҡ сәсәне Фәррәх Дәүләтшин ижадында диалект үҙенсәлектәре ......................................................................... 78

**Нәҙерғолова Л.** Йылайыр районы Юлдыбай ауылының ер һыу атамалары.......................................................................................... 85

**Сәғитова Р.Р**. Бөрйән районы Ҡурғашлы ауылының ер-һыу атамалары ... 89

**Сәйетова И.** Баймаҡ районы Басай ауылының ер-һыу атамалары ............ 91

**Сәйетова Я.М**. Таулыҡай ауылының ономастик материалдары ................ 94

**Сәхибгәрәева Э.** Илеш районы Исәмәт ауылының һөйләше ....................... 110

**Тазетдинова Л. В**. Краснокама районы Иҫке Йәнйегет ауылының ономастик материалдары ................................................................. 117
**Фазылова А.А**. Дүртөйлө районы Гөлөк ауылы һөйләше ......................... 120

**Ямгурсина А.И.** Бөрйән районы Яуымбай ауылының ер-һыу атамалары.. 129

**ҠУШЫМТА** ........................................................................................ 134
Ономастика буйынса һораулыҡ ............................................................. 136
Диалектология буйынса һораулыҡ ........................................................ 139
2015 йылда үткән конференцияның фотолары.........................................







